Нажиә Игеҙйәнова

# Ҡиммәтле кейәү

Сатира һәм юмор

## Сатира һәм юморҙың асылы

Китап яратыусылар, студенттар, мәктәп уҡыусылары менән осрашыу кисәләрендә, дуҫ–иштәр менән әңгәмәләшкәндә «Нимә ул сатира, юмор?», «Улар ҡасан барлыҡҡа килгән?», «Нисек таралған?», «Сатира, юморҙың төп асылы нимәнән ғибәрәт?» һәм башҡа һорауҙар бирәләр. Һорауҙарҙы яуапһыҙ ҡалдырмаҫҡа тырышам. Ҡыҙыҡһыныусыларға мәғлүмәт бирер өсөн сетерекле һәм мөһим жанр хаҡында хәбәрҙар булыу зарур. Был китабымды уҡыусылар ҙа сатира, юморҙың асылына иғтибар итер, тигән фекер тыуҙы. Ҡыҫҡаса асыҡлыҡ индереү мәслихәт булыр.

Көлөүҙең ике формаһы – сатира һәм юмор, үҙҙәренең төҫмөрләнеше менән бик борондан әкиәттәрҙә, көләмәстәрҙә, таҡмаҡтарҙа йәшәй. Ә бына әҙиптәрҙең әҫәрҙәрендә ҡасан, ни сәбәпле барлыҡҡа килгән?

XIX быуаттың урталарына тиклем суфый шағирҙар Т.Ялсығолов, Ә.Каргалы, Һ. Сәлихов, Ш.Зәки, Ғ. Соҡоройҙар ижад иткән дини–мистик әҫәрҙәрендә дини идеялар таратылған. Был суфый шағирҙарҙың поэзияһында шулай ҙа түрәләргә, муллаларға һирәк кенә тел тейгән йәғни сатира саткылары саҡ ҡына һиҙелә биреп ҡалған.

Суфый шағирҙарҙан һуңғараҡ ижад иткән Мифтахетдин Аҡмулла – үҙ заманы өсөн ҙур уҡымышлы, алдынғы фекер эйәһе. Уның ижады мәҙәниәт, ғилем, әхлаҡ мәсьәләләрен күтәргән. Аҡмулланың вәғәз һәм өгөттәр формаһында яҙған шиғырҙары ҡомһоҙ байҙарға, эскерле бәндәләргә, ғәҙелһеҙлеккә, мәғрифәт юлын быуыусы әҙәмдәргә, йәбер–золомға ҡаршы булған. Ул юҡсылыҡта ыҙалап, бәхетһеҙ ғүмер кисергән ярлы–ябағаның һәм «күңеле ҡара, ауыҙы ала, ирене ялаҡ» муллаларҙың, «таштан ҡаты» байҙарҙың тормоштарын сағыштырып, тигеҙһеҙлекте социаль күҙлектән сығып баһалаған.

Быға саҡлы суфый шағирҙарҙың ижадында саҡ–саҡ ҡына һиҙелгән сатира йүнәлеше сәсән шағир Аҡмулла әҫәрҙәрендә артабан үҫтерелә, социаль мотивтар һаман көсәйә бара. М.Аҡмулла, шулай итеп, М.Ғафури,

Д.Юлтый, Ғ.Туҡай, Ш.Бабич һәм башҡа шағирҙарҙың ижадына ҙур йоғонто яһаған.

Аҡмулла шиғырҙары менән «аҙыҡланып» ижадҡа килеүселәрҙең иң әүҙеме – Шәйехзада Бабич. Үҙе тере саҡта уҡ легендар шәхескә әйләнгән егеттең егәрлеге сатира һәм юмор өлкәһендә айырыуса ныҡ күренгән. «Көлкө ҡапсығы» тигән китабында:

Ҡайғы бөтһөн, көлдөрә бир, көлкө баш,

Әйҙә көлдөр ҙә халыҡтың күңелен ас,

Һин ҡыҙыҡ һүҙҙәр һөйлә, көлһөн халыҡ,

Шул ҡыҙыҡтан ғәйебене күрһен халыҡ, – тип яҙа.

Көлкө ярҙамында фаш ителгән етешһеҙлектәрҙе халыҡ аңлаһын тигән фекерен белдергән: ҡыҙыҡ һүҙҙәргә халыҡ көлә, әммә ҡыҙыҡтан ғәйепте, аламалыҡты күрә.

Көлкө тәьҫире бына ниндәй! Халыҡ әҙәпкә һыймаған эш–ҡылыҡтарҙы көлкө аша ҡабул итһә лә, мәғәнәһен йөрәгенә мәңге онотолмаҫлыҡ итеп һалып ҡуя. Көлкөнөң көсө хаҡындағы ошондай төплө, тәрән фекерҙе башҡорт әҙәбиәтендә йәш кенә Шәйехзада (1895–1919) тәүге булып әйтте. Һәм, ысынлап та, сатираны таш келәткә бикләһәң дә, ул диуарҙы емереп сыға.

Сатира белгесе Л. Лиходеев шулай яҙған: «...Сатира мәңге йәшәгән – әгәр уның тирәһендә шул тиклем бейейҙәр икән, тимәк жанр бар. Урамда ниндәй социаль тормош булыуға ҡарамаҫтан, ул һәр саҡ йәшәгән. Сатириктарҙы аҫҡандар, керәндилдәр менән һыйлағандар, сәскә гөлләмәләренә күмгәндәр, әммә йышыраҡ үлтергәнсе туҡмағандар. Тик сатираны үлтерә, бөтөрә алмағандар. Сатираны тыйып ҡарағандар, ләкин ул бынан үткерләнә генә төшкән»( Лиходеев Л. Суть дела и смех // Вопросы литературы. 1987, №11, 275–се бит.)

Шундай уҡ үткер фекер беҙҙең башҡорт әҙиптәрендә лә бар:

«Сатира һәм юмор бөтәһенән элек, йәмғиәттең әҙәбиәттәге көйҙөргөс ҡоралы. Ул ғына ла түгел, йәмғиәттең социаль–политик,

мораль–этик хис–тойғоһон, проблемаларын үткерләүсе, ҡыҫҡаһы, кешеләр аңын, улар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе сафландырып яңыртыусы, прогресҡа әйҙәүсе көс ул»,– тип яҙғайны мәшһүр әҙибебеҙ Хәким Ғиләжев (Ғиләжев Х. Сатираның сатҡылары // Ағиҙел. 1983. № 11, 116–сы бит).

Ә бөйөк шағир А.С.Пушкиндың: «Закондар ҡылысы етмәгән урынға сатира ҡылысы барып етә» тигәнен күптәр һәйбәт белә.

Шулай итеп, сатира һәм юмор ғәҙеллек өсөн иң һуғышсан жанр. Уның аяуһыҙ уҡтары эләккән йүнһеҙ әҙәмдәрҙең төрө бик күп: абруй–дәрәжәгә самаһыҙ ҡыҙыҡһыныусылар, аҫтыртындар, алдаҡсылар, ришүәтселәр, ғәйбәтселәр, көнсөлдәр, ике йөҙлөләр, рухи фәҡирҙәр, кеше араһын боҙоусылар, бурҙар, аҡса ҡолдары, ошаҡсылар һәм башҡалар. Яман ғәҙәтле бәндәләрҙең төрҙәре етмеш етегә етә, унан да артып китә. Улар хаҡында төрлө ысул ҡулланып яҙырға ла яҙырға, насарлыҡты фашларға.

Сатира һәм юмор мотлаҡ төрлө алымдар менән яҙыла. Ошо алымдарға саҡ ҡына туҡталғанда мәслихәт булыр һымаҡ.

Ниндәй ҙә булһа берәй күренеш йәки кеше тураһында тыштан ҡарағанда ыңғай фекер әйтеп тә, асылда иһә уның насар холоҡ–фиғелен фашлауға нигеҙләнһә, был – «ирония», тип атала. Ә иронияның – аҫтыртын көлөүҙең, иң юғары дәрәжәһе «сарказм»ға әйләнә. Сатирик характерҙағы күренештәрҙә ҡабартыу, шаштырыу алымын «гротеск», тип атайҙар. Ә инде гротеск алымы конкрет факттар менән нығытылһа, быны «фельетон» тиҙәр. Фельетонда ла, сатирик һәм юмористик әҫәрҙә лә кешенең физик етешһеҙлегенән көлөргә ярамай. Был – әхлаҡһыҙлыҡ, тыйнаҡһыҙлыҡ, оятһыҙлыҡ. Әҫәрҙең бурысы – йәмғиәткә зыян килтереүсе рухи зәғифтәрҙән, залимдарҙан көлөү, уларҙың эш–ҡылыҡтарын аяуһыҙ фашлау, мыҫҡыл итеү.

Сатира, юморҙың төп һыҙаты– тормошсан йөкмәткелә. Көлдөрөү өсөн генә көсәнеп, артыҡ арзан, ялған ситуациялар, уйҙырмалар

уҡыусыны ышандырмай. Сатира,  юмор яҙыуҙы тик аҡыл өйрәтеү, тип тә аңларға ярамай. «Әҙәпкә ғәҙәтләнһәң – әҙәм булырһың, яманға ғәҙәтләнһәң – әрәм булырһың» – боронғоларҙан ҡалған нәсихәтте иҫкә төшөрә жанр. Әҙәм булыу ҙа, әрәм булыу ҙа һәр кемебеҙҙең холҡобоҙҙа, ҡылған эштәребеҙҙә, бүтәндәргә күрһәткән мөнәсәбәттәребеҙҙә.

Иҫемдә, «Һәнәк» журналында 1976 йылда машинистка булып эшләй башланым.  Хаҡ Тәғәлә ғәҙел, изгелекле, тура һүҙле яҙыусылар менән бергә эшләү бәхетен birҙе. Йәшләй генә Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан Сәғит Сафиуллин менән  Нур Ғәлимов, һуғыш осоронда хеҙмәт армияһында тир түккән  Рәйес Ғабдрахманов (балалар яҙыусыһы),  күренекле шағир, драматург Әнғәм Атнабаев, йәтимлектең аяуһыҙлығын күреп үҫкән  яҙыусы Хөснулла Түләкәев, ғәжәп һәләткә эйә сатирик рәссам Альфред Штабельдәр  менән бергә эшләү яҙмышыма яҙған баһалап бөткөһөҙ бүләк, ырыҫ ул.

Әҙиптәрҙең  үҙ–ара мөнәсәбәттәре   әҙәпкә, ихтирамға ҡоролғайны. Бер–береһенә үсләшеүҙәрен, кенә ҡыуыуҙарын, яманлашыуҙарын ишетмәнем, күрмәнем, һиҙмәнем.

Редакциялағы  берҙәмлек бүтәндәрҙе лә ылыҡтырғандыр – беҙгә инмәгән әҙипте белмәйем. Бына, мәҫәлән, һәлмәк кенә баҫып, Сәләх Кулибай ағай килеп керә. Сәләмләшә лә төпкө бүлмәгә йүнәлә. Күп тә үтмәй,  бүлмәне күтәрерҙәй итеп көлөшә башлайҙар. Тимәк, Сәләх ағай көләмәс һөйләй. Шуға иғтибар иттем: Сәләх ағай көләмәсен һөйләй, үҙе көлмәй, ҡәләмдәштәренең һаһылдашҡанын етди төҫ менән тыныс ҡына ҡарап тора. Ә бына Назар Нәжми ағай уның киреһе: тәүҙә үҙе рәхәтләнеп көлә, көләмәсен һөйләгәс, башҡаларға ҡушылып тағы көлә, хатта бүтәндәр туҡтағас та, һаһылдауын дауам итә.

Тимер Арыҫлан, Фәрит Иҫәнғолов, Миәссәр Басиров, тәүге сатирик роман «Дан туртаһы»ның  авторы Ағиш Ғирфанов, Сулпан Иманғолов һәм башҡа арҙаҡлы яҙыусылар «Һәнәк»кә килеүҙе мәртәбә һанағандыр –

редакция уларҙың төйәгенә әйләнгәйне. Эй, ғүмерҙең фанилығы... Бөгөн ошо әҙиптәрҙең береһе лә арабыҙҙа юҡ. Уйлаһаң, уйылып китерлек. Намыҫлы, ғәҙел, ярҙамсыл ағайҙарҙы хәтерләү генә лә миңә көс, сабырлыҡ бирә.

Эшемде бик яраттым. Сатира менән юморға башкөлли ғашиҡ булыуым үҙенсәлекле даирәлә үҫеүемдең дә һөҙөмтәһелер.

Инәйемдең (Башҡортостандың төнъяҡ–көнсығыш төбәгендә «әсәй»ҙе «инәй» тибеҙ) бер туғандары Фәтихә әбейем, Рәхимйән быуайым, Мөнирә апайым көләмәсләп һөйләргә ифрат маһир булдылар. Мин уларҙы бик ярата инем. Ә инәйем көлкө һүҙҙәргә рәхәтләнеп көләр ине, әммә үҙе шаян һүҙҙәр менән һөйләшмәне.

«Көлөү – ҡояшҡа тиң»тигән бит бөйөк әҙип Виктор Гюго. Юмор ҡыйын хәлдәрҙән, күңел төшөнкөлөгөнән аралай, кәйефте күтәрә. Шаян кешенең ғүмере оҙонораҡ, матурыраҡ, күңеллерәк, бәхетлерәк була.

Йәнә шуны әйтеү ҙә мөһим: сатира, юмор яҙыусы әҙип бүтәндәр күрмәгәнде күрә, башҡалар аңламағанды аңлай һәм һығымта яһай. Хәл–ваҡиғаларҙың сәбәбенә төшөнә һәм тетрәнә. Шулай булмаһа, тема тыумай, персонаждар барлыҡҡа килмәй. Сатира йөрәк әрнеүҙән илар урынға сараһыҙҙан көлөү бит ул. Тәү ҡарауға ябай ғына һымаҡ әҫәрҙе иғтибар менән уҡырға, сатирик нимә әйтергә теләгән, шуны аңларға, мәғәнәһенә төшөнөргә кәрәк. Әлбиттә, был жанрҙы аңлағандар бар, аңламағандар ҙа осрай. Һәр кемдең үҙ кәлбе, үҙенең булмышы, кимәле. Сатираны аңлар өсөн юғары белем генә етмәй. Ошо жанрҙа ижад итергә темалар биреп тә өйрәтеп булмай. Мотлаҡ Хоҙай биргән һәләт кәрәк.

Йәнә шул да иғтибарҙан ситтә ҡалмаһын: тамаларҙы «аҡыллы» итергә тырышып, ҡатмарлы, ҡоро һәм оҙон итеп яҙыу уҡыусыны тиҙ арыта, хатта ялҡытыуын беләм.

Башҡорт теле бай, һутлы, моңло. Әҫәрҙәрҙе халҡыбыҙҙың матур теле менән мәҡәл–әйтемдәрҙе лә ҡулланып яҙыу ижад емешен байыта. Әлбиттә, «әсе әйтемдәр»ҙе сатира ярата. Әммә персонажды

тәнҡитләйем, аяуһыҙ фашлайым тигән теләк көслө булһа ла, «тоҙло–боросло» һүҙҙәрҙе сама белеп ҡулланыу яҡшыраҡ. Сатира, юмор – алағайымға көлдөрөү–көйҙөрөү түгел, ә файҙалы булһын тигән ниәт менән яҙыла. Иң мөһиме: ыҡсым әҫәрҙә ҙур, тәрән фекер әйтеү.

Сатира, юмор – үҙенсәлекле жанр, әлбиттә. Шуғалырмы, был жанрҙа эшләүсе нәфис заттар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Элек арҙаҡлы әҙибәләр Зәйнәп Биишева, Фәүзиә Рәхимғолова, тиңдәштәрем Зарема Әхмәтйәнова, Фәүзиә Юлдашбаеваларҙың исемдәре «Һәнәк» биттәрен гел йәмләп торҙо. Улар инде баҡыйлыҡта – йәндәре йәннәттә булһын.

Хәҙер ҙә сатира, юмор яҙыусы ҡатын–ҡыҙ бар ул барлыҡҡа, әммә ошо жанрға даими хеҙмәт итеүселәр юҡ кимәлендә. Күңел күҙҙәре үткер гүзәл заттар сатира, юмор жанрына күберәк ижтиһад итһендәр ине – йәмғиәтебеҙҙәге ғәҙелһеҙлектәргә беҙҙҙең зат йышыраҡ тарый. Һиҙгер бит ул ҡатын–ҡыҙ күңеле, ир–уҙамандар иғтибар итмәгән күренештәрҙе, хәл–ваҡиғаларҙы күрә, баһалай, самалай һәм ҡарашы формалаша, фекере тыуа. Теле лә дан: йән иретерлектәрен дә, йөрәк тетрәнерлек әселәрен дә әйтә.

Бөгөнгө тормошобыҙҙа ҡапма–ҡаршылыҡтар ҙа осрай һәм йәшәйешебеҙ сатирала көҙгөләгә кеүек сағыла. Көнкүрешебеҙ ниндәй–юмор менән сатирабыҙ ҙа шундай. Нисек йәшәйбеҙ – шулай көләбеҙ, йәш аралаш көләбеҙ. Темаға ҡытлыҡ юҡ. Күрә бел дә башыңда тыуған фекерҙе аҡ ҡағыҙға төшөрә бир.

Был жанр – үс алыу, кенә ҡыуыу, ҡурҡытыу ҡоралы түгел, насар хәлдәргә төшмәгеҙ, яуызлыҡтар ҡылмағыҙ, кешеләрҙең рәнйешен алмағыҙ, тип кәңәш биреү, иҫкәртеү бит ул. Әҫәрҙәге персонаждарға үҙҙәрен йә бүтәндәрҙе оҡшатыу ҙа файҙаға. Сатира, юмор ғибрәт итеү һәм фәһем алыр өсөн яҙыла.

Ҡыҫҡаһы, ғүмер юлымды байҡайым да шатланам: ауырлыҡтарға, ғәҙелһеҙлектәргә тарыған саҡтарымда ла күңелем боҙға әйләнмәне, ғәйбәттәрҙән өҫтөн ҡала алдым. Миңә насарлыҡ эшләгән бәндәләргә

үҙемдең әсенеү–әрнеүҙәремде белдереп йөҙ йыртып йөрөмәнем. «Бөтәһе лә үтте. Бынылы ла үтер» тип  үҙемде тынысландырам. Һәм үтә, артта ҡала, онотола. Тормошто яратам, ғәҙел кешеләрҙе хөрмәт итәм, ҡәләмдәштәремдең уңыш–табыштарына һөйөнәм. «Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр» тигән бөйөк яҙыусы Ф.М. Достоевский. Эйе, донъябыҙҙы матурлыҡ, изгелек, иман ҡотҡарыр. Амин.

Киләсәктә бик тә яуаплы һәм мөһим сатира, юмор жанрын  үҫтереүгә йәш көстәр килһен. Башҡорт әҙәбиәтендә был жанр мотлаҡ сәскә атһын. Йәштәргә ҡыйыулыҡ теләйем.

*Нажиә Игеҙйәнова,*
*Рәсәй һәм Башҡортостан*
*Яҙыусылар союзы ағзаһы,*
*Башҡортостандың  атҡаҙанған*
*мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

## Ҡиммәтле кейәү

Мөжәйеп менән Хәшшим кибеттән һыра алып ҡайтҡанда Хариса тигән ҡатынҡайҙың ҡапҡаһына йәбештерелгән иғланға юлыҡтылар.

– «Димселәр клубы», – Мөжәйеп, һуңғы арала насар күргән күҙҙәрен аса – йома, иғланды көскә уҡыны ла Хәшшимгә таҫырайып ҡараны. – Ни әйтерһең? Кемде кемгә димләй ул?

Хәшшим, тәмәкенән һарғайған эре тештәрен күрһәтеп, һаһылданы, шунан әшнәһенә мут ҡарашын төбәп, ифрат кәйефләнеп, татылдарға тотондо:

– Ире, Хабрахман тиңдәшебеҙ, ситкә сығып киткәнен ишеткәйнек тә. Эш эҙләйҙер, бисара. Үәт, ышан бисәләргә: йәмәғәте оҙон аҡса артынан китеүгә ай ҙа тулмаған, быныһы өйөндә әллә ниҙәр ойошторорға ла тотонған.

– Әйтмә лә… Хариса апай ҙа бәйелһеҙ бисәләрҙең береһе икән, – Мөжәйеп, башы ауыртыуға сыҙамай, ыңғырашып ҡуйҙы.

Ете бисә айырған Хәшшимдең күҙҙәре һунарға сыҡҡан бүре күҙҙәренән былайыраҡ баҙлап китте:

– Барайыҡ, Мөжәйеп, Хариса ни ҡыландыра икән, күрәйек, – тип ҡоторторға тотондо.

Ә быныһының ул йортҡа аяҡ баҫырға теләге юҡ:

– «Билет хаҡы мең һум» тигән яҙыуҙы әллә шәйләмәнеңме? Шул ҡәҙәре аҡсам юҡлығын һәйбәт беләһең. Кемгә көтөү көтөшөп, кемгә утын–бесән ташышып көн күрәм. Бармайым, – тип ҡырт киҫте Мөжәйеп.

Ете бисә башын әйләндергән Хәшшим бит – маҡсатынан, ниәтенән дүнә торғандарҙан түгел, һөйләнеүен дауам итте:

– Бисә ҡуйынын күрмәй, ҡырҡҡа еттең. Мең һум үтескә бирермен, бай бисәгә өйләнгәс тә түләрһең.

– Бай бисәләр мине, һимеҙерәк бете лә булмаған бәндәне, көтөп

тора, ти.

– Түшәгеңдән ары китмәгәс, бер нәмә лә белмәйһең. Ир–ат ҡәҙерле бит хәҙер. Күргәҙмә экспонаты хәленә ҡалып барабыҙ. Гәзит–журналдарҙа «Ирҙәрҙе һаҡлағыҙ» тип яҙалар. «Көслө заттарға ярҙам итегеҙ» тип радионан өгөтләйҙәр. Тимәк, Хариса шуны уйлап, эксперимент яһай, аукцион ойоштора, – Хәшшим тағы һаһылдап көлдө.

– «Аукцион» тигәнең нимә? – Мөжәйеп йәнә сикһеҙ ғәжәпләнде.

– Мал йәки мөлкәтте, кем күберәк аҡса түләй, шул кешегә һата торған баҙар.

– Һөйләмә әле юҡты, кеше мөлкәт тә, мал да түгел…

– Хәҙер бөтә нәмәне һаталар: илде лә, ирҙе лә. Һинең менән мине лә ҡиммәткә һатып алыуҙары мөмкин. Шулай булһа, Мөжәйеп, беҙгә лә бәхет ҡапҡаһы асылыр ине. Ярай, иртәгә керермен, Харисаға бергә барырбыҙ. – Хәшшим Мөжәйепкә һынамсыл ҡараш ташланы ла сығып китте.

Мөжәйеп иҫке диванға һуйҙайҙы: «Дә–ә, бисәләр ҡотора. Замана шаштыра. Хәшшим әйтмешләй, матриархат заманы килеп етте. Ни сыҡһа, бисәләрҙән сыға: «эксперимент», «аукцион»… Барырға кәрәк. «Һуғыш суҡмары» тигән даным бар. Ғауғалы, бәхәсле урындарҙа гел әүҙем булдым. Бында ла һынатырға ярамаҫ. Кейәү баҙарына ла беренсе булып барайым. Тәүгеләр үтемлерәк тә, ҡиммәтерәк тә була». – Ул ауырайған күҙ ҡабаҡтарын көсәнеп аса–йома ятты–ятты ла ләззәтләнеп йылмайҙы…

* * *

Мөжәйеп менән Хәшшимде Хариса алсаҡ йылмайып, ихлас ҡаршыланы:

– Һәйбәтләп әҙерләнергә кәрәк. Бындай ҡиәфәттә кеше араһына сығырға ярамай. Мөжәйеп ҡустым, әйҙә теге бүлмәгә керәйек, һаҡал–мыйығыңды ҡырайым, арыу кейем кейҙерәйем, – Хариса тәтелдәп кенә тора.

– Әлләсе… уңайһыҙ бит… – Мөжәйеп ҡатынҡайға мөлдөрәп ҡараны.

– Һис тә уңайһыҙланма. Ҡыҙ–ҡырҡындың, бисә–сәсәнең күҙҙәре ҡыҙырлыҡ, һине күргәс тә «аһ» итерлек булһын. Аукционға алам–һоламды ҡуймайҙар. Хоҙай ҡушып, тәүге экспериментым уңышлы үтһен. – Хариса йәһәт кенә Мөжәйептең һаҡал–мыйығын мөнтәгәс, хушбый бөрктө.

Ныу, Хариса… Барыһын да алдан хәстәрләгән! «Көр күренерһең» тип, ҡыҫтай–ҡыҫтай, ҡаҙылыҡ ашатты, «кәйефең күтәрелер» тип, лимонлап, ҡуян ҡанылай ҡаты сәй эсерҙе. – Ғәйепләмә инде, ҡустым, ваҡиға ифрат яуаплы – «мәй» ярамай. Бына үҙеңде һатып алһалар, алдыңдан ҡалғансы һыйлармын. Хәҙер ошоларҙы кей. – Ҡатынҡай ҡар шикелле ап–аҡ күлдәк, күк йөҙөндәй зәп–зәңгәр кәстүм, ҡара туфлиҙар һондо.

Кәйефе күтәрелгән Мөжәйеп йәһәт кейенде. Хариса уны оҙон көҙгө алдына баҫтырҙы. Вәт, әй, тәрбиә тигәнең ниндәй көскә эйә! Мөжәйеп үҙен танымай ҙа торҙо: ҡырҡты уҙған тимәҫһең – йәшәргән, аслы–туҡлы көн күргән тимәҫһең – йөҙөнә нур йүгергән.

Мөжәйеп, үҙенә һоҡланып, көҙгө алдынан һаман китмәҫкә иҫәбе бар ине лә, Хариса уны оло бүлмәгә әйҙүкләне. Баҙар тигәндә бәндәләрҙең күңеле аҙалыр – шул арала әллә күпме кеше йыйылған.

Мөжәйепте йәшел ҡәнәфигә ултырттылар. Бер тирәлә теҙелеп кенә кәләштәр баҫҡан. Йәмғеһе – бишәү. Бер кейәүгә – биш кәләш. Бишеһе лә, һоҡланыуҙандыр ауыҙҙарын асып, Мөжәйепкә ҡарап ҡатҡайны. Мөжәйеп тә ғәжәпләнде: бәй, кәләштәрҙең барыһы ла уға таныш бит. Ауылдаштарының һын–ҡиәфәттәрен һиҙҙермәй генә күҙҙән үткәрергә өлгөрҙө: «Кемеһе байыраҡ икән? Быларҙың күбеһе үҙемә оҡшамай, ни хәл итергә? Мәхмөхийыһан…үҙе бер быуар йылан: сирле генә ирен, тәрбиәләргә иренеп, гүргә иртә тыҡты, тинеләр.

Ғәзәүиәһе лә әүлиә түгел, торғаны ғазраил. Өс иргә барҙы, өсөһө лә йәһәт кенә ситкә китеп олаҡты – ҡасып ҡотолдолар. Бисәкәйҙең берәй

әтнәкәһе барҙыр, ирҙәр юҡҡа ташламағандыр…

Мәрилә, башҡортлашҡан мәрйә ҡыҙы, ҡылыйлығы арҡаһында, утыҙҙы уҙғансы йәр таба алмай, ҡартайып бара. Уға насип булмаһам, ярар ине, аҡсаһы етмәһен мине алырға…

Фәүисә… «Фәүисә, ҡасан үҫәң?» тип, күрше ҡыҙыҡайҙы ирештерә торғайным. Үҫкән бит – уға ла кейәү кәрәк. Әммә бигерәк һимергән икән – убырҙы нисек туйҙырырмын? Бәй, һатып алғас, ул үҙе мине ашатырға, кейендерергә тейеш.

Рәфисә… Сынҡайыш ауылының шәфҡәт туташы ул. Медколледжды быйыл ғына тамамланы. Ата–әсәһе хәлле – эшҡыуарҙар. Аҡсалары бихисаптыр. Тик ул мине алырға теләрме? Теләйҙер. Теләмәһә, сиратҡа баҫмаҫ ине. Хоҙайым, ошо йәш, сибәр, бай ҡыҙҙы ғына миңә насип ит. Эйе, Рәфисәне генә бисәлеккә алырға ризамын».

Аукционды башлар алдынан ауыл биләмәһе башлығы Нотиғулла нотоҡ тотто:

– Бөгөнгө сара – күптәргә яңылыҡ. Баҙарҙа кейәүҙәр һатыуҙың киләсәге дан булмаҡсы. Хариса, нәҡ шуны күҙаллап, ошо эште башланы. Бүтән әмәл юҡ – егеттәр өйләнмәй, ғаилә бәхетен күрмәй, балалар үҫтермәй ҡартая бит. Быныһы – бер. Икенсенән, ҡатын алған, бала–сағалы булған ирҙәр ҙә ифрат ялҡауланды: эшләргә теләмәйҙәр, алаптай ауыҙҙарына араҡы ҡойорға ла ҡалъя ҡабырға яраталар.

Ҡатын–ҡыҙ ир–атты аҡсаға һатып алһа, ҡонон ҡайтарыр: эскесенең эсеүен ташлатыр, эшкә өйрәтер. Ир тигәнең төҙәлергә теләмәһә, яман ғәҙәтен ташламаһа, ҡатындың ул белекһеҙҙе туҡмарға, ас тоторға тулы хоҡуғы бар, сөнки шул аҙман өсөн күпме аҡса исрафлаған. Ҡатындар бер тулаһамы…эйе, үҙемдән беләм…

Һатыу эшен ҡабаланмай ғына атҡарырбыҙ. «Ашыҡҡан – ашҡа бешкән» тиҙәр, аҙаҡ үкенерлек булмаһын. Ауылыбыҙҙағы утыҙҙан ашыу ир–егетте өс айҙа һатып бөтһәк, таман булыр.

Йәнә бик мөһим бер мәсьәләгә иғтибар итегеҙ. Һәр баҙарҙың үҙ

ҡануны бар: беҙҙең тауарҙың йәғни ир–егеттәрҙең бирнәһе хаҡында дәғүә, бәхәс тыуыуы ихтимал. Ундай сетерекле саҡта ла ир–аттың бер һүҙ әйтергә хаҡы юҡ – барыһын да ҡатын–ҡыҙ хәл итә.

Шуны ла әйтәйем: үҙен һатып алырға ниәтләгән ҡатын–ҡыҙға риза булмаған ир–егеттәр аукциондан төшөп ҡала. Ҡабаттан аукционға ҡуйылмай. Ҡәҙерҙе белмәгәс, әйҙә, эт кеүек элмәндәп, урамда йөрөһөн. Төшөндөгөҙмө?

Ваҡиғаның үтә яуаплы, үтә тантаналы икәнен иҫәпкә алып, Хариса менән артабанғы эш–хәлдәрҙе лә төпсөрләп планлаштырҙыҡ. Былары бигерәк ҡыуаныслы: кәләштәр һатып алған кейәүҙәрен шунда уҡ ЗАГС–ҡа алып китә. Ауыл хакимиәте йорто биҙәлгән, ЗАГС хеҙмәткәрҙәре көтөп тора. Еңел машиналар әҙер: шарҙар таҒылған, сәскәләр ҡуйылған.

Ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы телмәрен тамамлап та бөттө, ҡулына уҡлау менән батмус тотҡан Мөшбикә, Мөжәйептең өлкән апаһы, аукционды асып та ебәрҙе:

– Ҡустым ҡиммәт тора, сөнки ул үҙе сибәр, үҙе көйәҙ – кем уны һөйөр. Бер тапҡыр ҙа өйләнмәне, тәүге ҡатынына ҡайтып китер, тип ҡурҡмаҫ кәләше. Ситтә үҫкән балаһы барлығы ла тойолмай – тимәк, алимент түләмәйәсәк. Тәүге хаҡы – миллион. – Ул уҡлауы менән батмусҡа тондорҙо.

– Миллионды мин бирәм! – тип аҡырҙы Мәхмөхийыһан.

Мөжәйеп көжөрәйҙе: уның һис кенә лә Мәхмөхийыһандың ҡуйынына керәһе килмәй. Шәфҡәт туташы Рәфисәгә мөлдөрәп ҡараны – тора унығы, ауыҙына һыу уртлағандай, өндәшмәй.

– Миллион – бер. Миллион… – Мөшбикә һүҙен әйтеп бөтмәне, Мәриләнең сағыу тауышы бүлмәне яңғыратты:

– Миллион ярым йәғни бер миллион да биш йөҙ мең!

Мөшбикә уҡлауы менән батмусҡа һуҡты:

– Миллион ярым – бер!… Миллион ярым – ике!… Миллион…

Шул саҡта Фәүисәнең сибек тауышы сипелдәне:

– Бер миллион да биш йөҙ меңгә ун һум өҫтәйем!

Мөшбикә уҡлауын күтәрҙе.

Ул арала Ғәзәүиәнең зәһәр тауышы ишетелде:

– Фәүисәгә һәпмәҫ. Туҡта, постой, Фәүисә. Мөжәйепкә, ғәжәйеп егеткә, ике миллион да йәл түгел!

Мөжәйеп ҡәнәфигә һеңде: «Өс ирҙән ни ҡәҙәре аҡса йыйған, яуыз. Талаған бит тегеләрҙе, бөлдөргән…»

Бүлмәлә себен осҡаны ишетерлек тынлыҡ урынлашты.

Мөшбикә, иҫенә килеп, уҡлауын күтәрҙе, әммә батмусҡа һуғырға йәнә өлгөрмәне, Рәфисә, ике ҡулын алға һоноп, Мөжәйеп янына йүгерҙе:

– Биш миллион. Үҙемә генә, Мөжәйеп бәғеремде бер кемгә лә бирмәйем!

Мөжәйептең тыны ҡыҫылды: теләге алдына килде бит – хур ҡыҙындай Рәфисәнең ҡосағына сумасаҡ.

Мөшбикә, шатлыҡтандыр инде, уҡлауы менән батмусҡа йән көсө менән тондорҙо:

– Биш миллион – бер. Доңҡ–ҡ! Биш миллион – ике. Доңҡ–ҡ! Биш миллион – өс. Доңҡ–ҡ! Рәфисә, Мөжәйеп – һинеке! Ал, рәхәтен күр!

Мөжәйеп ҡәнәфиҙән һикереп торҙо ла Рәфисәгә уҡталды…

* * *

… Мөжәйеп күҙҙәрен асып ебәрһә, ғәжәйеп күренешкә шаҡ ҡатты: янында түҫө ҡомһарған Хәшшим баҫып тормаһынмы. Ҡулында алюмин тәрилкә менән алюмин ҡалаҡ.

– Тор, төш еткән – һаман йоҡлап ятаһың. – Хәшшим ҡалағы менән тәрилкәне тағы төйөргә тотондо.

– Ниндәй төштө бүлдерҙең, э–хх… – Йәне көйгән Мөжәйептең күҙҙәре дымланды.

– Ха–ха–ха! «Йоҡонан кәбән һалырһың, төштә кәләш алырһың» тигән таҡмаҡ бар. Әллә төшөңдә кәләшле булдыңмы?

– Рәфисә миңә бисәлеккә ризалашҡайны. Ҡосағыма алдым тигәндә

ҡамасауланың. – Мөжәйеп кисереештәрен һаман иләҫ–миләҫ килә ине.

– Бәй, белмәйһеңме, үткән аҙнала Рәфисә ситкә сығып китте бит. Бәхетен эҙләйҙер. Бөтөрөнмә, көйөнмә, яңғыҙлыҡҡа өйрәнгәнһең, – Хәшшим, дуҫын йәлләйме, әллә, киреһенсә, кәзекләйме, һамаҡларға тотондо: – Үтескә мең һум бирәм, тигәйнең, килтерҙеңме? – Мөжәйеп күптән йыуылмаған етек сәсенә оҙон тырнаҡлы бармаҡтарын батырҙы.

– Ялындым, ялбарҙым, ете бисәмдең береһе аҡса бирмәне. Айырылған бисәләр, сәсрәгерҙәр, ҡаты бәғерлегә әйләнә икән – һис йәлләмәйҙәр.

– Ызначит, аукционда ҡатнашмайбыҙмы? – Мөжәйеп ауыр көрһөндө.

Хәшшим таң ҡалды:

– Ни сурытаһың? «Хариса эксперимент үткәрә, аукцион ойоштора» тип шаярттым ғына, әллә ышандыңмы? Шаяртмаҫ та инем, үҙең бит «Имселәр клубы» тигәнде «Димселәр клубы» тип, ҡысҡырып уҡының. Вәт, бер ҡатлы йүләр…

Хәҙер Мөжәйеп ғәжәпләнде:

– Һыраны күберәк һемергәнбеҙ. «Дөрөҫ уҡымайһың» тип, ниңә әйтмәнең? – Мөжәйеп дуҫына ҡаш аҫтынан ҡараны.

– Йә, шул ҡәҙәре шаулама. Исмаһам, буш хыял менән булһа ла, күңелебеҙҙе күтәрәйек, тигәйнем. Уйынсалауҙың файҙаһы тейҙе: исмаһам, Рәфисәне төшөңдә күргәнһең, шатлан. Ә–ә, онотоп торам: Хабрахман ҡайтҡан, ҡайҙалыр массажистлыҡҡа уҡып ятҡан. Ҡулында дүкәмите лә бар, тиҙәр. Шуға «Имселәр клубы»н асҡандар. Мең һум түләп, массажға йөрөүселәр табылырмы? Беҙ йөрөмәбеҙ. Хабрахман үҙенең Харисаһын рәхәтләнеп имләһен. Баш ауырта, төҙәтергә әмәлен нисек табырға?– Хәшшим, тоноҡ күҙҙәрен упайтып, Мөжәйепкә текәлде…

## Сәйер кәсеп

Хәжәр ҡарсыҡ ғәҙәтенсә иртә таңдан магазинға йүнәлде. «Әбей, туҡта әле, туҡта!» – тип һөрәнләгәндәрен ишетеп, боролоп ҡараһа, таушалған йөҙлө бер ир уның алдына килеп тә баҫты.

– Әбей, – тине ул, тынын саҡ алып, – доға уҡый беләһеңме?

– Аҙыраҡ уҡыштырам. – Хәжәр ҡарсыҡ ирекәйгә иғтибар менән текәлде: «Шөкөр, йәштәр ҙә дингә тартыла башланы. Донъялар ҡотайыр, изгелек артыр былай булғас», – тип уйлап, ифрат кинәнде.

– Мә, һиңә өс һум хәйер: әсәйемә аят уҡы. – Ят кеше ҡапыл һулҡылдап илап ебәрҙе.

Хәжәр ҡарсыҡ уның арыу ғына төшөргәнен аңланы, әммә ғәйепләргә ашыҡманы: «Ир–аттың ғәҙәте шул инде, хәсрәтте араҡы менән йыуа…»

– Хәйерең кәрәкмәй, улым, былай ҙа доға ҡылырмын, әсәйеңдең исемен әйтһәң, шул етә.

– Исеме… – Теге ыҡ–мыҡ итте, ниңәлер тирә–яғына ҡаранды…

Хәжәр ҡарсыҡ уны бик йәлләне: «Ҡайғынан әсәһенең исемен дә оноткан. Ҡәҙерле кешеңде ҡара гүрҙәргә һалыу, һай, бик ауыр шул».

– Улым, шул ҡәҙәре бөтөрөнмә, Хоҙай ғүмерҙе күпме бирә, шул ҡәҙәре йәшәй бәндә… Бүтән эсмә, улым. Әсәйеңдең рухын рәнйетмә. Мә, аҡсаңды кире ал. Ғәзиз кешеңдең мәрхүмә булғанына ни ғүмер?

Өс һумын йәһәт кенә кеҫәһенә оҙатҡан ирекәй томан баҫҡан күҙҙәрен секерәйтте:

– Бер аҙнанан ҡырҡы тула. Әйткәнеңде тыңлармын, әбекәй, әсәйемдең ҡырҡын уҙғарғас, шайтан һыуын ауыҙыма ла алмам.

«Собханалла, изге теләктәргә, яҡшы кәңәштәргә ҡолаҡ һалғандар бар икән әле». – Хәжәр ҡарсыҡтың нескә күңеле ҡыуанысҡа тулды.

– Ағай–эне, дуҫ–иш хәл–әхүәлемде белергә, ҡайғымды уртаҡлашырға килгәйне… Бер ярты етмәй ҡалды, саҡ ҡына өҫтәргә кәрәк. Йөҙ генә һум биреп тор, әбей. – Ир кеше йәнә түгелеп иларға тотондо.

«Әсә өсөн был ҡәҙәре өҙөлгәндәр донъяларҙа һирәктер». – Хәжәр ҡарсыҡ уға ҡушылып саҡ илап ебәрмәне:

– Мә, улым, йөҙ илле тәңкә. Ни…

Ирекәй уны тыңлап бөтмәне, супермаркетҡа сапты.

– Тағы ләх була инде. – Ете–һигеҙ йәштәрҙәге ҡыҙыҡай быларҙы күҙәтеп, әңгәмәне тыңлап торған икән.

– Ләх булғанын ҡайҙан беләһең? – Ҡарсыҡ сикһеҙ аптыраны.

– Беләм, минең атайым бит ул, – ҡыҙ бала тәрән көрһөндө.

«Бисараҡай, өләсәһен бик һағыналыр, бигерәк ауыр көрһөнә…» – Хәжәр ҡарсыҡ уның иңдәренән ҡосаҡлап алды:

– Әйҙә әле, мынауында керәйек – шикалат әпирәйем.

Ҡыҙыҡайҙың күҙҙәре йылтыраны:

– Әйҙә, тиҙерәк бул. – Ул йәһәт кенә ҡарсыҡты етәкләп тә алды.

Изгелек ҡылырына ҡыуанған ҡарсыҡ, аяҡтарының һыҙлауын да тоймай, елт–елт ҡыҙсыҡ артынан атланы.

– Һеңлем, «Йомарт Рәсәй» тигән шикалат бир. – Хәжәр ҡарсыҡ һатыусыға аҡса һоноуы булды, ҡыҙ бала еңенән тартты:

– Минең ҡустым да бар…

– Әләйһәң, икәүҙе бир. – Әбекәй көшөлөгөнән йәнә аҡса сығарҙы.

– Ни… – ҡыҙ бала уның еңенән тағы тартты, – ни… өләсәйемә лә ал.

Уны–быны уйламаған ҡарсыҡ шоколадтарҙы ҡыҙыҡайға тотторғас ҡына иҫенә килде:

– Өләсәйең?

– Эйе, өләсәйем тере. Атайым һине алданы. Күптән өйрәнгән: юҡты һөйләй ҙә юрый ғына илай, шунан аҡса һорай. Аҙаҡ: «Обманул я дурочку – вот моя выручка», – тип таҡмаҡланы. Хәҙер һәләк матур бейей башланы. – Ҡыҙыҡай кинәнеп шырҡылданы.

«Әстәғәфирулла. Иманһыҙҙы, оятһыҙҙы бүтән күрергә яҙмаһын». – Көтөлмәгән ваҡиғанан хәле лә, аҙыҡ–түлеккә тигән аҡсаһы ла бөткән Хәжәр ҡарсыҡ тәнтерәкләй – тәнтерәкләй йортона табан туйтанланы…

## Бай әфәнде

Йәғләмүн, эс бошоуына сыҙамай, ары һуғылып, бире бәрелеп күпмелер йөрөгәс, әлегәсә башына килмәгән уйға тарыны: «Юлланайым баш ҡалаға: донъя күрермен, албырғармын, артабан йәшәргә дәрт–ҡеүәт алып ҡайтырмын. Йыйған болом хәтһеҙ генә: хәләл аҡсамды үҙемдән йәлләмәм: тәүҙә ҡунаҡханаға урынлашырмын, шунан өҫ–башымды ҡарармын – яҡшы кәстүм, һәйбәт аяҡ кейеме алырмын. Унан инде театрға барырмын, музейҙарҙы ҡыҙырырмын. Ресторанда ултырырға ла мөмкин. Шулай ҡала ҡыҙырғанда күҙем ҡыҙған ҡатын–ҡыҙ осрауы ла бар…»

Тәүәккәл кеше ул Йәғләмүн: иртәнге автобусҡа ултырып, китте Өфө тарафтарына. Юлдар ялт итеп ята: өс–дүрт сәғәт тә үтмәгәндер, Ҡыуморон ауылынан баш ҡалаға килеп тә еттеләр. Автовокзалдан Өфөнөң үҙәгенә барыу ҙа еп–еңел икән: эреле–ваҡлы автобустар, төрлө–төрлө маркалы таксиҙар ғәләмәт күп. Ҡаланы танырлыҡ та түгел: бер–береһенә оҡшамаған, төрлө стилдә төҙөлгән матур–матур йорттар ҡалҡҡан.

– Ҡустым, иң яҡшы ҡунаҡхана алдында төшөрөрһөң, – тине водителгә Өфөнөң йәмле урамдарын таң ҡалып күҙәткән Йәғләмүн.

Егерме йыл элек армиянан ҡайтҡанда ҡалаға һуғылғайны Йәғләмүн. Бергә хеҙмәт иткән Өфө егете Ирғәле менән юлдаш булып, уларға инеп сыҡҡайны. Уны ла табып, күрешергә ниәтләне ул. Ирғәләнең адресын хәтерләй, танһығы ҡанғансы ҡаланы байҡағас, бүләк–күстәнәстәрен күтәреп, хеҙмәттәшенә барыр ҙа инер. Әйҙә, шаҡ ҡатһын. Сын яһау кейенгән Йәғләмүнде, моғайын, танымаҫ…

– Абзый, ошоно бик маҡтайҙар. – Таксист «Аҡсарлаҡ» тигән ҡунаҡхана алдында туҡтаны.

Йәғләмүн иҫе китеп ҡунаҡханаға ҡарап торҙо: хан һарайҙарынан һис кәм түгелдер, артығыраҡ булмаһа әле. Эргәһендә генә магазин да бар икән. «Әйҙә, ин» тигән атамаға Йәғләмүн ҡыҙыға төштө: «Саҡыралар.

Инәйем, күрәйем, бәлки, үҙемә ифрат килешкән кәстүм, дан туфлиҙар барҙыр», – тип уйланы ла йәһәтләп магазинға йүнәлде.

Киң баҫҡыста торған бәһлеүән ир, Йәғләмүнгә башын кеселекле эйеп, сәләмләшкәс, йәһәт кенә ишек асты.

Магазинға ингәс, Йәғләмүн ғәжәпләнде, ишектең был яғында ла һаҡсы тора. Унығы ла, һалдат һымаҡ, үрә ҡатып, баҙыҡ тауышы менән ҡысҡырып сәләм бирҙе.

Сөм–ҡара униформа кейгән һаҡсылар игеҙәктәр кеүек: икеһе лә буйсан, мыҡты кәүҙәле, таҡыр башлы. Билдәрендә – пистолет кобуралары…

Бә–ә–әй, Йәғләмүндең күҙҙәре сағылды: ҡояш ҡалҡҡанмы ни – тирә–йүн нурға күмелгән. Күҙҙәре күнегергә өлгөрмәне, уның янына Йәғләмүн йәшендәге тәпәш кенә кеше тып итеп килеп баҫты.

– Рәхим итегеҙ, хөрмәтле әфәндем, – тине ул, ифрат шатланып, әйтерһең, «Көт мине» тапшырыуы аша күптән юғалған туғанын тапҡан. Бәрхәттәй йомшаҡ тауышлы һатыусы тиҙ генә кәштә янына баҫты ла ҡурҡытмайым, тигәндәй, һаҡ ҡына Йәғләмүнде саҡырҙы:

– Әфәндем, нимә алырға теләйһегеҙ? Барыһы ла бар, һайлағыҙ, алығыҙ, ҡыуанығыҙ, – тине ул, һандуғастан былайыраҡ сутылдап.

Йәғләмүн тирә–йүнен байҡаны: күҙ алдары сыбарланып китте – магазин тулы ялтыр–йолтор, төрлө–төрлө уйынсыҡтар, ахыры…

– Тәтәй–мәтәй алырға бала–сағам юҡ, биғәйбә. – Йәғләмүн, үҙенең әҙәпле үә мәҙәниәтле икәнен һиҙҙерергә тырышып, ифрат яғымлы яуапланы. Унан өҫтәп ҡуйҙы, – хөрмәтле һатыусы, иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт. Мин бында бүтән әйберҙәр эҙләп ингәйнем…

Кәштә янында тороусы йәшел күҙҙәрен йызылдатып йылмайҙы:

– Был магазин түгел, салон. Мин – уның хужаһы. Былар, әфәндем, уйынсыҡ түгел, сувенирҙар. Ҡиммәтле сувенирҙарҙы һиммәтле үә абруйлы кешеләргә бүләк итеү – үҙе ҙур мәртәбә.

Йәғләмүн, тегенең һүҙҙәрен йөпләп, баш ҡаҡҡан булды: «Сувенир бүләк итеүҙең ифрат мәртәбәле булғанын белмәй инем», - тип, бәҫен төшөрмәҫ бит инде.

– Алыҫ–алыҫ илдәрҙән килтерелгән аҫыл сувенирҙар бит былар: быныһы – Ирандан, быныһы – Ҡытайҙан, быныһы ла Ираҡ тигән йыраҡ илдән, ә быныһы… – Ҡыҫҡаһы, салон хужаһы егермеләп илде атаны. Йәнә өҫтәргә онотманы, киреһенсә, кинәнес менән татылданы, – һәр сувенирҙың үҙенә генә тәғәйен мәғәнәһе, илаһи көсө бар. Һеҙҙәй ир–уҙаман күп уйланмаҫ, үҙенә кәрәген һайлар…

«Ир–уҙаман» ти бит… Яҡты йөҙҙөң, яҡшы һүҙҙең тәьҫире ифрат көслө шул: Йәғләмүн яйлап әүрәлә ине – ҡарашын бер сувенирҙан икенсеһенә, өсөнсөһөнә күсерҙе.

Уның арбалыуын асыҡ күргән хужа «һөжүмен» дауам итте:

– Быңдай салон ҡалабыҙҙа берәү генә. Ә инде минең салондан сувенир алмаған кеше әлегәсә булманы һәм булмаҫ та… Байҙар йәшәй белә: дәрәжәләрен төшөрмәй. Әле берәүһе Италиянан сувенир эткә заказ бирҙе. Шулай заказдар менән күмәләр… Ташып өлгөр генә…

Әфәндем, бына доллар сигелгән тоҡсай. Бик үтемле сувенир. Шуны ал, автомобилеңә элеп ҡуйырһың. Доллар сигелгән бит: һиңә муллыҡ, уңыштар теләп торор…

Йәғләмүн алтынһыу төҫтәге ебәк еп менән сигелгән кисет кеүек нәмәне диҡҡәт менән ҡарарға тотондо.

– Хаҡы ла ҡиммәт түгел: ни бары ике йөҙ доллар ғына. Үҙебеҙҙең валюта менән дә түләргә мөмкин: йәғни алты мең һум ғына…

Йәғләмүн, ғәжәпләнеп, ишек төбөндәге һаҡсыға боролоп ҡараны. Уныһы алтын тештәрен ялтыратып йылмайҙы ла баш бармағын күрһәтте: «Сувенир шәп, мотлаҡ ал» тиеүе.

Хужа Йәғләмүндең икеләнеүен һәйбәт күрҙе:

– Һис тә ҡиммәт түгел. Алып ҡал: бындайҙы бер ҡайҙан да тапмайһың. Бәхетең дә бар икән: бөгөн генә килде – бүтән байҙар күрмәне әле. Һиңә насип булған…

Был ҡәҙәре иғтибарға, өҙөлөп өгөтләүгә башы әйләнгән Йәғләмүн түш кеçәһенә ҡулын тыҡты. Ҙур ҡулъяулыҡҡа таçлап төрөлгән аҡсаһын һанап, хужаға һондо. Хужа уң ҡулы менән аҡсаны алды, һулы менән алтын төçөндәге буяуға буялған ташбаҡаны прилавка өçтөнә, Йәғләмүндең алдына ҡуйырға өлгөрҙө. Ташбаҡаның артҡы аяғына бармаҡ менән тейеүең була, мәхлүк муйынын һуҙып ебәрә, башын уңға–һулға бororға тотона. Ирмәк инде.

«Алайыммы, юҡмы – ни эшләргә?» тип уйланған Йәғләмүндең хәлен тиҙ аңланы хужа:

– Быны инде, бай әфәндем, һинең кеүек йомарт ирҙәр яхтаһына беркетә… – тине.

– Хаҡы? – тип һораны Йәғләмүн.

– Әйттем дә, һәр сувенирҙың үҙ мәғәнәһе: яхтаң һыуға батмаç, бәлә–ҡазаға тарымаçһың. Тимәк, сувенирҙың мәғәнәһенә, мәртәбәһенә ҡарап – ун бер мең. Ә мин һиңә ташлама яһайым: ун меңгә ризамын.

Йәғләмүн аҡса һондо.

– Ә быныһын, бай әфәндем, карауатығыҙҙың ҡаршыһына ҡағып ҡуйырһың. Ҡатының менән мөхәббәтегеҙ яңырып китер. Мөхәббәтте үлгәнсе, ҡара гүрҙәргә ингәнсе күҙ алмаһындай һаҡларға кәрәк. Әл–лә–лә, ҡатының ҡыуаныр инде. – Хужа алтын төçөндәге буяуға буялған ҡушйөрәк һондо. Саҡ ҡына уйланып торҙо ла сатнатып әйтә һалды, – икәүҙе ал, һөйәркәңде лә һөйөндөрөрһөң. Ташлама менән бирәм, ун ике мең етә. Фани донъяның ҡәҙерҙәрен беләйек – ҡатынды ла, һөйәркәне лә тигеҙ һөйәйек. Изгелеген күр, бай әфәндем, – салон хужаһы икенсе ҡушйөрәкте лә Йәғләмүндең усына йомдорҙо.

Һа–а–ай, матур һүҙҙәрҙең ҡөҙрәте: «Бай әфәндем» Йәғләмүндең былай ҙа йомшарған күңеленә май кеүек яғылды, йәнен йәнә нығыраҡ

иретеп ебәрҙе: әлегәсә уны бер кем дә, бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла был һүҙҙәрҙе әйтеп, күктәргә күтәргәне булманы – Йәғләмүн аҡса һондо.

Ә хужаның тағы бер нисә нәмәне димләргә дәрте бар ине лә, ҡулъяулыҡтағы аҡсаның әҙ генә ҡалыуын шәйләргә өлгөрҙө. Ул, әллә ниндәй хикмәтле һүрәттәр төшөрөлгән ыҡсым ғына пакетҡа сувенирҙарҙы һалып, Йәғләмүнгә тотторҙо:

– Аҡсаға тейенгәс тә инегеҙ. Һеҙҙе күрергә һәр саҡ шат булырбыҙ. – Хужа, күҙҙәренән зәһәр осҡондар сәсеп, алаптай ауыҙын йырҙы.

Йәғләмүн дә йылы хушлашты. Эстән генә үҙен әрләргә лә өлгөрҙө: «Салон хужаһының самаһыҙ сөсөләнеүен, эйелеп–бөгөлөүҙәрен күргәс, кәмит күрһәткән әртискә оҡшатҡайным, яғымлы, күңелсәк кеше икән дә…»

Урамға сыҡҡас, «Аҡсарлаҡ» ҡунаҡханаһына табан атланы. Ишек тотҡаһына һонолғас, шып туҡтаны, күгәргән ирендәре мөлкөлдәне: «Тоҡсай – алты, ташбаҡа – ун, йөрәктәр – ун ике мең – йәмғеһе егерме һигеҙ мең. Бысаҡһыҙ һуйҙы, бөлдөрҙө бит кәмитсе: ни бары мең ярым аҡса ҡалған».

Хеҙмәттәше Ирғәле менән осрашыу, театр–музейҙар ҡыҙырыу, матур ҡыҙ менән ресторанда ултырыу ҡайғыһы китте. Ишеккә һонолған ҡул һәлберәп төштө.

… Өфө менән Ҡыуморон ауылының араһы алыҫ түгел: өс–дүрт сәғәт тә үтмәгәндер, Йәғләмүн өйөндә ултыра ине. Матур пакеттан алтын төҫөндәге нәмәләрҙе өҫтәлгә теҙеп ҡуйғас, сикәләрен һыйпап, уйға батты: доллар сигелгән тоҡсайҙы элергә машинаһы, ташбаҡаны ҡуйырға яхтаһы, йөрәктәрҙе бүләк итергә һөйәркәһе лә, «донъя көтәркәһе» йәғни хәләл йәмәғәте лә юҡ. «Эй, Йәғләмүн, мәғәнәһеҙ мәлғүн» тип бышылданы ул, ҡан әҫәре ҡалмаған ирендәрен саҡ ҡыймылдатып.

Ҡырҡты уҙған буйҙаҡ ир тәрән көрһөндө…

## Дандар таралған инде…

«Дан» тигән һүҙ ишетһәм, әсеткән ҡамыр күҙ алдыма килә. «Дан»дар ҙа ҡамыр һымаҡ ҡабара икән. Үтә ҡырҡыуланған ҡамырҙан бешерелгән икмәк тәмһеҙ була. Шуның кеүек, ифрат киң, ифрат тиҙ таралған дандың да бәҫе китеүсән, бәлә килтереүсән.

Минең дә дандарым таралды. Шуларҙың береһен бәйәнләйем әле. Берәй заман, кәйефем күтәренке булғанда, бүтәндәрен дә һөйләрмен.

Бер ваҡыт минең турала һәләк ирмәк һүҙ менән тирә–яҡ тулды. Төймә арҡаһында ғына дөйә ҡәҙәре хәбәр сыҡҡанын һиҙмәй ҙә ҡалдым.

Ҡыҙым Данүҫә ҡул эшенә әүәҫләнеп киткәйне. Кофта бәйләп кейҙе лә:

– Матурмы? – тип һораны.

– Төймәләре эре, – тинем, әйберҙе диҡҡәт менән ҡарағас. – Эре лә, үтә ваҡ та булмаған төҫтәш төймәләр һайла. Тәүге эшең, кофтаң ифрат килешә, афарин. – Мин баламдың күңелен күтәреп ебәрҙем.

Данүҫә, кәңәшемде тотоп, төймәләрҙе алыштырып тағып та ҡуйҙы.

Ҡатын–ҡыҙҙың тәбиғәте шундай: күҙҙәре нәҡ йылтыр–мылтыр нәмәләргә төшә.

– Аһ–аһ, төймәләре былай–алаймы, бигерәк матур. Зауҡың да бар икән. – тип һоҡланғандар.

– Әсәйем ошоларҙы алырға кәңәш итте. Олоғайып барһа ла, матурлыҡты йәштәрсә тоя, йәштәрсә һиҙә. Уның кәңәшен тотһам, уңам да ҡуям, – тип үк ебәргән Данүҫәм.

– Әсәйең һәйбәт кәңәшсе икән. Яҡшы кәңәшкә мин дә мохтажмын. Ҡунаҡҡа килһен. – Сәтиғә исемле ҡатынҡай ҡыҙыма өй адресын биргән.

Киттем Сәтиғәне эҙләп, йортон йәһәт таптым.

Сәтиғә мине ихлас ҡыуанып ҡаршыланы, һыйҙан һығылып торған өҫтәлгә әйҙүкләне.

– Яландай квартирала әллә бер үҙең йәшәйһеңме? – Мин ғәжәпләнеүемде йәшерә алманым.

– Ирем һулға йөрөргә ғәҙәтләнде, аҙна – ун көнгә бер ҡайта. Шуға, Даниә апай, артабан ни эшләргә, тип кәңәш һорарға саҡырғайным. – Күҙҙәренә йәш эркелгән ҡатынҡай тәрән көрһөндө.

– Көсөк ал, һеңлем. Һунар тоҡомонан һайлаһаң, ишшү ҙә һәйбәт. Көсөк сағынан ирекәйеңдең нәски йә күлдәген еҫкәтеп үҫтер. Еҫ–ҡоҫто айырырға күнекһә, иреңде күмәк кеше араһынан да еңел табасаҡ. Мин ҡушҡанса эшләһәң, күр ҙә тор – бермә–бер килешәсәк.

Сәтиғәнең кинәнеүен күрһәгеҙ...

Ғүмерҙең үткәне һиҙелмәй шул. Бер көндө беҙгә, ҡояштай ялтырап, Сәтиғә килеп керҙе:

– Мең йәшә, Даниә апай. Көсөгөм башмаҡ ҡәҙәре булып үҫте. Нәҡ һин кәңәш иткәнсә тәрбиәләнем. «Рекс, хужаңды эҙлә!» тигән фарман биреүем була, уҡтай урамға атыла. Ярты сәғәт тә үтмәй, салбар балағынан тешләп, аҙманды өйгә алып ҡайта. Яңыраҡ һөйәркәһенә лә «тешен күрһәткән». Бисура бисә дауаханала ятып сыҡҡан. Ветстанциянан килеп, ҡотороҡ сиренә анализ алғайнылар, шөкөр, Рексыбыҙ һап–һау, тап–таҙа. Хәҙер йәнкәй–йәнәшем уңға–һулға ҡайырылмай.

Сәтиғәнән былайыраҡ ҡыуандым: йәш ғаиләне тарҡалыуҙан ҡотҡарҙым бит.

– Даниә апай, кеҫә телефоныңдың номерын яҙып алайым әле, әхирәтем һорағайны, – ти Сәтиғә һеңлекәш.

– Шылтыратһын, өгөт–нәсихәт бирергә һәр саҡ әҙермен. – Мин йәһәт кенә телефон номерымды һондом.

Кискә Сәтиғәнең әхирәте, дөрөҫөрәге, әхирәтенең йәмәғәте шылтыратты:

– Даниә апай, мин – Фитрат Нитратович тигән кешемен. Кәңәш кәрәк ине, – ти.

– Ҡустым, хәл–әхүәлеңде мөмкин тиклем төпсөрләп һөйлә, шунһыҙ төплө кәңәш биреп булмай, – тим.

– Телефондан ярамай, һеҙгә барабыҙ.

Фитрат ҡусты ҡатынын эйәртеп килеп тә етте. Хәлдәре ҙур аҡсаға бәйле икән. Бер генә бүлмәле квартирала иркенләп гәпләшергә мөмкинлек юҡ. Фитрат Нитратовичтарға киттек.

– Даниә апай, «Фольксваген» тигән машина алайыҡмы, әллә «Тойота» тигәненме? – Ир менән ҡатын минең ауыҙға ғына ҡарап тора.

– Гаражығыҙ бармы? – тим.

– Йортобоҙға яҡын булғанын эҙләйбеҙ. Тапҡас та әбизәтелнә алырбыҙ – хаҡына ла ҡарамабыҙ. – Фитраттың ҡатыны ла әңгәмәгә ихлас ҡушылды.

– Тәүҙә ҡарҙы ситкә ышыра торған гөргөслө трактор кәрәк, – тим.

– Ә ул нимәгә? – Фитрат ҡусты аңшайҙы, ҡатыны күҙҙәрен аҡайтты.

– Әле ҡарап килдем: машина күп – алма төшөрлөк тә урын юҡ. Ҡала урамдарынан йөрөү ҙә ҡыйынлашты: элек беҙ белмәгән-күрмәгән «тығын» тигән нәмәнән йонсой бит халыҡ. Фитрат ҡустым, тракторыңдың гөргөсө менән үҙеңә ҡамасаулаған машиналарҙың бер нисәһен ситкә этһәң, аҙаҡ шоферҙар үҙҙәре үк машинаңды йортоң алдына ҡуйырға урын әҙерләр. Шунан икеһен дә – «Фольксваген» тигәнен дә, «Тайота»һын да алығыҙ.

Һуңынан ишеттем: ҡусты минең кәңәшемде тотҡан: гөргөслө тракторы менән бер нисә машинаны ситкә ышырған. Кеше яуыз бит хәҙер: зыян күреүселәр Фитратты судҡа биргән, тракторын һаттырып аҡсаһын бүлешкән. Шулай итеп, ҡусты төрмә тигән нәмәнән саҡ ҡотолған.

Ошо хаҡта ишеткәс, шатлығымдың иге–сиге булманы. Хәҙер Фитрат Нитратовичҡа теләгән машиналарын алырға мөмкин: йорто алдында, тәҙрәләренең ҡаршыһында ғына, ике–өс машина ҡуйырлыҡ буш урын бар.

Шул вәҡиғанан күп ваҡыт та үтмәне, квартирама сибә–ә–әр ханым килеп керҙе.

– Кәңәш кәрәк. – тине ул, сәләмләшергә лә онотоп. – Даниә апай, ҡунаҡҡа алып ҡайтам. Һеҙҙә иркенләп һөйләшергә мөмкинселек юҡлығын иҫкәрттеләр.

Өмәмә ханымдарға юлландыҡ. Уларҙа сәй эсә–эсә эстәр бушағансы серләштек. Ҡамасаулыҡ итеүсе юҡ: ире сит илгә оҙайлы командировкаға киткән.

Баҡһаң, Өмәмәнең йәмәғәте бохар бесәйе алырға рөхсәт итмәй икән. Эт менән бесәй яратмай, ти.

– Бала табып бир. Бәпес һөйөп кинәнегеҙ.

– Мин бала яратмайым. – Өмәмә, кәңәшемде өнәмәүен белдереп, матур танауын сирылта.

– Улайһа, юлбарыҫ балаһын ал. Бик бай йәшәйһегеҙ: 300– 350 мең доллар һеҙгә моң да түгел.

– Кәңәшеңә рәхмәт, Даниә апай. Бындай уй нисек башыма килмәгән?! Дуҫтарымды, туғандарымды, уларҙан да бигерәк ирекәйемде аптыратайым әле. – Өмәмә битемдән суп иттереп үбеп алды.

Аҙаҡ ишеттем: ҡатынҡай юлбарыҫ балаһын һыртынан һыйпап ҡына үҫтергән.

Командировканан ҡайтҡан ирекәй ҡатынының был ҡылығына таң ҡалған. «Үрмәксенән күрмәксе» тигәндәй, бисәһе кеүек юлбарыҫты иркәләргә һонолоуы булған, йыртҡыс күҙ асып йомғансы ҡул суғын һоғонған да ҡуйған. Юлбарыҫты зоопаркка оҙатҡандар. Бизнесмен иргә протез ҡул ҡуйғандар.

Минең нисек һөйөнгәнемде күрһәгеҙ... Бәй, Өмәмәгә ҙур ярҙамым тейҙе: ошо хәлдән һуң берәү генә лә түгел, ике бохар бесәйе бүләк иткән дәһә ирекәйе.

«Иҫ киткес шәп кәңәшсе» тигән шөһрәтем шулай таралды. Хәҙер мине машинала ғына алып ҡайтырға теләүселәр бигерәк күбәйҙе. Өйгә төшкәнем дә юҡ, ваҡыт етмәй.

Күпме ғүмер үткәндер, бер көн Данүҫә ҡыҙым шылтырата:

– Әсәй, мотлаҡ ҡайт, кейәүгә сығам. Туйҙа түрҙә генә ултырырһың, – ти.

Туй бит ул, нисек ҡайтмайһың. Туй ресторанда булды. Әммә ҡоҙа–ҡоҙағыйым эргәһендә рәхәтләнеп ултырырға яҙманы. Артымдан килгәндәр: тағы сығып киттем. Ҡоҙа–ҡоҙағыйымды, ҡоҙасаларымды, кейәүемде бүтән ерҙә осратһам, танымаҫым көн кеүек асыҡ.

Туйҙан һуң йылдан ашыу ваҡыт үткәс, Данүҫә ҡыҙым тағы шылтырата:

– Әсәй, ҡайт, ейәнсәреңде мотлаҡ күрергә тейешһең, – ти.

Ейәнсәр бит ул, нисек ҡайтмайһың... «Әһә, – мин әйтәм, – сабыйҙы нисек йыуындырырға, нисек биләргә, нисек имеҙергә кәңәш кәрәк.»

Такси ялланым, әммә йортто таба алмайым. Бәхеткә таксист минең хаҡта яҡшы белә икән. Ғаиләһе мине саҡырырға уйлаған. Телефон номерым, йортомдоң адресы кеҫәһендә ятҡан. Улар халҡының белмәгән йорто, белмәгән юлы юҡ. Минең йортто ла тапты. Баҡһаң, йорт тирәләй банктар, кибеттәр, дарыуханалар төҙөп бөткәндәр.

Ярай, ҡайтып керҙем. Күбәләк кеүек талпынып ике йәштәрҙәге бәләкәй генә ҡыҙ бала ҡаршыма килә.

– Бала–сағалы ҡунаҡтар бармы? – тип һорайым.

– Ейәнсәрең бит ул, әсәй. – Данүҫәм йылмая. Минең ышанмауымды күреп, өҫтәп ҡуя. – Туй көнөндә сығып киткәнеңә өс йыл тулды бит, әсәй.

Ҡара һин уны, биләмдә йөрөүемә өс йыл тулған, ә өс көн ҡәҙәре лә тойолманы.

– Имен–аман ҡайтыуығыҙ менән! – тине аш–һыу бүлмәһенән сығып килгән килбәтле генә егет.

Кемлеген әлдә һорарға өлгөрмәнем, ейәнсәрем: «әт–тә» – тип, уның ҡаршыһына йүнәлде. Данүҫәмдең йәндәй йәмәғәте, үҙемдең берҙән–бер кейәүем икәнен шунда уҡ төшөндөм.

Данүҫәм эшкә сыҡты, мин ейәнсәремде ҡарайым. Квартирабыҙҙы киңәйткәс, ҡаланың икенсе районына күсендек. Әммә ғәләмәт ҙур көскә эйә икән ул «дан» тигәндәре, һис тындырмайҙар. Магазинға ла барып булмай: таныйҙар бит, кәңәш һорап, артымдан эйәрәләр. Ныҡыш кешеләрҙән нисек ҡотолорға белмәйем…

Ауыр хәлдән арынырлыҡ арыу кәңәш бирегеҙ!

## Хәтерһеҙҙәр

Мөршиҙә: «Үткән ғүмер менән ҡалған хәтер һис табылмай, алтын–көмөш бүләк итһәң дә…» – тип, үҙ алдына мөңгөрләй–мөңгөрләй, фатирына табан туйтанлай. Хөршиҙә ҡәрендәшенең* хәтерһеҙлегенә йәне көйҙө, әле лә асыуы баҫылмаған.

«Хөршиҙә ҡәрендәшем» тиергә яратһа ла, Мөршиҙә ҡарсыҡ унан ни бары ун көнгә өлкән. Әммә Мөршиҙә ишле ғаиләлә баш бала ине, үҙенән кесе һеңле–ҡустыларын тәрбиәләргә тура килде. Нәҡ ошо сифат ҡәлбенә һеңгән. Шуғалыр, ахыры, Хөршиҙәгә аҡыл өйрәтергә, кәңәш–төңәш бирергә бик ярата.

… Ҡан баҫымы күтәрелеп, башы ауыртыуға ҡарамаҫтан, көн һәйбәт башланғайны: Хөршиҙә ҡәрендәше йома сәйенә саҡырҙы. Йәһәт кенә йыйынып, юлға сыҡты Мөршиҙә.

Хөрт йәшәмәй Хөршиҙә: ҡоймаҡ ҡойған, бәлеш бешергән. Өҫтәлдәге гәлсәр һауытта өймәләм емеш–еләк тора.

Хужабикә өлтөрәп сәй ҡуйып ебәрҙе.

---

* ҡәрендәш- диал. – ҡарындаш

– Сәй ҡайнағансы, әйҙә, ейәнсәремә бәйләгән куфтамды күрһәтәйем. – Хөршиҙә ҡунағын залға алып сыҡты, йомшаҡ диванға ултыртты ла алдына кофта һалды. Йәшел төҫтәге йөнгә ялтыр еп ҡушып бәйләнгән әйбер һәләк матур: йылҡылдап тора.

– Яҡшы булған, ейәнсәреңдең йылы тәнендә туҙһын. – Мөршиҙә кофтаны һыйпап йылмайҙы. – Йәш сағыңдан «йәшел» тип йәнең сыҡты.

– Шулай шул: Әфтәхемдең күҙҙәре лә йәшкелт ине. Биҙәкәй күҙҙәре менән күңелемде арбаны. Тик ғүмер генәһе ҡыҫҡа булды. Бөгөн төшөмдә күрҙем: ҡосаҡларға тырыша, мин ҡасам, ул баҫтыра, мин йәшенәм. Әллә янына саҡырамы икән? Хәйер бирәйем әле: хәләл йәмәғәтемдең рухы шатланһын. – Хөршиҙә йәшел алма һүрәте төшкән ике киҫәк һабынды әхирәтенә һондо.

Быныһы белгән доғаһын ихласлап уҡыны. Ул арала әсе сигнал тауышы ишетелде. Ике ҡарсыҡ урындарынан һикереп торҙо.

– Әй, йома бит, бөгөн туйҙар гөрләй торған көн. Еңел машина ҡысҡырталар. – Хөршиҙә, тәҙрәнән–тәҙрәгә йөрөп, ҡарана башланы. – Был яҡта түгелдер, әйҙә, әхирәт, балконға сығайыҡ әле.

Әммә балкондан, унан лоджиянан тирә–яҡты күпме байҡаһалар ҙа, туй машиналары күренмәне. Үткән–һүткән кешеләрҙе, майҙансыҡта уйнаған бала–сағаны хәтһеҙ ваҡыт тамаша ҡылғас, тамаҡтары кибеп киткәйне,йома сәйе иҫтәренә төштө.

Аш–һыу бүлмәһенән көйөк еҫе танауға бәрелде, төтөн залға ҡәҙәре таралған…

Хөршиҙә ҡапыл кухняға ташланды:

– Аһ, харап ҡына булды. Өр–яңы әйберҙе әрәм иттем.

Әхирәтенең йән әрнетерлек әсе тауышын ишеткәс, Мөршиҙә лә шунда ашыҡты.

Плитә өҫтөндәге сәйнүк ҡап–ҡара ҡором, һемәге ирееп төшкән…

– Ейәнсәрем алып биргәйне. «Өләсәй, – тигәйне, – сәй ҡайнатырға ҡуяһың да онотаһың. Ҡайнай башлағас, сигнал бирә торған сәйнүк был.

Һәйбәт  һыҙғыра, тауышы паровоздыҡынан кәм түгел» – тип маҡтағайны. Әй, Аллам, ни бары ике–өс мәртәбә сәй эсергә өлгөрҙөм, – тип иламһыраны хужабикә. – Быйыл ғына нисә сәйнүк яндырҙым.

– Нисәү? – Мөршиҙә, тәфтишсеме ни, үтә лә етди тексәйгәйне.

– Был – дүртенсеһе…

– Шәпһең инде: пенсиәң сәйнүк алырға ла етә икән. – Ҡунаҡ мыҫҡыллап һөйләнеүен дауам итте. – Бая әсе сигналды ишеттең бит. Туй машиналары, имеш… Сәйнүгеңдең шулай һыҙғырыуын онотҡанһың. Бигерәк иҫһеҙгә әйләндең әле. Минән ун көнгә йәшһең, ә хәтерең иләк кеүек тишелеп бөткән. Рәхәтләнеп сәй эсермен, тиһәм… – Ҡунаҡ кипкән ирендәрен яланы.

– Әлегәсә ниндәй зиһенле инем. Бер нәмәне лә онотмай торғайным, – Хөршиҙә тәрән көрһөндө.

– Ғүмереңә шулай булдың. Пенсиәгә сыҡҡас, нимәштәнең. Иртә менән эшкә әҙерләнеп, фабриканың ҡапҡаһы  янына еткәс, хаҡлы ялда икәнеңде иҫкә төшөрөп, кире ҡайтҡаныңды һөйләп, мине би–и–ик аптыратҡайның.

– Гел эшкә йөрөп өйрәнгәнгә, өйҙә ултырып күнекмәгәнгә шулай яңылышҡайным… – Хөршиҙә аҡланып маташты.

Мөршиҙә уны тыңлап бөтөрлөк хәлдә түгел:

– Радионан да, телевизорҙан да баш мейеһен эшләтә торған дарыуҙарҙы маҡтап, көнө–төнө таҡылдайҙар. Ал, эс шуларҙы. Күнекмәләр яһа.

– Ниндәй күнекмәләр? – Хужабикә, Мөршиҙәнең күпте белеүенә һоҡланып, оло хөрмәт менән  ҡараны.

– «Мин онотманым, онотмайым, онотмаясаҡмын.», тип зиһенеңде нығыт, үҙеңде шуға күнектер.

– Ярай. – тигән булды бынаһы, әллә ни аңламаһа ла.

Ҡыҫҡаһы, сәйҙе кәстрүлдә ҡайнатырға тура килде. Баллап–майлап сәй эскәндә ирегән сәйнүк иҫтәренән шыпа сыҡҡайны инде.

…Мөршиҙә йортона ҡайтып етеүгә, ҡаршыһына күрше ҡатын осраны.

– Апай, һаумы. – тине илгәҙәк күрше. – Ҡайҙа йөрөнөң?

– Әхирәтем йома сәйенә саҡырғайны. – Сәйнүк менән булған хәлде тәфсирләп һөйләргә ниәтләгән ҡарсыҡ таяғын эскәмйәгә һөйәне.

Әбекәйҙең хәбәрҙе үтә тәмләп, оҙон–оҙаҡ һөйләргә яратҡан ғәҙәтен белгән ҡатын, тиҙерәк ҡотолорға тырышыптыр, уның һүҙен бүлдерҙе:

– «Тиҙ ярҙам» саҡырғанһың икән…

Ҡарсыҡтың ҡапыл төҫө ҡасты:

– Әттәгенәһе!! Ҡан баҫымым күтәрелгәс, шылтыратҡайным шул: сәпсим хәтеремдән сыҡҡан. Мәлһеҙ сәйгә саҡырҙы Хөршиҙә лә. – Ул йәһәтләп подъезд ишеген асты.

– Ҡабаланма, апай, табиптар китте.

– Килгәс–килгәс, көтһәләр ни була? Һәр саҡ шулай…

– Һәр саҡ шулай шул, апай, «Тиҙ ярҙам» саҡыраһың да, йә магазинға, йә дуҫ–ишеңә китәһең. Исмаһам, ҡайҙа барғаныңды миңә әйтһәң, ни була?

Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ: Мөршиҙә әбей өндәшмәне, йәһәтләп фатирына йүнәлде. Ишеген асырға өлгөрмәне, әлеге күршеһе килеп етте:

– Табип тигәндә, таяғыңды ла онотоп йүгерәһең, хи–хи–хи. – Ҡатынҡай эскәмйәгә һөйәгән әйберҙе әбейҙең ҡулына тотторҙо.

– Артыҡ хихылдайһың, Алла бойороп, ғүмерең булһа, ҡартлыҡ һиңә лә килеп етер. Ә таяғым өсөн рәхмәт, әлдә шәйләгәнһең, юғалыр ине. «Атлы килеп, йәйәү ҡайтмайҙар» тигән әйтем бар, мә, һеңлем. Осраған сағында икәүҙе алғайным, береһе һиңә булһын. – Хөршиҙә ҡәрендәше хәйергә биргән йәшел алма һүрәте төшөрөлгән һабынды Мөршиҙә ҡарсыҡ күршеһенә һондо…

## Һыпытуй

Фәнғәт, уйланып йөрөй–йөрөй ҙә, шундай фекергә килә: «Ғаилә йылы», «Сәләмәт тормош йылы», «Ғаиләгә социаль ярҙам йылы» һәм башҡа атамалы йылдар бер–бер артлы үтеп тора. Был бик яҡшы. Әммә етәкселәргә генә һалышмай тормошто яҡшыртыу маҡсатында, һәр кем ҡулынан килгәнде эшләргә тейеш. Мәҫәлән, мин үҙем «Һыпытуй» акцияһын башлап ебәрәйем. Башҡаларға өлгө булыр, фәһем алырҙар. Шунан минең башланғысҡа дәррәү ҡушылырҙар. Төпсөк баламдың, Алтынай ҡыҙымдың, туйын иҫерткес эсемлекһеҙ үткәрәйем.»

Ҡәтғи үә етди ҡарарға килгән Фәнғәт, ғаиләһе киске ашҡа йыйылғас, яйлап ҡына һүҙ башланы:

– Ҙур, яуаплы байрамды үткәреү кәңәшһеҙ булмай. Туй көнө билдәле, ҡунаҡтарҙың исемлеге төҙөлдө, аш–һыуға меню бар. Хәҙер эсемлек мәсьәләһен хәл итәйек.

– Араҡы–винолларҙың ҡайһыларын алабыҙ, яҙып барайыҡ, – Фәнғәттең хәләл ефете Фәнғиә ханым һүҙгә ҡушылды.

– Бер шешә шарап та булмаясаҡ. – Фәнғәт ҡатыны менән ҡыҙына тантаналы ҡарашын ташланы. – Беҙҙең яҡта эскелекһеҙ үткән туйҙы «һыпытуй» тиҙәр ине.

Фәнғиә менән Алтынай таң ҡалды.

– Әллә тағы–ы… әлегәсә ундай туйҙы күрмәгәс… – тип аптыраны Фәнғиә ханым.

– Һыпытуй… һыпытуй… – Алтынай бер атаһына, бер әсәһенә алмаш–тилмәш мөлдөрәп ҡараны.

– «Һыпы» һүҙе «суфый» тигәнде аңлата, ә суфыйҙар хәмер эсмәгән.

– Әллә тағы–ы… – тип йәнә аптыраны Фәнғиә. – Араҡыға аҡсалары булмағас, беҙҙе бимазалап, ниңә туйға саҡыралар, тип көлөрҙәр.

– Көлмәҫтәр. Дөрөҫ, тәүҙә ғәжәпләнерҙәр, аҙаҡ аңларҙар. Шунан үҙҙәре лә һыпытуй үткәрергә өйрәнер – һәр кемдең бала–сағаһы, ейән–

ейәнсәрҙәре бар. Мөһиме: аш–һыуҙы мул әҙерләрбеҙ, ҡымыҙ алырбыҙ, минераль һыу, төрлө һут ултыртырбыҙ.

– Атай, һин – шәп уйлап табыусы. Исмаһам, ҡунаҡтарыбыҙ иҫерешеп–ирешеп, баҫтырыша–баҫтырыша һуғышып йөрөмәҫ. Айныҡ баш менән туйғансы күңел асырҙар. Оҫта баянсы Боҫтан ағайҙы саҡырайыҡ. – Алтынайҙың сырайы тулған айҙан былайыраҡ балҡыны. Хатта балаларса сәпәкәй итте.

Ҡыҫҡаһы, туй көнө килеп етте. Билдәләнгән сәғәткә ҡунаҡтар йыйыла башланы.

Серәште ауылы кешеләре – үҙенә бер төрлө ҡәүем. Туйҙар бында ирмәк үтә: тупһаны ашатлауға кәләш менән кейәүгә, йәғни тантанаға сәбәпсе йәштәргә, бүләктәрен тапшыралар ҙа туп–тура түргә уҙалар.

Ҡотлау һүҙҙәре лә бер–ике һөйләмдән генә тора:

– Ҡотло булһын туйығыҙ. Әйҙәгеҙ, тамсыһын да ҡалдырмай, эсәйек.

– Беҙҙең кеүек балаларығыҙ күп булһын. Бөтөргәнсе генә йотоп ҡуяйыҡ.

Ҡаласа оҙон–оҙаҡҡа һуҙып, тост әйтеү ғәҙәте юҡ. Серәштегә ситтән килгән берәй ҡунаҡ оҙағыраҡ һөйләй башлаһа, «аҡыллы булып ҡылана, ваҡытты әрәмгә уҙғара», тип яратмайҙар.

Фәнғәт менән Фәнғиә, йәнәш баҫып, ике–өс һөйләм менән генә туйҙы асып ебәрҙе. Ҡунаҡтар, гәлсәр бокалдарҙағы йәш ҡымыҙҙы бер тынала һемергәс, танһыҡ ҡаҙылыҡҡа йомолдо, ҡаҙ боттары кимерҙе, ит–һалма һоғондо. Хужа бокалдарға йәнә ҡымыҙ ҡойҙо – татлы эсемлекте һис ҡыҫтатмай эсеп ҡуйҙылар. Өҫтәлгә төрлө–төрлө затлы ризыҡтарҙы өҫтәп торҙолар, һөҙлөклө ҡайнар һурпа ташынылар. Бүлмә эсе шым–шырыҡ, бары ҡалаҡ–сәнскеләр шаҡылдай ҙа ҡунаҡтарҙың ауыҙҙары шапылдай.

Йәш ҡымыҙ яйлап ҡеүәтен күрһәтә башланы: ҡунаҡтарҙың кәйефе күтәрелде, телдәре сиселде.

Ҡапыл Ғәбделбөки ырғып торҙо ла:

– Фәнғәт, табында нимә юҡ? Йә, уйла әле, уйла: өҫтәлгә нимә ултыртырға оноттоң? Ул бит һәр ерҙә бар… Уны бөтәһе лә ярата, унһыҙ – донъя һанһыҙ… – тип, үтә лә мөһим мәсьәлә хәл иткәндәй, хужаға текәлде.

Бындай һөжүмде һис көтмәгән Фәнғәт көсләп йылмайҙы: аҡланырға уйланымы, аңлатырға теләнеме, ҡалтыранған тауыш менән һүҙ башланы:

– Хөрмәтле туғандар, ҡоҙалар–ҡоҙасалар, ауылдаштар. Бөгөнгө ошо байрам «һыпытуй» тип атала. Йәғни иҫерткес–илерткес әл–ҡәһелһеҙ үткәрелгән туй була. «Һыпы» һүҙен «суфый» тип аңларға кәрәк.

– Хажға барҙыңмы әллә? Ха–ха–ха. – Ауылдаштарҙың береһе быуылып көлөргә тотондо.

– «Әл–ҡәһел» тигәнең ни була? – тип ҡыҙыҡһынды баш ҡоҙа.

– «Әл–ҡәһел» – ғәрәп һүҙе. Беҙҙеңсә, урыҫса… – Фәнғәт, йәтеш һүҙ тапмай, буталды, – йәғни ҙә «алкоголь» …

– Хи–хи–хи. Сәпсим суфыйға әйләнгән бит был байғош… – Фәнғиәнең иң яҡын әхирәте Сәмғиә күҙенән йәш аҡҡансы хихылданы.

Ғәбделбөкиҙең бисәһе Бөкиҙәбикә үрә баҫып, бот сапты:

– Тәүбә. Бындай туй буламы? Мыҫҡыл итә бит былар, ғәрлегеңдән ят та үл.

– Ғүмергә аҡса ҡоло булдың, Фәнғәт. Үҙең дә эсмәйһең… – Кемдер тәрән көрһөндө.

– Бөкиҙәбикә, бүләгеңде ал да, әйҙә, ҡайтайыҡ. Юл ыңғай магазинға керербеҙ. – Ғәбделбөки ишеккә йүнәлде.

– Әйҙә, ҡуҙғалайыҡ, беҙ ҙ ә магазинға һуғылырбыҙ, яртылыҡ ҡына хәл бар. Алтынай, кейәү балаҡай, беҙҙең бүләкте лә бирегеҙ инде… – Энә йотҡан эт кеүек ябыҡ ҡатын, ныҡ туйғандыр, ғарҡ кикерҙе лә ирен ҡабаландырҙы. – Йә, тиҙерәк бул, нимәштәп ултыраһың.

– Бүләктәр алғы бүлмәлә. Кем нимә бүләк иткәне иҫтә ҡалманы, үҙегеҙ ҡарап алығыҙ. – Алтынай оялышынан бурҙаттай ҡыҙарғайны.

Ҡыҫҡаһы, дауыл ҡуптымы ни, ун–ун биш минут үттеме–юҡмы, ҡунаҡтар таралашып бөттө. Берәһе лә бүләген кире алырға онотмағайны.

Шул көндән, шул сәғәттән Фәнғәткә «Суфый» ҡушаматын таҡтылар. Әйе, бер көнгә түгел, мәңгегә.

Серәште ауылында туйҙар әле лә гөрләп–гөжләп уҙа. Һәр туйҙан һуң оҙаҡ һөйләрлек хәл–ваҡиғалар булып тора: кемдер араҡы шешәһе менән бисәһенең башын ярған, кемелер аҫылынған, ҡайһы берәү һыуға батҡан, бәғзеһе ҡайҙалыр үлеп ятҡан һәм башҡалар, һәм башҡалар…

## Шатлыҡтар уртаҡ булһын

Фәйез машина һатып алды. Төшөндә түгел, өнөндә, ысынбарлыҡта. Алтмышын артмаҡлағанда ғүмер буйы хыял иткән моратына иреште.

Ауылдың бер осонда сөскөрһәләр, икенсе осонда ла ишетелә, тигәндәре дөрөҫ: уның өр–яңы, ифрат ҡупшы еңел машина алыуы хаҡындағы хәбәр сәғәт эсендә һәр өйгә мәғлүм ине.

Иң тәүҙә Фәйездең уң яҡ күршеһе Сөнәғәт күренде:

– Афарин. Машинаң менән ҡотлайым. Шатлығың оҙаҡҡа етһен. – Сөнәғәт ҡапҡаны асыу менән ҡысҡырҙы.

– Рәхмәт. Шатлығым уртаҡ булһын. – Фәйездең кәйефе шәп, күршеһенең арҡаһын уҫлаптай усы менән ҡаҡҡылап ҡуйҙы.

– Ҡыуаныстарыңды уртаҡлашырыңа ышанам. – Сөнәғәт, ат теше кеүек эре тештәрен күрһәтеп, һаһылданы.

Ул арала Фәйездең һул күршеһе Фәнәғәттең ҡарлыҡҡан тауышы ғыжылданы:

– Бәхетле бәндә һин, Фәйез, ниндәй машинаның руле ҡулыңда. Мин, ҡыутомшоҡ, мындай машина хаҡында уйларға ла йөрьәт итмәйем. Мәңге кеҫәләрем буш – әле лә елдәр уйнай. Нимә, кредитҡа керҙеңме?

– Көс барҙа яңы өй һалырмын, тигән маяны тотондом. Әлегә иҫкеһендә йәшәлер, торараҡ, мал–тыуарҙы ишәйткәс, кирбестән төҙөрмөн тигән иҫәп бар.

– Һинең урында мин булһаммы… шатлыҡтан шартлар инем. Нисек сыҙайһыңдыр был ҡәҙәре ҡыуаныстарға.

– Ҡыуаныстарым уртаҡ булһын. – Фәйез бер һүҙен ҡабатланы.

– Беҙ ҙә шулай тибеҙ. – Сөнәғәт менән Фәнәғәт Фәйездең һүҙҙәренә бик ҡәнәғәт ине.

– Ауыҙыңа бал да май, Фәйез ҡустым. Уртаҡлашҡан һайын ҡыуаныс–шатлыҡтар һис бүҫкәрмәй, һаман арта, һаман күбәйә. – Урам аша йәшәгән күршеһе, яңғыҙ ғүмер кисергән Минсырур әбей ни арала яндарына килеп еткән, быларҙың әңгәмәһен ишеткән, хәбәрҙең мәғәнәһенә төшөнгән.

– Рәхмәт, Минсырур апай, теләктәрең ҡабул булһын, – тип йылмайҙы Фәйез.

– Ихлас теләһәң, ҡабул булмай ҡайҙа китһен. Күңелең киң һинең, Фәйез ҡустым. Миңә лә лифкауайыңа ултырырға Хоҙай насип итһен. Бәндә юл йөрөмәй тормай.

Көтөү ҡайтты, Фәйездәрҙең ихатаһынан кеше өҙөлмәне, эңер ҡуйырҙы – әҙәм аяғы баҫылманы. Кемдер, тел шартлатып, машина тирәләп йөрөнө, бәғзеләр йылтыр корпусын һыйпаны. Машинаның рулен борғолап, сигнал биреп маташыусылар ҙа бар ине.

Фәйездең ғаиләһе йоҡларға бик һуң ятты.

– Нимә, ғүмерҙә машина күрмәгәндәй, барыһы бер юлы ябырылды… – Фәйездең ҡатыны асыуын саҡ тыйып йөрөгән икән, ирен әрләргә тотондо. – Үткән аҙнала Кәли ҙә машина алды. Ҡайтып та керҙе, ҡапҡаһын шапылдатып бикләп тә ҡуйҙы. Һинең һымаҡ, ихатаһында күргәҙмә ойошторманы.

– Кәли ҡарундың күңеле тар – ҡыуаныстарын уртаҡлаша белмәй. Яп ауыҙыңды, ят, йоҡла, – тип тыйҙы Фәйез ҡатынын.

Ул хәләленең хәлен яҡшы аңлай. Кисерештәр өйөрмәһенән үҙенең дә күңеле иләҫ-миләҫ: йоҡоһо осто. Таң атҡанда ғына серемгә китте…

– Тор, Фәйез, машинаңды ҡабыҙ, минең малай ғаиләһе менән ҡайтып килә, станциянан барып алайыҡ. – Уң яҡ күршеһе Сөнәғәт һонтайып ишек төбөнә баҫҡайны.

– Хәҙер, тиҙ генә йылытып, берәй тәрликә аш ашайым да… – Фәйез, йоҡоһонан арына алмай, мөңгөрләне. Кисә оҙон көн тәғәм ҡапмағас, йоҡларға ятыр алдынан бер тәгәс сәй менән генә мөрхәтһенгәйне, ярһыуҙандыр, ахыры, тамағына аш үтмәне, әле бик асыҡҡанын тойҙо.

– Ярар, ашап торма, юлда ҡапҡыларбыҙ әле. Поезд килеп, көтөп йонсорҙар, – Сөнәғәт ҡабалана ине.

Станцияға бик иртә килгәндәр икән, Сөнәғәт ваҡытты бутаған: киске сәғәт унды иртәнге ун тип аңлаған. Исмаһам, тамаҡ ялғарлыҡ ашхана – кафеһы ла юҡ: йә һалымы түләнмәгән, йә банкрот тип ябып бөткәндәр.

Ауылға кире ҡайттылар. Кискә табан йәнә станцияға юлланырға тура килде. Сөнәғәттең улын ғаиләһе менән тейәп ҡайтҡанда эңер тамам ҡуйырғайны.

– Шулай артабан да ҡыуаныстарҙы уртаҡлашып йәшәйек. – Сөнәғәт Фәйездең иңбашынан ҡаҡты.

Арманһыҙ арыған, сикһеҙ сарсаған Фәйез әллә күпме айран, хәтһеҙ тәгәс сәй эскәс, карауатына саҡ барып етте.

– Аһ-аһ, был ни хәл, битеңә ҡояш төшә бит, уян әле, Фәйез ҡустым. Ҡалаға барып ҡайтайыҡ. Һөт, май-ҡаймаҡ, эремсек һатырға уйланым әле. Унда, горыдта, ошо ризыҡтар йәһәт үтә, тиҙәр. Төшкә ҡайтып етербеҙ. – Карауат янында Минсырур ҡарсыҡ тора икән.

– Асыҡтырҙы… кисә сәй генә, айран ғына…

Фәйез хәбәрен һөйләп бөтә алманы, Минсырур ҡарсыҡ яман бартанданы:

– Миңә, бахырға, от ворот – поворот? – тип үк ебәрҙе ул, урыҫ һүҙҙәрен ап–асыҡ, дөп–дөрөҫ әйтеп. – Кисә һары таңдан Сөнәғәт менән стансаға елдән етеҙерәк елдерҙегеҙ…

Иламһыраған күршеһен йәлләп, Фәйез машинаһына табан йүнәлде.

– Төнө буйы әҙерләндем. – Минсырур ҡарсыҡ бихисап биҙрә – бидондарын, өс, биш литрлыҡ банкаларын машинаның багажнигы янына теҙеп ҡуйғайны.

Ҡаланан төшкә түгел, кискә генә ҡайттылар. Ҡарсыҡтың шатлығы башынан ашҡайны. Бәй, шулай булмай ни – кеҫәләре тулы аҡса бит. Ҡомарланып, һатыу иткәс, ҡарт кешенең әллә аңы ла томаланғандыр, рәхмәт әйтергә лә онотоп, өйөнә туйтанланы. Фәйез буш һауыттарҙы әбейҙең соланына ташыны.

Өсөнсө көндө Фәнәғәттең эсе ауыртыуына сыҙамаған ҡатынын район шифаханаһына алып киттеләр. Төн уртаһында юлға сығыуҙары яҡшыға булды. «Ярты сәғәткә һуңлаһағыҙ, һуҡыр эсәге шартлар ине» тине табиптар.

Ҡыҫҡаһы, халыҡ Фәйездең машинаһына ифрат ҡыуанды: кемдең ҡайҙа, ҡасан барыры алдан әйтелде, исемлектәр төҙөлдө.

Көн тимәй, төн тимәй, ямғыр йә буран тип тормай, ашар саҡта тамаҡ ялғарға ваҡыт тапмай, йә аяғөҫтө ҡоролай ғына икмәк көйшәп йөрөй торғас, Фәйез ашҡаҙан сиренә тарыны: ябыҡты, ҡаҡ һөйәккә ҡалды. Етмәһә, «уртаҡ ҡыуаныс»ҡа әйләнгән машина сыҙаманы: тәгәрмәстәре тишелде.

Пенсиә генә етәме ни, Фәйез, ҡышлауын һатып, яңы тәгәрмәстәр алды. Ә бер аҙҙан двигатель, башҡа нәмәләрен алыштырырға тура килгәс, осһоҙға ғына һыйырын да «урынлаштырып» ҡуйҙы.

Ә бына яңыраҡ, бер ауылдашын Өфө аэропортына алып барғанда, уның «самолетҡа һуңлайым, шәберәк ҡыу» тип мыжығанын тыңлап, сәғәтенә йөҙ егерме километр менән елдергән дә… һәм юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген һаҡлаусылар ҡулына эләккән. Штраф түләргә аҡсаһы

булмағас, «уртаҡ ҡыуаныс»ты алып ҡалғандар. Фәйез мең бәлә менән – ҡайҙа ат арбаһына һәбеп, ҡайҙа йәйәүләп ҡайтып йығылды ла айға яҡын ауырып ятты.

Уның хәл–әхүәле хаҡында Серәште ауылы халҡы тиҙүк ишетте. Тик Фәйездең ихатаһында ауылдаштарының береһе лә күренмәне…

## Шауҡымлы шаярыу

Шәйәхмәт йәштән шаян булды. Шәрифәһен дә – уйын–көлкөгә әүәҫ ҡыҙҙы ла – шул шаян тәбиғәте менән әүрәтте.

Ғүмер буйы ниндәй генә табын–мәжлестәрҙә түрҙә ултырманы ла, кемдәрҙе генә һеңдәре ҡатҡансы көлдөрмәне. Уның ауыҙына ғына ҡарап ултыра торғайны ҡунаҡтар.

Әле һис уйламағанда шаянлығы арҡаһында ҡыйын хәлгә ҡалды пенсионер ҡарт: хәләл ҡарсығы ҡыуып сығарҙы. Ғәрлектән ятып үлерлек хәл бит был.

Яман ваҡиға юҡтан ғына башланды.

Аҙна–ун көн элек Шәйәхмәт ҡарт мәрхүм ата–әсәһенә аят уҡытырға мәсеткә барырға йыйынғас, Шәрифәһе:

– Дини байрамдарға саҡырып торалар. Мәсет янындағы кибеткә кереп, үҙеңә дан түбәтәй, миңә затлы яулыҡ ал. Бисә–сәсәнең матур яулыҡтарына күҙем ҡыҙа, – тигәйне.

Мәсеттә аят уҡытып, хәйер тараткас, Шәйәхмәт ҡарттың күңеле һилләнеп, кәйефе күтәрелде. Шәрифәһенең йомошо иҫенә төшөп, дини китаптар, бетеү–фәлән, бүтән нәмәләр һатылған кибеткә йүнәлде.

Түбәтәйҙәрҙең, яулыҡтарҙың ниндәйе генә юҡ: бөтәһе лә матур, барыһы ла күҙ ҡамаштырырлыҡ ялтыр ҙа йолтор. Оҙаҡ һайланды Шәйәхмәт.

– Йә, нимәгә шул ҡәҙәре мыштырлайһың, – тип сабырһыҙланды бер ханым.

– Алһаң, ал, алмаһаң, тиҙерәк ысҡын, – тине икенсеһе.

Баҡһаң, сират ҙурайған икән. Сираттағыларҙың күбеһе ҡарсыҡтар.

– Зинһар, ғәйепләмәгеҙ. Буласаҡ ҡарсығыма затлы яулыҡ, үҙемә бик килешкән дан түбәтәй кәрәк. Кәләш күҙләгәндә яҡшы кейем дә абруй күтәрә. – Шайтан ғына теленән тартты, шай, Шәйәхмәт ҡарт һаман шаярып һөйләнеүен дауам итте: – Йәмәғәтем вафат булғанға йылдан ашыу ваҡыт үтте. Аят уҡыттым, рухы шатланһын. Ауыр хәл икән әбейһеҙ ҡалыу. Яңғыҙлыҡ йонсота. Күңелемә ятҡан ғына кеше осрамай… – Ул, яңы түбәтәйен башына ҡаплап, сығып китте.

Туҡталышҡа етәрәк уны кемдер ҡултыҡлап алмаһынмы! Бәй, урта йәштәрҙәге ят ҡатын:

– Адресыңды, исем–шәрифтәреңде тиҙ әйт, – тип ышылданы ул. Күрәһең, ҡарт артынан арыу ғына йүгергәндер.

Шәйәхмәт, уны–быны уйламай, исем–фамилияһын, йортоноң адресын тәфсилләп әйтте. Тегенең аҡ ҡағыҙға яҙыуын күргәс кенә ғәжәпләнеп:

– Кем булаһығыҙ? Минең хаҡтағы мәғлүмәт ниңә кәрәк? – тип һораны.

– Бынан ары яңғыҙлыҡтан йонсомаҫһың… Үҙең әйтмешләй, күңелеңә ятҡанды һайлап алырһың. – Ҡатын туҡталышта туҡтаманы, ары атланы.

Оло кешенең хәтере тишек иләк кеүек: Шәйәхмәт ҡарт фатирына ҡайтып еткәнсе ошо әңгәмәне оноткайны инде. Тәмле бәлеш менән сәй эскәс, серем итергә диванға йүнәлгәйне генә, ишек ҡыңғырауы зыңланы. Шәйәхмәт ишек асты.

– Шәпме–һаумы, Шәйәхмәт. – Оҙон буйлы, көмрө танаулы, көр тауышлы ҡаҡса ҡатын ҡысҡырып сәләмләште. – Бәй, нимәгә ишегеңде ҡаплап тораһың? Ҡана, керәйем, донъяңды күрәйем. – Ул, хужаны ситкә этеп, түргә үтте. Тирә–яғына аландағас, һынамсыл ҡарашын ҡартҡа

төбәне. – Донъяң бөтөн. Үҙең дә прәме егеттәрски ныҡ күренәһең, – тип хихылданы.

Шул саҡ аш–һыу бүлмәһенән Шәрифә килеп сыҡты:

– Хәбәрегеҙҙең айышына төшөнмәнем… – Хужабикә берсә хәләленә, берсә саҡырылмаған ҡунаҡҡа ҡараны.

– Шәйәхмәт мәсеттә бер йыл элек мәрхүмә булған йәмәғәтенә аят уҡытҡан, шунда күңеле үә күҙе төшөрҙәй бисә эҙләп йөрөгән. Яңғыҙлыҡҡа кем сыҙаһын. Бигерәк тә ирҙәр түҙмәй. Минең ҡартым гүр эйәһе булғанға кисә ҡырҡ көн тулды. Аят уҡыттым. Ашҡа йыйылғандарҙан берәү, бөгөн генә, әле генә телефондан шалтыратып, Шәйәхмәттең адресын бирҙе. Яландай йортта бер үҙем тилмерергә йүләр түгелмен дә. Шәйәхмәт, теләһәң, миндә, теләһәң, һиндә йәшәрбеҙ.

Таң ҡалған Шәрифә ҡартының күҙҙәренә тура ҡараны:

– Алтын туйыбыҙға көлкөлө тамаша әҙерләнеңме? Әллә ҡыйығың ҡыйшайҙымы, нишана?

Хужалар күрмәй ҙә ҡалды, теге ҡортҡа шылғайны инде. Шәйәхмәттең көлдөргән дә, бөлдөргән дә теле көрмәлде:

– Ш–ш–шаярып ҡына һөйләнгәйнем, ысынға алырҙарын кем белгән… Шәрифәм, күҙ нурым, ғәфү ит, бүтән былай шаяртмам.

Ғүмер буйы аңлағанды ни эшләп хәҙер аңламаһын, ти, Шәрифә, аңланы, ғәфү итте, рәхәтләнеп көлдө.

Әммә…көләүен көлдө лә ул, ярты сәғәт тә үтмәгәндер, ишек ҡыңғырауы тағы зыңғырланы. Ашығып–ҡабаланып баҫалар ҡыңғырау төймәһенә… Был юлы ишекте Шәрифә үҙе асты.

Ҡойолғандан ҡалған һирәк сәстәрен бөҙрәләткән, ирендәрен буяған, ҡаштарын ҡарайтҡан ҡарсыҡ, яһалма тештәрен йылтыратып, йылмайып тормаһынмы.

– Шәйәхмәт, һине эҙләп килгәндәр, ҡаршыла. – Шәрифә йәнә ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

– Ужас! Хужабикә булырға ла өлгөргәндәр. – Ҡарсыҡ, яман бартанлап, эләгә–йығыла баҫҡыстан төшөп китте.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: өс–дүрт ҡарсыҡ–ҡорсоҡ, бисә–сәсә килмәгән көн юҡ. Ә бына бөгөнгөһө, һары таңдан килгәне, бигерәк яуыз булып сыҡты:

– Бар, эҙеңде һепер, бында һин түгел, мин йәшәргә тейешмен. – Ирҙәр кеүек эре кәүҙәле ҡатын килеп тә керҙе, сәләм дә бирмәй, хужабикәне ҡыуырға тотондо. Шәрифәнең сәсенә үрелә, мәлғүн.

Полиция саҡыртып, саҡ ҡотолдолар.

Шунда Шәрифәнең сабырлығы сатнаны:

– Шәйәхмәт, ишекте теге яғынан яп. Йәнең теләгән ҡарсыҡты һайла. Донъя алдында мыҫҡылланың, телеңә тилсә сыҡһын. – тип ҡарғаны.

Шәйәхмәт ҡарт, шундай бәләгә төшөүенә шаңҡып, йорт алдындағы эскәмйәлә күпмелер ултырғас, сыҙаманы, тәҙрәләренә мөлдөрәп ҡараны. Йоҡо бүлмәһенең тәҙрә селтәре һелкенеүен шәйләгәс кенә еңелерәк һуланы…

## Ҡаҙаҡ ҡаҡтылар

Телевизорға мөкиббән текәлгән Нәүфил, ҡарсығын тертләтеп, ҡапыл тубығына шапылдатып һуҡты ла:

– Мәғәшиә, ташла шул бәйләмеңде, тиҙ генә кил яныма. – тип саҡырҙы.

– Аһ–аһ, ни булды? – Мәғәшиә ҡарты янына килеп баҫты.

– Мәңге ығыш булдың, тиҙ кил, тинем дә… Икенсе нәмәгә күстеләр инде. – Нәүфил ҡарт, хәләленә ҡырын–мырын ҡарап, урынынан ҡуҙғалды.

Хәҙер ҡарсыҡ бартанланы:

– Һинең һымаҡ, телевизорҙан күҙемде алмаһам, бәшәйҙе кем бәйләр? Йомшаҡ бәшәй кейергә бик яратаһың да бит, сыҙатмайһың, бәйләп өлгөртөп булмай.

– Шау ғына шырау иҙән арҡаһында тиҙ туҙа. Шырау, бәшәйҙән үтеп, аяҡҡа ҡаҙала әле. Рәхмәт кенә яуһын үҙҙәренә, теге рекламаны тағы күрһәтәләр. Мәғәшиә, тим, диҡҡәт менән ҡара.

Телевизор экранында бер ир «Көрсөк» тип яҙылған таҡтаға уҫлаптай ҡаҙаҡты ҡаға–ҡаға, көр тауыш менән таҡылдай: «Көрсөккә ҡаҙаҡ ҡағығыҙ. Ремонт эшләп, кәйефегеҙҙе күтәрегеҙ. Ремонт өсөн кәрәк–яраҡтарҙы етмеш процент ташлама менән һатабыҙ.»

– И–и–и… – Ҡарсыҡтың иҫе китте. – Нисәмә йыл квартирабыҙҙы ремонтларға аҡса йыя алмайбыҙ. Етмеш процент ташлама, тисе… Әтеү «көрсөк» ти ҙә зарланабыҙ, көрлөк бит был, «көрлөк» тиергә кәрәк. Беҙҙең кеүек ҡарт–ҡороно хәстәрләүҙәре.

– Белдереүҙе бүтән пенсионерҙар ҙа күрә. Тиҙ йыйын, Мәғәшиә, тиҙ бул. Магазинға барайыҡ, кәрәк–яраҡтарҙы алып ҡалайыҡ. – Нәүфил ишеккә табан йүнәлде.

– Ҡайһы магазин икәнен, исмаһам, беләһеңме?

–Һин ҡаҙаҡ ҡаҡҡандарына шаҡ ҡатып ҡараған арала мин адресын яҙҙым.

Уларҙы һонтор ир: «Рәхим итегеҙ» – тип, ҡунаҡ көткәндән былайыраҡ шатланып, әйҙүкләп ҡаршыланы. Шөкөр, етмеш процент ташлама менән әйбер алырға килеүселәр һирәк, сират юҡ.

– Тәүҙә обой һайлайыҡ. Нисәмә төрлө бит әле: шаҡмаҡлыһы, буйлыһы, сәскәлеһе, бынһына ай төшөрөлгән, тегеһенә – ҡояш… Мөғжизә! – Мәғәшиәнең шатлыҡтан тыны ҡыҫылды.

– Теләгәнеңде ал, – тине Нәүфил.

– Ете рулон етерме? – Мәғәшиә ихласлап обой һайларға тотондо.

– Оҙонлоғон ҡара: ун туғыҙ квадрат метр бүлмәгә, эйе, етәү ҙә етә. Һигеҙҙе алғанда ла насар булмаҫ – запаста торор.

Мәғәшиә һатыусыға боролдо:

– Бына ошоноһон, ҡояш төшкәнен, һигеҙ рулон төр.

– Айн момент! – Һатыусы ҡағыҙ ҡапсыҡты йәһәт кенә килтереп тә ҡуйҙы. – Ә буяуҙар кәрәкмәйме ни?– тип һораны ул, ҡарт менән ҡарсыҡҡа алмаш–тилмәш күҙ йүгертеп.

– Буяуһыҙ ремонт буламы ни… Тәҙрә яҡтары менән рамға, йәнә батарейға аҡ буяу, иҙәнгә һарыһы табылырмы?

– Нисәү? – тип кенә һораны һатыусы.

– Ауырлығына ҡарайыҡ, ҡустым.

– Бөтәһенең дә ауырлығы бер – яртышар кило.

– Улайһа, аҡ буяу өс, иҙәнгә тигән һарыны – дүрт банка.

– Һиңә әйтәм, һары буяуҙы икене генә алайыҡ, күп була бит, – Мәғәшиә, ғүмер буйы аҡсаны самалап ҡына, уйлап ҡына тотонорға өйрәнгәс, әле лә артығын түләргә теләмәне.

– Запас ашарға һорамай, – тип кенә ҡуйҙы Нәүфил.

– Айн момент. – Һатыусы тиҙ үк ете һауыт буяуҙы килтереп тә еткерҙе.

– Ниме, ҡустым, обой йәбештерә торған келәй ҙә ташлама менәндер? – Мәғәшиә һатыусыға һынамсыл ҡараны.

– Әбизәтельно етмеш процент ташлама менән. Айн момент.

…Ҡарт менән ҡарсыҡ ҡыуаныстан ҡайтып еткәндәрен дә һиҙмәне. Ишектән кергәс тә, Мәғәшиә ҡағыҙ тоҡто асып, обойҙарҙы иҙәнгә теҙеп һалырға тотонғайны, кинәт кенә күҙ алдары сыбарланып китте: һигеҙ төргәк обой һигеҙ төрлө ине.

– «Ҡояш төшкәнен һигеҙ рулон төр» тигәнемде һатыусы дөрөҫ аңламағандыр. – Зирәк Мәғәшиә ҡарсыҡ, ниҙер һиҙгәндәй, буяу банкаларына күҙ ташланы. – Ҡарт, быларҙың ҡапҡасын асып ҡарайыҡ әле.

Ҡарсыҡтың уйы дөрөҫкә сыҡты – ете банкалағы буяу ҙа ете төрлө: аҡ, зәңгәр, йәшел, көрән…

– Элек, банкаларҙың ҡапҡасына төҫөн белдереп, буяу тамыҙа торғайнылар. Быларҙың тамғалары ла, йәрлектәре лә юҡ. Һатыусы,

бахыр, бындай осраҡта ни эшләргә тейеш, – тип һөйләнде Нәүфил ҡарт. – Әлбиттә, хаталана.

– Тамғалары булған, осло нәмә менән ҡырғандар, мына эҙе беленеп тора. – Осҡор күҙле Мәғәшиә сыйылған урындарҙы күрһәтте.

– Дә–ә… – тиеүҙән уҙманы Нәүфил.

Ә киләйҙәр ике – өс йыл уҡ ғәмәлдән сыҡҡан икән, иҫкергәндәр.

Торлаҡтарын матурлауҙы күптән көткән, әммә көтөп–көтөп тә хәҙер төңөлөп бөткән ҡарттар, был нәмәләрҙе көскә күтәреп, магазинға кире алып барҙы.

Эштең ниҙәлеген һатыусы һүҙһеҙ ҙә аңланы: оялманы, аҡланманы, ҡысҡырып көлдө генә:

– Һеҙ етмеш процент ташлама менән ниҙәр алырға уйлағайнығыҙ?

– Телевизор һынлы телевизорҙан кеше башын бутайһығыҙ. – Мәғәшиә, бәхәстәрҙә биреше торғандарҙан түгел, телләшеүен дауам итте: – Реклама, имеш. Аҡсаны бир.

– Аҡылың алтын икән, ҡортҡа. Аҡса хужабыҙҙың кеҫәһендә. Һатҡан әйберҙәрҙе кире алмайбыҙ.

– Ҡустым, бер төҫлөләрен һайлап, алыштырайыҡ. – Әлегәсә ғорур һөйләшкән Нәүфил ҡарт инәлгәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

– Эҙләһәң дә, бер төҫлө буяу ҙа, обой ҙа тапмаҫһың, ундайҙар юҡ. – Һатыусы һүҙҙе ҡырт киҫте.

– Шул ҡәҙәре ҡалдыҡ–боҫтоҡто ҡайҙан килтерҙегеҙ? – Мәғәшиә ҡарсыҡ, сикһеҙ аптырап, бот сапты.

– Уныһы ниңә кәрәк? – Һатыусы ҡарттарҙы йәлләүҙән бигерәк, хәбәрҙе ҡуйыртмаҫҡа тырышып, өҫтәп ҡуйған булды: – Обойҙарҙың, буяуҙарҙың һәр партияһынан берәү–икәү генә ҡала торғас, нисәмә йылдар буйына тауҙай йыйылғайны, шуларҙы һатабыҙ.

– Ә ни өсөн… – Мәғәшиә һорауын бирергә өлгөрмәне, һатыусы аҡырып ебәрҙе:

– Марш бынан, күҙемә күренмәгеҙ! Юғиһә, хәҙер һаҡсы саҡырам! Ҡалдырмағыҙ быларҙы. – һатыусы обой тултырылған тоҡто, буяу банкаларын тибергә тотонмаһынмы…

Нәүфил менән Мәғәшиәгә, йөктәрен йөкмәп, сығып китеүҙән башҡа сара ҡалманы.

Сәй эсеп, аҙыраҡ хәл кергәс, Мәғәшиә бәйләмен ҡулына алды, Нәүфил, ғәҙәтенсә, телевизор тоҡандырҙы. Көр тауыш бүлмәне тултырҙы: «Көрсөккә ҡаҙаҡ ҡағығыҙ. Ремонт эшләп, кәйефегеҙҙе күтәрегеҙ. Ремонт өсөн кәрәк–яраҡтарҙы  етмеш процент ташлама менән һатабыҙ!»

Нәүфил ҡарт, йөрәген тотоп, ауыр көрһөндө лә йәһәт кенә телевизорҙы һүндерҙе…

## Кем ғәйепле?

Беҙҙең коллектив ҙур түгел: өс ҡатын–ҡыҙ менән өс ир–ат. Йәмғеһе алты кеше бәләкәй генә бүлмәлә эшләп ултырабыҙ. Агентствобыҙ төрлө рекламалар сығара. Мәшәҡәт муйындан, ҡайһы саҡтарҙа  өлгөрмәйбеҙ. Шуға хужабыҙ тағы бер хеҙмәткәр алды. Нисбәтебеҙ боҙолдо: хәҙер дүрт ҡатын–ҡыҙға өс ир–ат.  Йәшерен–батырыны юҡ: тығыҙ бүлмәбеҙ  тағы тарайҙы.

Әммә Гөлбиҙәк исемле яңы хеҙмәткәребеҙ шундай сибәр, шундай илгәҙәк – Хоҙай беҙгә ебәргән аҫыл бер бүләк. Шуға ла һис тарһынманыҡ. Юғиһә йомош менән килеүселәрҙең бәғзеһе:

– Бындай ҡыҫыҡҡа нисек түҙәһегеҙ? – тип  аптырай.

Әҙәп белмәүселәргә беҙҙең яуап һәр саҡ әҙер:

– Тарлыҡ һиҙмәйбеҙ: сөнки күңелдәребеҙ киң һәм широкий, – тибеҙ бер ауыҙҙан. Йәнәһе, шаяртабыҙ.

– Иң мөһиме: татыубыҙ, – тип өҫтәйем.

– Арабыҙҙан ел дә үтерлек түгел. – Йәзилә минең һүҙҙәремде йөпләргә ашыға.

– Ел генә тиһеңме, хатта ҡара бесәй ҙә, алабай эт тә яҡын килерлек түгел. – Иң өлкән хеҙмәткәребеҙ Шымморат ағайыбыҙ, ифрат шатланып, беҙҙең һүҙҙәрҙе күтәрмәләп ебәрә.

– В тесноте да не в обиде. – Ирма һеңлекәш тә һүҙгә ҡушыла. Ирманың ирмәк холҡона өйрәнеп бөткәнбеҙ: ауылдан яңыраҡ килгән сей башҡорт үҙе, күберәк урыҫса һөйләшергә тырыша.

Гөлбиҙәктең дә ҡылығы ҡыҙыҡ: абыныуҙан ҡурҡҡандай, аҫҡа ҡарап, һаҡ ҡына атлап йөрөй, беҙ уйнап–көлөп һөйләшкәндә, һүҙгә ҡыҫылмай, һирәк йылмая. Уның һапалығы, әлбиттә, ихтирамға лайыҡ. Ә ихтибарға килгәндә… тәүге көндәрҙән үк үҙенә йәлеп иткәйне инде. Һылыу, көйәҙ йәш ханым ғәләмәт зауыҡлы кейенеүе менән бөтәбеҙҙе лә, бигерәк тә ҡатын–ҡыҙҙы, шаҡ ҡатырҙы. Көн дә ҡиммәтле, затлы күлдәктә йә кәстүмдә килә бит был. Шуға ла ғәжәпләндек: бер кейгәнен  икенсегә киймәй. Мин, мәҫәлән, бер күлдәгемде йыл буйына йыуам да кейәм, тағы йыуам – тағы кейәм. Ирманың, исмаһам, ҡулы алтын: иҫке–моҫҡоно һүтә лә кофта, жакет бәйләп, өҫтөн бөтәйтә. Салбары ғына берәү, уныһы ла уңып бөткән. Шунан был ҡәҙәре әйбергә Гөлбиҙәк аҡсаны ҡайһылай еткерә икән тип, нисек  иҫең китмәһен.

Мөнисәбеҙ – шәп шымсы: ниндәй йомоҡтоң да ауыҙын астыра. Юхалана, йомаҡайлана, теле  телгә  йоҡмай тәтелдәй, асыҡ йөҙ күрһәтә, серәштең ете йоҙаҡҡа бикләгән серен тәки систерә. Оҫта ғына белешкән: Гөлбиҙәк  ире, балаһы, ҡәйнәһе барлығын һөйләгән. Был хәбәргә йәш ханымдың абруй–һиммәте тағы артып китте. Егәрле икән:  ир ҡарай, бала баға, ҡәйнә тәрбиәләй. Әйтәм дә, эш сәғәте тамамланмаҫ борон, йәһәт кенә ҡойроғон һыртҡа һала. Эшенә илке–һалҡы ҡарай тип, хәҙер ғәйепләмәйбеҙ: өйөндә өс кеше күҙ ҙә  ҡаш көтә бит уны.

Бер көндө Гөлбиҙәктең ҡәйнәһе вафат булып ҡуйҙы. Бәндәне һуңғы юлға оҙатыу мәшәҡәтле ғәмәл икәнен кем белмәй: йәш ҡатынҡай ҙа өс

көн эшкә сыҡманы. Ул юҡта беҙҙең татыу коллективта ғүмерҙә булмаған ғауға ҡупты.

– Гөлбиҙәктең иҫәпһеҙ аҡса тотоноуының ғилләһен таптым, шай… Моғайын, хужабыҙҙың һөйәркәһе ул… Хужала аҡса бер муҡса бит. Тимәк, Гөлбиҙәкте бүләккә күмә. Ҡатынҡайҙы күргән һайын ашарҙай итеп ҡарай, – Шымморат ағай, ҡалъя йотҡандай, ауыҙын шапылдатып, иренен ялап ҡуя.

– Уның йөрәк сирле икәнен, үҙенең хәләл бисәһе янына ла көскә ҡайтып еткәнен беләбеҙ бит, Шымморат Шымабаевич. Һулға йөрөргә һин түгел. – Зариф ҡустыбыҙ ҡапыл ярһып китмәһенме.

– Мулла бесәйе булып ҡыланаһың ғына икән, ошо йәшеңдә кәзә һуҡмағын тапарға нисек оялмайһың, ә?... – Мөнисә, күҙҙәрен зәһәр йызылдатып, Шымморат ағайға бармаҡ һелкә.

– Әл–лә–лә, оло кешегә нахаҡ бәйләнеп, эште олоға ебәрмәйек әле, йәмәғәт. – Ирма, ыҙғышты туҡтатырға теләптер, көсәнеп йылмая.

– Ирма апай, ауыҙыңды шул ҡәҙәре йырма. Һинең дә гонаһтарың барҙыр… – Арабыҙҙа тотанаҡлы һаналған Нәүис ирендәрен мыҫҡыллы салышайтты.

– Ире арҡаһында Гөлбиҙәк күбәләк кеүек кейенә. Тимәк, ире бик тырыш: етеш йәшәйҙәр. «Яҡшыға барған ялпайған, яманға тарыған ҡартайған» тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Ир ҡарамағас, ҡаҡ һөйәккә ҡалдым бит, – мин, үҙем дә һиҙмәҫтән, янбаштарыма ҡағылам.

– «Ялпайған» тигәнеңде, Нәҡиә апай, нисек аңларға? – Мөнисә шиксел ҡарашын миңә төбәгәйне.

– «Ялпайған», тимәк, ныҡ «һимергән», тимәк, күп ашай. – Мин, артыҡ һүҙ ысҡындырғанымды һиҙеп, тотлоҡтом.

– Нәҡиә апай, йыуанлығыма көнләшеп, ғүмерең уҙҙы. Ирҙәр эт түгел, һөйәккә алданмай. Минең ирем мине генә үлеп ярата. – Мөнисә, тондорорға теләгәндәй, ҡулдарын йоҙроҡлап, минең яҡҡа ынтылып ҡуйҙы.

Телемде тешләнем: хәбәрҙе артабан да ҡуйыртһам, әллә ниндәй хәлдәргә төшөүем бар.

– Гөлбиҙәк апайға хәҙер ҡыйын булыр инде, ҡәйнәһенең пенсия аҡсаһына кейенгәндер ул, – Зариф та фекерен әйтеп ҡалырға тырыша.

– Ҡустым, уйлап һөйләргә өйрән. Гөлбиҙәктең ҡиммәтле бер күлдәгенә ҡарсыҡтың айлыҡ пенсияһы етмәй. Моғайын, ире аҡсаны күп эшләйҙер, мал–мөлкәтте мул табалыр. Булдыҡлы ир менән генә бисәләр хәсрәтһеҙ йәшәй. – Мин, йәнә үҙем дә һиҙмәҫтән, уфтанып ҡуям.

– Һәпмәҫте. Бушты һөйләмә, Нәкиә. Тормош тотҡаһы бисәләрҙә. Эшкинмәгән бисәң аҡса тота белмәй икән, алып ҡайтҡан айлыҡ хеҙмәт хаҡыңды өс көндә тәләфләп бөтә икән, нисек иркен йәшәйһең... – Шымморат ағай ниңәлер Ирмаға ҡарап ҡуя. Һиҙгер Ирма унең ҡырын ҡарашын шәйләргә өлгөрә:

– Тимәк, абзыҡайым, ҡатыныңа өс көнлөк кенә аҡса бирәһең… Ә минең имгәгем бигерәк интектерә: аҡсаһын бөтөнләй күрһәтмәй, үҙе генә тотона. Тотоноп бөтә лә, аҡса һорап, башымды ҡаңғырта. Иренсәк ир менән донъя ҡотайтып булмай. – Әлегәсә белмәгәнбеҙ, Ирмабыҙ ҡыҙыу холоҡло икән, ҡулындағы ҡәләмен Шымморат ағайға елгәрҙе. Бәхеткә, унеһы һаман сос: ҡәләмдән тайшанып ҡотолдо. Ирманы аңлайым: иренә тәғәйен асыуын Шымморат ағайға төшөргәйне, бисара.

– Шымморат Шымабаевичтың һүҙҙәрен ҡеүәтләйем, тормоштоң насарлығына түлке бисәләр ғәйепле: эсәләр, тарталар, хыянат итәләр. – Нәүис, күҙҙәрен алартып, беҙгә, өс ҡатын–ҡыҙға, берәм–берәм ҡараны ла йән асыуы менән иҙәнгә төкөрҙө, – Тфү. Инәйҙәрегеҙҙең баштарын эт кимереп, һимерһен.

Шуны ғына көткән тиерһең, Зариф енләнеп бүлмә уртаһына сығып баҫты:

– Бер туған ағайым Минфара тигән бисураға өйләнеп, башына ғүмерлек яфа алды. Ағайымдың тапҡан–таянғанын шарап менән

папирос–сигаретҡа тәләфләп бөтә, кер йыумай, ашарға бешермәй, балаһы зәғиф тыуҙы. Меҫкен бәпесте әсәйем тәрбиәләй.

Мөнисә Зарифтың зарын тыңлап бөтмәне:

– Донъяның бөтә мәшәҡәте, бөтә ауырлығы минең елкәмдә: биш балам менән бер ҡайҙа ла эшләмәгән ирҙе аҫырау анһатмы. Аҡсаға тилмермәһәм, мин дә Гөлбиҙәк кеүек ни теләһәм, шуны кейеп, ни көҫәһәм, шуны ашап йәшәмәҫ инемме.. «Илле–алтмыш йыл татыу ғүмер кисерәләр» тип, маҡтап–ҡуптап, гәзиттәргә яҙалар, телевизорҙан йыр тапшыралар. Ғаилә башлығым һәйбәт булһа, мин йөҙ йыл йәшәргә ризамын. Ә ҡайҙа ундай кеше? Ау–у, һин ҡайҙаһың мине мәңге ҡәҙер итерлек һөйкөмлө йәр? – Күңеле күптән тулышҡандыр, бисараҡай, әрнеп–әсенеп буҙларға тотондо.

Эш ҡайғыһы китте, ҡара–ҡаршы баҫып, ярһып–ярһып әрләшәбеҙ:

– Бисәләр насар, бисәләр аҙғын, бисәләр ялҡау, – тип ҡысҡыра көслө заттар.

– Ирҙәр аҙғын, ирҙәр хәшәрәт, ирҙәр алама. – Беҙ, көсһөҙ заттар, тегеләрҙән арттырып аҡырабыҙ.

– Үткән быуатта донъябыҙ буталыуға ла бисәләр ғәйепле. Рәйсә апай арҡаһында хәйерсе хәленә төштөк. – Нәүис ҡусты, асыуын баҫырға тырышыптыр, ишекле–түрле йөрөргә тотона.

– Ил хәстәрен иңенә йөкмәргә көсө етмәгән ире ғәйепле. – Ирма Нәүискә артабан хәбәр сурытырға ирек бирмәй.

Эскеселәрҙең, эшлекһеҙҙәрҙең ишәйеүенә, ҡараусыһыҙ ҡарт–ҡоро менән ташландыҡ бала–сағаның артыуына, яңғыҙ ир–егеттәрҙең, ҡатын–ҡыҙҙарҙың күбәйеүенә, енәйәтселектең йәнә әллә күпме йәмһеҙ хәлдәрҙең һаман үҫеүенә кем ғәйепле икәнен, күпме әрепләшһәк тә, асыҡлай алманыҡ. Ир–ат ҡатын–ҡыҙҙы, беҙ ир–атты ғәйепләүҙән уҙманыҡ.

Йомоштары менән килеүселәр беҙгә таң ҡалып, ҡарап торалар ҙа шым ғына шылалар.

Тәмһеҙләнеү үҙенекен итте: эшкә килгәс, сәләмләшмәй ҙә ҡағыҙға текәләбеҙ, бер–беребеҙгә арыу һүҙ ҡушыу ҙа юҡ.

Ике–өс көндән Гөлбиҙәк эшкә сыҡты. Ҡәйнәһен юғалтыуға ҡайғырғанға һис оҡшамай: ғәҙәтенсә, биҙәнгән–төҙәнгән, ғәҙәтенсә... ғәләмәт матур кәстүм кейгән. Беҙҙең хәл–әхүәлде белмәйҙер, тыныс ҡиәфәттә урынына барып ултырҙы. Әммә мин ҡатынҡайҙың арҡаһында йәғни кәстүменең яғаһынан сығып торған йәрлекте күрергә өлгөрҙөм.

– Ҡайғы зиһенде ала шул... Гөлбиҙәк, кил яныма тиҙерәк, – тим.

Гөлбиҙәк эргәмә килеп баҫҡас, ҡайсы менән йәрлекте йәһәт кенә киҫтем дә ҡулына тотторҙом.

Рәхмәт әйтер урынға, Гөлбиҙәгебеҙ шар итеп ҡалмаһынмы:

– Бөлдөрҙөң!!! – тип асырғанып аҡырҙы ул. – Хәҙер нисек алыштырам инде...

– Нимәне алыштыраһың? – Был юлы барыбыҙ ҙа бер ауыҙҙан һораныҡ.

Гөлбиҙәк яуап бирмәне, Мөнисәгә күҙҙәрен яндырып бер ҡараны ла әйберҙәрен әлән–борхан йыйырға тотондо. Шунан, хатта хушлашмай ҙа, ишекте ҡаҡлыҡтыра ябып, сыҡты ла китте.

Барыбыҙ ҙа аңшайып Мөнисәгә төбәлдек. Уның сихри көскә эйә шымсы булыуын йәғни йомоҡтарҙың ете йоҙаҡҡа бикләнгән серҙәрен систереүен баюҡ әйткәйнем. Гөлбиҙәктең көн һайын зауыҡлы кейенеүенең ғилләһен дә һәйбәт белгән. «Сетерекле сер»ҙе тараҡҡан, тип уйлағандыр Гөлбиҙәк, юғиһә, әхирәтенә шул ҡәҙәре нәфрәтләнмәҫ ине. Хәҙер Мөнисәгә ғибрәтле хәлде һөйләргә тура килде. Шулай итеп, татыу коллективты сәғәт эсендә тарҡатырға көсө еткән сәбәп асыҡланды.

Гөлбиҙәк күлдәк–кәстүмдәрҙе шәхси кибеттәрҙән ала икән. Эшкә өр–яңы кейемдә килә. Эштән ҡайтырға сыҡҡас, бәҙрәфкә бикләнеп, сумкаһында йөрөткән үҙенең иҫке кейемдәрен кейгәс, тағы кибеткә йүгерә. Көн оҙоно кейеп йөрөгән кәстүмен йә күлдәген икенсегә алыштырырға. Эш сәғәте бөтмәҫ борон, нисек тә беҙҙән алдараҡ

һыпыртыуының хикмәте бына нимәлә булған. Шул шөғөлөн ул бик нык яратҡан: бер тапҡыр түләп алған әйберен икенсе көн бүтәнгә, өсөнсө көн тағы башҡаға алмаштыра. «Ғаиләм оҡшатманы» ти, бихисап төрлө һылтау таба. Ҡулында квитанцияһы, әйберҙә йәрлеге булғас, һатыусы ни хәл итһен, алыштырырға ризалаша.

Ҙур ҡалала кибеттәргә ҡытлыҡ юҡ, аҙым һайын улар. Барыһын урап сыҡҡансы апаруҡ ваҡыт үтә. Ул арала «береһе китә, береһе килә, береһе көтә», тигәндәй, кибеттәрҙә эшләгән һатыусылар ҙа алмашынып тора. Маршрутын яңынан башлаған Гөлбиҙәкте кем таныһын.

Ә бына был юлы йәрлекте йәшерергә онотҡан. Ҡапыл оятҡа ҡалды. Үҙе ғәрсел икән: эшкә бүтән сыҡманы.

Оҙаҡламай Шымморат Шымабаевичты пенсияға оҙаттыҡ. Ҡалғандарыбыҙ бер–беребеҙҙе осратмаҫлыҡ урындарға төрлө эшкә күсеп бөттөк.

Гөлбиҙәк иҫемә төшһә, мине биҙгәк тота: ҡайҙарҙа йөрөй икән ул, ниҙәр ҡыландыра икән?..

## Дөйә төкөргән

Хәҙер заманы шундай: нисек тә йүнен табып, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәр ишәйә. Афарин, тиергә кәрәк: эшләгән икмәк тешләгән, эшләмәгән – ни тешләгән…

Быйыл йәй ниндәй килде: эҫенән ерҙәр ярылды, йылғалар һайыҡты, ҡоҙоҡтарҙан һыу ҡасты, шишмәләр шиңде.

Серәште ауылы кешеһе Әлмийәрҙең дә сәскән бәрәңгеһе уңманы. Уйлана–уйлана Әлмийәр унда-бында ғына үҫкән кесерткән, тарма, шайтан таяғы тигән үләнде йыйҙы, һаҙлыҡтан күрән ташып өйҙө лә Ырымбур яҡтарына олаҡты. Аҙна-ун көн үтеүгә көплө машинала дөйә алып ҡайтты. Дөйәһен тәүҙә ышығыраҡ урында аҫыраны.

Яңы йыл алдынан ҡапҡаһына «Хайран хайуан күрергә рәхим итегеҙ!» тигән яҙыу элде. Әлбиттә, билет хаҡы ла күрһәтелгәйне.

Әлмийәрҙең: «Моғайын, кеше өҙөлмәҫ, килем яҡшы булыр» тигән юрауы юш килде: ысынлап та, Серәште ауылы халҡы уның йортона йышланы.

Ауылдарҙа быға булмаған «зоопарк» хаҡында район гәзите генә түгел, республика баҫмалары мәҡәләләр, һүрәтләмәләр, Әлмийәр менән әңгәмәләр баҫты, радионан һөйләнеләр, телевизорҙан да күрһәттеләр. Хәҙер инде тирә–яҡ ауылдарҙан, күрше райондарҙан халыҡ экскурсияға ағыла. Бала–саға күмәс–фәлән, ҡоймаҡ, бәлеш киҫәктәре менән дөйәне һыйлай. Ғәжәйеп хайуандың ашағанын тамаша ҡылып, кинәнәләр, сәпәкәй итәләр. Барыһы ла шат. Тик Ғәйрәтулла, Әлмийәрҙең бер туған ҡустыһы, ағаһының анһат ҡына кеҫә ҡалынайтыуына аяуһыҙ ҡайғырҙы, ашауҙан яҙҙы, йоҡоһо ҡасты. «Ҡара ҡайғымды баҫам» тигән һылтау менән күберәк эсте. «Атай, Яңы йылға бүләгең шул булыр – дөйә күрһәт. Алып бар мине Әлмийәр бабайға. Бәләкәй балаларының үҙҙәрен генә «зоопарка» керетмәйҙәр» тип мыжыған алты йәшлек улын бәреп осорорҙай саҡтары йышайҙы.

– Яңы йылға Әлимдең атаһы велосипед, Фәнистең атаһы тун бүләк иткән. Миңә дөйә күрһәтһәң дә еткән… – Малайы һаман ныҡышты.

– Аҡсам юҡ. Башты нисек төҙәтергә белмәйем. Тартырыма ла бөткән. Әсәйең алып барһын, – тип екерҙе ул берҙән–бер балаһына.

– Әсәйемдең эштән бушамағанын беләһең дә… – Малай иларға етешкәйне. – Әсәйем аҡса ҡалдырҙы. «Атайыңды ирмәк күрергә күндер. Ошо бәрәмәсте атайың ашатһын, һинең дөйә ауыҙына буйың етмәҫ», – тине.

«Ер аяғы – ер башына юлланырға түгел – ауылдың үрге осонда ғына бит. Эх, йәл билеткә китәсәк аҡса… Быны нисә яртылыҡ аҡса әрәм буласаҡ…» – Ғәйрәтулла, ыңғырлаһа ла, улын хайран хайуанды күрһәтергә йайлап ризалашты.

Баҡса уртаһында, махсус кәртәләнгән урында, Әлмийәр дөйәгә тәғәйен аран эшләп ҡуйған. Һыуыҡ саҡта мөғжизәүи мәхлүк шунда керә, тиҙәр.

Ғәйрәтулла ирендәрен салышайтты – дөйә тигәне бигерәк иләмһеҙ икән: байғош, ике үркәсен үрә күтәреп, бәләкәс башын сөйөп, харап тәкәббер ҡиәфәттә көйшәнеп торған була.

Ғәйрәтулла, кеҫәһенән бәрәмәс алып, дөйәгә һондо. Хайуанҡай ризыҡҡа иғтибар итмәне, Ғәйрәтуллаға ғәләмәт һауалы ҡарап, көйшәүен дауам итте. Унан ҡапыл Ғәйрәтулланың йөҙөнә төкөрҙө. Быңдай хәлде һис көтмәгән ирекәй шаңҡыны, хатта секунд эсендә айныны: бөтә битен ҡаплаған ҡуйы төкөрөктө бүрек ишараты менән һөртөргә тотондо. Берәй таяҡ табып, дөйәгә тондорорға ниәтләнеп, тирә–яғына аланданы, шул саҡта мәхлүктең йәнә көйшәүен шәйләне. Тамашаға иҫе китеп ҡарап торған улын да онотоп, Ғәйрәтулла ҡапҡаға ташланды. Ә иләмһеҙ хайуан уға эйәрҙе, арҡаһына тағы төкөрөргә өлгөрҙө. Ирекәй ауылдың түбәнге осона, ҡыйшайған ҡыйыҡлы өйөнә табан һыпыртыуын белде. Дөйә уның артынан ҡалманы. Нисек кенә тырышып йүгермәһен, Ғәйрәтулла ырата алмай. Ә һәлмәк кенә һәлпәндәгән дөйәнең аяҡтары былай–алаймы, һаман етеп килә.

Ғәйрәтулла яртылаш емерек, тәпәш кенә ҡапҡаһы аша ихатаһына һикерҙе, күҙ асып йомғансы солан ишегенең келәһен бикләне. Солан таҡталары ярығынан күҙәтә был: теге ғифрит ишекте ватып керер ҙә уны иҙеп ташлар кеүек. Бәхеткә, Әлмийәр ҡатыны Әлмирә менән килеп етте. Мәлғүн малды алып ҡайтып киттеләр.

Бер аҙҙан Әлмирә Ғәйрәтулланың күп илауҙан күҙҙәре шешенгән улын етәкләп килтерҙе. Аяуһыҙ ҡурҡҡан ирҙән соланды саҡ астырып, баланы тапшырҙы.

Кисен эштән ҡайтҡан әсәһенә малай ошо хәлдәрҙе түкмәй–сәсмәй һөйләне.

Ғәйнәфә, Ғәйрәтулланың ҡатыны, балаһының хәбәренә таң ҡалды, нимә хаҡындалыр уйланып йөрөнө…

– Араҡы менән тәмәке ҡушылған уҡшытҡыс еҫкә дөйәнең дөйәһе түҙмәгән, төкөргән бит үҙеңә. Әгәр ҙә түшәгемә яҡын килһәң, мин дә йөҙөңә ласҡылдатып төкөрәм, – тине ярһыған ҡатыны бик әсенеп.

Башын баҫып, Ғәйрәтулла өйҙән сығып китте лә туп–тура Баһар ҡортҡаға йүнәлде. «Берәй эшеңде эшләрмен» тип, Баһар ҡарсыҡтан үтескә аҡса алды…

Яңы йылды кемдә, нисек ҡаршылағанын, өйөнә ҡасан ҡайтҡанын хәтерләмәй Ғәйрәтулла. Уянып киткәс, ҡайҙа ятҡанын аңламай, тирә–йүнгә күҙ йүгертте.

Ҡатыны һүҙендә торған: түшәгенә яҡын ебәрмәгән – урынды ишек төбөндәге раскладушкаға һалған. «Төкөрҙөмө икән, юҡмы икән?» – тип баш ватты ир ишараты.

– Бынан кире йоҡлар урының гел шунда булыр. – Ир йоратының аптырап ултырғанын күргән Ғәйнәфәнең фарманы ифрат ҡәтғи ине.

Оҙаҡламай Серәште ауылында шундай хәбәр таралды: «Йәй еткәс тә дөйәғош алып ҡайтам: ағайым дөйәһенән төкөрттө, мин дөйәғоштоң ҡойроҡ аҫтын күрһәтәм,»– тип Ғәйрәтулла яман ғәйрәтләнә, бик ҡәһәтләнә икән. Ниәтен ул нисек атҡарыр, уныһын әлегә белмәйбеҙ.

## Шыршылар

Элек ифрат татыу, бер–береһе өсөн өҙөлөп торған ут күршеләр Нәүфәл менән Әнфәл быйыл эт менән бесәйҙән былайыраҡ дошманлашты ла ҡуйҙы. Сәләмләшеү түгел бер–береһен күрмәмеш булырға ғәҙәтләнделәр. Хәлдәре хөрт инде, хөрт. Тәмһеҙләшеүҙәренең сәбәбе ябайҙан түгел.

«Йылдың ҡоро килеүенә көйәм» тип, «шайтан һыуын» ифрат күп эскән Нәүфәл тапшырырға йыйған араҡы шешәләренең юғалыуын Әнфәлдән күрҙе: «уның ғына эше», тип уйланы.

«Эҫегә сыҙамайым» тигән һылтау менән кәнсирле һыраны самаһыҙ һемергән Әнфәл: «Буш кәнсирҙәремде Нәүфәл сәлдерә лә тапшырып, баш төҙәтә», тип күршеһен ғәйепләне.

Нәүфәлдең улы Мәснәүи менән Әнфәлдең Ҡәүи исемле малайҙары атайҙарының боларышып–ғауғалашып йөрөүҙәренә тамсы ла иғтибар итмәне: йәй буйына балыҡҡа бергә йөрөнөләр, серләштеләр, көлөштөләр…

Яңы йылдың тәүге көнөндә ике күрше урамда осрашты. Бына бер хикмәт: икеһе лә бер–береһен бүлә–бүлә сәләмләште, хәл–әхүәл белеште, байрам менән ҡотланы.

– Әнфәл годук, һинән ғәфү үтенергә өйөңә барырмын, тип йөрөй инем әле. Мин бит йыйған урындан юғалып торған шешәләремде һин урлай, тип уйлағайным. Ғәфү ит, годук. Хәҙерге балалар башлы бит: минең Мәснәүи араҡының буш шешәләренән шыршы эшләп ҡуйған. Әле ихатаға сыҡһам, шаҡ ҡаттым. Күҙемә күренәлер, тим. Иҫем китте…

– Йә, йә шыршыны нисек эшләгән? – Әнфәлдең сырайына йылмайыу йүгерҙе.

– Ҡабаландырма. Килештереп теҙгән шилма малай. Нәҡ шыршы һымаҡ: конус формаһында, олоно бар, ботаҡтары ла бына тигән! Тәүҙә шикләнә–шөбһәләнә генә һәрмәштерҙем, шунан тотоп, унан ҡағып–һуғып ҡараным, – Нәүфәл күкрәген кирҙе.

– Таралманымы? – Әнфәл алаптай ауыҙын ҡолағына еткәнсе йырғайны.

– Һин, годук, нитмә, ыржайма. Мунса нигеҙен нығытырмын тип алған цемент нисәмә йыл соланда ятты, шуның менән шешәләрҙең араһын бик оҫта нығытҡан. Саҡ ҡына ла цемент табы юҡ: шешәләр ялт итеп тора. Таралманымы, тиһең, уны емереү ҙә мәшәҡәтле буласаҡ. Ярҙам

итерһең, годук. Шилманың да шилмаһы был Мәснәүи, шешәләремдең йәшел төҫтәгеләрен генә һайлап йәшергән. Һинең хәлдәр нисек? – Нәүфәл күршеһенә текәлде.

– Һинекенә оҡшаш. Яңы йылды ҡатын менән күрше ауылдағы ҡыҙыбыҙҙа ҡаршыланыҡ. Кейәү килтереп ҡуйҙы.

Өйгә керһәк, бүлмә уртаһында торған ғәләмәт бер нәмә күреп, аптырауҙан сигенә еттек. Йылтыр ҡалайҙар нәҡ шыршы һымаҡ эшләнгән. Осо конус формаһында, сатырлы бит әле. Төрлө төҫтәге шарҙар эленгән.

– Ике малайҙың эше бер иш бит, әй… – Әнфәл башын сайҡаны.

– Ҡәүи цементты беҙҙән алғандыр? – Нәүфәл күршеһенә тексәйҙе.

– Цементтың әҫәре лә юҡ. Ҡәүи кәнсирҙәрҙе суперкеләй менән йәбештергән. – Әнфәлдең тауышы тантаналы яңғыраны.

– Ҡалай кәнсир шешә түгел: ыуалмай. Ҡутарғанда шулай ҙа йәмшәйер. Йәмшәйһә лә, исмаһам, тапшырып була: һин отолманың. Ә мына Мәснәүи мине тишек шүмәнгә ултыртты. Дә–ә, ни ҡәҙәре аҡсамды әрәм итте шилма малай. – Нәүфәл тәрән көрһөндө.

– Был ҡәҙәрегә нисек баштары еткән? – Әнфәл, ғәҙәтенсә, башын сайҡаны.

– Телевизор өйрәтә. Мәснәүиҙең: «Ниндәйҙер сит илдә бер хәйерсе, шешәләр йыйып, өй төҙөп кергән» тип йөрөгәне әле генә иҫемә төштө. Күңеленә һалып, нығытып ҡуйған икән шилма малай. – Нәүфәл көсәнеп йылмайҙы.

– Минең бисә: «Яһалма шыршы алайыҡ: үҙе еңел, ылыҫы ҡойолмай. Ипләп тотонғанда беҙ үлгәнсе, балалар ҡартайғансы етәсәк», ти. Һин ни тиерһең? – Әнфәл, ғәҙәтенсә, ихлас йылмайҙы.

– Годук, бисәң дөрөҫ кәңәш биргән. Былтыр лесопосадканан алып ҡайтҡанда, урман ҡарауылсыһы Усман тотто бит мине – штраф сәпәне. Штрафты һаман түләй алмайым, – Нәүфәл йәнә ауыр көрһөндө.

– Шулай, күрше, ахырызаман балалары тағы әллә ниҙәр уйлап тапҡансы яһалма шыршылар алайыҡ та бәләләрҙән ҡотолайыҡ. – Әнфәл, бик сетерекле эштең осона сыҡҡандай, еңел тын алды.

## Аҙаплы юл

Ғәйнәфә ҡарсыҡ, ҡартына бер килке ҡарап торҙо ла икеләнеүен еңеп, һүҙ башланы:

– Әмәлетдин, соланда нисәмә тоҡ симешкә тора, ҡалаға алып барып, һатырға кәрәк.

– Ир башым менән симешкә һатып ултырырға башыма тай типмәгән әле. – Әмәлетдин ҡарт һаҡалын һыйпаны.

– Ир ни, бисә ни – хәҙер донъя буталған. Телевизорҙан күрәбеҙ бит: ауыҙҙарын ҡыҙылға буяп, бисәләр күлдәге кейеп, яулыҡ ябынып, күпме ир әртис кәмит күрһәтә, аҡса эшләй.

– Симешкә һаттырып, мине лә кәмитсе итмәксеһең инде, ә... – Әмәлетдин ҡапыл ҡыҙып китте.

– Кәмитсе түгел, кәрмилсем бит һин: күҙ терәгәнем, таянысым, – ҡартының яман ҡарашын күрмәгән кеше булып, Ғәйнәфә ҡарсыҡ хәбәрен икенсегә борҙо, – ауыл ерендә резина итек–калушһыҙ йәшәп булмай. «Өфөнөң күмәртәләп һатыу базаларында шулар ифрат осһоҙ икән: калуштар йөҙ, итектәр йөҙ илле һум тора» тиҙәр. Байзәһәрҙең бисәһе Йәүирә менән бишләтә арттырып һатырбыҙ. Йәй етте: талашып алырҙар. Хәтһеҙ аҡса булыр. Әйткәндәй, Байзәһәр менән бергә йөрөгөҙ. Ул иҫәп–хисапҡа шәп.

Шул саҡ йәлпелдәп Йәүирә килеп инде:

– Әле симешкә ҡыҙҙыра инек. Әҙерләнәләрме икән тип, Байзәһәр белешергә ебәрҙе. Күршебеҙ Малик менән һөйләште Байзәһәр. Пенсиә килергә аҙна–ун көн бар. Ҡалаға алып барғанына, алып ҡайтҡанына симешкә аҡсаһы менән иҫәпләшергә килештеләр.

– Улай икән... Байзәһәр ҙә ризалашҡас, иртәгәнән ҡалмай, ҡуҙғалырбыҙ, – Әмәлетдин яйлап ыҡҡа килде.

...Ғәйнәфә ҡарсыҡ ҡарты менән төнө буйы көнбағыш ҡыҙҙырҙы.

Таксист Малик һары таңдан ҡарттарҙы ҡалаға алып китте.

– Шәһәрҙең нәҡ үҙәгенә алып бар, кеше күп йөрөгән ергә, – тип бойорҙо Әмәлетдин.

Малик ауылдаштарын ҡала урамдарының береһендә ҡалдырҙы ла, аҙаҡ килеп алырға һүҙ биреп, йомош–юлына китеп тә барҙы.

Һәйбәт ҡурылған, тос емле, эре көнбағышты сират тороп алдылар.

Юл уңһа, уңа ла ҡуя: төш етеүгә тоҡтарҙағы көнбағыш һатылып бөтә яҙҙы. Әммә ...ҡарттарҙы ҡапыл әзмәүерҙәр уратып алды.

– Тинен дә ҡалдырмай, аҡсағыҙҙы ошонда һалығыҙ. Тиҙ булығыҙ. – Битен тотош ҡара һаҡал баҫҡан кеше пакет һондо.

– Иғәнә йыяһығыҙмы, мәсет һалдыраһығыҙмы? – Әмәлетдин уға мыҫҡыллы текәлде.

– Телеңә күп һалышһаң, «мәсетте» мин һиңә шундай итеп һалырмын, өс көндән өсөңдө уҡырҙар. – Бынаһы Әмәлетдингә ҡунып бара.

Ҡара һаҡал янындағы һонтор бәндә усын асты:

– Ошоноң көсөн татығанығыҙ бармы? Күп һөйләнһәгеҙ, хәҙер тәмләтәм.

– Кәстит... – Байзәһәр ағарынды.

Шулай итеп, күҙ менән ҡаш араһында өс асарбаҡ бөтә аҡсаны алып китте.

Ҡалған көнбағышты һатып бөтөүгә эргәләрендә полиция килеп баҫты. Уны күргәс, ҡарттар ярышып зарланырға тотондо:

– Ҡустым, бында беҙҙең хәлдәр бик насар.

– Иртәрәк килһәң, беҙҙе таларға өлгөрмәҫтәр ине.

Мыҡты кәүҙәле, мыйыҡлы ир ҡарттарҙың һүҙен бүлде:

– Бисәләргә оҡшап, сыуылдашмағыҙ әле. Тейешһеҙ урында симешкә һатҡанығыҙ өсөн һеҙҙән берәр мең һум штраф.

Ҡарттар шаҡ ҡатты.

– Тәүләп килеүебеҙ. Ауылдыҡылар бит беҙ. – Байзәһәр аҡланырға тотондо.

– Мә, симешкә ал, бушлай бирәбеҙ, күстәнәс булһын. – Әмәлетдин, штраф түләмәҫкә әмәле сыҡты, тип ҡыуанды, ахыры, йөҙө яҡтырып, кеҫәһенән бер ус көнбағыш сығарҙы.

– Уңайһыҙланма, ҡустым, ал, сиртеп йөрөрһөң. – Байзәһәр ҙә һүҙгә ҡушылды.

– Мыҫҡыллайһығыҙмы... Ә мин шундай итеп «сиртермен» – ғүмер буйына онотмаҫһығыҙ. Хәҙер икегеҙҙе лә ябып ҡуям! – тип аҡырҙы тәртип һаҡлаусы.

Кемдең рәшәткә артына эләккеһе килһен, ҡарттар йәһәт кенә һуңғы аҡсаларын һондолар, шулай итеп, ҙур бәләнән ҡотолдолар.

Оҙаҡламай Маликтың машинаһы күренде.

– Йылдамыраҡ ҡыймылдағыҙ: Ғәйнәфә апай менән Йәүирә апай базаға инеп, калуш–итектәр алырға ҡушҡайны бит, өлгөрәйек. 8 Март байрамына ҡарсыҡтарыбыҙға бүләктәр ҙә ҡарарбыҙ, тигәйнегеҙ. Бүләк һайларға ла хәтһеҙ ваҡыт кәрәк.

– Ниндәй 8 Март. Ниндәй бүләк, ти, ул. Аҙаплы юлға сыҡҡанбыҙ икән… – Башы ҡаңғырған Әмәлетдин ҡарт үрһәләнде.

– Ҡустым, базаларға бармайбыҙ, тура ауылға һыпырт. – Байзәһәр ҡулын ауыл яғына һелтәне.

Әмәлетдин тәрән көрһөндө лә нисек таланыуҙарын тәфсилләп һөйләне:

– Йә инде, һиңә түләрлек тә аҡса ҡалманы… – тине ул, ифрат уңайһыҙланып.

– Ҡайғырмағыҙ, пенсиәләрегеҙҙе алғас, түләрһегеҙ, – Малик ҡара көйгән ҡарттарҙы тынысландырырға тырышты…

## Саманы оноткан

Рәфис Тәбрисов йылдың һәр миҙгелендә арымай–талмай ауылдаштарының йорттарын ифрат матур биҙәктәр менән семәрләп, һырлап биҙәй ҙә йәненә йәм таба. «Эшләгән – әпәкәй тешләгән» тиҙәр, ошо шөғөлө менән аҡсаға мулыҡты: дан машина, ағас эшкәртергә ҡиммәтле станок, бүтән ҡорамалдар алып ебәрҙе, хан һарайы һымаҡ йорт һалып керҙе.

Нәжәғәй ауылының үрге осонда йәшәгән Фирҙәт тә, өйөн төҙөп бөткәс, биҙәү эштәрен тик Рәфистән эшләтергә ниәтләгәйне. Янына Сәхиәһен саҡырҙы:

– Тел тигәндә телеп һалаһың, – тип башланы хәбәрен Фирҙәт, – Рәфискә арыу һүҙеңде йәлләмә, маҡта, һине өйрәтергә кәрәкмәй – ҡойоп ҡуйған дипломатһың.

Сәхиә иренең ышанысын аҡларға булды – шунда уҡ Рәфис оҫтаның йортона юлланды.

Оҫта ең һыҙғанып, тәҙрә ҡапҡастарына биҙәктәр ырып эшләй ине.

– Һаумы, ҡустым. Алла ярҙамдар бирһен – ырамлы барһын эштәрең. – Сәхиә ихлас сәләмләште.

– Рәхмәт, апай, теләктәрең ҡабул булһын. Йортоғоҙҙо төҙөп тә бөттөгөҙмө? – Рәфис көләмһерәне.

– Белеп тораһың…

– Белеп торам, көтөп торам, йыш ҡына ҡурҡып торам. – Оҫта уйынсалап һамаҡланы. – Һеҙҙең дә өйөгөҙҙө һалып бөткәнегеҙҙе ишеткәйнем. Өлгөрөп булмай, апай, заказдар күп. Был арала ял төҫөн күргәнем юҡ. Бына сиратҡа яҙылғандарҙың исемлеге. – Ул, маңлай тирен ҡул һырты менән һыпыра–һыпыра, туҙып бөткән дәфтәр һондо.

«Йомошомдо тыңламаҫҡа алдан алып тора бит был…» – Сәхиә, көйөнөүен нисек тә һиҙҙермәҫкә тырышып, йылмайған булды.

– И–и–и, ҡустым, бирешә торғандарҙан түгелһең. Һиңә эш сыҙаймы: барыһына ла өлгөрөрһөң, заказдарыңды эшләп бөтөрһөң. Һай–һай, мынау биҙәктәрҙең матурлығы! Боронғо Ҡөрьән китаптарында ғына осрай мындайҙар…

– Ҡөрьәндән биҙәктәр күсергәнем юҡ. Күсерергә ярамай, гөнаһы ҙур булыр. Барыһын да үҙем эшләйем, апай.

– Шулай шул, Рәфис ҡустым, ысын ижадсы бит һин. Хаҡ Тәғәлә һирәктәргә генә бүләк итә бындай һәләтте, шуны беләһеңме?

– Әлләсе… Уны–быны уйлаған юҡ.

– Уйламайһыңдыр. Уйланырға ваҡытың да юҡтыр инде. Бындай биҙәктәрҙе бик һәләтле рәссамдар ғына төшөрә ала. Һәр биҙәгең күҙ яуын алып тора. Йәнә шуны ла әйтәйем: рәссам ғына ла түгел, композитор ҙа һин. Таҡтаны ла тик үҙеңсә бысаһың. Бысҡың, зыңлап–зыңғырлап, скрипка тауыштарын сығара: зың–зың–ң…зың–ң–зың–ң. әлегәсә ишетмәгән моң бит был – тот та йыр яҙ.

Ҡаҙаҡ ҡағыуҙарың да икенсе: бейегәндә итектәрҙең еҙ үксәләре бер–береһенә тейеп–тейеп алған һымаҡ. Әлегәсә шәйләмәгәнһең икән, хәҙер ҡаҙағыңды ҡаҡҡан һайын диҡҡәт менән тыңла: тыҡ–тыҡ… дыңҡ–дыңҡ…былай итеп бераү ҙә ҡаҙаҡ ҡаға белмәй. – Күҙҙәрен йомоп, ифрат хисләнеп, бер туҡтауһыҙ татылдаған Сәхиәне «һы–ы» тигән ауаз иҫенә килтерҙе.

Ифрат ғәжәпләнгән Рәфис яйлап һушын йыйҙы.

– Эшемде оҡшаталар, хуплайҙар ҙа. Әммә, апай, былай ҙа күктәргә күтәргәндрҙе күргәнем, был тиклем дә оло һүҙҙәрҙе ишеткәнем булманы. Рәссам, композитор… Бер кешегә күп түгелме?

– Күп түгеллеген эштәрең иҫбатлай. Юғары зауыҡ, зирәк зиһен. Тәрән хис–тойғо, күңел һиҙгерлеге – рәссамдарға, композиторҙарға, шағирҙарға нәҡ ошо сифаттар хас. Шуларҙың бөтәһе лә һиндә бар.

– Апай, мин дә шиғыр яҙа аламмы?

– Һин дә яҙмағас, кем яҙа уны. Тотон ғына, ҡустым, дан шиғырҙар яҙасаҡһың.

– Һы–ы…Шаштыраһың бит, Сәхиә апай. – Рәфис һаман ғәжәпләнә, һаман иҫе китә.

– Һис шаштырмайым, ҡустым, дөрөҫөн генә, тейәрен генә әйтәм.

– Китапса һөйләйһең, апай. Хәҙер йомошоңдо әйт.

– Йорттоң биҙәү, һырлау эштәрен тиҙерәк бөтөрөргә ине. Хаҡына тормабыҙ. Сиратҡа яҙма инде, оҙаҡҡа һуҙылыр. Сиратһыҙ ғына…

– Ярай, апай, кәрниздәрҙең, тәҙрә ҡапҡастарының үлсәмен алырға ике–өс көндән барырмын, көтөгөҙ.

…Фирҙәт менән Сәхиә ике–өс көн  түгел, айға яҡын көттө – оҫта килмәне. Ни уйларға ла белмәгәс, икәүләшеп Рәфискә киттеләр.

Бәй, Сәхиә ни күрә: таҡта–тоҡта, балта–бысҡы, башҡа ҡорамалдар элек килгәнендә нисек һалынғайны – шул килеш ята. Сәхиәнең хәтере шәп: «Бына тигән шпион булыр инең» – тип юҡтан ғына маҡтамай бит уны Фирҙәте.

Тимәк, Сәхиә ҡайтып киткәс, Рәфис оҫта быларҙы ҡулына ла алмаған…

– Рәфисте көтмәгеҙ, ул тиҙ генә ҡайтмаҫ әле. – Сәхиә менән Фирҙәт янында оҫтаның ҡатыны тора ине.

– Ҡайҙа китте? – Ифрат ҡаушауҙан Сәхиәнең тауышы ҡалтыранды.

– Һыу буйында шиғыр яҙыр өсөн илһам эҙләп йөрөй. Аҙаҡ, төштән һуң, киндергә һүрәт төшөрә. Шунан таңға тиклем йә соланда, йә мунсала баян уйнай. Баяндың еллеһен һатып алды. Килем килтергән эшенән кинәт кенә биҙҙе лә ҡуйҙы. Хәҙер аҡсаһыҙ интегәбеҙ. – Ҡатынҡай, Сәхиәгә ҡырын–мырын күҙ төшөрөп, тәрән көрһөндө.

– Шиғырҙы күп яҙҙымы? – Сәхиә, сикһеҙ ғәжәпләнеп, оҫтаның хәләл ефетенә ҡараны.

– Иртәнән төшкә ҡәҙәр ағын һыуҙы күҙәтеп, аҡ ҡағыҙға текәлеп ултырһа ла, башына бер юл да килмәй икән.

– Киндерҙәрен күрһәт, нимәләр төшөргән?

– Һәр өйҙөң ҡапҡаларына үҙе элек яһаған аҡҡош, күгәрсен, бал ҡорттары, айыу, ҡуян һүрәттәренең күсермәләре инде – уларҙың нимәһен ҡарайһың…

– Баянда яңы көйҙәрҙе – үҙе ижад иткәндәрҙе – уйнайҙыр?

– Интегә торғас, «Әпипә»не дөрөҫ уйнай башланы. – Ҡатынҡай, ҡапыл ҡырт боролоп, өйөнә табан китте.

– Нимәләр сурыҡҡайның? – Аптыранған Фирҙәттең төҫө ҡасҡайны.

– Үҙең ҡуштың да ҡустыны ҡупайтырға. Тырышып–тырышып маҡтағайным шул. Былай булырын кем белгән…

## Ҡалмайым ҡалағыҙҙа

Әлиәһен, оло ҡыҙын, бик һағынды Лилиә. Йәшелсә баҡсаһында йәшел һуған өҙөп йөрөгәнендә лә балаһы уйынан сыҡманы. Әлиә һирәк ҡайта тыуған ауылына. Эштән бушамайҙар. Кейәү ҙә егәрле, сос – торлаҡ булдырырға юлын тапҡан: «ипәтикә» тигән нәмәгә Өфөнөң нәҡ уртаһында төҙөлгән матур йорттан квартира алғандар. Ипәтикәне ипләп кенә түләп барһалар, үткән ғүмер һиҙелмәй, бурыстан арыныуҙарын белмәй ҙә ҡалырҙар.

Ҡапыл артта кемдер хихылданы. Лилиә, яман тертләп, боролоп ҡараһа, Нурзиәһе икән. Нурзиә – Лилиәнең кинйәкәйе – тыуған ауылында оя ҡорҙо.

– Ниңә шым ғына килеп баҫтың? – тип аптыраны Лилиә.

– Баянан бирле ҡарап торам һиңә, әсәй, шул ҡәҙәре тәрән уйға сумғанһың, тамаҡ ҡырам – ишетмәйһең дә.

– Әлиә апайыңды ифрат һағындым.

– Апайым менән еҙнәм һине ҡунаҡҡа саҡырып арынылар бит инде. Үпкәләнеләр ҙә шикелле. Бәй, донъяларын күрһәтеп, һине

шатландырырға теләйҙәр. Моңайып йөрөгәнсе, әйҙә, юллан Өфөгә, йәмле йәйҙә ҡунаҡ булырһың.

– Әлләсе… – Лилиә һаман икеләнде. – Әлиәләр эшкә киткәс, яңғыҙым нимәштәп ғүмер уҙғарырмын икән.

– Ҡала ҡатындары эшһеҙлеккә һис зарланмай. Подъезд алдындағы эскәмйәгә ултыралар ҙа һөйләшәләр–серләшәләр – ваҡыт үткәнен дә һиҙмәйҙәр икән. Донъя күреп, ҡала ҡатындарынан мәҙәниәт, мәғрифәт, сәнғәт, сәйәсәт хаҡында гәпләшеп, фекер офоғоң киңәйеп, рухи яҡтан байып ҡайтырһың, әсәй.

«Димсе диңгеҙ кистерә», тигәндәре дөрөҫ: Нурзиәһенең өгөтөнә яйлап ризалашты Лилиә. Ҡыҙына шылтыратыуы булды – Әлиәләр уны машина менән килеп алдылар.

Лилиә Өфө ҡалаһының матур, ҡыҙыҡлы ерҙәрен тамаша итте: ҡыҙы менән кейәүе музейҙарҙы, бүтән күркәм урындарҙы күрһәттеләр, Салауат Юлаев һәйкәлен ҡаранылар, ундағы фонтан янында фотоға төштөләр.

Икенсе көндө Әлиә йорт алдындағы эскәмйәлә турғайҙар һымаҡ теҙелешеп ултырған бисә–сәсә эргәһенә ҡунағын килтерҙе:

– Был минең ҡәҙерле әсәйем, – тип таныштырҙы ул.– Рәхәтләнеп һөйләшегеҙ. – Әсәһенең кеҫәһенә квартира асҡысын һалды ла ҡабаланып эшенә йүгерҙе.

Ханымдар, Лилиәне хөрмәтләп, урталарына ултыртты. Яңы кешенең ҡайһы райондан булыуын, ғаилә хәлен, нисә һум пенсия алыуын һоранылар. Һәм, ғөмүмән, үҙҙәренә кәрәкле бихисап мәғлүмәт алыуға подъездан ыҫпай кейемле, ыҡсым кәүҙәле ҡатын сыҡты.

– Хәйерле иртә. – тип сәләмләшкәс, юл ҡырында торған күк төҫтәге машинаға йүнәлде. Үҙе йөрөтә икән, ултырып китеп тә барҙы.

– Иртәләр мына шундай шилмаларға ғына хәйерле. Ришүәт менән байыҡты, теш ҡуямы, теш һурамы – клиенттың аҡсаһын бишләтә артыҡ ала. Хәҙер, әнә, үҙендә, ирендә, туғыҙынсы синыфта уҡыған улында – фартауай лифкауай. Белеп ҡуй, Лилиә, һеҙҙең ҡаршылағы ҡырҡ өсөнсө

квартира ошо ҡылйыуғыстыҡы… – Сиғанға оҡшаған ҡарасман ҡарсыҡ хәбәрен осларға өлгөрмәне, полиция формаһы кейгән, мыҡты кәүҙәле, ҡара мыйыҡлы, урта йәштәрҙәге кеше күренде лә:

– Һо–о, минең тоғро апайҙарым, минең тырыш ярҙамсыларым, һаумыһығыҙ, – тип, етди ҡараш ташлап, көләмһерәп ҡуйҙы. – Барығыҙ ҙа теүәлмеһегеҙ, прогул яһаусы юҡмы? – тип һорашҡас, яуап көтөп торманы, ары атланы.

Тәртип һаҡсыһы күҙҙән юғалмаҫ борон, Лилиәнең һул яғында ултырған ҡарсыҡ һүҙ башланы:

– Үсен алып маташыуы… «Минең тоғро апайҙарым» тип, алъюҫыҡҡа әйтә тиһеңме… Ҡатынын Ҡара диңгеҙ буйына ялға оҙатты ла көн һайын төрлө бисәләр алып ҡайтмаһынмы… Һиҙҙермәй генә һөйәркәләрен фотоға төшөрҙөк.

– Шунан? – Лилиә, сикһеҙ ғәжәпләнеп, әңгәмәсенең күҙҙәренә ҡараны.

Ҡарсыҡтың шатлығы йөҙөнә сыҡҡайны, хатта төҫһөҙ күҙҙәре йылтырай башланы:

– Шунан ни, шул: ҡатыны ҡайтҡас, фотоларҙы ҡулына тотторҙоҡ. Унылһы ирен ташларға сәбәп булыуына шатланды ғына. Ҡара диңгеҙ буйында танышып, эҫенешеп бөткән кешеһенә кейәүгә сыҡты.

– «Минең ярҙамсыларым» тип, ниңә әйтте икән? – Лилиә һаман аптыраны.

– Яҡшы ярҙамсылары шул беҙ: кергән–сыҡҡандарҙы күҙәтеп–күреп ултырабыҙ бит. Йортҡа ят кеше түгел эт тә керә алмай, аҫтыртын ғына фотоға төшөрәбеҙ ҙә уның ҡулына тотторабыҙ. Беҙ барҙа домофон да, йәшерен күҙәтеү камераһы ла кәрәкмәй.

«Ғәйбәт тыңлап, ваҡыт әрәм иткәнсе, балаларҙың төшкөлөккә ҡайтыуҙарына аш бешерәйем,» – Лилиә шым ғына урынынан ҡуҙғалды.

– Сәйҙе күп эскәйнеңме? Ҡартайғас, йүткерергә лә ҡурҡыта шул… – Ҡарсыҡтарҙың береһе Лилиәнең китергә әҙерләнеүен үҙенсә аңланы.

– Яңылыҡтан ҡалаһың, тиҙ сыҡ, – тип бойорҙо икенсеһе.

Эштән ҡайтҡан ҡыҙына, берсә көлөп, берсә көйөнөп:

– Гел ғәйбәтселәр йыйылған бит бында, бер арыу хәбәр ишетмәнем, – тип зарланды Лилиә.

– Кисен икенсе төркөм йыйыла торған. Улар менән һөйләшеп ултырырһың, бәлки фәһемле хәбәр ишетерһең, – Әлиә ҡәҙерле әсәһен тынысландырырға ашыҡты.

…Был төркөмдәгеләр ҙә ҡунаҡтың тормошо, яҙмышы хаҡында тулы мәғлүмәт алды.

Күп тә үтмәне, ҡыйыш–мыйыш атлаған берәү, эскәмйәлә ултырыусыларға сәләм дә бирмәй, подъезға үтте.

– Атаҡлы алкаш ул. Бисәһе: «Алимент түләмәйһең, хөкөмгә тарттырам, атайлыҡ хоҡуғынан мәхрүм итәм.» – ти икән. Ә был эскесе: «Судҡа ваҡыт әрәм итмә, бер «ярты» ултыртһаң, малайҙан үҙем баш тартам.» – тип кенә екергән.

Ҡаштарын еп кеүек нәҙек итеп йолҡҡан ҡатын һүҙен тамамларға өлгөрмәне, аяҡтары ауырталыр, һылтыҡлап ҡына атлаған тулы кәүҙәле, зауыҡ менән кейенгән мөләйем ханым күренде. Башын һелкеп кенә сәләмләште лә, ҡурҡҡан һымаҡ, үтә ҡабаланып подъезд ишегенә ташланды. «Епкаш» кинәнеп, тәмләп хәбәрен ошо ҡатынға күсерҙе:

– Әртискә, йәнәһе… Яндырып аҫтан ҡарай бит ул, яуыз. Йәш сағында режиссерҙар менән буталып, гел төп ролдәрҙе уйнаған. Иргә бармаған, бала тапмаған. Һаман элеккене ҡыуа, пенсияға сыҡҡас та, сәхнә тип һәптәндәүенә ниҙәр әйтерһең…

– Тс–с–с, ошаҡсы килә. – Алан–йолан ҡаранып ултырған ҡарсыҡ ап–аҡ сәстәре тырпайған башын сайҡаны. – Бергә эшләгән хеҙмәткәрҙәренең һәр аҙымын аңдып, һәр һүҙен тыңлап, начальнигына ошаҡлап торғас, ҙур премия алған, яңыраҡ вазифаһын да күтәргәндәр.

Нәҙек муйынлы һонтор әҙәм, сөсө йылмайып, билен бишкә бөгөп, ҡарсыҡтарға ҡысҡырып сәләм бирҙе. Оҙон ҡолаҡтарын тырпайтып, бер

килке торғас ҡына подъезға кереп китте. Бына башына сәллә ураған, сапан кейгән мулла күренде:

– Әссәләмәғәләйкүм, хөрмәтле ханымдар, – тип сәләмләште ул, башын түбәнселек менән эйеңкерәп.

Мулланы көтөп торғандар икән, шофер еңел машинаның ишеген асып индерҙе. Йәһәт кенә ҡуҙғалып киттеләр.

Лилиәнең эргәһендә ултырған әлеге «Епкаш» йәтсә етеҙлеге менән биноклдән машинаның номерын ҡараны:

– Ошо машина өсөнсө көн ҡаршылай. Әле йома намаҙына китте мулла ишараты. Ун йыл төрмә бутҡаһын ашаған бит ул. Ҡөрьәнде тотҡонлоҡта ятлап ятҡан – төшөмлө һөнәр һайлаған: тамаҡ һыйлы, кеҫәгә хәйер ағыла. Иҫләп ҡуй, Лилиә, был әҙәм аҡтығы егерменсе квартирала йәшәй. Мының абыстайы ҡайҙа икән – гел бергә йөрөйҙәр ине – бөгөн юҡ бит. «Силәгенә күрә ҡапҡасы» – уның үткәне лә үҙәк көйҙөрөрлөк: ете ирҙән айырылған аҙғын. Оҙағыраҡ ултырһаң, абыстайын да күрерһең.

Әммә Лилиәнең абыстай күрергә һис теләге юҡ ине, арып та, ялҡып та киткәйне – урынынан ҡуҙғалды.

Шәмбе көн еткәс, ул юлға сығырға йыйына башланы.

– Ҡәйнәм, әллә үҙебеҙ ҙә аңғармай, үпкәләттекме? – Кейәү балаҡай хафаға төштө.

– «Оҙаҡҡа килдем» тип ҡыуандырғайның, әсәй. Өс көн үтеүгә ҡайтырға булдың да киттең. Һағыныуҙарым баҫылманы, – Әлиә саҡ иламай.

– Һәләк һәйбәт ҡунаҡ иттегеҙ, рәхмәт. Ҡайтам. Яңғыҙ ултырыуы бик ҡыйын – ваҡыт үткәреп булмай: сәғәте йылға тиң, тигәндәй. Нурзидәм: «Бер үҙең ҡаңғырмаҫһың: подъезд алдында ултырған ҡарсыҡтар янында мәҙәниәт, мәғрифәт, сәнғәт, сәнәғәт хаҡында хәбәрҙәр тыңлап, фекер офоғоң киңәйер, рухың байығыр, күңелең күтәрелер» тигәйне. Киреһенсә

килеп сыҡты – кәйефем бөттө. Ғәйбәтселәр үҙебеҙҙә лә күп. Быларҙан һис кәм түгелдәр…

Шәмбе көн Лилиә ауылына ҡайтырға сыҡты. Иртәнге мәлдән төшкә тиклем ултырыусы тәүге төркөм подъезд алдына йыйылғайны инде.

– Күптән көтәм, нимәгә мыштырлайһың. Кил, ултыр, урыныңды һаҡланым, – тип саҡырҙы ҡарсыҡтарҙың береһе.

– Ҡайтып барам, хушығыҙ. – Лилиә аҙымын шәбәйтте.

– Ҡунаҡҡа иркенләп килдем, тигәйне. Алъюсыҡҡа өс көндән, ҡасып тигәндәй, ауылына һыпыртмай ул… – тип шышылданы ҡарсыҡтарҙың береһе.

– Балалары өс көндән оҙата, барҙыр бер ғилләһе… – тип хихилданы икенсеһе.

«Епҡаш» ҡәтғи һығымта яһаны:

– Барыһын да белергә, сәбәләнмәй генә бөтә сәбәптәрҙе асыҡларға тейешбеҙ.

Сос ҡолаҡ Лилиә лә, Әлиә менән кейәүе лә уларҙың һүҙҙәрен асыҡ ишетте...

## Ҡәҙерле бала

Сайран ҡарт хәбәрен һәлмәк кенә, тәмләп кенә тәфсирләүен дауам итте:

– Хәтерегеҙҙәме, Линарға биш йәш тулған йылда бер үҙен ауылға алып ҡайтҡайным. Автобус тәҙрәһенән күҙен дә алмай килә был. Яланда йөрөгән йылҡы көтөүен күреп ҡалды ла:

– Ҡартатай, мин ат яратам – үҫкәс, уларҙы кү–ү–үп итеп аҫрайым, – тип сәпәкәй итә.

– Хәҙер тырыштар заманы: Аллаһ бойорһа, йылҡы үрсетерһең – йылҡысылыҡ заводы асып ебәрерһең, – тим, ифрат ҡыуанып. Ҡалала

үҫкән баланың мал йәнле булыуы кемгә оҡшамаҫ. Бигерәк тә миңә, ауыл кешеһенә, оло шатлыҡ бит.

Линарының бала саҡта ҡылған ҡыҙыҡ хәлдәрен, ирмәк һүҙҙәрен ишеткәс, Рәфил дә ҡыҙып китеп, хәбәргә ҡушылды:

– Линарға ун йәш ине, Филә менән минең отпускылар бөткәнсе ауылда ял иттек. Шул йылда улым дан итеп йөҙөргә өйрәнде. «Йөҙөү буйынса спортсы булам – олимпиадаларҙа беренселекте бер кемгә лә бирмәйем»– тип хыялланды.

Балыҡ тоторға ла әүәҫләнгәйне. Бер көндө ҙу–у–ур шамбы эләктерҙе. Ауыл халҡы шаҡ ҡатты: «Бындай балыҡ беҙҙең ҡулға төшкәне юҡ. Сос малай үҙе оҙонлоҡ балыҡ ҡаптырған – уны һыуҙан һөйрәп сығарырға ла көс–ҡеүәт, таҫыллыҡ кәрәк» – тиештеләр. «Үҫкәс, “Балыҡсылыҡ хужалығы”н ойошторам»,– тине Линар.

Филә Рәфилдең һүҙен бүлдерҙе:

– Ҡайным, онотмағанһыңдыр әле: Линар бишенсе синыфты тик “бишле”гә тамамлап, беҙҙе бик һөйөндөргәйне. Улыбыҙға бүләк булһын тип, Кипрға алып китергә йыйынабыҙ. Юҡ, Линар риза түгел: «Ауылға ҡартатай менән ҡартинәйгә, барабыҙ,»– тип ауыҙыбыҙҙы яба. Киттек ауылға. Шул саҡта ла бөтәбеҙҙе һоҡландырҙы – баҡсанан сыҡманы: йәшелсә түтәлдәрен утаны, бәрәңге күмде. «Үҫкәс, дан итеп дача һалам, баҡса үҫтерәм» тигән хыялдар ҡорғайны. Бесән эшендә лә ихлас ярҙамлашты: салғы тоторға, бесән күбәләргә өйрәнде. Шул йылда бит, ҡайным, матур бейә һатып алдың.

Сайран ҡарттың ауыҙы ҡолағына етте:

– Эйе. Һеҙ ҡайтыр саҡтараҡ ул ҡолонланы. Линар көн оҙоно ҡолон янында уралана. Бейә тәүҙә аландап бер булды. Ҡолонон ҡыҙғаныпp, тибеп ҡуймаһын тип ифрат ҡурҡҡайныҡ. Яратканды хайуан да белә:

тиҙүк тынысланды. Биш йәшендә үк йылҡы малына мөкиббән киткән Линарыбыҙҙың был юлы түбәһе күккә тейҙе: «Һабан туйҙарында районда ғына ла түгел, республикала беренселекте бер кемгә лә бирмәм» – тине. Булыр унан: егәрле, сәмсел. Бала саҡтағы ниәттәр бойомға аша бит ул. Өс йылдан артыҡ ваҡыт үтте. Шул атыбыҙ үҫте, хәҙер торғаны дөлдөл. Уны мин ҡәҙерле балабыҙға инселәнем. Киләһе бәйгелә ҡатнашыр өсөн атты хәҙерҙән өйрәтергә кәрәк. Каникулын файҙалы шөғөл менән үткәрһен. Ейәнемде алып ҡайтырға килдем, – ҡарт кинәнеп кеткелдәне. – Әйткәндәй, үҙе өйҙә күренмәй, ҡайҙа ул?

Рәфил менән Филә бер–береһенә ҡараштылар ла өндәшмәне.

Сайран ҡарттың һорауҙары бихисап:

– Һигеҙенсе синыфты нисек тамамланы? Гел отличник, уҡыуҙа алдынғы булды, әле лә һынатмағандыр.

– Көскә–көскә осланы – «өслө»гә … Хәҙер ул уҡыуҙы уйламай… – Филә ауыр көрһөндө лә улының бүлмәһенә ҡарап ҡуйҙы.

– Нимәштәгән? Бәй, әллә ауырыймы? Ашарға ла сыҡманы. Әлегәсә өйҙә һалып ҡуйҙығыҙмы? Табип саҡырманығыҙмы? Шифаханала дауаларға кәрәк. – Хафаланған ҡарт ейәненең бүлмәһенә йүнәлде. Ишеккә үрелгәс кенә Линарҙың яман аҡырыуы ишетелде:

– Дүрәк, нимә көтәһең?.. Дөңкәйткәнсе тондор! Ә һиңә, дурочка, шул кәрәк!

Бүлмәлә ниҙер дөпөлдәне, кемдер ыңғырашты.

«Һуғышалар бит.»– Сайран ҡарт тәүәккәлләп ишекте асып ебәрҙе.

Компьютер алдында ултырған Линар, ишек асылғанын ишетмәнеме, ҡымшанманы ла.

Сайран ҡарт, хайран–вайран булып, ҡаҡ һөйәккә ҡалған ейәнен бер килке күҙәткәс кенә телгә килде:

– Балам, мин килдем, күрешәйек.

– Күрешергә ваҡытым юҡ. Әх, яуаплы мәлдә ҡамасаулайһың. – Линар, компьютерҙан күҙен алмай, экранда бер–береһен баҫтырып

атышҡандарға тағы фарман бирҙе, – Сит планетанан килеүселәр, тиҙерәк ҡырығыҙ ер кешеләрен, иҙегеҙ, бөтөрөгөҙ.

– Улым, теге айғыр үҫте. Дүнән, шундай матур – торғаны ҡанатлы толпар. Киләһе йылда ат сабышында ҡатнашырһың. Һине алып ҡайтырға килдем, юлға әҙерлән.

Үҫмер ҡартатаһына әйләнеп ҡараны:

– Ниндәй дүнән һөйләйһең, ҡарт йүләр.. Миңә бер нәмә лә кәрәкмәй.

Кәйефе ҡырылған, аяҡ быуындары бушаған Сайран ҡарт яй ғына ишеккә табан сигенде…

## Сабыр ит, саҡырырмын…

Дилфүзә менән Мәхмүзә санаторийҙа танышҡайны. Урта йәштәрҙәге ҡатындарҙың һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Икеһе лә баш ҡалала ғүмер иткәс, ялдан бергә ҡайттылар. Ғаиләләре менән ҡатышып йәшәргә һүҙ ҡуйыштылар.

Юл ыңғайы ине – Дилфүзә, Мәхмүзәләргә кереп, сәй эсеп сыҡты.

Өлгөрөмдәрҙән икән Дилфүзә: аҙна ла үтмәне, Мәхмүзәгә килеп тә керҙе. «Ифрат һағындым», – тине ул, өҙөлөп. Ял көнө лә булғас, санаторийҙағы ҡыҙыҡ–мыҙыҡтарҙы, ирмәк кешеләрҙе иҫкә төшөрөп, харап күңелле ултырҙылар.

– Дилфүзә, һинең һымаҡ алсаҡ, ихлас әхирәттәр һирәк – тағы кил, – тип һаубуллашты Мәхмүзә.

Быныһы бигерәк кеше йәнлеләрҙән икән, аҙна ла үтмәне, эштән ҡайтышлай, үҙе шулай аңлатты, йәнә Мәхмүзәгә һуғылды.

– Күңелемде күтәрҙең, – Мәхмүзә шат ине.

Нисә осрашһалар ҙа, сөкөрҙәштеләр, серләштеләр. Шулай йылдан ашыу ваҡыт үткәне һиҙелмәне лә.

Мәхмүзә, бөтә эш–көштәрен ташлап, барыр еренә лә бармай, тәм–том, бәлеш–бәрәмәстәр менән әхирәтен һыйлай. Аш–һыуға оҫта Мәхмүзәне ҡунаҡ ҡатын һирәк–һаяҡ маҡтап та ҡуйғылай:

– Телемде йотам инде, бигерәк тәмле. Күпме тырышһам да, һинең һымаҡ бешерә белмәйем. «Гел миндә лә гел миндә – ҡасан булырмын һиндә»– тиһеңдер инде, Мәхмүзәкәйем, саҡ ҡына сабыр ит, саҡырырмын, – ти ул, бишбармаҡты ҡабаланып–ҡарһаланып ашауынан туҡтамай. – Әле фатирыбыҙға евроремонт эшләйбеҙ. Бысраҡ торлағымды һиңә күрһәтергә оялам. Үҙең ҡайһылай матур, етеш йәшәйһең: донъяң ялт итеп тора. Мин дә һинең һымаҡ, үпкәләмә, әхирәт, хатта һинән арттырып йәшәгем килә.

Йәнә йылдан ашыу ваҡыт үткәс, Дилфүзә яңы планын асып һала:

– Ремонтты тамамланыҡ, үҙебеҙ хәлдән тайҙыҡ. Сит илгә ял итергә китәбеҙ. Мысырҙан телеграмма ебәрермен. Сабыр ит, Мысырҙан ҡайтҡас та, саҡырырмын, күстәнәстәр менән һыйлармын. Ниндәй бүләк алайым һиңә, әхирәт? – Был юлы ул бигерәк ихлас йылмая.

– Бер нәмә лә кәрәкмәй, үҙегеҙ имен–аман ял итеп ҡайтһағыҙ, шул еткән. – Мәхмүзә ысын күңелдән хәйерле юл теләй.

Мысырҙан телеграмма ла, хат та килмәне. Яман уйҙар Мәхмүзәгә тынғылыҡ бирмәгәс: «Һау булһындар, бәлә–ҡазаға тарымаһындар» – тип Хоҙайға ялбара.

Сит илгә киткәндәренә өс ай ҙа тулды, күптән ҡайтырға тейештәр. Әхирәте, исмаһам, шылтыратмай ҙа. Мәхмүзә үҙе шылтыратыр ине – Дилфүзәнең телефон номерын, барыр ине – өй адресын, белешер ине – эшләгән ерен белмәй. Һорарға нисә уҡталды – уңайһыҙланды, һәр саҡ мәшәҡәттәр менән йәшәгән Дилфүзәне бимазаларға баҙнаты етмәне.

Мәхмүзә юҡҡа ҡайғырған икән: бер көндө әхирәте, ҡояштай балҡып, тып итеп килеп керməһенме! Күстәнәсе лә бар – өс банан һондо.

– Һағындым, әхирәт. Бәндәне һағыш һарғайта тигәндәре дөрөҫ: мына, маңлайым һарғайҙы, ә сәстәрем ағарып бөттө, хатта ҡойола башланы.

Әле дача төҙөп ятабыҙ. Сифатлы кирбестән ике ҡатлы коттедж һалырға булдыҡ. Нигеҙен эшләттек. Дачаға алып барырбыҙ, дан итеп ҡунаҡ итербеҙ, әхирәт, саҡ ҡына сабыр ит. – Дилфүзәнең көр тауышы бүлмәне яңғыратты. Ауыҙы тулы ризыҡ булһа ла, туҡтауһыҙ һөйләү һәләтенә эйә кешене  Мәхмүзәнең әлегәсә күргәне юҡ. Дилфүзәнең тамағына тәғәм тығылып, сәсәмәүенә ғәжәпләнмәү, һоҡланмау мөмкин түгел…

– Барырмын, матур донъяңды күрермен. Шул ҡәҙәре тауҙай мәшәҡәттәрегеҙҙе тәүҙә йырып сығығыҙ әле. Алда бит, Аллаһ бойорһа, йәшәлмәгән ғүмер бар, – Мәхмүзә ҡунағын йыуата, тынысландыра.

Коттедж төҙөү дүрт–биш йылға һуҙылды. Әммә егәрле Дилфүзә әхирәтен һис онотманы – аҙна һайын килеп, ҡунаҡ булды.

– Коттеджды төҙөп бөттөк: биҙәү эштәрен башланыҡ. Йыһаз ташығас, йоҡо һәм аш–һыу бүлмәләренә гарнитур, ҡунаҡ бүлмәһенә стенка, йомшаҡ диван–ҡәнәфиҙәр алғас, саҡырырмын, – тине ул, ихлас йылмайып.

– Көйәләнмә, әхирәт. Күреп–күрешеп торабыҙ ҙа, тағы ни кәрәк... – Мәхмүзә, күҙҙәрен генә көлдөрөп, ҡунағына ҡарап ҡуя.

– Дөрөҫ. – Бынынһы һүҙҙе тиҙерәк икенсегә бора. – Бәлештәрең бигерәк тәмле. Ошондай ризыҡты минең ирем дә ифрат ярата. Үткән аҙнала биреп ебәргән күстәнәсеңде маҡтап–маҡтап ашаны. Иртәнсәк ашағайны, кискә тиклем туҡ йөрөнө, хи–хи–хи… Ул көндө сәпсим бешеренмәнем. Йыбанмайһың да инде, бөгөн итле бәлеш өлгөрткәнһең. Минең ир ошондайҙы күрһә, донъяһын онота…

– Әйҙә, һыйланһын, әйҙә, кинәнһен. – Мәхмүзә әллә күпме күстәнәс йөкмәтә.

– Емеш ағастары ултыртабыҙ. Шул эште бөткәс тә, оло байрам – кесе туй ойошторорбоҙ. – Дилфүзә яңы мәшәҡәте хаҡында хәбәр итә.

– Ул ҡәҙәре ҡабаланмасы, ҡәҙерлем: ағастарың үҫеп, емеш бирә башлағас та байрам итербеҙ. – Мәхмүзә  йәнә йыуата әхирәтен.

– Дөрөҫ әйтәһең бит – минең уйҙарымды белеп тораһың. Уғаса гараж мәшәҡәттәренән дә арынырмын. Таштан төҙөргә уйлайбыҙ. Унан, был машинабыҙҙы һатып, аҡса өҫтәп, яңыһын алырға ниәтләйбеҙ. Яңы машинала дачаға алып барырбыҙ. Мунса ингәс, фатирыбыҙға ҡайтып, ҡунаҡ булырбыҙ.

– Эйе, эйе, әхирәт, Аллаһ Тәғәлә беҙгә оҙон ғүмер бирһен, сәләмәтлектән яҙҙырмаһын, бәлки, санаторийҙа танышыуыбыҙға егерме йыл тулыуҙы һиндә билдәләрбеҙ. – Мәхмүзә һынамсыл ҡарашын йәндәй әхирәтенә төбәне.

– Сабыр иткән – мораҙына ирешкән: һин әйткәнсә, дуҫлыҡтың егерме йыллығын нәҡ беҙҙә үткәрербеҙ. Юбилей ҙаһа ул – сәбәбе шәп. Бәй, мунса инербеҙ, тинем бая, онотоп ултырам да: уның яңыһын һалырға кәрәк бит әле. Иҫке–иҫке инде: йә һиңә еҫ тейеп ҡуйыр.

– Мунса еҫе һәләк насар була. Аллаһ һаҡлаһын, үлеп тә ятырһың. Яңы мунсаңды һалып бөткәс саҡырырһың әле… – Мәхмүзә, ниҙер уйлап, әхирәтенә күҙ һирпте лә был юлы һүрән генә йылмайҙы: «Дилфүзәнең көткән дан донъяһы, йылдар буйы төҙөгән дачаһы, үҫтергән ҙур баҡсаһы, яңы машинаһы, ысынлап та, бармы икән?»– Уның күңеленә шундай шөкәтһеҙ шик төшкәйне…

## Бер ҡатлылыҡ бәләһе

Яттан белгән берҙән–бер ҡыҫҡа ғына доғамды уҡығас, өҫтәл артынан тороуым булды, телефон шылтыраны.

– Але – тим.

– Даниә, сәләм. Ҡайҙа олаҡтың, трубкаңды оҙаҡ алмайһың? – Ҡәнифә ғәҙәтенсә ҡаты һөйләшә.

– Әхирәткәйем, һаумы–шәпме, хәл–әхүәлдәрең нисек? – Мин ифрат шатланып сәләмләшәм.

– Тауышың ҡайһылай көрәйгән, һандуғастан былайыраҡ сутылдайһың… – Ҡәнифә һаман этеп–төртөнгәндәй.

– Әле генә ып–ысын ауыл ҡаймағы, ып–ысын бал менән аҡҡойроҡ сәй эстем, күңелем күтәрелде. Кил, аҡҡойроҡло сәйҙәр эсеп, хозурланып ултырырбыҙ. – Мин әхирәтемде ихлас саҡырҙым.

– Сәйҙең ҡойроғо булалыр шул: аҡҡойроҡ, ҡараҡойроҡ…– Ҡәнифә тәрән көрһөндө лә ҡаты итеп тамаҡ ҡырҙы.

– Бик сифатлы һинд сәйен өләсәйем аҡҡойроҡ тип әйтә торғайны. Кибет кәштәләрендә хәҙер төрлө–төрлө сәйҙәр теҙелеп тора, ә бындайҙы табып булмай – һирәк осрай аҡҡойроҡ. Балым да солоҡ балыҡ – Бөрйәндән, ауыл ҡаймағы ла яңы айыртылған, бик тәмле. Хәҙер генә килеп ет.

Ҡәнифә бер килке өндәшмәне, шунан теләр–теләмәҫ кенә һүҙ башланы:

– Әлифәнең ҡарты шифаханаға ятты. Бөгөн сәғәт икелә Әлифәләрҙә аулаҡҡа йыйылабыҙ. Сәхифәгә хәбәр иттем, ул бара. Йәһәт йыйын. – Ҡәнифә трубканы шартлатып һалып та ҡуйҙы.

Һиҙәм, уға ниҙер оҡшаманы. Һәр саҡ оҙон–оҙаҡ һөйләшә торғайныҡ. Бик күтәренке кәйефем кинәт нулгә төштө. Шатлығымды уртаҡлашырға уйлағайным: күҙлек, кәстүм менән парик алыуымды, теш протезы яһатыуымды әйтергә өлгөрмәнем. Минең өсөн был нәмәләр ҙур байлыҡ: пенсиә аҡсаһын еткереп булмағас, күрәшлегем арҡаһында ошо көнгәсә эләгә–ҡолай саҡ йөрөнөм, ялтаслығымдан оялып, башымдан яулыҡ төшөрмәнем, тешһеҙлегемдән уңайһыҙланып, кеше араһында көлмәнем. Машинабыҙҙы һатып, шул бәләләрҙән ҡотолғайным.

Ә «аулаҡ» тигәне – кеше–ҡара булмаған, буш өй.

Йыл һайын тиңдәш биш–алты ҡарсыҡ тыныс урынға – аулаҡҡа – йыйылабыҙ. Һәләк ирмәк була: йәш саҡтарҙағы ҡыҙыҡ–мыҙыҡтарҙы иҫкә алабыҙ, бейешеп–йырлашып, ғибрәтен дә, һәйбәтен дә һөйләй–һөйләй, иркенләп һыйланабыҙ.

Тиҙ генә күҙлегемде, күлдәгемде, паригымды, теш протезымды кейҙем дә көҙгөгә ҡараным. Бөтәһе лә килешә, шикелле, хатта йәшәреп киткән кеүекмен. Үҙең ҡартайһаң да, күңел ҡартаймай шул… Тейәр баһаны әхирәттәрем бирер, күмәкләшеп кинәнербеҙ.

Күҙлекле булғас ни, Сәхифә менән Ҡәнифәне автобус туҡталышына етмәç борон күрҙем. Һөйләшеп торалар. Ҡалабыҙҙың Дим биçтәһендә йәшәгән Әлифәгә бергә барырбыҙ, тип мине көтәләрҙер. Дим менән Һупайлы биçтәләренең араһы алыç ҡына. Күптән осрашҡаныбыҙ юҡ, өсөбөҙгә күңелле булыр: гәпләшеп–серләшеп, барып еткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалырбыҙ.

Шатлыҡтан йылмайып–көлөп кенә әхирәттәрем янына шым ғына килеп баçтым. Ҡыҙыҡ бит, мине танырҙар микән...

Бер–береһенең ауыҙына кереп китерҙәй булып һаман һөйләшә былар.

– Даниәнең ғәҙәтен белмәйһеңме: баллап–майлап, әллә ниндәй аҡҡойроҡло сәй эстем тип маҡтана, хи–хи–хи, –Ҡәнифәнең тауышы был юлы ныҡ асылғайны.

– Мәңге кәпәренде Даниә. «Маҡтансыҡ» тигән даны таралыуын үҙе белә, юҡ инде, һаман киçәмәй. Сәй эскән берәү, әтеү беҙ эсмәйбеҙ сәйҙе майҙа бешкән күмәс менән, ха–ха–ха. – Сәхифә ҡысҡырып көлдө.

– Үткән айҙа шылтыратып хәлен һорашһам, Даниәбеҙ шапырынырға тотонмаһынмы, ауыҙы ла ябылмай, – Ҡәнифә дәртләнеп яңы хәбәр башланы.

– Йә, йә, ни тип маһая? – Сәхифә ян–яғына ҡараны, әммә миңә тамсы ла иғтибар итмәне.

– Бөгөн биш хат яҙҙым, шуға кинәнеп ултырам, тисе. Хат яҙғанға ла шапырына: үҙен беҙҙән юғары ҡуйырға тырышыуы. Харап, яҙыусы табылған… Ваҡытымды әрәм итеп, ҡағыҙ исрафлап та ултырмайым: кеçәлә йөрөтә торғаны ла, өçтәлем өçтөндә ябай телефоным да бар. – Ҡәнифә ғорур ҡиәфәттә, яҡшы ат һымаҡ, башын сайҡап ҡуйҙы.

Сәхифә тирә–йүнен тағы байҡаны, мине тағы илтифатҡа алманы:

– Үткән йыл Даниәгә ниндәйҙер йомош төштө лә, ҡапыл ғына, алдан иҫкәртмәйенсә генә, барырға тура килде. Стенка алған икән, иҫе китеп шуға ҡарап тора. «Ошо нәмәңә күпме түләнең?» – тип һораным. «Ә һин нисә һумлыҡ тип уйлайһың?» – ти Даниә. Ҡарайым–ҡарайым, хаҡын һис тә әйтә алмайым. Йыһаз шөйлә арыу күренә. «Беҙ шуға оҡшаш монаятты алтмыш меңгә алғайныҡ. Был илле мең тирәһелер» – тим. «Ун меңлек кенә» – ти, шарҡылдап көлә. Һаман үҙенең өҫтөнлөгөн күрһәтергә маташа: йәнәһе, ул шәп, булдыҡлы, йәнәһе, ул ғына аҡса тота белә.

Артабан тыңламаным, ситкәрәк киттем. «Олимп» супермаркетын һорашҡан булып, әхирәттәремде шаяртып, көлдөрөп, кәйефтәрен күтәрергә ниәтләгән теләгем шыпа һүнде. Аулаҡҡа бармам, ахыры: күҙлегемде, кәстүмемде, паригымды, тешемде күргәс, йәндәре тағы көйөр. «Тартай теленән таба» тигәндәй, уларға оҡшамаған хәбәр һөйләрмен дә кәйефтәрен ҡырырмын. Аҙаҡ төрлө–төрлө лаҡап таралыр…

Кире боролам. Күшеккән күркә хәлендәмен. Һәлпән–һөлпән атлап, уйҙар уйлап, ҡайтып барам. Әхирәттәрем ысынды һөйләй – барыһы ла хәтеремдә. Туған–тыумасама хат яҙа алмай оҙаҡ йөрөгәйнем. Нисек тә ваҡыт табып яҙғас, ифрат шатланғайным. Хаттың өҫтөнлөгө бар: ҡабат–ҡабат уҡырға мөмкин. Ә телефондан һөйләшеү икенсе. Олоғайыу үҙенекен эшләй: йә ишетмәйһең, йә яңылыш ишетәһең, ни хаҡында гәпләшкәнде онотҡан саҡтар ҙа булғылай.

Былтырғы ваҡиға ла иҫемдә. Аҡса аҙ булғас, бөтә Өфөнө бер итеп, осһоҙ стенка эҙләгәйнем. Ул саҡтағы ыҙаларҙы онотторлоҡ түгел – аяҡтарымдың һыҙлауы әле лә бөтмәгән. Ә инде осһоҙло йыһаз осратҡаныма һаман ҡыуанам.

Мин Ҡәнифә һәм Сәхифә менән биш йыл элек танышҡайным. Бер биҫтәлә донъя көткәс, ҡатышып йәшәнек. Ошондай мөнәсәбәттәрен элегерәк нисек күрмәнем, нисек һиҙмәнем икән? Артыҡ ышаныуҙан

зиһенем томаланған инде. Бөгөн танымаçлыҡ итеп кейенмәһәм, яндарында тормаһам, артабан да әхирәттәремә мөкиббән булыр инем.

Ҡапыл өләсәйемдең әсәйемә әйткән нотоғо хәтергә төштө. Ул ваҡытта миңә алты–ете йәш булғандыр. Илай–илай буçығып бөткән әсәйем ниндәйҙер көнсөл бисәләр тураһында тәфсирләй. Өләсәйем уға: «Тапһаң да өндәшмә, юғалтһаң да өндәшмә» – тигәйне.

Алты йәштә ишеткән нәсихәттең нескә мәғәнәһенә алтмышты артмаҡлағас төшөндөм. Тимәк, уңһаң да, уңмаһаң да, яр һалырға ярамай.

Йәнә. Ҡәнифә менән Сәхифәгә үпкәләмәйем. Кеше ҡайғыһына ҡайғырырға, кеше шатлығына шатланырға бәндәләрҙең бөтәһе лә, минең кеүек, бер ҡатлы түгел дә…

## Синонимдар

Мәшкилгән ауылы халҡы Сихәбиәттең тоҡомон «Текәләр» тип йөрөттө. Ысынлап та, тәкәбберлектәре хаттин ашҡайны – баштарын сөйөп, күкрәк киреп, ҡайҡалата баçып атлауҙары башҡаларҙан ныҡ айырыла. Маһайыулы ҡиәфәттәре бер булһа, икенсенән, бөтә нәмәлә алдынғы һаналырға тырышалар – йәғни күберәк үҙҙәрен ҡайғырталар. Бармаҡтары гел үҙҙәренә кәкере нәçел–нәсәптең күмәк хужалыҡҡа файҙалары теймәне – белем алыуға ла барымдары самалы ине.

Ата–бабаһының самаһыҙ һауалығы Сихәбиәткә лә хас. Ул да уҡыуға күңел һалманы: «Егет кешегә ете синыф белем етә» тине лә, машина руленә үрелде. Аҙаҡ йүнен, юлын табып, Армия хеҙмәтенән дә арынды.

Өйләнергә кәрәклеген ата–әсәһе ныҡый торғас, ҡыҙҙар һайларға тотондо. Байтаҡ ҡыҙҙар ҡалаға ҡасҡайны. Әммә Сихәбиәт иш таба алмай оҙаҡ ҡаңғырманы. «Хоҙай бирәм тигән ҡолона сығара ла ҡуя юлына» тигәндәре дөрөç икән – Мәшкилгәнгә Шәйҙә исемле йәш кенә мөғәллимә эшкә килеп төштө. Уны күреү менән ҡанына һеңгән булмышы үҙен

һиҙҙерҙе – бүтән егет–еләндән алда өлгөрөргә тырышып, Шәйҙәгә тәҡдим яһаны.

Баҡһаң, Шәйҙәнең дә күҙе үә күңеле Сихәбиәттә икән – бәй, ауылда эсмәгән–тартмаған, аҙып–туҙмаған, утыҙҙан уҙмаған уҙаман даһа ул. Буй–һыны ла ҡупшы, төҫкә–башҡа ла күркәм.

Ҡыҫҡаһы, туй гөрләп торҙо.

…Йәш кәләш йыл үтеүгә Сихәбиәтте игеҙәк менән кинәндерҙе. Бала табыу йортонан бер малай менән бер ҡыҙыҡай алып ҡайтҡас, электән ҡупым Сихәбиәт әллә кем булып, ер һелкетеп баҫты. Бәй, ауылда әлегәсә игеҙәк тыуғаны юҡ бит әле.

Ике йыл үтеүгә Шәйҙә тағы бер малай менән бер ҡыҙ тапты. Өс–дүрт йылдан йәнә игеҙәк – улары ла ҡыҙыҡай менән малай.

– Афарин! – тип маҡтаны Мәшкилгән халҡы Шәйҙә менән Сихәбиәтте. – Ауылыбыҙға ҡот ҡундырҙығыҙ, рәхмәт һеҙгә!

«Йоҡлап ятмағыҙ» район гәзите, Сихәбиәттең ғаиләһен маҡтап, ҙур мәҡәлә баҫты. Республика матбуғаты ла иғтибарһыҙ ҡалдырманы. Хөкүмәт балаларға тейешле әжер–бүләктән мәхрүм итмәне.

Әммә Сихәбиәткә былар аҙ тойолдо – күңеле һаман нимәлер көттө, ниҙер көҫәне. Йөрәген әрнеткән сәбәпте белмәй, күпмелер интеккәс, бер көн усы менән маңлайын шапылдатты: «Бәй, Мәскәү тигән баш ҡала бөтә төбәктәрҙәге хәл–ваҡиғаларҙы белеп–күреп тора – үҙ хөкөмөн сығарып тора. Минең турала Мәскәү радиоһы мотлаҡ һөйләргә, телевидениеһы күрһәтергә, гәзиттәре яҙырға тейеш! Шунан сит илдәр ҙә ярышып маҡтар. Бөтәһенең дә иҫе китерлек берәй шәп ғәмәл дә әмәлләргә кәрәк!»

Бик тырышһаң, ғәмәле лә, әмәле лә табыла икән. Сихәбиәт тә тапты…

– Шәйҙә, ултыр әле яндарыма, тыңла. Хәтереңдәме, бер бисәнең сит илдәрҙә генә аҫраныуын Мәскәү телевидениеһы күрһәткәйне. Алты балаһы Европаның алты илендә тыуған.

– Шуларҙы вис иҫләйһеңме? Нимәгә кәрәк инде? – Шәйҙә бот сапты.

– Таң ҡалырлыҡ, иҫ китерлек хәлдәр бит!

Һине район бала табыу йортона алып барырға такси яллырлыҡ та аҡсам юҡ. Ә был бәндә бисәһен сит илдәрҙә генә бәпесләтә.

Йәнә бер ирмәк иҫемдә. Мыныһы ла Рәсәйҙең бер әҙәме ине. Шул ир һигеҙ балаһына шундай исемдәр ҡушҡан: Президент, Император, Диктатор, Царь, Король, Герцогиня, Царица, Королева. «Быйндай исемдәрҙе ниңә һайланығыҙ?» тигән һорауға атай булған ир: «Исем кешенең яҙмышына тәьҫир итә. Мин балаларымдың ҙур дәрәжәгә эйә һәм бай булыуҙарын теләйем» тине.

Бөтәһенең дә иҫе китһен әле: барыбыҙға ла синоним исемдәр ҡушайыҡ.

– Синоним нимәне аңлата, беләһеңме? – Шәйҙә, шикләнеп, йәмәғәтенә текәлде.

– Синоним – мәғәнә яғынан оҡшаш һүҙҙәр була!

– Һине шыр наҙан тиһәм… аңлайһың икән. – Шәйҙә шарҡылдап көлөп ебәрҙе.

– Китабың асыҡ ҡалғайны, шунан уҡыным. – Бисәһенең төртмә һүҙенә үпкәләрлек хәлдә булмаған ир, дәртләнеп, хәбәрен дауам итте. – Мин – Сихәт, һин – Шифа, тәүге игеҙәктәргә, малайға – Иҫтәлек, ҡыҙыҡайға – Хәтирә, тегеләренә Әмәл – Сара, быларына – Саф–Таҙа. Шәйләнеңме, Шифа, әй, Шәйҙә, малайҙарҙың исемдәре тартынҡы, ҡыҙҙарҙыҡы һуҙынҡы хәрефтәргә бөтә. Дан бит, шәп бит,ә!

– Абба! Тартынҡы менән һуҙынҡыны айыра! – Шәйҙәнең күҙе дүрт булды.

– Китабыңдан уҡыным. Мына, тыңла, тыуасаҡ игеҙәктәргә лә исем әҙер: Шиғриәт–Поэзия, Бөртөк–Дана, Яҙыҡ–Хата…

– Етте! – тип екерҙе күҙҙәре шәмәргән Шәйҙә. – Юҡ менән булашма!

Бисәһенең екереүенә екһенмәне лә, еңелмәне лә Сихәбиәт – үҙ һүҙен һүҙ итте, ниәтен еренә еткерҙе: күкрәк киреп исемдәрҙе үҙгәртеү

мәшәҡәттәре менән йөрөнө, тыуыу тураһында танытҡлыҡтар юллап алды. Шунан Мәскәү телевидениеһының өс–дүрт каналына, бер нисә гәзит редакцияһына әлегәсә осрамаған «яңылыҡты» яҙып ебәрҙе.

Ваҡыт үтте – әммә Мәскәүҙән хәбәрселәр ҙә килмәне, хаттарына ла яуап яҙманылар.

Хәҙер ауылдаштары Сихәбиәтте, Шәйҙәне, уларҙың балаларын дөйөм бер атама менән – «Синонимдар» тип кенә йөрөтә.

### Мәжит ҡарт мәшәҡәттәре

Телевизорҙан көн–төн күрһәтелгән тәүбә итерлек ғибрәттәр, көлөрлөк мәҙәктәр, көйөнөрлөк михнәттәр хаҡында ҡарарға әүәҫләнде Мәжит ҡарт. Ә инде ҡайһы каналды асһаң да, һимеҙ–һимеҙ ир–аттың, иркенләп тәфсирләй–тәфсирләй, төрлө–төрлө ризыҡ әҙерләргә өйрәтеүҙәрен бигерәк оҡшата, сөнки үҙе лә тәмле ашарға ярата.

Тапшырыуҙарҙы ҡарай торғас, ул бер нәмәгә төшөндө: Мәжиҙәһе бешергән бәлеш–ҡоймаҡтарҙан биҙеп бөткән икән дә! Ифрат ят ашамлыҡтар ашағыһы килде. Үҙенә бер төрлө тәғәмдәрҙе әҙерләүҙең бер ҡыйынлығы ла юҡтыр: әзмәүерҙәй ирҙәр, телдәре телгә йоҡмай, ҡабат–ҡабат аңлатып, ашамлыҡты тиҙ генә, еңел генә әҙерләй. Шилмалар ҡайһылай шыма һөйләйҙәр. Ризыҡ турарға ҡулдары килешеп тора, ашарға ауыҙҙары шапылдап тора. Уларҙың тәғәмдәрҙе тәмләп–тәмләп, маҡтап–маҡтап тамаҡтарына оҙатыуҙарын ҡарап ултырыу ҡартҡа ифрат ҡыйын.

– Мәжиҙә, кил, күҙәт, өйрән! – тип саҡырҙы ул аш–һыу бүлмәһендә шаж–шож нимәлер ҡыҙҙырған ҡарсығын.

Күндәм әбекәй йәмәғәте эргәһенә йәһәт кенә килеп тә етте.

– Ғүмер буйы баш күтәрмәй эшләнек, илебеҙ өсөн күпме көс түктек, Ватаныбыҙға тоғро уландар үҫтерҙек. Хәҙер «олигарх» тигән бурҙарҙың затлы–татлы һыйҙарҙы ғарҡ булғансы тығынғанын ҡарап, тамшанып

ултырайыҡмы? Беҙгә лә үҙебеҙҙе ҡәҙерләргә мәл күптән еткән – кешеләрсә йәшәргә тейешбеҙ. Бөгөндән бешергән ашамлыҡтарың «байҙарский» булһын! Ишеттеңме?

– Әлләсе… – Көтөлмәгән тәҡдимгә Мәжиҙәнең иҫе китте.

– «Әлләсе» тисе. Бәлеш–бөйөрөк бешереүҙән бүтәнде белмәйһең. Белергә лә, өйрәнергә лә теләмәйһең. Килтер ҡағыҙ–ҡәләм, мынау аштарға ниҙәр кәрәклеген, нисек бешерергә икәнлеген яҙып ал. Бер төшөнһәң, көндә төрләндереп кенә аҙыҡ әҙерләрһең.

– Үҙең яҙ, Мәжитйән, яҙыу–һыҙыуға мәңге маһир булдың. – Мәжиҙә ҡарсыҡ ҡартының ҡылыҡ–фиғеленә өшөнөп бөткән – һалпы яғына һалам ҡыҫтырып та ебәрҙе. Шунһыҙ ярамай – мыжырға тотонһа, туҡтамай: маҡтап–ҡуптап ебәрһәң генә көйгә килә. Ул әле лә әпәүләүгә тиҙ әүрәне – ихлас ҡына яҙа башланы.

– Ресторандарҙың данын күтәргән, кеҫәләре ҡалындарҙың ратҡан «Гавайса пицца» ҡатлы–ҡатлы итеп әҙерләнә. Йәйелгән сөсө ҡамырға тәүҙә быҡтырып һыуытылған аҡ трюфель менән ҡара трюфель бәшмәктәрен аралаштырып һалаһың. Бәшмәктәрҙең өҫтөн моцарелла сыры, шунан солями пепперона, халапеньо менән һылайһың. Аҙаҡ коралл бәшмәктәрен теҙәһең. Йөҙ илле градуслы духовкала ярты сәғәттә әҙер була. Табынға ҡуйыр алдынан һәйбәт өлгөргән, әле генә өҙөлгән зәйтүн емеше менән биҙәргә кәрәк. – Башына аҡ ҡалпаҡ ҡаплаған ашнаҡсы реклама ваҡытында бешеп сыҡҡан пиццаны йыпырырға тотондо – сикәләренән тәгәрәгән тирҙе һөртөргә лә етешә.

– Ярай, аҡ трюфель менән ҡара трюфель бәшмәктәрен һәйбәт беләм. – Мәжит ҡарт үҙ алдына һөйләнде.

– Ҡасан ашаның? Ҡайҙа ашаның? Кем ашатты? – Мәжиҙә ҡарсыҡтың күҙҙәре упайҙы.

– Тәминдәр энекәш «трюфель» тигән ҡиммәтле бәшмәк һәләк тәмле, тигәйне.

– Кеше ни һөйләмәҫ. Үҙең тәмләһәң инде… – Әбекәй көләмһерәне.

– Һәр хәлдә һин тоҙлаған гөрөҙҙә түгелдер. Ә бына «коралл» бәшмәге ниндәй икән? – Мәжит ҡарт хафалы ҡарашын ҡарсығына төбәне.

– Әлләсе… Урыҫтар мәрйенде «коралл» тиҙәр шикелле. – Быныһы ифрат баҙанды.

– И–и–и… Шыр наҙан бит һин! Килтер анау китапты. – Ярһыған ҡарт тупаҫ ҡына бойорҙо.

Энциклопедияла эҙләгәндәрен күргәс,  бик кинәнделәр: баҡһаң, «коралл» бәшмәге була икән –  ул ағаста үҫә, имеш.

Икенсе каналды астылар. Бындағы ирекәй ҙә хәбәрен илгәҙәкләнеп бәйәнләй ине:

– Ҡытай халҡының «филянфу» ашы үҙенсәлекле һәм туҡлыҡлы. «Филянфу» өсөн аҡ акула бауыры, мамыҡ майы, кальмар һәрмәүестәре, диңгеҙ ҡыҫалаһы аяҡтары кәрәк. Ашты ҡара ыуылдырыҡ һыланған ҡара икмәк менән ашайҙар.

«Филянфу» ашын бешереүҙе ентекләп теркәгәс, каналдарҙың өсөнсөһөнә күстеләр. Бындағы тапшырыуҙы ҡап ҡорһаҡлы, түп–түңәрәк ҡыҙыл йөҙлө, ерән сәсле ир алып бара икән:

– Корейса «Куксу» салаты хәлле ғаиләләрҙең өҫтәлен бик йәмләй. Салат өсөн дөйә телен, диңгеҙ хайуаны һигеҙаяҡ итен, страус күкәйен, палтус ыуылдырығын, хмели–сунели тәмләткесен әҙерләгеҙ.

Салатҡа нимә артынан нимә һалырға, күпме һалырға тейешлекте йыбанмай яҙып ҡуйғас, Мәжит ҡарт:

– Ишеттеңме, ашамлыҡтарҙың затлы икәне атамалары уҡ аңлатып тора: «Филянфу», «Куксу»! – тип ҡыуанды.

– Эйе лә, һәләк ирмәк. – Мәжиҙә әбей йәмәғәтен йәһәт кенә йөпләне лә һаҡ ҡына һораны. – Страус күкәйе кәрәк, тине. Тауыҡтыҡы ярамаймы икән?

– Әбизәтельнә ярамай!  Тимәк, тәғәмдең тәме үҙгәрә. – Мәжит ҡарт ҡырын–мырын ҡараны ла ҡәтғи фарман бирҙе. – Баҙарға юллан!

– Йәш сағым үткән – көс–ҡеүәтем бөткән! Хәҙер  шул ҡәҙәре аҙыҡ–түлекте бер үҙем күтәрә алмам. Баҙарға икәүләп барабыҙ! – Бартанлаған ҡарсыҡ ҡоро яуапланы.

Ул көндө әлегәсә үҙҙәре бер күрмәгән, бер ашап ҡарамаған ризыҡтарҙы эҙләп, икеһе лә арманһыҙ булды.

– Зәйтүн емешенең бешкән–өлгөргән мәле. Заказ  бирермен – өс көндән килтереп еткерерҙәр. Хаҡы ҡиммәт түгел – килоһы ете – ун мең тирәһе. Күпме кәрәк? – Йылы яҡтарҙан килгән ят һатыусы, ҡара күҙҙәрен самаһыҙ йылтыратты, алтын тештәр теҙелгән алаптай ауыҙын аяуһыҙ йырҙы.

Ҡарт менән ҡарсыҡ бер–береһенә ҡараштылар ҙа, алдан аңлашып ҡуйғандай, һатыусыға яуап биреп тормай ғына артабан атланылар. Ә икенсе һатыусы  ниңәлер кәйефһеҙ ине, таҫырайып ҡараны. Быларҙың нәмәләр эҙләүен ишеткәс, төҫө үҙгәреп, яҡтырып китте:

– Хәҙер Мәскәүҙәге дуҫыма шылтыратам. Аҡ акула бауырын Төркиәнән, дөйә телен Мысырҙан табыр. Хаҡтарымы? Адин кила бауыр илле мең, дөйә теле – ҡырҡ мең. Ә мужит дароже. Дуҫым күпме һорар. – Һатыусы, ауыҙ эсенән ниҙер мығырлай–мығырлай, телефон номерын яҙып ҡарттарға тотторҙо ла өҫтәп ҡуйҙы. – Айда, звани – десят ден прайдет – акула будет, окей?

– Дә–ә–ә… – Мәжит ҡарт, күгәргән ирендәрен саҡ ҡыбырлатып, шыбырланы – ныҡ шаңҡығайны шул.

– Страус күкәйенең хаҡын һораманыҡ. – Ҡарсыҡтың үҙ ҡайғыһы.

– Күкәй иҫеңдә икән, ниңә белешмәнең? Мин онотҡанмын, биғәйбә! – тип асыуланды ҡарт.

Бер килке әрепләшеп килделәр.

Ҡайтып еткәс, сәй эсеп, әҙерәк хәл кергәс, Мәжит ҡарт:

– Йә, ғәфү ит. Беҙҙең былай йөрөгәнде әхирәттәреңдең береһенә лә һөйләмә – ләҡәпкә әйләндерерҙәр, – тип инәлде.

*   *   *

… Яйлап яҙ ҙа яҡынлашты. Мәжит ҡартҡа баҡсаға яңғыҙ йөрөргә тура килде – ҡарсығы аяғы һыҙлап ыҙалана ине. Өйҙә генә ултыра – дөрөҫөрәге, ултырмай – хәленсә бешеренеп–төшөрөнөп, арып ҡайтҡан ҡартын шартына килтереп ҡаршылай.

Телевизорҙа күргән ризыҡтарҙың атамаһына хәләленең иҫе китеүе хәтеренә төшкәс, хәбәрен көләмәсләп–кинәйәләп һөйләргә әүәҫ әбейҙең башында ҡыҙыҡ уй тыуғайны:

– Әйҙә, тиҙ генә йыуын да «майборбут» ашарға ултыр, – тип саҡырҙы.

Ризыҡтың майлы борсаҡ бутҡаһы икәнен күргәс, хужа тәүҙә аңшайҙы, шунан йылмайҙы.

Хужабикә икенсе ваҡыт:

– Бөгөн «бөткүк» бешерҙем, – тип бөтәүләй бешкән күкәй ашарға ҡыҫтаны.

Ә был юлы:

– «Ҡаббөтбәр»ҙе  йылы сағында ҡабып ебәр, – тине ихлас йылмайып.

Баҡсасы «ҡаббөтбәр»ҙе ҡабып ҡына ҡалмай, ауыҙ тултырып ашарға тотона – духовкала ҡабығы менән бешерелгән бөтәү бәрәңгене мәңге яратты.

– Тәғәмде гел төрләндерергә кәрәк – иртәгә «ҡыҫаш» әҙерләрмен. – Әбекәй көлөмһөрәй.

Быныһы өндәшмәй – итһеҙ бешерелгән ҡыҫыр ашты бигүк өнәмәй. Шуғалыр, ахырыһы:

– «Майҡыҫаш» булһын, – ти ул яй ғына, нимә хаҡындалыр уйланып ҡына.

– Ярай, «майҡыҫаш» бешерермен. Күбек майҙы күберәк төшөрһәм, һәләк тәмләнә. Ә һары  майҙы мулыраҡ сумырһам, перәме «байҙарский» була ла ҡуя. – Ҡарсыҡ мут йылмая.

– Теге саҡта акула бауыры, дөйә теле, бәшмәктәр эҙләп мәшәҡәтләнгәйнек. Минең арҡала тарығайнығ ул мәшәҡәттәргә. Әммә ул оронсоҡтоң файҙаһы ла булды – айлыҡ пенсиәбеҙ олигархтың бер ултырып ашаған салатына ла етмәй икән – шуны һәйбәт төшөндөк. Ә һин, Мәжиҙәкәйем, пенсиәне ай буйына еткерәһең: һиңә һәйкәл һалырлыҡ, һиңә арнап, йырҙар яҙырлыҡ! – Мәжит ҡарт, ағарған һаҡалын һаҡ ҡына һыйпап, ҡарсығына яғымлы ҡарап, кеткелдәп көлөп ебәрҙе.

## Үкенделәр

Мөстәнетдин менән Тәләфетдин ҡапҡа төбөндәге эскәмйәлә һәүетемсә генә хәбәр һүткән мәлдә ҡаршы өйҙөң тәҙрәһендә Гөлфисәне шәйләнеләр: ул рүмкә күрһәтә ине. Шунан стакан, бокал болғай башланы, шай…

Гөлфисә – шыпа яңғыҙ ҡатын. Ире эскенән үлде. Балалары булманы.

– Ҡайғы ҡаймаҡ түгел, минең күрше йота башлаға–а–ан… Тиҙ бирешкән хәсрәткә–ә, – тип һуҙҙы Мөстәнетдин.

– Яңғыҙлыҡ йонсота шул. Бигерәк тә буйҙаҡ ир–атҡа ҡыйын – ас ҡарын ҡаҡшата. Бисәләрҙең тамаҡтары туҡ – ашарға үҙҙәре әҙерләй, – Тәләфетдин ҡорһағын һыйпап ҡуйҙы.

– Ҡәйнәм сирләй – минең бисә әсәһенә киткәйне – тиҙ әйләнмәҫ әле. Керәйем, күршемдең күңелен күрәйем. – Мөстәнетдин алан–йолан ҡаранды.

– Туҡта! Постой! Бында мин бар бит әле, ниңә күҙеңде бәзерәйтәһең? Йәтим бисәнең хәлен буйҙаҡ ҡына нығыраҡ аңлай. Гөлфисә сигналды миңә бирә. Мине күрһә, күҙ ҡарашы үҙгәреп китә – мөлдөрәп төбәлә бит ул. Күптән өмөтләнеүен әлегәсә нисек төшөнмәнем икән? – Тәләфетдин башын сайҡай–сайҡай урынынан ҡалҡынды.

– Белмәһәң, бел: ҡаршыма тап булһа, ниҙер уйлап, миңә лә текәлә. Матур ҡатындың ҡарашы шундай моңһоу… Ымһынғанын ғына

аңламағанмын. Ах, аңра баш! – Мөстәнетдин ҡаҡ маңлайына һуғып ҡуйҙы ла, күҙҙәрен ҡаршы өйҙөң тәҙрәһенә йүнәлтеп, һүҙен дауам итте. – Һаман һуҙманланым – хәҙер үкенәм. Ә бит йыш ҡына, бигерәк тә бисәм өйҙә юҡта, күршемә керергә аяҡтарым тарта ла тора ине – саҡ сыҙай торғайным. Әллә күптән тәүәккәлләр ҙә инем – ҡатыным һаҡта торған эттән былайыраҡ һағаланы шул. – Мөстәнетдин дә йылдам ғына тороп баҫты.

– Ғәҙәтеңде белеп бөткән: бисәләр артынан мәңге мөстәндәнең. – Тәләфетдин ирендәрен бөрөштөрҙө.

– «Йыртыҡ тишектән көлә» тиҙәр. Хәстрүш, мине кәмһетәһеңме? Ә мин һине йәлләмәйем: ҡатын ҡосағының рәхәтен күрмәйенсә, ғүмереңде тәләф иттең, заяға уҙғарҙың. Байғош бит һин, Тәләфетдин, бәхетһеҙ йән! – Мөстәнетдин, ситкә боролоп, йән көскә сертләтеп төкөрҙө.

– Ярай, малай–шалайға оҡшап, юҡ–бар әйтешмәйек. Сибәр бисәгә ире үлгән көндө үк күҙем төшкәйне. Таштуғандың гүр эйәһе булғанына ике йыл тулды, ә мин Гөлфисәгә хис–тойғоларымды тойҙорманым. Ҡуйыныма алырға уйлайым–уйлайым да тартынам. Ниңә бөгөнгәсә икеләнеп–шикләнеп, бөжләп йөрөнөм икән? Сараһыҙланып үҙе саҡыра. Егәрле бит ул – донъяһы етеш. Ҡасандан бирле бал–майҙа йөҙөп кенә йәшәр инем. Баҙнатһыҙлығыма үкенәм. Тағы стакан күрһәтә. Хәҙер, Гөлфисә йөрәкәйем, күпкә түҙгәнде, әҙгә түҙ – хәҙер эргәңә килеп етәм. – Ул ҡорҙашына һауалы ҡараш ташланы. – Ярай, Мөстәнетдин, һау бул! – Бик дәртләнгән Тәләфетдин йәһәт кенә ҡаршылағы ҡапҡаға табан юрғаланы.

Уның артынан ҡарап ҡалған Мөстәнетдин тәрән көрһөндө:

– Өйләнешһәләр, ялҡау Тәләфетдиндең бүреһе олор инде. Ҡатынды ҡалдырып, Гөлфисәгә йортҡа керергә ниңә элегерәк башыма килмәне икән? Әх–ти, үкендерә. Минең ҡатын ҡоторған алабайҙан арттырып абалай: ҡоҙоҡтан һыу ташырға, картуф ҡаҙырға, утын ярырға ҡуша. Ә Гөлфисә Таштуғанын улай ыҙалатманы – барыһына ла үҙе тырышты,

бөтәһен дә үҙе эшләне. – Мөстәнетдин ҡарашын ҡаршы йорттан алмай, баҫҡан урынында тапанды.

… Ишек асылғанын Гөлфисә ишетмәне, шикелле: өҫтәлгә теҙелгән эреле–ваҡлы һауыт–һаба менән булашыуын белде.

– Ҡайнар сәләмдәр, сибәр бисә Гөлфисә! «Бисә» тиергә тел бармай – йәш ҡыҙҙарға тиңләрлек әле һин: матурлығың таң ҡалдыра, егәрлегең һоҡландыра, ҡараштарың ҡаушата. – Тәләфетдин теле–телгә йоҡмай тәтелдәне.

– Ә–ә–ә, ағай, һин икәнһең. Ҡайһылай һүҙгә оҫтаһың. – Гөлфисә тотлоҡто: «Эшкә лә шулай шәп булһаң икән» тип саҡ әйтмәне. Әйтмәүенә һәләк кинәнде: кеше битен йыртырға яратмай ул.

– Көн итмешең бөтөн – ғәләмәт хәлле йәшәйһең икән. – Тәләфетдин өй эсен байҡаны.

– «Тормошоң торған һайын яҡшыра» тип, туған–тыумасаларым да шатлана. Таштуған баҡыйлыҡҡа күскәс, донъям ҡотайҙы. Йәмәғәтемде «йәшел йылан» ҡосағынан айырырға айҡалаштым–талаштым: араҡыны ташлата алманым. Бахырҡай ҡара гүр ҡуйынына кергәнсе бар тапҡан – таянғанымды тамағына оҙатты ла торҙо. – Хужабикә хәбәрен икенсегә борҙо. – Баҙнатһыҙ балаға оҡшап, ниңә ишек төбөндә тораһың? Уҙ, ултыр, йомошоңдо әйт, ағай.

Тәләфетдин ҡыйыуланды, йәһәт кенә түргә үтте. Ул арала Гөлфисә, тәҙрәгә табан боролоп, ҡулындағы стаканды өҫкә күтәрҙе лә иғтибар менән төбөн ҡарарға тотондо.

– Үҙең әйт йомошоңдо, ҡул болғап, ниңә саҡырҙың? – Тәләфетдин мут йылмайҙы ла өҫтәл өҫтөнә теҙелгән эреле–ваҡлы һауыттарҙы күҙҙән үткәрҙе.– Нимә эшләйһең?

– Гөл үҫентеләрен тикшерәм. Әллә йылылыҡ, әллә яҡтылыҡ етешмәй: күбеһенең тамыры мандымаған. Бигерәк яратам шуларҙы – быныһы миләүшә, быныһы яран, быныһы…

Тәләфетдин түҙмәне, Гөлфисәнең һүҙен бүлдерҙе:

– Ә ниңә тамырҙы тәҙрәгә ҡарап тикшерәһең?

– Яҡтыла яҡшыраҡ күренә. Мынауы тамсы гөлдөң генә тамыры арыуыраҡ. Йомошоңдо әйт, ағай. – Хужабикә бокал–стакандарҙан күҙен алманы.

«Елле егет»тең кинәнестәре кинәт кәмене, кәүҙәһе кесерәйҙе. Әммә ниңә килеүенең сәбәбен үҙгәртеп ебәрергә көсө етте:

– Ни… Мөстәнетдиндең эсе боша – ҡәйнәһе сирләй икән. «Яртыһы ултырһа, үтескә биреп торһон» тип, мине кереткәйне.

– Өйҙә араҡы тотоу түгел, шул ағыу һатылған урынды урап уҙам мин, ағай! Һеҙҙе һуҡмыш сағығыҙҙа осратһам: «Быларҙы ла «йәшел йылан» быуып үлтерер инде» тип, ҡурҡып ҡарайым. Бөтәшкән күҙҙәрегеҙҙе, шешенгән йөҙөгөҙҙө шөбһәләнеп күҙәтәм. Әжәле еткән әҙәмдең төҫө үҙгәрә, күҙ нуры бөтә. Кем үлһә лә йәл. – Гөлфисә түгелеп иларға тотондо.

Тәләфетдиндең кәйефе китте. Өмөттәре өҙөлһә лә: «Форсаты сыҡҡанда ҡосаҡлап үбәйем әле, йыуатҡан булайым. Тере йән бит, бәлки, әүрәр…» тип уйланы ла ҡатынҡайға ынтылды. Тик ибәтәйһеҙ үрелде – пинжәк салғыйына эләгеп, өҫтәлдәге стакандар иҙәнгә төшөп китте. Көтөлмәгән хәлгә һеңгәҙәгән Тәләфетдин, һиҙмәй ҙә ҡалды – гөлдәр үҫентеһенә баҫты.

– Ай, әрәм генә иттең! – Хужабикә, йәне көйгәнен һис йәшермәй, Тәләфетдингә текәлде. – Тфү! Эскеселәрҙе күрә алмайым! Бүтән аяҡ баҫма тупһама! Мөстәнетдин шешәләшеңә әйт: араҡы эҙләп, мөстәндәп йөрөмәһен! Бар, бар, күҙемә күренмә!

– Биғәйбә… – Быныһы баҙанғайны, тотлоҡто. – Ул, юҡҡа өмөтләнгәненә сикһеҙ үкенеп, арты менән ишеккә сигенде, йәһәт кенә сығып китте.

«Мин, йүләр, күҙе тонған эскесене түргә саҡырам бит әле…» – Үҙенең ихласлығына, эскерһеҙлегенә Гөлфисә лә бик үкенә ине.

## Йонсоткан йомаҡтар

*Скетч*

Эскәмйәлә Сәғит ҡарт менән Мөғит ҡарт ултыра.

*Мөғит (иҫнәй).* Бөгөн насар йоҡланым.

*Сәғит.* Минең дә йоҡом әллә нисә бүленде. Йәш саҡта баш мендәргә тейеү менән йоҡлап китә торғайным.

*Мөғит.* И–их, бала кеүек иҫ белмәй бер йоҡлаһаң ине!

*Сәғит* (*бүлдерә*). Йөрәк әрнетеп, балалыҡты иҫкә төшөрмәйек әле. Бала саҡ бит ул ҡайғыһыҙ саҡ – еңел, рәхәт йәшәйһең: кейем–һалым, ашау–эсеү әсәй менән атайҙан, ә йоҡо тигәнең – Хоҙайҙан.

*Мөғит.* Дөрөҫ, әммә ауыр нәмә лә бар ине…Миңә ифрат ҡыйыны – йомаҡтарға яуап табыу ине. Өләсәйем йомаҡ ҡоя – мин яуап эҙләп, баш ватам. Таба алмай интекһәм, өләсәйем әйтә. Мәрхүмә йомаҡтарҙы үҙе уйлап сығара ине, шай.

*Сәғит.* Өләсәйең зиһенле булған: йомаҡ тигәс тә…уның мәғәнәһен уйлап табыр өсөн, һүҙ уйнатырға аҡыл кәрәк.

*Мөғит.* Балтаһы һыуға төшкән байғошҡа оҡшап, аңшайып ултырмайыҡ, әйҙә, беҙ ҙә йомаҡ ҡояйыҡ.

*Сәғит.* Һин башла. Өләсәйең һымаҡ, йомаҡ ҡойорға, моғайын, маһирлығың барҙыр. Унлаған йомаҡ әйтһәң, шунан миңә сират етер.

*Мөғит* (*көлә*). Һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтырырға шәпһең. (*Уйлана*) Тыңла: «Һис ҡурҡмай, һис тартынмай – ауыҙыңдан, ҡулыңдан тартып ала».

*Сәғит (шатлана).* Ҡарға.

*Мөғит.* Бандит булыр. Аллам һаҡлаһын – мәлғүндәр беҙгә осрамаһын.

*Сәғит.* Осраһа ни… Беҙҙән нимә алһындар?

*Мөғит.* Минең күҙлегемде, һинең ҡул таяғыңды талап алырҙар. Улар таларға өйрәнгән. Йә, мыныһы ни: «Күп шыҡырҙай – күҙенә күренгән һәр нәмәне сәлдерә».

*Сәғит.* Һайыҫҡан. Бер заман шулай бажалар менән йылға буйында һарыҡ итенән шешлек ҡыҙҙырабыҙ. Әмәлгә ҡалғандай, һыу инергә булдым. Сәғәтемде сисеп, кейемем өҫтөнә һалдым. Һыуҙан сыҡҡас, ҡараһам, сәғәт юҡ. «Шул тирәлә шыҡырҙап, алан–йолан ҡаранып, һайыҫҡан йөрөнө: ул алып киткәндер», – ти бажа. Бер нисә йылдан бажа лапаҫын яңыртҡанда һайыҫҡан ояһына юлыға: «Әллә күпме сәғәт, хатта көмөш тәңкәләр, беләҙектәр бар. Һинең сәғәтең дә шунда ине»,– тип көлә.

*Мөғит.* Яуабың мин уйлағанса түгел. Һайыҫҡандан сосораҡ бит сиғандар. Бигерәк тә ҡатын–ҡыҙ заты: хәбәрен һөйләй–һөйләй, күҙ быуа ла кеҫәңә ҡулын һуҙа. Артабан тыңла: «Урлап йыйғанын ифрат йыраҡ йәшерә – һис табырмын, тимә».

*Сәғит (шатланып, усы менән тубығына һуҡҡылай).* Йомран. Ер аҫтына йәшерә бит ул игенде.

*Мөғит (йәне көйөп).* Олигарх йомрандан оҫтараҡ. Улар урлап йыйған байлыҡты табырлыҡ түгел: бик йыраҡҡа – сит илдәргә – йәшерә. Мыныһының яуабын уйламай ҙа сисерһең: «Үҙенең балаһын ташлап китә».

*Сәғит (йылмая).* Әлбиттә, кәкүк. Балаһын кәкүк тигән ҡош баҡмай.

*Мөғит* (*асыулана*). Кәкүктән арттыралар хәҙерге бисәләр: сабыйҙарын табалар ҙа теләһә ҡайҙа ташлап китәләр. Бишенсе йомағымды ла тыңла: «Күп сифатҡа эйә ул: һандуғас түгел – һайрай; күгәрсен түгел –гөрөлдәй».

*Сәғит (сәпәкәй итә).* Әлбиттә, тутыйғош. Һәр һүҙҙе отоп ала, һәр ауазды ҡабатлай.

*Мөғит.* Мыйығыңа урап ҡуй: депутатлыҡҡа кандидат булыр – теле телгә йоҡмай, бихисап вәғәҙәләр бирә, һайланғас, береһен дә үтәмәй.

Мыныһы ни: «үҙе яланғас, ояла белмәй – һикрәндәй ҙә һикрәндәй; йыры йырға оҡшамаған – баҡылдай ҙа баҡылдай».

*Сәғит.* Әлбиттә, тәлмәрйен.

*Мөғит* (*упкәләй)*. Кемдән оттоң «әлбиттә» тигән һүҙҙе? (*«әлбиттә»гә баҫым яһай*). Әлбиттә, әртискә. Әртистәр күберәк, бейегерәк һикергән һайын аҡсаға мулыға, әммә оҙон итәкле, түше ябыҡ күлдәккә бол еткерә алмай: сәхнәгә ярым яланғас сыға. Был йомаҡтың яуабы бик еңел: «Күҙе бар аҡайырға, ҡанаты бар һуғырға».

*Сәғит*. Ата ҡаҙ.

*Мөғит (башын сайҡай)*. Һаман һандырайһың. «Полицейский» тип әйтһәңсе. Полицейскийҙың «ҡанаты», йәғни таяғы, бар туҡмарға, күҙҙәрен аҡайтып, өлгөрә һине «тунарға». Был йомаҡ әлегеһенә оҡшаш: шулай булғас, ни икәнен уйламай ҙа табырһың: «Күҙе бар – күрмәй, ауыҙы бар – өндәшмәй».

*Сәғит.* Балыҡ. Балыҡ күҙле булһа ла, сәпсим күрмәй, ти ғалимдар. Бахырҙы табала ҡураһың – өндәшмәй.

*Мөғит.* Ғалимдарҙың «балыҡ күрмәй» тигән фекерен ишеткәнем юҡ. Ә дөрөҫө шул: ришүәт алыусы. Ул ришүәт биргәндәрен күрмәмеш була, «Миңә бер нәмә лә кәрәкмәй», тип мәңге әйтмәй. Быныһы һуңғы йомаҡ: «Ҡырым сиреүе түгел – бөтәһен ҡырып бара».

*Сәғит.* Саранча. «Ҡара сиңерткә» тип тә әйтәләр.

*Мөғит (ауыр һулай)*. Чиновниктар. Ярышып–ярышып байлыҡ артынан ҡыуалар. Нимәгә күҙҙәре төшә, көстәре етә – барыһын да үҙләштерәләр. Тәк… Хәҙер һинең сират.

*Сәғит (сикәләрен һыйпай ҙа мут йылмая)*. «Айыу түгел – үкерә, эт түгел – өрә».

*Мөғит*. Минең ҡарсығым. Минең Хөршиҙәм.

*Сәғит (аптырай)*. Мин, йомаҡтарға дөрөҫ яуап таба алмай, йонсоп бөткәйнем. Ә һин ҡалай тиҙ таптың. Афарин, өләсәйеңә оҡшағанһың.

Ана,ҡара әле, Хөршиҙәң килә. Һине эҙләйҙер. Оҙаҡ ултырҙыҡ. Үкермәҫ, өрмәҫ борон тиҙерәк шылайыҡ.

*Йәһәт кенә сығып китәләр.*

*Тамам.*

### Яулыҡты кем урлаған?

Мәүжиә телефондың аяуһыҙ шалтырауына иләүһерәп уянды. Ятып ҡына торғайны– серемгә киткән икән. Йәһәт кенә телефон трубкаһын күтәрҙе:

- Әллеү! – тине, һиҙкәнеүен һиҙҙермәҫкә тырышып.

- Бөгөн өсөнсөгә шалтыратам, ҡайҙа йөрөйһең ул, донъяңды онотоп? – Ғинәнә тигән танышы йәне көйгәнен йәшермәне.

Мәүжиә – шаян ҡатын – һүҙҙе кеҫәһенән эҙләмәй: Ғинәнәнең кәйефен тиҙерәк күтәрергә теләп:

- Нәүем баҙарын байҡаным, – тигән булды.

- Һинең ғәҙәтеңә һеңгән: баҙар ҡыҙырмаһаң, Мәүжиә тигән исемең юғалыр. Һәр кемдең телендә баҙар, был ни хәл? – Ғинәнәнең кәйефе күтәрелмәне, киреһенсә нүлгә төштө.

- Аптырама, донъябыҙ, тормошобыҙ тотош баҙарға әйләнде бит. – Мәүжиә әңгәмәсеһен тынысландырырға тырышты.

- Алыҫмы ул нәүем баҙары?

- Янымда ғына, яп–яҡын...– Мәүжиә көлөп ебәрҙе.

- Үткән айҙың йомаһында көн оҙоно һиндә ултырҙым. «Яңы баҙар астылар» тип ниңә әйтмәнең? – Ғинәнә һаман үпкәләне.

Мәүжиә мәрәкә хәбәрен дауам итте:

- Хәҙер техника заманы бит. Баҙарҙы өс көндә төҙөнөләр, хи–хи–хи...

-Ҡолонон саҡырған бейәнән былайыраҡ сырҡырайһың – юлың уңғандыр. Ниҙәр бар баҙарҙа, нимәләр алдың? – Ғинәнәнең үртәлеүе һис кәмемәне.

-Йәнең ни теләй – бөтәһе лә бар: емеш–еләктең ниндәйе генә юҡ, күлдәктәр, яулыҡтар, тиһеңме...– Мәүжиә мауығып уҡ киткәйне.

Ғинәнә, хәбәрҙе бүлдереп, тәжрибәле тәфтишсе тиерһең, һорау алыуҙы дауам итте:

-Тағы яулыҡ алдыңмы? Төркиәлә ял иткән йылда йөҙләп матур–матур яулыҡтар алып ҡайтҡайның – улар ҡайҙа?

-Бәй, бүләккә тараттым. Һиңә лә ике яулыҡ тотторҙом, әллә оноттоңмо? Затлы яулыҡтар аҙ ғына ҡалды. – Мәүжиәнең был һүҙҙәре дөрөҫ ине.

-Уңай булған! – Ниһәйәт, Ғинәнәнең күңеле күтәрелде – Мәүжиә әхирәте ҡыйын хәлгә тарыһа йә берәй эш–көшө уңмаһа, ул ифрат шатлана.

Уның көнсөл ҡәлбенә өйрәнеп бөткән Мәүжиә үҙенекен һөйләне:

-Баҙар яңы асылғас, һатып алыусыларҙы ылыҡтырырға тырышыуҙары – яулыҡтар күҙҙе ҡыҙыҡтыра, осһоҙ. Йылтыр нәмәләрҙе бүләк итеп бирергә йәтеш бит, хәтһеҙ генә тейенермен, тим әле.

-Осһоҙ, тинең. Күпме тора?

-Әлләсе... Хаҡы иҫтә ҡалмаған. – Алдаша белмәгән Мәүжиәнең фекере буталды.

-Күпме торғанын иҫләмәгәс, әллә сәлдерҙеңме? – Ғинәнә ниңәлер кинәнә ине.

-Ғүмеремдә кешенең энәһенә лә, төймәһенә лә теймәнем. Урлашыу түгел, тапҡан әйбер ҙә килешмәй миңә: бер һум тапһам, күп тә үтмәй, ун һум юғалтам. Урлашыу хәрәм ейеп үҫкәндәргә генә килешә бит ул. Ә мине хәләл ризыҡ менән үҫтерҙеләр! «Хәләлдә – бәрәкәт, хәрәмдә – һәләкәт» тип әйтә ине әсәйем. – Мәүжиә рәнйене – һүҙҙәрҙе автомат шикелле һиптерә генә.

-Ярай, нитмә, ярһыма! Минең ҡәлбем дә нәҡ һинеке кеүек. Мына Марик ҡына... оҡшаған нәмәгә айыу майы һөртөргә генә тора. Йәш саҡта алама холҡонан арындырам, тип туҡмаҡ та эләктерҙем. Әле лә шулай. Үткән аҙнала Фәнәмиә апайҙа ҡунаҡта булғайныҡ бит?

-Эйе, һәләк һәйбәт әҙерләнгәйне әбекәй. Бик күңелле ултырҙыҡ. «Ҡунаҡ ашы – ҡара – ҡаршы», тиҙәр. Киләһе аҙнаға мин әҙерләнәм. Һин ҡасан саҡырырға уйлайһың?

-Ҡунаҡ ҡайғыһы юҡ әле. Мин ни өсөн шалтыратам. Диҡҡәт менән тыңла. Фәнәмиә апайҙан ҡайтып кергәс, хәл алырға ла өлгөрмәнек, ишек ҡыңғырауы, янғын сыҡҡан, тиерһең, өҙлөкһөҙ зыңғырларға тотондо. Эләгә–ҡолай барып асһам – тынын саҡ алып, йөҙө ағарған, күҙҙәре аларған Фәнәмиә ҡарсыҡ баҫып тормаһынмы!

-Ғинәнә, тиҙ кейен, Мәүжиә әхирәтең яулығымды сәлдергән, тиҙ генә барайыҡ, бурҙың асылын асайыҡ та йөҙөнә төкөрәйек.Һин шаһит булырһың, –ти.

-Башыңа бик зиннәтле яулыҡ ябынғайның, әллә шуны юғалттыңмы?– тим.

Минең һөйләп бөткәнде көтмәне – ҡарсыҡ нығыраҡ ярһыны:

–Нәҡ шул яулыҡ. Тирләгәс, башымдағыһын систем дә йоҡарағын, еңелерәген ябындым. Матур яулығыма Мәүжиә йыш–йыш ҡарап ултыра ине лә...

–Бәй, ул яулыҡты һиңә Мәүжиә үҙе бүләк иткән ине лә...– тим.

–Ниңә бүләк иткәненә үкенгәндер. Йүнлегә тексәйгән, тиһеңме? Йәлләгән, тимәк. – Фәнәмиә ҡарсыҡ аҡырып иларға тотондо.

Шул саҡ төпкө бүлмәнән Марик килеп сыҡты ла ишек яғындағы сөйҙә элеүле пинжәгенә күҙ төшөрҙө. Беҙ ҙә шул яҡҡа ҡараныҡ: пинжәк кеҫәһенән яулыҡ осо күренә ине. Фәнәмиә ҡарсыҡ йәһәт кенә кеҫәгә үрелде – матур яулыҡты тартып та сығарҙы:

–Мына , – тине ул, тыны бөтөп, – минең байрамдарҙа ғына ябынған яулығым.

Марик бер һүҙ ҙә әйтмәй, бүлмәһенә кире кереп китте. «Бурҙың бүреге яна» тиҙәр бит – көтмәгәндә үҙен тотторҙо. Пинжәгенә күҙ төшөрмәһә, беҙ бер нәмә лә күрмәҫ инек...

Мәүжиәнең иҫе китте:

–Марикка бисәләр әйбере ниңә кәрәк – һиңә бирәме, бүтән ҡатын–ҡыҙҙы бүләкләйме?

– Оҙаҡламай баҡса эштәре башлана. Баҡсала яулыҡ ябынып йөрөй Марик. Балыҡ тотҡан, һыу кергән, йә бүтән урындарҙа яулыҡты һалып тора ла, онота. Машинаһын да яулыҡ менән йыуа бит ул.

–Бәй, машинаһын сепрәк–сапраҡ менән йыуһын, – тигән булды Мәүжиә, аптырағас. – Яулыҡ менән машина йыуғандарын ишеткәнем–күргәнем булманы. Был донъяла ниндәй хәш... ы–ы–ы... сәйер кешеләр бар икән!

Ғинәнә, бер килке һүҙһеҙ торғас, телгә килде:

–Шулай күнеккән. Яулыҡ менән йыумаһа күңеле булмай. Шуға ҡайҙа барһа ла яулыҡ урлай. Әйбер иҫкеме, яңымы – ҡарап тормай. Тешемде ҡыҫып түҙәм – кешегә һөйләмәйем. Әле лә өндәшмәҫ инем – Фәнәмиә ҡарсыҡ яулығын һиңә, ғәйепһеҙ кешегә, япһармаһа. Мәүжиә, нәүем баҙары, исмаһам, беҙҙең йорт эргәһендә төҙөлһә, Марик яулыҡҡа буйтым байығыр ине...

–Эйе лә, һатыусылар шуларҙы йыуғыс һымаҡ күмәртәләп элеп ҡуя – күп булғас, һан юҡ. Үҙем яулыҡ ябынырға яратмайым. – Мәүжиә көлөп ебәрҙе.

– Минең көйөнөскә әллә һөйөнәһең инде?– Ғинәнәнең тауышы ҡарлыҡты.

– Зинһар үпкәләмә! Тыңла: Төркиәнән алып ҡайтҡан яулыҡтарҙы таратып бөтмәгәйнем. Мәрхүмә әсәйемдең хәйергә таратҡандан ҡалған яулыҡтары ла бихисап. Ғинәнә, кил, шуларҙың барыһын да ҡулыңа тоттороррмон.Марикка тапшырырһың. Оҙаҡҡа етер. Сәйер йәмәғәтең,

әйҙә, кинәнһен. Артабан ҡарсыҡтарҙың яулыҡтарын урламаһын, яманатҡа тарымаһын, йә яуапҡа тарттырырҙар.

– Шулаймы? Рәхмәт һиңә, Мәүжиә! Хәҙер барып етермен, көт!

– Көтәм! – Мәүжиә телефон трубкаһын һалды ла саҡ ҡына уйланғас, йәһәт кенә йәнә һандарҙы йыйҙы: «“Нәүем баҙарының” – йоҡо икәнен Ғинәнәгә төшөндөрәйем, әтеү баҙарға барайыҡ, тип аптыратыр. Шаяртыуҙы аңламай бит ул» – Мәүжиә рәхәтләнеп көлдө...

## Яҡшы булған!

*Шәмсүриә кеҫә телефонынан шылтырата.*

– Але! Сәләм, Айзирәк! Әхирәтем Айзирәк, һиндәй сибәрҙәр һирәк! Нисек йәшәйһең, ниңә кәйефең юҡ? Нимәкәйең йыртылды? Ә–ә–ә, баҙарҙан алған халатың ике кейергә лә етмәй, бүҫелдеме? Тәпешкәләрең өс көнгә лә сыҙамай, табандары ҡубып сыҡтымы? Яҡшы булған! Эйе, бик һәйбәт. Һис кенә лә үсәмәйем, Айзирәк. «Ҡытай әйберҙәре сифатһыҙ» тигәнемә йөҙөңдө сирылтҡайның, ышанмағайның. Бөтә кеше белгәнде һинең белмәүеңә бик ғәжәпләнгәйнем. Ҡытайҙар үҙҙәре һәләк һәйбәт бēлә.

Ҡәйенһеңлем Төмәндә төпләнгәйне. Аҡсаға ҡыҙышып, ҡараулы булыр, тип тә уйлағандыр, фатирына ҡытай ғаиләһен керетте. Ул фатир минекенә ҡапма–ҡаршы ғына. Күрәм: былар яңы йоҙаҡ ҡуйҙы. Кисә ҡуйған йоҙаҡты бөгөн алмаштыралар. Ишетәм: «Ҡытайҙа эшләгәндәр» ти ҡатыны. «Эйе, беҙҙә етештергәндәр» ти ире.

Айзирәк әхирәт, бик бөтөрөнмә – арыу, сифатлы ғына тауарҙы ҡайҙан табаһың? Ҡытайҙың бер генә ҡулланырлыҡ әйберҙәренән бүтән нәмә юҡ. Ярай, күрешербеҙ, көйөнөстәр бүҫкәргәнсе һөйләшербеҙ әле. Сәләмәтлек теләйем!

*Шәмсүриә икенсе кешегә шылтырата.*

– Але!  Ҡара ҡашым, ҡайнар сәләмдәремде ҡабул ит! Бик ярһығанһың Бәкирә әхирәт, ни булды? Улыңды әрләнеңме? Ниңә әрләнең? Өйләнмәүенә йәнең көйәме? Өйләнмәүе бик яҡшы! Ҡатын–ҡыҙҙан йөҙ сөйөрөүенең сәбәбен белмәйһеңме? Мин һәйбәт беләм – әйтәйемме? Тыңла, улайһа. Сәстәрен тарамаған албаҫтыларҙың яланғас түштәрен, яланғас боттарын көндә күргән улыҡайың ҡатын–ҡыҙҙан биҙеп бөткән, ғәйрәт кенәһе кәмегән, тимәк.

Яңыраҡ ете йәшлек ейәнсәрем:

– Өләсәй, – ти, – «беҙ йәш саҡта магазиндарҙа тауар юҡ ине» тип һөйләгәйнең, иҫеңдәме? – ти.

– Иҫемдә, – тим.

– Элек бит ҡыҙҙар, апайҙар итәкле күлдәк кейгән – шуға тауар тиҙ бөткән. Ә хәҙер кибеттәрҙә матур–матур бәрхәт, ебәк, ситса, сатин ниңә тулып ята? – тине лә үҙенең һорауына үҙе үк яуап бирҙе. – Хәҙерге ҡыҙҙар, апайҙар, хатта әбейҙәрҙең ҡайһы береһе итәкле күлдәк киймәй, шуға тауар һатылмай.

– Бәй, «итәкһеҙ күлдәк» тигәнеңде нисек аңларға? Күлдәк итәкһеҙ булмай бит, балам, – тим.

– «Итәкһеҙ күлдәк» тигәнде үҙем уйлап сығарҙым. Ә һин, өләсәй, 30 сантиметр  оҙонлоғондағы япманы нимә тиер инең?

– Әлләсе…  Белмәйем…

– Хәҙер һин дә «итәкһеҙ күлдәк» тип һөйләргә ғәҙәтлән. – Шырҡылдап  көлә  шилма ҡыҙыҡай. Һораӯҙар табып ҡына тора. – Өләсәй, – ти, – апайҙарҙың  ялбыр сәстәре араһынан биттәре лә, ҡаштары ла, күҙҙәре лә күренмәй. Улар ниңә сәстәрен тарамай икән? Кәкре тараҡтары юҡмы? – тип, теңкәмә тейә.

– Ниндәй кәкре тараҡ? – тим, тағы аптырап.

– «Кәкре тараҡ менән тарағас, сәстәрҙе матур итеп йыяһың да ҡаҙап ҡуяһың, тирә–йүндәге кешеләргә ҡамасаулап, ялбырап та йөрөмәйһең. Аш–һыуға ла сәс төшмәй», тигәйнең.  Әллә оноттоңмо?

– Шулай тигәйнем шул. Мына һинең күңелеңә һеңгән, бик һәйбәт! – Ҡыуанып һөйәм ейәнсәремде.

Бәкирә әхирәт, бер бөртөгөңә бик екермә, йәме. Кәңәшем шул: улыңдың ярым–яланғас бисураны алып ҡайтмауына шатлан. Һау бул!

*Шәмсүриә тағы шылтырата.*

– Але! Вәлимә, һиңә һүҙем бар бер кәлимә. Әллә илайһың инде? Ниңә илайһың, ни булды? Бәй, ирең ташланымы? Ҡасан ташланы? Һинең Юрий ҡылананалыр юрый, ҡурҡыталыр ғына. Арыу ғына, татыу ғына йәшәй башлағайнығыҙ, шай. Йә, юҡҡа ярһыма. Ташлағас, яҡшы булған. Һинең көнө–төнө сәмәй ҡайнатыуыңа, ҡайнатма бутап, «коньяк» тип һатыуыңа тәки өйрәнә алмаған, тимәк. Етте, буҙлама. Йәшерәген табырһың әле, йыл һайын яңы йәр һөйөргә–һөйөлөргә өйрәнеп бөткәнһең. Йә, йә, үпкәләмә, һис тә көлмәйем, дөрөҫөн генә һөйләйем. Әле кәңәш тә бирәйем: яҙмышыңды мында тапмаһаң, Ҡырымға бар – унда ир–ат ҡырылышып йөрөй, тиҙәр. Хәҙер Ҡырым үҙебеҙҙеке – береһе лә ҡырын ҡарамаҫ. Туп–тура Севастополгә йүнәл, унда урам тулып йөрөй икән сибәр–сибәр әфисәр. Бәй, әфисәр теләмәһәң, адмирал эҙлә.

Һине ирең ташланы, ә мин ҡомарлығым арҡаһында ирһеҙ ҡалдым. Шәхси эш асҡайным бит. Яңғыҙҙарҙы димләнем – бер–береһен ғүмерҙә күрмәгән–белмәгән бәндәләрҙе ишләндерҙем. Кәсебем һәйбәт килем килтергәс, ҡомар ҡосағына сумғанмын. Әүҙемлегемә ирем шикләнде, көнләште. Эш бүлмәмдән сыҡмай, янымда ултырырға ғәҙәтләнде, күҙ ҡарашымды, һәр хәрәкәтемде диҡҡәт менән күҙәтте. Ә мин кешеләрҙе димләй башлаһам, иремде лә, донъямды ла онотам. Ҡомарланып, хәләл йәмәғәтемде бер мәрйәгә димләгәнмен. «Димсе диңгеҙ кистерә» тиҙәр. Киләсәккә ҙур мөмкинлеге, йәғни перспективаһы, ҡулында өр–яңы дан машинаһы булыуы ылыҡтырғандыр – мәрйәкәй иремә сат йәбеште. Минең ирем икәнде белмәүе лә, йәмәғәтем менән рәсми никахыбыҙҙың юҡлығы ла уға ҡулай ғына булғандыр. Эштәрем ифрат уңышлы барыуына күҙҙәрем шыпа тонған, тегеләрҙе ЗАГС–ҡа оҙатып, арып–талып өйгә

ҡайтҡас ҡына ир иҫкә төштө. Әлегәсә ғәжәпләнәм: йәмәғәтем ниңә өндәшмәгән – мәрйәгә күҙе төшкәнме, әллә хәл–әхүәлдең ни икәнен, сетереклеген төшөнмәгәнме?

Вәлимә, «бер кәлимә һүҙем бар» тигәйнем, ни әйтергә теләүемде оноттом инде – хәтеремә төшһә, тағы шылтыратырмын.

*Шәмсүриә яңы номерҙар йыя.*

– Але! Арыумыһың, Аҡсулпан апай! Бәй, бөгөн ниндәй көн булды әле… Гел хәтәр хәбәр ишетәм. Шунан ни булды? Колбасаларҙы этең дә, бесәйең дә ашамаймы? Колбаса һалынған һауыт янынан ҡойроҡтарын сәнсеп ҡасыуҙары ифрат яҡшы. Колбасаларҙа ит юҡ, тигәнемә ышанмай инең. (*Һөйләшә–һөйләшә сәхнә артына сыға).* Быны хәҙер ышандың. Ышаныуың яҡшы булды – шуны башҡа алмаҫһың – аҡсаңды «һыуға һалмаҫһың».

## Хикмәтле төш

Ҡәнизә оҙон эскәмйәлә тыныс ҡына ултыра ине. Ҡапыл ҡулбашына ниҙер ҡағылды. Ифрат ҡурҡҡан ҡатынҡай ҡаты ҡағылған нәмәне тотоп алды. Ҡош икән. Ул, аптырауынан арынып, ҡоштоң ҡанаттарынан аймап, әйләндереп–тулғандырып ҡарай башланы: күгәрсен шикелле. Ысынлап та, күгәрсен! Бәй, ҡош ысын түгел, ҡатырғанан яһалған. Бала–саға тырышҡандыр. Харап оҡшатҡандар бит әле: кәүҙәһен күк төҫкә, тәпәйҙәрен ҡыҙылға буяғандар. Бәй, әлегәсә нисек шәйләмәгән: күгәрсен тәпәйенә нимәлер бәйләгәндәр бит. Ҡатынҡай ҡағыҙға яҙылғанды уҡырға тотондо: «Ал–ял белмәгән егәрле хәбәрсебеҙ ҡәҙерле Ҡәнизә Ғәйептәр ҡыҙына» тиелгән. «Ҡәҙерле» тигәндәр, «егәрле» тигәндәр – тимәк, хөрмәтләйҙәр. Шатлыҡтан ҡатынҡай аңғармай ҙа ҡалды – уйынсыҡ ҡошто сойорғотто ла ҡуйҙы. Күгәрсен нимәгәлер бәрелде лә ергә тәгәрәне. Баҡһаң, таш һынға һуғылған. Нисек күрмәгән: уға яп–яҡын ғына һәйкәл тора, имеш, һерәйеп. Быны ҡайһы арала ҡуйғандар? Ярай, уныһы мөһим түгел, мөһиме – һәйкәл кемгә тәғәйенләнгән?

Ҡатын таш һын янына яҡынлашты. Ҡәнизәнең йәнә иҫе китте: һәйкәл алтындан ҡойолған, шай… Быға ни саҡлы алтын әрәм иткәндәр! Әллә алтын төҫөндәге буяуға буяғандармы? Ярай, унынһын аҙаҡ ашыҡмай – ҡабаланмай ғына асыҡлар. Һәйкәл кем өсөн – йәһәтерәк шуны белергә кәрәк. Ул алтаҡтаға баҡты ла шаҡ ҡатты: «Ҡәнизә Ғәйептәр ҡыҙының теленә тилсә сыҡһын!» тип сыймаҡлағандар. Аббау, быны ла уға арнағандар! Һәйкәлдәге бисәнең таҫыр күҙҙәрен дә, оҙон танауын да, кейгән кейемен дә һәләк килештергәндәр. Күлдәктәрен Ҡәнизә әберкәләп үҙе тегә. А–а–атаҡ! Телен ҡайһылай оҙонайтҡандар – түшенә тиклем һәлберәп төшкән. Бәй, бәндәнеке түгел, әллә йылан теле инде? Йыландыҡы шул: аршын оҙонлоғондағы асалы теле аҫҡа һалбыраған, үткер тештәре зәһәр һерәйгән – «хәҙер сағам, хәҙер үлтерәм!», тип янай һымаҡ. Йылан, шулай яман яҫҡаныып, шатлана.

Ҡәнизә лә ҡыуанасаҡ. «Теленә тилсә сыҡһын!» тип ҡәһәрләгән кешене барыбер табасаҡ. Унынһы аяуһыҙ ауырлыҡтарға тарыясаҡ, язаһын буйтым аласаҡ. Ҡәнизә әлегәсә бер кемдән дә үҙенә һүҙ тейҙертмәне, ҡырын ҡаратманы – артабан да шулай буласаҡ…

…Һәйкәл төҙөүсене йәһәт кенә эҙләп табырға ла кәрәген бирергә ниәтләгән Ҡәнизә шаҡ иткән тауышҡа уянды – бәй, иҙәндә ята ла ул. Әл–лә–лә, теленең үҙәккә үтеүҙәре! Карауаттан ҡолағанда тел генәһен тешләгән бит. Ай–ай, сыҙарлыҡ түгел – һыҙлай.

Ҡатын тырышып–тырмашып иҙәндән торҙо ла көҙгө алдына баҫты. Аб–бау, теле ауыҙына һыймаҫлыҡ булып шешкән – төшөндә күргән йыландыҡы һымаҡ, аҫҡа һалбырағайны.

Илап арығас, карауатҡа ауҙы. Салҡатан ятҡан ҡатындың бөтә ғүмере күҙ алдынан үтте. Эйе, Ҡәнизә кинәнеп үҙенсә йәшәне… Һис кенә лә үкенмәне. Ул мәңге сәйер булды – эсе тулы сер булды… Әллә күпме дуҫ–иштең, туған–тыумасаның, ир һәм ҡатындың, хатта ата–әсә менән балаларҙың араларын аяуһыҙ бутаны: булмағанды булды, тине, булғанды юҡҡа сығарҙы. Үҙенә кәрәккәнсә килештереп, төрләндереп –

төймәне дөйәгә әйләндереп, ғәйбәт йөрөттө – бәндәләрҙе көйөндөрөп, үҙе һәләк һөйөндө, рәхәтләнеп көлдө. Әлән–борхан тотонмай ул эшкә. Тәүҙә «сәпкә эләккән» кешеләрҙең ғәҙәт–фиғелдәрен, бер–береһенә мөнәсәбәттәрен тәрән өйрәнә. Хәл–ваҡиғаның булыуы ла шарт. Ысын ваҡиғаға нигеҙләнһә, ғәйбәттең көсө бермә–бер арта ла ҡуя. Шулай итеп, «ижад емеше» өлгөргәс, уйлағанын ашыҡмай–ҡабаланмай ғына тормошҡа ашыра.

Миҫалдың ябайын ғына, береһен генә тәҡрирләп китергә кәрәктер.

Ғәмбәрәнең туйында Мәрмәрә менән бергә булғайны ул. Мәрмәрә – Ғәмбәрәнең бер туған апаһы.

Туйҙа кәләште лә бейетәләр бит инде. Йәш килен һәләк килештереп бейене – атҡаҙанған артисың ары торһон. Барыһы ла һоҡланды. Бигерәк тә Мәрмәрә кинәнде:

– *Әллә кемдең һеңлеһе!*

*Ана шулай, ана шулай*

*Матур баҫа ла ҡуя.*

*Бейеүҙәре күлдә йөҙгән*

*Аҡҡошҡа оҡшап тора!* –

тип, үҙенсә таҡмаҡ та сығарҙы. Хатта күҙҙәрендә йәш күренде.

Ғәжәип хәлде йөрәгенә йәшерҙе Ҡәнзиә…

Ғәмбәрәнең холоҡ–фиғеленә күптән төшөнгәйне. Унынының кенә ҡыуа торған ғәҙәте бар – үпкәһен һис онотмай – ҡонон унлата ҡайтара.

Ә Мәрмәрә бөтөнләй икенсе: нескә күңелле, хискә тиҙ бирелә.

Ғәмбәрәне аулаҡта осратҡас, Ҡәнизә тәҫләп–тәҫләп күңеленә бикләгән ниәтен рәхәтләнеп бәйәнләне:

– Туйыңда бейегәнеңде Мәрмәрә апайың яратманы. «Байғошҡа кәкре аяҡтарын салыш–солош килтереп бүлмә уртаһында һәлпәндәргә кем ҡушҡан? Һәпрә һеңлемдең һәләк ирмәк  һелкенеүенә ҡунаҡтарҙан оялдым,  иҙән ярығы булһа, ғәрлегемдән төшөр ҙә китер инем, биллаһи…» тине. Яман таҡмаҡ сығарҙы. Һине йәлләп кенә һөйләйем,

үҙенә әйтмә, йәме… – тип сурытты Ҡәнизә. Был хәбәр Ғәмбәрәгә нисек тәьҫир итеүен һиҙҙермәй генә күҙәтте: йәш ҡатын бер ағарҙы, бер буҙарҙы, ирендәре күгәрҙе, тынын үрә алды…

Ғәйрәтле ғәйбәт үҙенекен эшләне: туғандарҙың араһы нык боҙолдо, әлегәсә бер–береһенә сәләм дә бирмәйҙәр.

…Иләмһеҙ төш күрһәң дә, телеңде тешләһәң дә күңелеңә һеңгән ғәҙәт бөтөнләй бөтмәй, һис юғы кәмемәй икән: Ҡәнизә, теленең ауыртыуы саҡ ҡына баҫылғас та ауыл ҡыҙырырға сығып китте. «Ижад емештәрен» тәмләткән бәндәләрҙең хәл–әхүәлен күреп–белеп, үҙенең кәйефен күтәрергә ниәтләнгәйне ул…

## Уңған ҡатын

«Тормош шулай ҡоролған: йәмәғәтеңдән йә уңаһың, йә туңаһың» – ти торғайны Мәнзирҙең атаһы. Әсәһе: «Төҫө барҙан төңөлмә»– тип өҫтәр ине. Төҫкә сибәр, бик тә телдәр Мәүзирәне тәүләп күргәс тә ата–әсәһенең өгөт–нәсихәттәрен күңеленә һеңдергән егеттең йөрәге елкенде лә «кәләшлеккә күндер» тигән әмер бирҙе.

Күрештеләр, һөйләштеләр. Ике–өс ай үткәс, туй тураһында килештеләр. Егеттең буйтым боло бар – Себер яҡтарында вахта ысулы менән эшләй.

– Туйыбыҙҙы дан итеп ресторанда уҙғарырбыҙ. Кемдең туйы? «Мәнзир менән Мәүзирәнең туйы!» тип таң ҡалһындар. Иҫтә оҙаҡ һаҡланһын, һағынып һөйләрлек булһын! – тине сәмле Мәнзир, дәртләнеп.

– Ул тиклем мулыҡма! Рестарандарҙа эшләнем, ризыҡтарҙы нисек әҙерләүҙәрен күреп, өйрәнеп йөрөнөм. Туйҙы фәҡәт өйҙә үткәрәбеҙ, – тине Мәүзирә. Нык әйтте – һүҙ көрәштерерлек түгел ине. Донъя көтөүҙе бәхәстән башларға теләмәгән күндәм Мәнзирҙе тиҙүк күндерҙе.

…Туй ифрат матур башланды. Өҫтәлдәр һыйҙан һығыла, төрлө–төрлө шешәләр йылтырашып ултыра. Һәр ҡунаҡ, йәштәргә теләктәрен ихлас әйтеп, ҡиммәтле бүләктәр, конверттар һондо.

Күп тә үтмәне, шешәләрҙең йәшерен ҡеүәттәренә бирешкәндәр, зыҡ ҡубып, бейергә төштө, бәғзеләр тәмәке көйрәтергә балконға йүнәлде.

Мәүзирә лә күбәләк кеүек өйөрөлә–сөйөрөлә: ап–аҡ, ҡабарынҡы, оҙон күлдәге, оҙон фатаһы үҙенә һәләк килешә. Мәнзир сибәр кәләшенән күҙҙәрен алмай. Әммә кәләштең кинәт үҙгәреүе – етди ҡиәфәте, өҫтәл тирәһенән китмәүе – ғәжәпләндерҙе. Әле генә ҡояштан былайыраҡ балҡый ине лә… Ни булған? Бер–нисә секундҡа кейәүҙең күҙҙәре ситкә йүнәлде. Әйләнеп ҡараһа, кәләш юҡ. Күңелһеҙләнгән кейәү тирә–йүнде күҙәтте. Бәй, Мәүзирәһе, мут йылмайып, аш–һыу бүлмәһенән сығып килә! Йөҙө нурланған. Ул йәнә өҫтәлдәр тирәһендә бейене–бейене лә кинәт кенә тағы юғалды. Шундай хәл өс–дүрт мәртәбә ҡабатланды.

Ҡунаҡтар табынға ултырҙы. Осло күҙҙәр, зирәк зиһенлеләр шешәләрҙең бермә–бер кәмеүен күрҙе, әммә өндәшмәне. Кәләштең киң, оҙон фатаһына ике–өс шешәне йәтеш кенә йәшереп, аш–һыу бүлмәһенә йүнәлеүен бер кем дә шәйләмәгәйне. «Шешәләр кәмегән… Тағы ҡуйырҙар, рүмкәләрҙе тултырып ҡуйорҙар, ғолҡолдатып йоторбоҙ» тип уйланылар. Бәй, шулай шул: иҫермәгәс–илермәгәс, туй буламы ни?

Әммә өмөттәр өҙөлдө: шешәләр өҫтәлмәне. Ҡунаҡтар шым ғына таралышты.

Иртәнсәк Мәнзир аш–һыу бүлмәһенең төпкөлөндәге һыуытҡысты асҡас, шаҡ ҡатты: һалдаттар һымаҡ теҙелешеп, шешәләр тора ине. Улар буш түгел – барыһы ла тулы, береһенең дә бөкөһө асылмаған.

– Быны нисек аңларға?– Мәнзирҙең тауышы ҡарлыҡты.

– Быны, аҡыллым, шулай аңла: ҡунаҡтар араҡы–шараптарҙы вис эсеп, ризыҡтарҙы вис ашап, таңға саҡлы ҡайтмаҫ ине. Анһат ҡотолдоҡ.

– Аҙаҡ һөҙөмтәһе насар булыр – беҙгә ҡырын ҡарарҙар, – Мәнзир ифрат ҡаушағайны.

– Һөҙөмтәһе һәбәт булыр – туғыҙ айҙан күрерһең…– Мәүзирә ихлас хихылданы.

– Кешегә күрһәтмәйенсә нисек ташының? – Бынының һаман аптыраны.

– Бер ҡыйынлығы ла юҡ: фата менән ҡаплаған «йылтырҙарҙы» ҡосаҡлап, бейей–бейей ишеккә табан юрғалайһың да алып сығаһың, алдан бушатып ҡуйған һыуытҡысҡа тултыраһың.

– Берәйһе күрһә? Ояты ни тора… – Мәнзир тәрән көрһөндө.

– Ике күҙеңде минән алмай күҙәттең, күрҙеңме? – Мәүзирә кинәнеп көлдө.

Өйләнешкәс тә ирен Себергә ебәрмәне ул: «Айҙар буйы яңғыҙ ултырырға иргә сыҡманым. Аҡсаны бында ла арыу эшләрбеҙ. Минең уйҙарым бойомға ашыр һымаҡ. Ашнаҡсы булып, кафе–рестарандарҙа алған белемем етерлек. Эйе, тәжрибәм ярҙам итер, – тине йәш ҡатын.

…Туғыҙ айҙан малайҙары тыуғас, «һәйбәт һөҙөмтә»не күрҙе Мәнзир – туй табынынан кухняға «күскән» йылтырҙар бәпес тәпәйен йыуырға яраны, хатта артып ҡалды.

Шунан «арыу аҡса һуғырға» әүәҫләнде Мәүзирә. Бөтә тәжрибәһенә таянып, ҡунаҡ саҡырырға тотондо. Тәүҙә ул, ҡунаҡтарын өс төркөмгә бүлеп, исемлек төҙөй. Тәүге төркөмдә кәрәк саҡта ярҙамдары тейерлек бик–бик хәлле, икенсеһендә урта хәллеләр, өсөнсөһөндә «ҡалған ризыҡ әрәм булмаһын» тигән ниәт менән саҡырылған хәл–әхүәлдәре хөртөрәктәр теркәлә.

Беренсе төркөмдәге ҡәҙерле ҡунаҡтарға әҙерләнгән өҫтәл һыйҙан һығылып тора. Икенсе көндө хужабикә бай ҡунаҡтарҙан ҡалған салаттарҙы тигеҙләй, матурлай ҙа майонез һөртә. «Уртасалар» салаттарҙың «ялғанған» булыуын аңламай. Был төркөмдән һуң ризыҡ, әлбиттә, аҙ ҡала. Мәүзирә ҡалдыҡ–боҫтоҡтарҙы ҡушып бутай, өҫтөнә буйтым майонез һылай ҙа түңәрәкләп теленгән тоҙло ҡыярҙы теҙеп сыға.

Ҡалған ашын йылыта. Өсөнсө төркөмгә маҡтап–маҡтап, ҡыҫтап–ҡыҫтап ашата, графиндарға тултырылған ҡалдыҡ араҡы–шараптарҙы эсерә.

Ҡуштан ҡатын ҡунаҡтарҙың бүләктәрен, аҡса һалынған конверттарын йәһәт кенә кеҫәләренә оҙата.

Аҙаҡ төшөмдө иркенләп һанай, теркәй. Бер әҙерләнгән ризыҡты өс көнгә еткергән Мәүзирә, килемдең сығымдан ете мәртәбәгә күп икәнен күреп, кинәнә. Бер йылда байрамдарҙы ла байтаҡ арттырҙы: Мәнзире менән зөфәф төнөн, үҙенең, иренең, балаларының, эт һәм бесәйҙәренең тыуған көндәрен, бәпестәренең тәүге тештәре сығыуын, беренсе мәртәбә «мәмәй» тип әйтеүҙәрен, Яңы йыл, 23–сө февраль, 8–се март, 1–се апрель һәм бихисап башҡа байрамдарға арнап, ауырһынмай саҡыра ул ҡунаҡтарын.

Мәнзир хәҙер бушамай: ҡатынына ҡунаҡ саҡырырға ярҙамлаша. Себерен ташлағанына шатлана. Себерҙә һеперелеп эшләүгә ҡарағанда, былай аҡса күберәк керә. Һалым да һалмайҙар.

Ир менән ҡатын тормоштарынан  һәләк ҡәнәғәт ине: машина алырға, квартира иркенәйтергә, ҡиммәтле йыһаздарға тейенергә тип, бол төйнәнеләр.

Кәсептәре һаман көйлө барыр һымаҡ ине… әммә… әммә көтөлмәгән, һис кенә лә иҫ итмәгән бәлә бәкәлдәренә бәрҙе. Ҡунаҡ саҡырғайнылар – «өсөнсө төркөм»дәге ете кеше лә дауаханаға эләкте. «Сифатһыҙ ризыҡты ҡайҙа ашанығыҙ? Кафеламы, ресторандамы, ашханаламы? Адрес кәрәк!» – тип төпсөшкән табиптар. Ете сырхау ҙа бер үк адресты әйткән. Хәҙер бушлай дауалау юҡ. Ауырыуҙарҙы дауаларға Мәүзирә менән Мәнзирҙән аҡса дауайлағандар. Хөкөм ҡарарына ҡарышып булмай – дарыуҙар өсөн ир менән ҡатынға  йыйнаҡтарын йылдам ғына сығарырға тура килгән.

Ҡылған ҡылығыңдан оялмаһаң, барыбер Хоҙай язаһына тарыйһың икән.

## Ҡушаматлы Байгилде

Байгилдегә «Балыҡсы» ҡушаматы ҡапыл тағылды. Артында ла түгел, үҙенең алдында хөрмәтләп әйтәләр. Тик, ҡушаматты ишеткәс, Байгилденең үҙгәреүен берәү ҙә шәйләмәй: ҡараштары моңһоуланып, ялбыр ҡаштары ҡушылып, аҡ йөҙө ҡарайып, танау осо ағарып китә. Ҡыҫҡаһы, ир–уҙаман үҙенең хәлен үҙе генә белә. Йөрәгенә бикләгән сетерекле серен һис кемгә сисмәй – хатта ҡатыны Байрамбикә лә бер нимә белмәй. Күңелен әрнеткән, ғиләһен әлегәсә үҙе лә төшөнмәгән мәғлүмәтен йәндәй йәмәғәтенә, бәлки, үлгәнсе һөйләмәҫ. Ирекәйенә «Балыҡсы» тиһәләр, Байрамбикә әллә кем булып, йәмшек танауын сөйөп, рәхәтләнеп көлөп ебәрә. Әйҙә, кинәнһен, йәлме ни. Ә бит бөтәһенә лә бисәкәй үҙе ғәйепле…

– Күршебеҙ Филис бигерәк һәйбәт кәрмилис! Аҙна һайын, эшенән арынған арала, биҙрә тултырып балыҡ алып ҡайта: ул бәрҙе, ул сабаҡ! Һиңә лә ошо ғәҙәт булһын ине ҙур һабаҡ. Филистең ғаиләһе буйтым туҡ. Ҡарт–ҡороға, яңғыҙ ҡатындарға һатып ап–аруҡ аҡса ла йыя. Кибете лә һәләк килемле. Бар янына бар һыя шул. Йәнә бер мөғжизә: балыҡ ашаған кешенең һөйәге ныҡ була икән. Әле ат һымаҡһың, бына ҡартайғас, йығылып, аяғыңдымы, бүтән нәмәңдеме һындырһаң, үкенерһең әле. Ғүмер тиҙ үтә – үкереп үкһер мәлең етер. «Байрамбикәм балыҡ ашарға кәрәклеген күптән әшкәрткәйне, ниңә тыңламаным икән?» тиерһең. – Хәләле көндә бер хәбәрен тәтелдәне.

«Тамсы тама–тама таш тишә», тиҙәр. Дөрөҫ икән. Байгилде ауылдарынан алыҫ түгел «Екәнлекүл» яғына йышыраҡ ҡарай башланы.

Ә бер көндө биҙрә тулы балыҡ күтәргән Филисте күрҙе.

– Күбек майҙа ғына ҡыҙҙырһаң, теленде йоторлоҡ ризыҡ була. Балалар ҙа, ҡатын да харап шатлана, – тип маҡтанды Филис.

«Ҡайһылай шапырына. Ярай, мин дә төшөп ҡалғандарҙан түгелмен. Һеҙ ашағанды беҙ ҙә ашарбыҙ. Балыҡты ни уны ҡармаҡҡа ҡаптыраһың да

һауытҡа һалаһың. Бер ҡыйынлығы ла юҡ. Ҡатыныма һары майҙа ғына ҡурырға ҡушырмын. Хәтһеҙен киптерермен. Кипкән тәғәмдең тәме икенсе.

Балыҡ тотоу шәп шөғөлдөр. Шулай булмаһа, балыҡсылар тураһында йырҙар яҙмаҫтар ине, ярыштар ойоштормаҫтар ине», тип фекер йөрөттө Байгилде.

Ул Филис күршеһенән ҡармаҡ һорап алды ла күтәренке кәйеф менән «Екәнлекүл»гә йүнәлде.

Ҡулына ҡармаҡ, ун литрлыҡ биҙрә тотҡан ирекәйҙе ҡатыны менән ике ҡыҙы, уңыш юрап, ҡул болғап оҙатып ҡалды.

Күңеле тартҡан урынға урынлашты ул. Кистән кәнсиргә йыйған селәүсендең һимеҙен һайлап ҡына ҡармаҡ ырғағына ҡаптырҙы ла һыуға ташланы. Ҡалҡыуысҡа ҡарап оҙаҡ ултырҙы. Ни ҡәҙәре ғүмер үтте – осаһы ла ауырта башланы, елкәһе тартышты, күҙҙәре йәшкәҙәне. Ҡалҡыуыс ҡыбырҙамай – төшкән ерҙә тик тора.

Бына бер ят кешенең килгәне күренде. Кешекәй, Байгилде менән башын ҡағып ҡына һаулашты ла, йыраҡ та китмәй, сүкәйгәс, ҡармағын күлгә бырғытты. Байгилде күҙ сите менән генә тегене күҙәтә. Бәй, ике–өс минут үттеме – юҡмы, сит әҙәмдең ҡармағына балыҡ эләкте. Был бәндә тотондо балыҡ тоторға – ҡармағын һыуға ырғыта ла балыҡ тартып ала, ырғыта ла балыҡ тартып ала.

Байгилденең эсе бошто: «Тимәк, мин һайлаған урында балыҡ юҡ. Әллә Филис боҙоҡ ҡармағын тотторҙомы икән? Булыр унан – һәләк көнсөл күршенән… Байыҡҡан һайын һаранлана.» – Ул уңайһыҙланһа ла бәхетле бәндә эргәһенә килде. – Ҡармағым насар, ахыры. Урыным да алама, шикелле. Әллә ем килешмәйме икән? – тигән булды уңмаған балыҡсы, аптырағас.

– Ҡана, урыныңа ултырайым. Ҡармағыңды миңә бир әле, – тине ят кеше. Уның биҙрәһе балыҡ менән тулғайны.

Ул, Байгилденең урынына ултырҙы ла ҡармаҡты һыуға ташланы. Бәй, күп тә үтмәне, ҡалҡыуыс тегеләй–былай йөрөргә тотонмаһынмы! Шунан ҡапыл юғалды.

– Балыҡтың эреһе эләкте, – Был ниңәлер шыбырлап ҡына һөйләшә. Шунан  яй ғына, һаҡ ҡына ҡармаҡты үҙенә табан тартты. Бына ҡармаҡ ебен күл ситенә килтереп еткерҙе. Өҫкә тарта–тарта, балыҡты сығара алмай. – Кил, ярҙамлаш, – тине ул Байгилдегә.

Тарталар–тарталар, тартып сығара алмайҙар. Бышлыҡтылар, тиргә баттылар.

«Балыҡ түгелдер… Ағас тамырылыр…» тип уйланы Байгилде.

Ниһәйәт, шөҡәтһеҙ бер нәмә шәйләнде. Ҙу–у–ур балыҡтың башы ине. Түҫһөҙ ике күҙе упайған йәйенде күргәс, Байгилде хатта ҡурҡып китте.

Тырыша торғас, яман тыпырсанған балыҡты һыуҙан сығарҙылар, күлдән алыҫҡараҡ алып барып, сиҙәмгә һалдылар.

Байгилде теге кешегә ғәжәпләнеп ҡараны: «Тылсым эйәһеме был әллә сихырсымы?»

Байгилденең үҙенә иҫе китеп ҡарап торғанын күргәс, ирекәй ике ҡулын һуҙҙы:

– Һаумы, иҫәнме! Танышайыҡ – Садиҡ булам.

– Байгилде, – тип мығырланы быныһы.

Садиҡ һүҙгә маһир икән:

– Уңай булды – юл уңды – биҙрәм балыҡҡа тулды. Себергә китеп барышым – вахта менән эшләйем. Һеҙҙең ауылдан өс кенә саҡрымдағы Сатрала апайым йәшәй. Бер генә көнгә туҡталғайным – иртәгә һары таңдан сәфәргә сығам. Сабира апайым: «Екәнлекүлдә балыҡ күп» тигәйне. Дөрөҫ икән. Мәрхүм еҙнәмдең ҡармағын алдым да бында юлландым. Бынан ары юл төшкән һайын һуғылырмын. Ҡана, оҙонлоғон үлсәйек әле! –  Ирекәй, кеҫәһенән метрлыҡ алып, һикрәндәй торғас, шаҡтай арыған балыҡтың оҙонлоғон үләне. – Метр ҙа утыҙ сантиметр. Ну,

йәшәгән был йәйен! Ә һин: «Ҡармағым насар, урыным алама, ем эшкинмәй, балыҡ юҡ» тип зарланаһың. Ҡармағың да, урының да, емең дә бер тигән! «Ҡармаҡ менән тоттом» тиһәң, ышанмаҫтар әле. Алып ҡайт балығыңды!

– Нишләп минеке булһын, ти – һин тоттоң бит, – Байгилде артҡа сигенде.

– Һинең ҡармағың, һинең емең, хатта урын да һинеке! Бәхәсләшмә! Алып ҡайт та барыһын да аптырат! Гел әләкмәй былай балыҡ. Үҙ ғүмеремдә бер нисәне генә тоттом – унда ла ау менән аулағайныҡ. Ярай, тағы осрашҡанға тиклем! – Ирекәй балыҡ тулы биҙрәһен алды ла тиҙ–тиләмән күҙҙән дә юғалды.

– Хәйерле юл! – Байгилде баҙанып ҡына һөйләнде.

Алаптай ауыҙын йәйеп, ара–тирә ҡыбырлап ҡуйған шыуғалаҡ йәйенде иңенә һалды. Әммә былай йәпһеҙ ине. Салбар ҡайышын балыҡтың айғолағы аша үткәреп, саҡ күтәрҙе.

Ауыл урамынан үткәндә, уны күргән халыҡ хайран ҡалды. Ә инде малай–шалай, шаулашып, артынан эйәрҙе:

– Вәт, балыҡ, исмаһам!

– Быдайҙы күргән юҡ ине!

– Байгилде ағай дан балыҡсы, – тиештеләр, яман һоҡланып.

… Тик был ваҡиғаның аҙағы ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та булды.

Ҡунаҡ саҡырмай йәшәмәйһең бит инде. Байгилделәр ҙә туған–тыумаса, дуҫ–иш, күрше–күлән менән ҡатышып донъя көттө. Был ғәҙәт – бик һәйбәт. Әммә… Тыуған көндәргә, юбилейҙарға, байрамдарға саҡырылғандар, һөйләшеп ҡуйған һымаҡ, мотлаҡ балыҡ тотор өсөн тәғәйен нәмәләр бүләк итергә ғәҙәтләнде. Бүләктәрҙең ниндәйе генә юҡ: ҡармаҡ йыйылмалары, мурҙалар, йылымдар, бот төбөнә еткән оҙон ҡуңыслы резина итектәр, «Рыбалка» тигән гәзит–журналдар, балыҡсыларға арналған энциклопедиялар, киптерелгән ҡорттар тултырылған һауыттар, башты ҡояш нурынан һаҡларға эшләпәләр һәм

башҡалар, һәм башҡалар... Ҙур йорттоң иркен соланы лыҡа тулды. Ярай, балыҡ һүрәттәре төшөрөлгән кәртинкәләрҙе солан стенаһына ҡағып ҡуйырға башы етте Байгилденең. Ә бүтән бүләктәрҙән нисек ҡотолорға әлегәсә белмәй.

Байрамбикәһенең «балыҡ ашайыҡ!» тип мыжыуына йәне көйә. Башҡаса күлгә яҡын барманы, Садиҡты осратманы. Әммә «Балыҡсы» тигән ҡушаматтан һаман ҡотола алмай... Осраҡлы ҡушылған маҡтаулы ҡушамат күңелен ытырғандыра.

## Өйрәк булһа ла ярай...

«Яңы йылды нисек ҡаршылаһаң, йыл буйына шулай йәшәйһең» тигән хөрәфәткә Дәүриә менән Дәүйән дә ышана. Яңы йылды дан итеп ҡаршыларға ғәҙәтләнгәндәр: аш–һыуҙан өҫтәл һығылып торорға тейеш, өр–яңы кейем кейергә тырышалар.

– Йәшел бәрхәт камзулымды Мәғәфиә тегеп бөтөргә өлгөрҙө. Һәләк килешә. «Ағас күрке – япраҡ, кеше күрке – сепрәк». Хәҙер кибеткә барайым, тәм–том алайым. – Дәүриә, үҙ алдына һөйләнә–һөйләнә, йәһәт кенә кейенеп, кибеткә йүнәлде.

Кеше күп – лабырлашалар, көлөшәләр.

– Әй–й, тиҙ үтә лә ғүмеркәйҙәр... – тип уфтанғандай һөйләнә яшыҡ ҡына ҡатынҡай.

– Үтһә, ҡалайтаһың, үтә лә китә инде... – ти икенсеһе сибек бисәне йыуатырға теләптер.

– Былтырғы Ҡыш бабай килерме икән? Хи–хи–хи... – Өсөнсөһө күңелһеҙ хәбәрҙе көлкөгә әйләндерергә ниәтләнә, шикелле.

– Юҡты юрамағыҙ! – Дәүриә, шикләнеп, тиҙ генә ишеккә күҙ төшөрә.

Сираты еткәс, Дәүриә лә тәмле–татлы ризыҡтар алды. Шунан төрлө әйберҙәр бүлегенә лә керҙе. Керҙе лә «аһ!» итте – йәшел ерлеккә аллы–гөллө сәскәләр төшөрөлгән суҡлы шәлъяулыҡты шәйләне.

– Мәғәфиә һеңлем, мынау ебәк шәлъяулыҡ камзулыма төҫтәш. Әле аҡсамды бөтөрҙөм. Зинһар, ситкәрәк һалып тор, кеше күрмәһен. Кибет беҙҙең өйгә йыраҡ бит – сәй эсеп, хәлләнәйем дә йәһәт килеп етермен, – тип үтенде.

– Затлы әйбер бирәү генә шул. Ярай, бына ошонда ятыр, хафаланма, – тине һатыусы.

Дәүриә йәмәғәтенә ифрат матур шәлъяулыҡ ҡалдырыуын кинәнеп тәфсирләне лә өҫтәл әҙерләне.

Дәүйән, күҙҙәрен йылтыратып, ирмәк кенә көләмһөрәп, тыңланы…

Йылҡы итенән бешкән ашты буйтым ашағас, баллап–майлап сәй эскәс, Дәүриә диванға ауҙы. Йылҡы ите тиҙ йоҡлата. Дәүриә лә әүен баҙарына киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Бер аҙҙан ҡапыл уянды. Хәләл ефете күренмәй – ихатала йөрөйҙөр.

Кибеткә барырға кәрәк – шәлъяулыҡ ҡалдырғайны – алырға кәрәк.

– Дәүйә–ә–ән! Һин ҡайҙа? Мин кибеткә киттем!

Уныһы яуап бирмәне.

Ихатаны ҡыҙырып ҡараны – ҡарты юҡ. Аптырағас, ишеген бикләне. Дәүйәндең асҡысы бар – кеҫәһендә генә йөрөтә – асыр ҙа керер.

Элек, бала сағында, ишеккә һепертке генә һөйәйҙәр ине. Һеперткене күргәс, хужаларҙың өйҙә юҡлығын һәр кем аңлай ҙа ишеккә яҡын да килмәй. Хәҙер заманы башҡа… Оҙонморон ауылы оло юлдан алыҫ, ҡалаларҙан йыраҡ: шуғамылыр яман ваҡиғаға тарығандары юҡ. Улай тиһәң дә…

…Ошо йылды ҡаршылағанда булған ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та хәл әле лә халыҡ хәтерендә. Дәүриә лә иҫләне: район хакимиәтенән кемдер ауыл биләмәһе етәксеһенә хәбәр иткән: «Оҙонморон ауылы халҡын Яңы йыл менән ҡотларға Ҡыш бабай киләсәк. Өй беренсә йөрөп, барыһын да байрам менән ҡотлаясаҡ. Ҡыш бабайҙы яҡшы ҡаршылағыҙ, ҡыуандырып оҙатығыҙ!» – тигән.

Ауыл биләмәһе башлығы Фәйрүз Фәйезович менән хеҙмәт ветераны Дәүйән Ғәлийәнович уны ҙурлап ҡаршыларға әҙерләнде.

Ҡыш бабай ауыл биләмәһе хакимиәте бинаһы алдына еңел машина менән килеп туҡтаны. Машинаға һөйрәтке тағылғайны. «Тимерҙән эшләнгән йәшник эсендә күстәнәс күптер», тип ымһынды бала–саға. Малайҙар Ҡыш бабай күрмәгәндә һөйрәткес эсен тикшерергә өлгөрҙө: әммә йәшниктә бер нәмә лә юҡ ине.

Оҙон таяҡ тотҡан, иҫке генә тун кейгән, башына алама ғына башлыҡ ҡаплаған Ҡыш бабай ҡойто ғына һаҡалын һыйпап, буялмаһа ла ҡып–ҡыҙыл танауын ыуып ҡуйҙы.

– Һәр өйгә туҡталырға уйлайым! – тине.

Ҡыҫҡаһы, Ҡыш бабай өй беренсә йөрөй башланы. Тәүҙә уның тауышы йәшелле–күкле, сығыр–сыҡмаҫ ине – һүҙҙәрҙе бутаны, китапҡа яҙмаҫлыҡтарын да ысҡындырҙы.  Өйҙәгеләрҙең бөтәһенә лә берәр генә осһоҙло кәнфит бирә лә:

– Ә миңә өйрәк булһа ла ярай, ҡаҙ булһа, бигерәк яҡшы, – тип ҡотлау телмәрен тамамлап ҡуя.

«Аңлағанға – ишара» тиҙәр. Йорт хужалары һис йәлләмәй, күстәнәскә ҡаҙ менән өйрәк һона. Ит күп саҡ шул: һәр йортта һуғым, бихисап өйрәк–ҡаҙ салғандар. Ҙур–ҙур киҫәк йылҡы итенә ҡаҙылыҡ ҡушып биреүселәр ҙә булды. Яңы йыл бит, әйҙә кинәнһен Ҡыш бабай.

Машинаһының багажнигы менән һөйрәткесе йәғни тағылған арбаһы лыҡа тулғас, артҡы ултырғысына өйәләр.

Ауылдың ситке өйөнә еткәндә Ҡыш бабайҙың тауышы асылғайны:

– Юл ыңғайы Ҡыҫҡаморон ауылына һуғылырмын, тигәйнем, урын ҡалманы, иртәгә килермен, –  ти ул ҡәнәғәтлек менән.

Бер әбей уны бигерәк йәлләне:

– Имен–аман ҡайтып ет инде. Затлы ризыҡтарҙы рәхәтләнеп ашағыҙ, – тип һамаҡланы.

Дәүриә ҡарсыҡ, шуларҙы иҫкә төшөрөп, кибеткә килеп еткәнен дә һиҙмәне. Йәһәтләп кибеткә керҙе лә Мәғәфиәгә аҡса һондо.

– Шәлъяулыҡты һаттым шул, ғәйепләмә инде. Һиңә тип йәшергәнемде онотҡанмын. – Һатыусы күҙҙәрен бәҙрәйтеп, серле йылмайҙы.

Дәүриә телһеҙ ҡалды, аптырап ҡатынҡайға ҡарап торҙо–торҙо ла һаубуллашмайынса ишекте зыңҡылдата ябып сығып китте: «Әй, Мәғәфиә – мәғәнәһеҙ бәндә икәнһең. Йылмаяҡ…Ниндәй үсең булғандыр, оятһыҙ! Яңы йыл алдынан бит әле…»

«Сүп өҫтөнә сүмәлә» тиҙәр. Кәйефһеҙ мәлдә мәғәнәһеҙ нәмәләр иҫкә төшөүсән. Магазинда ауыҙы мәңге йырыҡ ҡатындың: «Былтырғы Ҡыш бабай килерме икән?» – тип хихылдағаны Дәүриәнең хәтеренә төштө. «Башҡортостандың иң төпкөл районының, иң төпкөл ауылында йәшәүселәрҙе маңҡортҡа һанайҙыр. Әҙәмдәр эшләмәй генә байығырға ниндәй генә әмәлдәр тапмай. Былтырғы хөрәсән Ҡыш бабай килһә, был юлы ҡаҙ менән өйрәк тоттормам. Мейеһенә мәңгегә һеңерлек итеп әрләрмен: «Тырҡыш, эшләп ашарға тырыш!» тейермен. – Ул һәләк ҡәһәтләнде. Аҙаҡ асыҡланды: ауыл биләмәһе башлығына район хакимиәтенән берәү ҙә хәбәр итмәгән. Тимәк, шылмаяҡ Ҡыш бабай үҙе шалтыратҡан.

Дәүриә, Дәүйәндең өйҙә булыуына шатланды – исмаһам, йәмәғәтенә хәсрәтен һөйләр.

Ҡарсығының хәбәрен бүлдермәй генә тыңланы ҡарт.

– Ярай, тыныслан, Дәүриә. Барыһы ла яҡшы буласаҡ. Былтырғы Ҡыш бабай йораты килмәйәсәк. Әйҙә, өҫтәлде әҙерләйек, – Дәүйән, һүҙгә оҫта кеше, хәләленең хәлен аңлап, йыбанмай ғына йыуатты. Шунан матур пакеттан шәлъяулыҡты сығарҙы ла Дәүриәһенең иңенә һалды. Был – Мәғәфиәлә ҡалдырған йәшел ерлеккә аллы–гөллө сәскәләр төшөрөлгән шәлъяулыҡ ине.

Дәүриә «аһ!» итте – шәлъяулыҡты ипләп кенә һыйпаны: «Шөкөр, үҙемә яҙған. Мәғәфиә тиктәҫкә серле йылмаймаған икән».

Ситтән күҙәткән Дәүйән ҡарт ҡарсығын хәс тә йәш саҡтағы һымаҡ ихласлап, яратып үбеп алды.

Сикһеҙ шатлыҡтан йөҙө нурланған Дәүриә:

– Һиңә лә, йәндәй йәмәғәтем Дәүйән, һылыу, мәғәнә белгән Мәғәфиәгә лә бөткөһөҙ рәхмәт! Былай булғас, Яңы йыл һәйбәт килер,– тип юраны ла, әбекәй кеткелдәп көлөп ебәрҙе.

### Был донъяның кеме юҡ…

*Сәхнә өсөн монолог*

Әй–й–й, был донъяның кеме юҡ… Кәлиҙең кибетенә барғайным. Шунда барһаң, ауылдаштарыңды күрәһең. Әле Әүхәз ағайҙы осраттым. Ай буйына Себерҙә эшләй ҙә өйөнә ҡайта. Шунан айға һуҙылған байрам башлай. Кибетте беҙ «супермаркет» тибеҙ. Шул супермаркеттан араҡыһын, конъяғын һәм башҡаһын буйтым өйөнә ташый. Ҡалған аҡсаһын һатыусынан алмай:

– Сдача кәрәкмәй! Был – сәйлек! – ти ҙә текә баҫып, башын ғорур тотоп сығып та китә. «Сәйлек» күпмелер, һатыусы ғына белә. Һатыусының һөрөнкө йөҙө айҙан былайыраҡ балҡыуына ҡарағанда, «сәйлек»тең аҙ булмауын тоҫмаллайһың. Аҙаҡ шуныһы ла асыҡланды: баҡһаң, абзый ҡайҙа ла аҡса менән иҫәпләшкәндә артып ҡалған аҡсаһын алмай икән. Шуға ла күптәр – бигерәк тә һатыусылар – уны ярата. Ихлас йылмайып ҡаршылайҙар, маҡтап–ҡуптап оҙаталар. «Ҡалған сдачаңды, зинһар, ал!» тип, берәһе лә артынан йүгереп сыҡмай.

«Көндә байрам» менән ай үткәне һиҙелмәй, китергә ваҡыт етә. Аҡса бөткән – юллыҡ та юҡ. Кешеләр үтес бирмәй. Әллә бирерҙәр ине – улар ҙа аҡсаһыҙ. «Ҡылығына ҡарата таман…» тип үсәүселәр ҙә бар.

Ҡатыны Зәринә, ҡыҙына бирнәлеккә әҙерләгән әйберҙәрҙе ярты хаҡҡа һатып, юллыҡ йүнәтә: ирен Себергә һөргөнгә, әй, эшкә ебәрә. Йыл буйына шул хәл ҡабатлана.

Аҡса һанлағанды, һанағанды, һаҡ булғанды ярата шул.

Әй–й, был донъяның кеме юҡ…

Күрәм: ҡаршыма күп илауҙан күҙҙәре шешенеп бөткән Әлмәндиә килә.

– Ни булды? – тим.

– Йәүиткә рәнйейем! – ти.

Ирекәйенең иңендә генә ғүмер кисергән иркә бисәкәйҙең ғүмерҙә кәйефе төшмәне: биҙәүлеген иҫенә лә төшөрмәне, кейенде–яһанды, теләгәнен ашаны – эсте, күңеле һөйгән сит илдәргә йөрөнө. Йәүите хаҡлы ялға сыҡҡас, баҡса һатып алдылар. Алғанда ғына баҡсаны ҡараны ла эшкә барымы булмаған ҡатынҡай аҙаҡ унда аяҡ та баҫманы. «Баҡсаны Йәүит гөл итер: еләк–емеш, бәрәңге, йәшелсә үҫтерер», тигәйне.

– Ҡатын–ҡыҙға күҙ төшөрөр, сит итәктәргә эйәрер, – тим. Йәнәһе, йәнен көйҙөрәм дә, ул йәре эргәһенә йүгерә.

– Юҡты һөйләмә! Бел: минең ирем мине генә ярата! – Ул һауалы ҡараны, башын өҫкә сөйөп, хушлашмай ҙа ары атланы.

Йәүиткә баҡса килеште: айҙар буйы ҡайтмай.

– Хәләлең эргәһенә бар: бешерен, керен йыу, мунса яҡ, йәшелсә тәрбиәләш! – Әлмәндиәгә кәңәш бирәм.

Ҡатынҡай битараф ҡына:

– Бөтәһен дә үҙе эшләр! – ти.

Әле күп илауҙан төҫө бөткән Әлмәндиә аяғында саҡ баҫып тора.

– Ни булды? – Мин ифрат ҡаушаным.

– Йәүит донъя бүлешергә ҡайтҡан: өс бүлмәле квартира – һиңә,ә миңә дача менән машина етә. Дачаға болашма! Дача арҡаһында мөхәббәтемде таптым! – ти, мәлғүн.

– Аббау! Ул бит һине генә ярата! Әлеге оятһыҙ ҡылығын ҡайһылай аңлата? Кем менән сыуалған?

– Күрше ҡатын менән еҫкәшкәндәр. «Аҙналар буйы ерҙән башын ҡалҡытмаған ҡатындың яланғас боттарына ҡарап тамшаныуҙан ялҡҡас, йомош тапҡан булып, янына барҙым. Ул башын ҡалҡытты, һынын турайтты, миңә ҡараны ла күҙҙәрен упайтты:

– Һин кем? – тип һораны.

Ә мин телһеҙ ҡалдым: шул тиклем һылыу ҡатын булыр икән… Шунан ни дуҫлашып киттек, хәҙер түшәк уртаҡлашып, һәләк һәйбәт йәшәйбеҙ. Ҡәҙерлем гоманлы. Бәпәй көтәбеҙ! – ти Йәүит, битһеҙ нәмә.

«Ҡартайғанда–тыртайған» тип баһаларғамы Йәүиттең был ҡылығын, әллә «Битараф ҡатындан ҡотолған» тигән һығымта дөрөҫөрәк булырмы икән?..

Әй–й, был донъяның кеме юҡ…

Әҡлимә әхирәтем менән һирәк күрешәбеҙ. Өндәшмәҫ Ғәни арҡаһында. Өйләнгәнгә ҡәҙәр тәтелдәп торған кешегә әллә ни булды. Ирекәйҙең зиһене теүәл, теле бар – әммә һөйләшмәй, сәләм бирһәң дә өндәшмәй. Әҡлимәне йәлләйем.

– Ул һөйләшмәгәс, миңә ҡыйын. Һөйләшергә теләп, төрлөсә тырыштым. Ете йыл инде интеккәнемә. Берҙән–бер улыбыҙ ҙа атаһы һымаҡ ҡылана башланы – һөйләшмәҫкә тырыша. Хәлем ҡалманы – Ғәниҙе ташлайым! – тине.

Һәм ташланы. «Бөтөнләй телһеҙгә әйләнмәһен» тип, улын алды ла Силәбегә ата–инәһе янына ҡасты.

Ә Ғәни… Ул хәҙер тауыҡтар, ҡаҙ–өйрәктәр, һыйыр менән һөйләшеп көн күрә.

Әй–й, был донъяның кеме юҡ…

Минең Әкзәнә тигән әҡрәбәм бар. Ҡылған ҡылығына тәүҙә көлдөм, ғүмер итә килә бик көйҙөм. Санъяр еҙнәм, Әкзәнә апайымдың йәмәғәте,

күп йылдар урмансы булды. Арып–талып эштән ҡайта – ҡатыны, ҡаты–ҡото ғына ҡалдырған.

Ит бешерергә ҡасан ҡайтырыңды белмәнем, – ти.

Алдаша. Аш бешерә ул. Бүккәнсе ашай ҙа итле тәғәмде йәшереп ҡуя. Тәүҙә уның был ҡылығына шикһеҙ аптыраным, сәбәбен аңламаным. «Ниңә шулай ҡыланаһың?» тип һораһам, көлә лә ҡуя.

Йәмәғәте йәшләй генә мәңгелеккә күсте. Шундай һығымта яһайым: моғайын, арыу ашамау еҙнәмдең ғүмерен ҡыҫҡартҡандыр.

Әҡзәнә апайым хәҙер ит бешермәй:

– Бер ҡалаҡ та аш ҡаба алмайым. Сандыр кәүҙәле Санъярым күҙ алдыма килә лә баҫа, – тип зарлана.

– Ир кешегә ит кәрәк. Ә һин ниңә ит ашатманың? – Мин Әҡзәнә апайҙың күкле–йәшелле йөҙөнә текәләм.

– Ит ашаһа, ғәйрәтләнер, көс–ҡеүәте артыр – дәрте ҡуҙғалыр ҙа сит ҡатындарға уҡталыр, тип ҡурҡҡайным. Бахырҡайымды асҡа ыҙалатыуымды хәҙер яҡшы аңланым. Ҡәбер мин мәңге күрмәҫлек итеп йәшерҙе. – Уның күҙҙәренән даръя булып күҙ йәштәре аҡты ла аҡты.

Һуңлап аңлауҙан, терһәкте тешләрҙәй булып үкенеүҙән файҙа ла, ярҙам да булмай шул.

Әй–й, был донъяның кеме юҡ…

Мәғмүрәнең йәмәғәте Фәрүәт йәне теләгән эш эҙләй. Күптән эҙләй. Мәғмүрә тәүҙә: «Хәҙер эшһеҙҙәр эт тубығынан» тип, үҙен дә, ирен дә тыныҫландырырға тырышҡайны. Ә Фәрүәт күптән тыныс. Дуҫтары, туғандары уға төрлө ерҙән төрлө–төрлө эш урыны тәҡдим итеп тора: Фәрүәт барыһын да кире ҡағып тора – һәр хеҙмәттең етешһеҙ ерен табып тора.

– Таксислыҡҡа дан урын бар! – ти туғаны.

– Түңкәреләһем, аварияға эләгәһем килмәй!

– Төҙөүселәр аҡсаны күп ала. Ошо компанияны тәҡдим итәм. – Күршеһе, үҙенә алтын бирәләрме ни, алсаҡланып хәбәр һөйләй.

– Етәкселәр барыһы ла бур. Ә мин – ғәҙел кеше. – Фәрүәт хөкүмәтте һүгә, бисәһен әрләй: – Нимә, киттең дә баттың? Тиҙерәк ҡайт, асыҡтым!

Ә унынһы ике ерҙә егелә: ҡара таңдан эшкә сығып китә, һуң ҡайта. Ҡайта ла аш–һыу әҙерләй һәм бүтән бөтмәҫ–төкәнмәҫ мәшәҡәттәргә күмелә. Мәғмүрә лә теләшә:

– Бер төрлө маршрутка башкөллө өйрәндем. Маршрутыңды үҙгәрт – тиҙерәк эшкә урынлаш! – ти.

Бер көндө Фәрүәт менән Мәғмүрәнең өс йәшлек берҙән– бер улдары Рәүкәт:

– Ҡарағыҙ: атайымдың маршрутын төшөрҙөм! – тип кинәнеп ҡысҡыра.

Ҡараһалар… Аҡ ҡағыҙға ике һыҙыҡ һыҙылған да тәүге юлға «кухня – бәҙрәф – йоҡо бүлмәһе», икенсеһенә «йоҡо бүлмәһе – бәҙрәф – кухня» тип яҙылған.

Балаларҙың өс йәшендә уҡый, яҙа белеүенә иҫ китмәй. Ә Рәүкәттең былай зирәклеге ғәжәпләндерә.

Әй–й, был донъяның кеме юҡ…

Гөлниса апай улы Сәлихйәндең һөйгәне Миңсараны – ҡара күҙле, оҙон ҡара сәсле ҡыҙҙы – яратманы, ене кеүек күрҙе. Улына Миңсараға өйләнергә рөхсәт итмәне.

Сәлихйән бирешергә теләмәй: «Миңсараның аҡыллылығын, матурлығын, һапалығын күргәс, күңеле йомшарыр, беҙҙең бергә булыуыбыҙға ризалашыр» тип уйлай ҙа ҡыҙҙы әсәһе янына алып килә.

– Ҡара шайтанға тип үҫтергән улым юҡ! – тип аҡыра Гөлниса апай.

Миңсара, йөҙөн устары менән ҡаплап, илай–илай сығып китә.

Улын ҡыҙ артынан ебәрмәй әсә: ишеккә арҡыры тора. Ҡайғыға ҡалған егет, шул көндө үк әмәлен табып, ҡайҙалыр юғала. Һәм… ике–өс айҙан һап–һары сәсле, һары керпекле ҡыҙ алып ҡайта:

– Ҡара шайтанды ҡабул итмәнең. Бына һап–һарыһын ҡаршыла – килененң шул булыр! – ти.

Төпкөл ауыл бит – апай урыҫса һәйбәт белмәй. Ә мәрйәкәй татылдап тора. Шәп һөйләгәс, һүҙҙәрҙе тиҙ төшөнөрлөк тә түгел. Килен мәле–мәле менән һөрәнләп тә ебәрә икән. Әрләйме, әллә һәйбәт һүҙ әйтәме – ҡәйнә кеше һис аңламай.

Ҡәйнәһенә ылыҡмай килен – Сәлихйәнен (Сашкаһын) көнө–төнө ситкә китергә өгөтләй һәм алып та китә.

Хәҙер Гөлниса апай япа–яңғыҙ донъя йөгөн тарта. Ғүмер үтә – бәндә олоғая. Гөлниса апай ҙа ҡартайҙы.

Ауылда ир–атһыҙ, улан–киленһеҙ, балаларһыҙ донъя йөгөн һөйрәү еңел түгел.

Үҙе кәм бәндә генә бүтән кешене кәмһетә.

Әй–й, был донъяның кеме юҡ…

Күршебеҙ Ҡалмыҡтың исеменә түгел, есеменә аптырайым. Юҡ, ир кеше түгел ул, ҡырҡтан уҙған ҡатынҡай. Милләте лә ҡалмыҡ түгел. Йыл һайын һыйыры быҙауланы. Тыуған береһе әйбер сәйнәне – күрше–күләнде хатта илатып бөттө. «Йәш малды яман ғәҙәткә үҙе махсус өйрәтә» тигән хәбәр таралғайны. Быҙауҙарға кешеләр «ҡалмыҡ» ҡушаматын таҡтылар, «Ҡалмыҡтан ҡалмай» тип ҡайғыралар.

Ихатаға һуҙған бауға йыуылған керҙе элер әмәл юҡ – ниндәйҙер ҡөҙрәт менән килеп керә быҙауҡай – әйберҙе эләктереп сәйнәй ҙә башлай. Бауҙан тартып төшөрә алмаһа, аҫтан тылҡый. Кемделер күреп ҡалһа, ендән етеҙерәк ҡаса – «тотормон да һуғырмын – үсемде алырмын» тип уйлама ла. Күршеләре зарланһа, ҡатынҡай һүҙ көрәштермәй: йөҙө балҡып китә, киң йылмая. Тимәк, бик ҡәнәғәт.

Был көндө Ҡалмыҡ ҡатынҡай күршеһенең кер элгәнен күрә. Уныһы әйберҙәрҙе элеп бөткәс, ҡапҡаһын биген тикшерә лә өйөнә йүнәлә.

Ҡалмыҡ йәһәт кенә бәйле быҙауын сығара, күршеһенең ҡапҡаһын йәшен тиҙлегендә аса. Көйәнтәләп һыуға китә. Колонка янында танышын осратып, хәтһеҙ һөйләшеп тора. Ҡайтҡас, өйөнә керһә… Тәүҙә шаҡ ҡата ул: иҫенә килгәс, атлай алмай – йығылып китә. Быҙау «байрам ашы»

ойошторған. Хужабикәһенең күҙҙәренә таҫырайып ҡарап тора. Ҡунаҡҡа кейеп барырға әҙерләп, ултырғыс башына зиннәтле, ҡиммәтле күлдәк, камзул, шәлъяулыҡ һәм башҡа кейемдәр элгәйне. Быҙауы сәйнәп бөткән – ҡалдыҡтары иҙәндә ята.

Күршеһенең ҡапҡаһын асып мауыҡҡас, үҙенең солан ишеген ябып еткермәгән, ахыры. Өй ишеген эҫе мәлдә гел асыҡ ҡалдыра. Соландан тура өйгә йүнәлгән бәхетле мал.

Тетрәнештән ҡатынҡайҙың эйәһе һәлберәп төшкән. Әлегәсә шул хәлендә ғүмер кисерә. Ә хайуанҡайын, аҙыраҡ утыҡҡас, иткә тапшырған. Бүтән һыйыр ҙа аҫыраманы – күҙә һөтөнә мөрхәтһенде.

«Кешегә ҡоҙоҡ ҡаҙыма – үҙең төшөрһөң» тигән мәҡәл дөрөҫ шул.

Әй–й, был донъяның кеме юҡ…

Мин клубта йыр–бейеү түңәрәктәрен ойошторғайным. Ауылдаштарым шатланды – түңәрәктәргә күпләп йөрөнө. Концерттарҙы йыш ҡуйҙыҡ. Күрше ауылдарға, хатта районларға сығыу фекере тыуҙы.

– Билет хаҡын осһоҙ һатырбыҙ – күршеләрҙең күңелдәрен күтәреп ҡайтырбыҙ! – тип кинәнде кемдер.

– Костюмдар алырбыҙ! – Ҡайһылар шулай шатланды.

– Өфө әртистәренән кәм кейенмәбеҙ! – Рәйфә, ғәҙәтенсә, ҡыйыуһыҙ ғына әңгәмәгә ҡушылды.

Кешенең төрлөһө бар: кемдер, һәләте булмаһа ла, бейергә, йырларға, сәхнәгә сығырға атлығып тора. Ә ҡайһы бер һәләтлеләр уңайһыҙлана, ояла.

Рәйфәнең тауышы матур әммә үҙе баҙнатһыҙ – сәхнәлә ҡыйыр–ҡыймаҫ ҡына йырлай.

Мин Рәйфәлә үҙенә ышаныс арттырырға теләнем:

– Һинең тауышың Надежда Кадышеваныҡы һымаҡ. Хатта килеш–килбәтең дә әртискәнеке кеүек һөйкөмлө, – тинем.

Ошо һөйләшеүгә аҙна тирәһе ваҡыт үткәс, репетицияға китеп барғанымда бик әкәмәт кейенгән берәүҙе күрәм. Оҙон күлдәге ҡатлы–

ҡатлы, һәр ҡаты бер төҫтә. Биленә төлкө ҡойроғо таҡҡан. Оҙон ҡойроҡ ерҙә һөйрәлә. Ҡойроҡҡа ҡыҙығыптыр, ике–өс эт артынан эйәргән.

Шәберәк атлап, ҡатындың алдына сыҡтым һәм саҡ абынманым. Рәйфә ине ул.

– Был ниндәй маскарад? – тип һорарға көсөм етте.

– Үҙең бит, мине Надежда Кадышеваға оҡшатып, һоҡландың. Булғас–булғас, кейемдәрем дә уныҡы кеүек булһын, тип тырыштым. – Самаһыҙ биҙәнгән Рәйфә бихисап бижутерия элгән муйынын алға һондо, башын ҡайҡатып, беләгенә пластиканан һәм тимерҙән яһалған беләҙектәр кейгән ҡулдарын болғаны. – Кейемемә ҡарап ҡаршыларҙар, тауышымды тыңлап, шатланып ҡул сабырҙар.

Ҡайһы берәүҙәр саҡ ҡына маҡтауға ла сыҙамай – самаһыҙ осона шул.

Әй–й, был донъяның кеме юҡ…

Флиҙә – ата–әсәһенең берҙән–бер ҡыҙы ине.

Заманында уҡытыусылар аҡсалы булды. Уҡытыусылар ғаиләһендә үҫкән Флиҙә затлы кейемдә текә баҫып йөрөнө.

Шулай икебеҙ ҡайҙалыр китеп барабыҙ. Беҙҙең алдан биш балаһын яңғыҙ үҫтергән Яңылбикә апай ҡабаланып атлай. Төҫө уңған яулыҡ ябынған.

– Оялмай шундайҙы нисек кейеп йөрөй икән? Фу–у–! Мәңге кеймәйем инде сүплеккә ташлай торған нәмәне! – Апайҙың ҡыйшайған үксәле туфлийына ымлап, Флиҙә ҡысҡырып көлдө.

Ғүмер тиҙ үтә. Яңылбикә апай балаларын белдекле, егәрле итеп тәрбиәләне – бишеһе лә юғары уҡыу йортон тамамланы, барыһы ла дан оя ҡорҙо – балалар үҫтерәләр. Бөтәһенең дә «ҡулдарында – эш, ауыҙҙарында – аш».

Яңылбикә апай – ауылыбыҙҙың хөрмәтле ағинәһе. Башҡорттоң милли кейемдәрендә йөрөй. Балалары әсәкәйҙәренә зиннәтле үә ҡиммәтле кейем–һалым ташып ҡына тора.

Флиҙәнең ата–әсәһе күптән мәрхүмдәр.

Эш яратмаған Флиҙә ата–әсәһе ҡалдырған аҡсаны тотоноп, мал–тыуарҙы ашап – һатып бөттө.

Әле яңыраҡ ҡыйыш үксәле туфли, иҫке күлдәк кейгән Флиҙәне күрҙем. Текәлеге, тәкәбберлеге бөткән – тамсы ла ҡалмаған.

Боронғоларҙың: «Көлкө көлә килер, артыңдан ҡыуа етер», «Донъя ҡуласа – әйләнә лә бер баҫа» тигән мәҡәлдәре иҫкә төштө. Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә шул.

## Хөсөт

Беҙҙең бәләкәй генә коллективҡа яңы хеҙмәткәр эшкә килде. Уны ҡыуанып, үҙ итеп ҡабул иттек. Йәшел күҙле Хөсөтдин ағай шундай һалмаҡ ҡына, һаҡ ҡына баҫып йөрөй, мин уны үҙебеҙҙең бесәйебеҙгә оҡшаттым. Тауышы ла бесәйҙеке һымаҡ йомшаҡ, нескә.

- Осоп–ҡуныпбара торған заттарҙан түгел, ахырыһы, – тип үҙ фекерен әйтте Фазыл ағай.

- Оялсан, кеше күҙенә тура ҡарай алмай,– тине Әхсән йәштәш.

Хөсөтдин ағай иң тәүҙә миңә иғтибар итте. Күп һөйләүем, артыҡ асыҡ булыуым уны йәлеп иткәндер. Минән ул бөтә хеҙмәткәрҙең дә биографияһын һорашты. Үҙем нимә беләм, барыһын түкмәй–сәсмәй һөйләп бирҙем.

Оҙаҡ та үтмәне, коллективта көсөргәнешлек тыуҙы. Хеҙмәткәрҙәребеҙ араһында имеш–мимештәр йөрөй башланы. Иң тәүҙә директорыбыҙ тураһында хәбәр ишетеп, шаҡ ҡаттыҡ. Ул йәш сағында урлашып тотолған, өс йыл рәшәткәле тәҙрәнән ҡарап ултырған, имеш. Икенсе өлкән йәштәге хеҙмәткәребеҙ хаҡында ла хәбәр таралды: имеш, уның ситтә үҫкән балалары бар...

Бер көн сираттағы шундай хәбәрҙе тыңлағанда, күҙем кинәт Хөсәтдин ағайға төштө бит. Аҫҡа ҡарап йылмая ине ул. Күп уйлап тормай әйт тә һал мин:

– Хөсәтдин ағай килгәс кенә әллә ни булды беҙҙең халыҡҡа...

Ул миңә уҫал итеп ҡараны. Уның йәшел күҙҙәренең иң төпкөлөндә бесәй тырнаҡтары күренгәндәй булды. Тиҙҙән ошо тырнаҡтарҙың үткерлеген татырға тура килде.

Көндәрҙән бер көн эшкә килеп инеү менән ҡысҡырып сәләм бирҙем. Сәләмемде бер кем дә алманы. Өҫтәл артына барып ултырыуға Фазыл ағай:

– Бәйелһеҙ... – тип әйтеп һалды бит.

– Кем? –тим.

– Ишшеү телләшә,ана өҫтәл тартмаңды ҡара.

Тиҙ генә тартманы асам. Унда хат ята ине.

«Сәмүк (был минең ҡыҫҡартылған исемем, тулыһы – Сәмиғулла), ғүмергә бергә булырбыҙ, тигән һүҙҙәреңә ышанып харап ҡына булдым. Баламды әрәм итмәйәсәкмен, иҫән–һау тыуһа, үҙем үҫтерермен. Әсинә», – тип яҙылған ине унда.

Ҡот ҡалманы. Оҙаҡламай һөйгән ҡыҙым Әнисә менән туйыбыҙ булырға тора.

Эш ҡайғыһы китте. Кисен хатты тотоп Әнисәм янына барҙым.

- Сәмүк, ни булды һиңә? Ниңә һөмһөрөң ҡойолдо? – тине ул.

Хатты күрһәттем. Уҡып сыҡты ла, алһыуланған йөҙөн ҡулдары менән ҡаплап бер аҙ ултырғас, әкрен генә торҙо. «Бөттө!»– тип уйланым. Тик... Бөтмәгән икән. Әнисәм миңә икенсе хатты килтереп тотторҙо. «Әнисә! Яңылышма Сәмүккә барып. Бала хаҡына ул барыбер миңә киләсәк».

Йәшәһен ғәйбәткә ышанмаусылар! Әнисәм минең тоғролоғома ышана икән.

- Беҙҙең бәхеткә көнләшкән кешенең йүнһеҙ бер шантажы. Туй кисектерелмәй! – тине.

Шаулатып туй яһаныҡ. Туйҙа бергә эшләгән иптәштәремдең барыһы ла булды. Иҫтәлеккә фотоға ла төштөк. Әнисәнең киреһе – Әсинә икәненә йығылып көлдөк.

Туйҙан һуң мин сираттағы ялымды алдым. Хөсөтдин ағайҙың да отпуск ваҡыты еткән икән.

Бер айлыҡ ял бер аҙна кеүек тә тойолманы. Тәүге көн эшкә сыҡтым. Тағы бер кем дә иҫәнләшмәй, барыһы ла өҫтәлдәренә эйелгән. Йәнәһе, мине күрмәйҙәр. Ярай. Урыныма барып ултырҙым. Шулай тып–тыныс күпмелер ултырғас, Фазыл ағай:

- Айнытҡыс оҡшанымы? – тип һорап ҡуйҙы.

- Ә мин айнытҡыстың ҡайҙа икәнен дә белмәйем, – тим.

- Бушты һөйләмә. Ана, ҡағыҙ ебәргәндәр.

Айнытҡыстан килгән хатты тотоп, ҡатып ҡалдым.

- Теләһә нишләгеҙ, егеттәр, мин унда булманым, – тип әйтеп ҡарайым, береһе лә ышанмай.

Шулай ни эшләргә белмәй торғанда, директорыбыҙ килеп инде лә:

- Ғәлекәйев, айнытҡысҡа барып киләйек әле...– тине.

Унда барып йөрөүебеҙ бушҡа булманы: айнытҡысҡа эләккән Сәмиғулла Ғәлекәйевтың кеҫәһендә танытма булған, имеш.

Шуның буйынса исем–фамилия, эшләгән ер теркәлгән икән.

- Ғәлекәйевты ҡабул иткән иптәште саҡырығыҙ әле, – тине директор.

Полицейский миңә текләп ҡарап торҙо–торҙо ла:

- Ул өлкәнерәк һәм күҙҙәре йәшел ине, – тине.

Йәһәт кенә кеҫәнән туйҙа төшкән фотоны сығарҙым.

- Ошонда юҡмы ул кеше?

Был шунда уҡ Хөсөтдин ағайға төртөп күрһәтте:

- Бына ул.

Сабып тигәндәй эшкә барып еттем. Тик... Хөсөтдин ағай, хәҙер киләм, тип, сығып киткән икән. Шул китеүенән кире килмәне.

## Чехов ғәйепле түгел

«Ҡәҙерле әсәйем! Яман хәбәр тиҙ йөрөй, тигәндәре дөрөҫ икән, беҙҙең ғауғалы тормошобоҙ хаҡында ишетеп тә өлгөргәнһең.

Ваҡиғаны мөмкин тиклем тәфсилләберәк яҙырға тырышам. Эш бына нимәнән башланды. Бынан бер ай элек, алдырыр көн – яҙҙырыр тигәндәй, ғүмерҙә булмағанды, Физәр менән театрға барғайныҡ. Чехов әҫәре буйынса ҡуйылған спектакль ҡараныҡ.

Өйгә ҡайтҡас, хәләл ирем, тәүләп күргәндәй, миңә оҙаҡ ҡына текәлеп ҡарап торҙо ла күҙҙәрен сытырлатып йомдо:

- Бисураға оҡшағанһың! – тине ул. Шунан тәрән көрһөндө. – Әлдә тамаша ҡараным – донъяла шундай ҡатын–ҡыҙ булғанын да белмәй керер инем ҡара гүрҙәргә...

Уның тауышында нисә йылдар бергә йәшәп ишетмәгән моңһоулыҡ, һағыш тойоп, күңелем әллә нишләп китте. Юҡ, көнсөллөк түгел, теге ни...нимә але...э–э–э, йәлләү. Сикһеҙ йәл булып китте миңә хәләлем.

Йәһәт кенә ашарға бешерҙем. Өҫтәл артына ултырҙыҡ. Бер аҙҙан Физәр:

– Өйрәк кеүек һоғонаһың! – тип әйтеп һалды. Шунан йәнә күҙҙәрен йомдо. – Ә теге фәрештәләрҙең ашауы ниндәй,ә! Уймаҡтай ауыҙҙарын асыр–асмаҫ ҡына ризыҡ ҡабалар, сәйнәргә иренгән һымаҡ, оҙаҡ итеп тәмләп ашайҙар...

– Йә, йә, күп һөйләнмә, йоҡларға ят. Сәйнәргә иренеп ултырырға ваҡыт юҡ. Йоҡоң тағы туймаҫ. Иртәнсәк һине уятыуы бик ауыр! – тип әйтеп һалдым.

– Иблис! – тип яуапланы ул. – О–о–о, теге фәрештәләр һинең кеүек ажғырмайҙар инде. Хатта үпкәләшкәндә лә «Ғәфү итегеҙ» тип кенә һүҙ башлайҙар.

Бүтән әмәлем ҡалманы, йәһәтләп йоҡо бүлмәһенә йүнәлдем, түшәк йәйергә кәрәк.

–Дөйә һымаҡ дөпөлдәтеп атлайһың... Ә тегеләрҙең йөрөштәре лә һушыңды алырлыҡ. Баһаларын белеп, ғорур, көйәҙ, шул уҡ ваҡытта саҡ ҡына ҡылансыҡланып ҡына юрғалайҙар...– тип һөйләнеүен дауам итте Физәр,  минең ҡабалана–ҡабалана урын һалыуымды күҙәтеп. – Тып–тымыҡ, зәп–зәңгәр күлдә ап–аҡ аҡҡоштар йөҙә тиерһең... Их, үҙҙәрен танһыҡтарың ҡанғансы бер ҡосорға! – Ул ләззәтләнеп, күҙҙәрен йомдо ла күкрәк төпкөлөнән «әһ–һ...» тигән ауаз сығарҙы.

–Ха–ха–ха! – Миңә уның ҡыланышы ҡапыл көлкө булып китте.

–У–у–у, мәсекәй! – тип хәләлемдең йәне көйҙө. – Ана спектаклдәге фәрештәләр нисек көлә! Уларҙың көлөүҙәре... таң алдынан сылтыраған шишмә тауышы, һандугас моңо, торналар сыңы...

Мин, ауыҙымды асып, Физәргә ҡарап ҡаттым. Ысын шағир, билләһи! Әллә ниндәй һүҙҙәр һөйләй. Егет сағында бындай ҙа ғәжәп һүҙҙәрҙе миңә ниңә әйтмәне икән?..

Тетмәкәйен тетеп ташларҙай булһам да, үҙемде саҡ тыям.

– Ниндәй бәхетле йәшәгән элекке ир–ат! – тип дауам итте хәләлем. – Ниндәй фәрештәләрҙе көн дә күргәндәр, көн дә үпкәндәр... Эх–х!.. Билдәре ниндәй, билдәре!.. – Ул миңә устарын йәйеп күрһәтте. – Бер ҡулға ғына һыйырлыҡ...

Артабан уны тыңлап торманым, ебетеп ҡуйған керем ваннала  ята, шуларҙы йыуырға кәрәк.

Үҙем кер йыуам, үҙем уйланам. Уйланған һайын сәмләнәм: «Чехов әҫәрендәге һылыу ҡатындар кеүек үҙемде тәрбиәләй башларға кәрәк. Ни ерем кәм һуң ошо бисәләрҙән? Шундай уҡ наҙлы енестән бит әле мин дә...»

Йоҡларға ятҡанда сәғәт өс тә тулмағайны әле.

Алтынсы яртынан тороп, иртәнгене әҙерләй башланым. Балаларымдың ҡайһыһын балалар баҡсаһына, ҡайһыһын мәктәпкә элекке кеүек ҡабаланмай, өтәләнмәй генә оҙатырға булдым. Барса әйберҙәрен, квартира асҡысын, төшкөлөккә тигән аҡсаларын барлап,

уларҙы таратып бөткәс, йүгерҙем магазинға. Барып еткәнсе йүгерҙем, сөнки эшкә һуңламаҫҡа кәрәк. Магазинға иртән бармаҫ инем, өйҙә ҡартайған ҡайным менән ҡәйнәм ҡала. Уларға көндөҙ ашарға ризыҡ кәрәк.

Һин ашыҡҡанда, ул ҡабалана, тигәндәй... Дөрөҫөрәге, мин ашығам, әммә һатыусы ҡабаланмай. Оҙон сиратты ҡалдырып, ҡайҙалыр китеп олаға. Биш минут көтәбеҙ, ун минут, ярты сәғәт... Мин сыҙамайынса, бейеп торам. Тап ҡырҡ биш минуттан һатыусыбыҙ яй ғына баҫып килеп етә. Йыбанып ҡына аҡса һанай. Чехов туташтары һымаҡ, инсафлы булырға тырышып:

-Ғәфү итегеҙ, хөрмәтле һатыусы, тиҙерәк булығыҙ инде, ашығам, – тип әйтеп һалам бит.

–Итермен мин һине ғәфү! Ҡайҙан килгән фу–фу! – Ул ҡарышып, кассала булған аҡсаларын ҡабаттан һанарға кереште.

Сәғәт ярым тигәндә касса эргәһенән үтеү бәхетенә ирештем.

Нәмәләремде өҫтәлгә теҙәм дә осам туҡталышҡа. Минең йүгереүемә бер кем дә иғтибар итмәй. Сөнки минән башҡа ла йүгереүсе ҡатын–ҡыҙ күп. Автобус ишеге асыҡ булғанда, йүгереп килгән ыңғай атылырға кәрәк. Шунан йән көскә кешеләрҙе этергә тотонаһың. Шулай иткәндә, нисек тә һыңар аяҡ эләгә. Ә ҡалған ағзаларыңдың эләгеүе көсөңдән тора. Көсөң етмәнеме, инә алмайһың. Күпме тырышһам да, хәлем етмәне, автобусҡа керә алманым. Бәхет бар икән – такси тоттом. Әммә таксист фабрика яғына боролманы. Эш сәғәте башланырға һанаулы ғына минуттар ҡалыуын күреп, сабырһыҙлана башланым:

– Ғәфү итегеҙ, ҡәҙерле иптәш, беҙҙең фабрика юл ыңғайы бит, ә һеҙ кирегә китәһегеҙ, – тим.

– Булһа ни...– Таксист эргәһендәге иргә ымланы. – Ул һинән алдараҡ ултырған ине. Үҙегеҙҙе алғанға рәхмәт әйтегеҙ әле. Был – шәхси машина, ҡайҙа теләйем, шунда барам, – тип ауыҙымды япты.

Быға 15 һумды* түләнем. Шулай ҙа Чехов ҡатын–ҡыҙҙарына оҡшатырға тырышып:

– Рәхмәт, – тиергә үҙемдә көс таптым.

– Давай, дуй! – Таксист ишекте шартлатып япты.

Тамаҡ кипкән, сәстәр туҙған. Тынымды саҡ алып килеп индем.

– Ҡунаҡ бармы? – тип һораны директорыбыҙ, шикле ҡарашын төбәп.

– Юҡ...– тип ғәжәпләнәм.

– Ике минутҡа һуңланығыҙ. Хәҙерге үҙгәртеп ҡороуҙар, тиҙләнештәр заманында был – енәйәт, Хәмдиә ханым. Кисә өс минут, бөгөн ике–йәмғеһе була биш минут! Ә биш минут эсендә күпме итек табандары йәбештерер инең. Яҡшы түгел, яҡшы түгел. Тағы ҡабатланһа, ҡағиҙә–тәртипкә буйһонмай тигән сәбәп менән... Кхм–кхм...– «Аңланыңмы?» тигәнде һиҙҙереп, һынамсыл ҡарашын миңә йәнә төбәне.

Төшөнмәй ни, әлбиттә, барыһына ла төшөндөм.

Мин баштан–аяҡ эшкә сумдым. Башымды ҡалҡытҡанда, төш мәле үтеп киткән ине. Ашарға өлгөрмәнем. Нисә тапҡыр үҙемә әйткәнем бар: «Төшкөлөктө оноторға ярамай, кискә хәл бөтә...» Юҡ, булмай икән булмағас. Ай аҙағы бит, план дөрләп яна. Ә мин планды ай һайын арттырып үтәргә өйрәнгәнмен. Юҡҡамы ни һүрәтем Маҡтау таҡтаһында тора. Бынауы биш минут урынына өс сәғәт артыҡ эшләмәһәм, план үтәлмәйәсәк. Минең арҡала коллективҡа премия һәпмәç...

Ярай, эш аҙағы ла етте. Туҡталышҡа томоролдом. Автобусҡа ултыра алмайынса, ике сәғәткә яҡын торҙом. Түҙемлек кәрәк, түҙемлек. Бына береһенә инергә насип булды. «Алты тингә ҡайтып етәм» тип ҡыуанам. Туҡталыш һайын шофер ишек аса. Төшкән һәр кеше уның алдына бер һум аҡса һала. Аптырап киттем. Эргәмдәге һеңлекәш ишек өҫтөнә эленгән яҙыуға күрһәтә. «Сығыр алдынан бер һум түлә. «Йәнгүзәл» кооперативы» тип яҙылған ине унда. Ярай, бер һум ун биш һум түгел дә. Яңылыҡ әле ул, «кооператив» тигәндәрен ойоштора башлағандар икән...

---

* 1980 йылғы нисбәт.

Магазинда сиратта торҙом. Аҙыҡ–түлек йөкмәп ҡайтып ингәндә туғыҙ тулғайны. Ашым өлгөртеүгә ун бер булып китте.

Уртансы улыма мәсьәлә сисештем. Балаларҙы йоҡларға һалғас, һауыт–һабаны йыйыштырҙым да кисә йыуған керҙәремде үтекләргә тотондом. Эшем бөтө–гә сәғәт өс тулғайны.

Иртәгәһен бөтәһе лә яңынан ҡабатланды. Шулай итеп, шәмбе көн килеп еткәнен дә һиҙмәй ҡалдым. Ә шәмбе көн үткәндәренән саҡ ҡына айырыла, сөнки башҡа мәшәҡәттәр ҙә өҫтәлә.

Шәмбе көн балалар баҡсаһына йөрөгән ҡыҙымдың анализдарын тапшырҙым, өлкәненең ата–әсәләр йыйылышында булдым. Ҡайнымды врачҡа күрһәттем, ҡәйнәмде мунсала йыуындырып алып ҡайттым. Телефонға түләр өсөн ҡаланың бер осона, фатирға түләргә икенсе осона барып әйләндем. Ҡоймаҡ ҡойҙом, аш бешерҙем, балаҫ ҡаҡтым, иҙән йыуҙым... Сәғәт таңғы дүрттәр етте, йәкшәмбелә нимәләр эшләргә кәрәклеген уйлап ятам. «Башлаған бәйләмемде бөтөрәһе, ҡәйнәмдең күлдәген тегәһе, химчистҡаға бараһы бар. Ай аҙағы, иртәгә магазиндар эшләй, балаларға аяҡ кейеме табырға кәрәк...»

Шундай пландар ҡороп ятҡанда, ҡапыл Физәремдең моңло тауышы яңғыраны: «Һөйгәнем, һин ҡайҙа, һин ҡайҙа?» Унын шулай йоҡоһонда йырлай торған ғәҙәте бар. Шуға ла әллә ни илтифат бирмәнем, уйҙарымды дауам итергә булдым: «Ҡыяр, кәбеҫтә тоҙларға, укроп киптерергә...»

«Фәрештәләр... Аҡҡоштар...»– тип һаташты Физәр.

– Атаһы, уян әле, икенсе яғыңа әйләнеп ят. Уйларға ҡамасаулайһың, – тинем.

– Тьфу! Шуның өсөн генә бимазаламаһаң! Һылыуҡайҙы ҡосаҡҡа алдым ғына тигәндә... Албаҫты һин,белдеңме?– тине ул, йәне көйөп.

Шунда, әсәкәйем, нервыларым сыҙаманы... Ниҙәр әйткәнемде лә хәтерләмәйем.

Физәрем: «Төн йоҡоларымдан аҡырып–баҡырып уята» тип таныш–тоношҡа, туған–тыумасаһына, күрше–күләнгә һөйләп бөткән. Әле фабрикамда профком йыйылышында тикшерҙеләр. Штраф түләнем.

Бөтә ғәйеп үҙемдә:барыбер Чехов героиняһы кеүек, нәзәкәтле, нәфис була алманым...

Һине һағынып, яуап көтөп, ҡыҙың Хәмдиә».

## Күрмәһәм дә, үкенмәм...

Башына һалам эшләпә кейгән, ярты йөҙөн уҫлаптай күҙлек менән ҡаплаған ҡатын янынан үтеп китергә өлгөрмәне Кәримә, «Привет!» тигән һүҙгә һиҫкәнеп, йәлп итеп боролоп ҡараны.

Фәниләләрҙең ҡапҡаһы эргәһендәге эскәмйәлә ултырған ят ханым ап–аҡ нәмә менән туҡтауһыҙ битен елпетә.

– Драсьте! – тигән булды Кәримә, ҡаушауын һиҙҙермәҫкә тырышып, – Не жди, ваҡытыңды әрәм итеп, Фәнилә Мәскәүҙә. Ғәмилә ҡыҙына ҡунаҡҡа киткәйне, – тип өҫтәне.

– Һаумы–шәпме, Кәримә! Әллә ҡыланаһың, әллә ысынлап та танымайһың! – Быныһы ҡара күҙлеген сисеп, аяғүрә баҫҡас, эшләпәһен дә ҡулына алды.

– Аб–ба–а! Мәрйә тип торам да! – Кәримә бот сапты.– Ғүмерҙә «Привет»тигәнеңде ишетмәнем, урыҫсалап сәләмләшәһең бит. Аб–ба–а! Ысынлап Мәскәү мәрйәһенә оҡшағанһың: салбар кейгән булған. Түшеңде яп, төймәләреңде эләктер, ҡартая белмәйһең дә инде...

– Донъяларҙан сәпсим артта ҡалғанһың, Кәримә! Үҙенең бәҫен белгән бисәләр хәҙер шулай кейенә икән. Бик уңайлы, әтеү йөрөйбөҙ итәктәребеҙгә уралып. – Фәнилә, Кәримә әхирәтен көйҙөрергә теләгәндәй, былай ҙа үтә асыҡ иҙеүенең йәнә бер һәҙәбен ысҡындырҙы.

– Белмәйем, кендек, түш күрһәтеп кенә бәҫкенәбеҙ артырмы икән, әхирәт? Аб–ба–а!  Эшләпә лә кейеп ебәргәнһең, сәпсим үҙгәргәнһең...– Кәримә һаман ғәжәпләнде, телен һаман тыя алманы.

– Эшләпә башты эшләтә, тиҙәр. – Фәнилә ҡысҡырып көлдө.

– Миңрәүләнеп бөткән башыбыҙға хәҙер эшләпә түгел, әллә нимә ҡапла – эшләмәй ҙә, аңламай ҙа. Ана минең ҡартым: «Ни бисә түгелһең, ни кеше түгелһең...»– тип кәмһетә.

– Һин ниндәй яуап таптың? Хи–хи–хи... –  Фәнилә рәхәтләнеп хихылданы.

– Икәү талашҡанда өсөнсө шатлана,тигәндәре дөрөҫ икән... Телеп һалырлыҡ тел миндә лә:  «Ҡап–ҡоп ашайһың да, шарт–шорт у...ң, хыр–хыр йоҡлайһың, ҡарт алаша. Бүрәнә лә бүрәнә, һин дә муртайып бөткән бүрәнә!» – тип  ябам мин уның алаптай ауыҙын.

– Шәп әйткәнһең!– Фәнилә, елпеүесен асып, битен елләтә башланы, – Бөгөн бигерәк томра!

– Тағы һелкетергә тотондоң, нәмәҫтәкәй һуң был?

– Елпеүес.  Урыҫтар  «веер», ти. Быны аҡҡош ҡаурыйынан эшләгәндәр. Өйҙә ожмах ҡошоноң ҡойороғонан яһалғаны ла бар, ҡыҙым алып бирҙе! – Фәнилә маҡтанған һымағыраҡ әйтеп ҡуйҙы.

– Аб–ба–а! Ожмах ҡошоноң ҡойороғон күрһәң дә әле...– Кәримә, үпкәләгән бала һымаҡ, иренен турһайтты.

– Урыҫтар шул ҡошто «павлин»,  ти.

– Шулай тип әйт, әтеү  ожмах ҡошо, имеш... Паулиндыҡы булһа  ла булыр, түлкә ожмах ҡошоноҡо түгел.

Артабан аңлатыу эштәренең фәтүәһеҙлегенә  төшөнгән Фәнилә һүҙен йәһәт кенә икенсе юҫыҡҡа бороп ебәрҙе:

– Эҫе кәмегәс, мунса яғырмын, юл саңдарынан арынырмын. Үҙебеҙҙең ҡара мунсабыҙ һағындырҙы. Тегендә ни, шау алтын ваннала йыуыныу ялҡытты, хи–хи–хи...

– Һаман сама белмәй ҡыжырайһың, һөйлә исмаһам, Мәскәү хәлдәрен: ниҙәр күрҙең, кемдәр менән таныштың, нисек ҡунаҡ булдың? «Алтын ванна» тигәнең нимә?

– Һүҙ һәләк күп, Кәримә, ултырып һөйләшәйек. – Иңгә–иң терәп ултырғас, Фәнилә хәбәрен дауам итте. – Ашаған–эскәнде, танышҡан–күрешкәнде, күргән–кисергәнде вис тасуирлармын, сәбәләнмәй генә тыңла. Ғәләмәт икән ул серегән байҙар донъяһы...

– Йә,йә, баштан башлап һөйлә! – Кәримә әхирәтенә яҡынырак шылып ултырҙы.

– Мәскәү вокзалында Милә үҙе ҡаршыланы.

– Милә тигәнең кем?

– Бәй, үҙемдең ҡыҙым, Ғәмиләм. Хужаһы «Мила» тип кенә йөрөтә икән. Серегән байҙа йыйыштырыусы булып эшләй.

– Ғәмилә университам бөткәйне лә...

– «Университут» тип, дөрөҫ әйтергә өйрән, әхирәт! – Фәнилә мыҫҡыллы йылмайҙы.

–Үҙең дөрөҫ әйтмәйһең, һүҙ көрәштерергә тиһәң, һине ҡуш. Эйе, университам бөтөрөптөрөп, иҙән йыумаһа инде. Мәскәү тикле Мәскәүҙә бүтән эш тапмаған икән... – Кәримә тел шартлатты.

– Иҙән йыуһа ла, университут тамамлаған уҡытыусыларҙан ун–ун биш тапҡырға күберәк түләйҙәр. Ашау–эсеү – байҙан, аҡсаһы янда ҡала. Беләңме, Кәримәкәйем, серегән байҙың бер йортонда бер генә булһаң да, ата–бабаларыбыҙ түгел, үҙебеҙҙең төштәргә кермәгәнде күрәһең. Күрәһең, һәмишә онотмайһың. Олигархтарҙың тормошо боронғо әкиәттәрҙән былайыраҡ...

– «Бер йортонда» тинең, нисә йорто бар?

– Америкала, Францияла, Италияла, Сәғүд Ғәрәбстанында...– Фәнилә бармаҡтарын бөгә–бөгә һанарға тотонғайны, Кәримә туҡтатты:

– Шул ҡәҙәре йорт нимәгә кәрәк икән?

– Унынын әйтә алмайым, биғәйбә, әхирәт.

– Серегән байҙан һорашһаң ни була, ауыҙыңа һуҡмаҫ ине... Кәримә, әйттем бит бая, сәбәләнмәй генә тыңла, фекеремде бүлдерәһең. Был–берҙән, икенсенән, һорашырға Миләмдең хужаһы өйҙә, йәғни Мәскәүҙә юҡ ине. Ниндәйҙер бай илдең данлыҡлы курортына ун алты йәшлек кәләше менән зөфаф төнөн уҙғарырға киткәйне. Биш көнгә. Биш көн үткәс, кәләшен айырып ебәрә. – Фәнилә Кәримәнең түңәрәкләнгән күҙҙәрен күргәс, теле көрмәләнгәндәй, хәбәренән шып туҡтаны.

– Аб–ба–а! Биш көнлөк кәләш булалыр шул...И–и–и, был ҡатын–ҡыҙ башынан ниндәй хәсрәттәр үтмәй. Кәмһетелеүгә нисек кенә сыҙай икән бисара...

– Бисара түгел, биш көндә миллионерша булған бәхетле бисә.

– Аҡса тип, байлыҡ тип, шундай мәсхәрәгә ризалашҡан ҡыҙҙар бармы икән?

– Бармы тиң, илдең төрлө тарафтарынан бәхет эҙләп килгән ҡыҙҙар сират тора. Бәхет тәтемәһә, өмөттәре өҙөлгән ҡыҙҙар сәстәрен йолҡоп–йолҡоп илай икән. Былай башлана, ти, эштәр: буласаҡ кәләштең буй–һыны, йәше, сәстәре менән күҙҙәренең төҫө хаҡында тәфсирләнгән иғлан буйынса серегән байҙың хеҙмәтселәре ғиффәтле ҡыҙ һайлай.

– Ғиффәтле икәнен нисек белә хеҙмәтселәр? Ҡыҙ тигәнең алдашһа... – Кәримәнең нервыһы ҡуҙғалды ахыры, уң сикәһе тартышып–тартышып ҡуйҙы.

– Хеҙмәтсе–табиб ентекләп тикшерә. Әлегәсә һис яңылышмаған, бик тәжрибәле икән.

– Кем әйтә?

– Миләм һөйләй. Хәҙер нисә йыл иҙән йыуа, нисәмә ҡыҙҙы бик–бик алыҫ утрауҙағы курортҡа оҙатҡандарын күреп йөрөй бит ул. Йәшерен эш түгел, бөтәһе лә законный,ти. Олигарх үҙе оҡшатҡан ҡыҙ менән килешеү дүкәмите төҙөй. Шул килешеү буйынса бик ҡиммәтле курортҡа әпкитә. Дүрт тәүлек йәшәгәс, бишенсе көнөнә йәш бисәне диңгеҙ буйына алып бара икән. Ауырлығы ни бары 500 грамм тартҡан алтын күкрәксә менән

ҡыҫҡа ғына алтын ыштан кейҙерә, «купальник», ти. Әммә бик–бик нәҙек алтын ептән  туҡылған әйбер һыу инергә эшкинмәй, шундуҡ һүтелә, таралып төшә икән.  Шунан килешеүҙә күрһәтелгән миллионын түләй ҙә йәш ҡатын менән хушлаша. Күпмелер ваҡыттан ошо шөғөлөн тағы ҡабатлай. Бүре лә туҡ, һарыҡ та теүәл.

– Биш көндә ғүмеремә етерлек аҡса түләһәләр, әллә мин дә...

– Әстәғәфирулла! Ҡиәфәтеңде күрмәҫ өсөн аҡса бирерлек! – Йәне көйгән Фәнилә Кәримәне бүлдерҙе.

– Йыртыҡ тишектән көлмәһен ул! – Кәримәнең ҡыҙыҡһыныуы үпкәләүен онотторҙо – Йә, йә, Фәнилә, мәрәкә хәлдәр һөйләйһең бит әле, тағы ниҙәр күрҙең, нимәләр ишеттең?

– Сәбәләнмә, Кәримә, саҡ ҡына сабыр ит. Йорт аулаҡ бит. Милә ҡыҙым сәйәхәтте  тәүҙә серегән байҙың аш–һыу  бүлмәһенән башланы. Бүлмәһе ҙу–у–ур, беҙҙең клуб ҡәҙәре.  Алтын тотҡалы ишекте үткәс, күҙ алдарым ниңәлер сыбарланып китте. Баҡһаң, стенаға бүҙәнә күкәйенең ҡабыҡтарын йәбештереп, өҫтөнән лак буяғандар икән...

– Бала күгәрсендәй генә бүҙәнәнең күкәйе ни саҡлы ғына! Шул ҡәҙәре бүҙәнәне ҡайҙан тапҡандар, ә?! –Кәримә бот сапты. – Аб–ба–а!

– Олигархҡа бүҙәнә моңдор шул! Таптың аптырар нәмә. – Фәнилә, йәне көйгәнен йәшермәй, тауышын көсәйтте. – Тағы бер «аб–ба–а»лаһаң,  бүтән бер ни ҙә һөйләмәйем. Ә һөйләрлек нәмәләр күү–ү–үп әле...

– Бөттө, бөттө, сәбәләнмәм, аббаламам, түлкә һөйлә! – Кәримә, бисара, ҡулынан мәмәйен тартып алған баланан былайыраҡ әңгәмәсеһенә мөлдөрәп ҡараны.

– Ситтәре алтын еп менән сигелгән ап–аҡ эскәтер ябылған өҫтәл өҫтөндә сыр яланғас малай баҫып тора.

– И–и–и, бахырҡайҙы, ыҙалатып, нишләп кенә яланғас баҫтырып ҡуйғандар? Йәшәмәгер байҙың һаранлығы ни сиккә барып еткән.

– Тере йән түгел, шау алтындан ул малай. Милә ҡыҙым алтын ситле гәлсәр бокал тотоп, малайҙың «малайына» тейеүе булды, быныһы саптырып та ебәрҙе. Һауыты һарғылт шыйыҡса менән тулғас, «малайына» йәнә тейеүе булды, теге «бес» итеүенән шып туҡтаны. Ҡыҙым ошо шыйыҡсаны бер тынала эсеп тә ҡуйҙы. Уҡшырға әҙерләнгәйнем, ҡыҙым көлә. Баҡһаң, бәүел тип уйлағаным шампан шарабы икән. Мин дә бер–ике бокал һемерҙем. Юлдан талсығып килгәйнем, ярап ҡалды.

– Бәхетең дә бар икән, Фәнилә. Шунда мине лә эйәртеп алып барманың, исмаһам мин дә бәүел, әй, шампан эсеп шатланыр инем...– Кәримә тәрән көрһөндө. –Шунан?

– Олигархтарҙың йортона анһат инеп булмай, әхирәт. Ҡапҡаһына етмәҫ борон башмаҡ ҡәҙәре эт етәкләгән һаҡсы ҡапшамаған еремде ҡалдырманы. Ҡулымдағы сумкамды бушатып тикшерҙе. Паспортымды хатта еҫкәп–еҫкәп алды. Ҡапҡанан эскә үткәс, икенсе һаҡсы ниндәйҙер ялтыр нәмә менән бөтә кәүҙәмде әйләндереп–әйләндереп ҡараны. Быныһы ла күптән бер кем теймәгән ерҙәремә ҡәҙәр һәрмәне. Эргәмдә ҡыҙым тора бит әле. Ғәмиләм шунда нисәмә йыл эшләй, таныйҙар.– Фәнилә бер килке шым ултырҙы.

– Йә, шунан?

– Шунан, ни, шул: Миләм алтын тотҡалы ишекте асып ебәрҙе. Стеналарға алтын биҙәктәр төшөрөлгән плитәләр йәбештерелгән. Серегән бай хәжәтен атҡара торған урын, «унитаз» ти, алтындан. Төптәрәк тағы бер ишек бар, имеш. Беҙҙең магазин ҡәҙәре бүлмәнең уртаһында олоғара ялғаш, «ванна» ти, уныһы ла,кран–маҙары ла вис алтындан.

Серегән бай сәләмәтлеген ифрат ҡайғырта: шул алтын ялғашта бер көн һөттә, икенсе көн еләк–емеш һутында, өсөнсө көн төрлө шифалы үләндәр төнәтмәһендә, бишенсе көн шампан шарабында, алтынсы көн йылымыс ҡына шыйыҡ шоколадта йыуына.

– Аб–ба–а! Ейән–ейәнсәрҙәремә  имерлек, бармаҡ башындай шикалат алып бирергә аҡса еткерә алмайым...–Кәримә хәбәрҙе бүлдермәҫкә кәрәклеген оноҡкайны, ғәҙәтесә бот сапты.–Шунан?

– Шунан, ни, шул: олигархтың йоҡо бүлмәһенә йүнәлдек. Ҙу–ур бүлмә, уртаһында бәләкәй саҡта ике һеңлем, өс ҡустым  менән уйнап үҫкән һикебеҙҙән күпкә иркенерәк карауат тора. Ситтәре ҡыҙыл ебәк менән нағышланған һары атлас япма ябылған. Ҡыҙыл атластан әллә нисәмә мендәр. Ҡайҙа ҡарама,  һары ла ҡыҙыл төҫ... Шундай төҫтәрҙе олигархтар ярата икән: һары – байлыҡ билгеһе, ә ҡыҙылы – бәхет төҫө, ти. Карауаттың уң яғына һәр береһе егермешәр мең евро торған кәртинкәләр эленгән.

– Радионан «евро» тигәндәре ҡолағыма йыш салына, урыҫтар һүгенгән һүҙ тип уйлай инем, нимә була ул?

– Наҙанһың, Кәримә, шыр наҙан  ауыл бисәһе.

– Ҡартым кәмһеткән дә баштан ашҡан.  «Телвизорҙан да, радионан да «евро»  ти ҙә торалар, нимәкәй һуң?», тип һорағайным: «Ҡайҙан беләйем, еҙрит–күҙрит» тип аңлатты. Башҡортса  «еҙрит»те урыҫ  «евро» тимәйме ни?

– Бай илдәрҙең аҡсаһы шулай атала. Беҙҙең хәйерсе илдә үрсегән серегән байҙар ғына тота ул аҡсаны. Егерме мең «евро»ны беҙҙең аҡсаға әйләндергәндә ете йөҙ егерме мең һум була, йәғни һинең йорт–ҡураң, бөтә мал–тыуарың олигархтың бер кәртинкә хаҡы ла тормай...

– Фәнилә, башым әйләнә, шикелле...Бигүк төшөнөп етмәнем...

– Минең дә төшөнөп етмәгән нәмәләр күп булды. Ҡараным–ҡараным, уйланым–уйланым, тәки аңламаным: һүрәттәр бала ялғыһына ла оҡшаған, һытылған күҙ ҙә кеүек. Аңшайып торғанымды күргәс, Ғәмиләм : «Хужам абстракционизмды ярата», тип көлә.

– Унынһын нисек аңларға?

– Тәрәнгә төшмә, Кәримә. Нәҡ һин дә, мин дә аңламаҫлыҡ нәмәләрҙе «абстракция» тиҙәр. «Абсурд» тигән һүҙ ҙә бар, отоп алдым,

һин дә онотма. Карауаттың һул яғында ҡыҙыл ағастан эшләнгән ҡиммәтле өҫтәл өҫтөндә алтын ситлек тора. Ситлек эсендә алтын алҡалар тағылған алты ҡомаҡ уйнай...

– Аб–ба–а! Ғүмер буйы колхозда алдынғы һауынсы булдым, алтын алҡа таға алманым. – Әсенеүҙән, ахыры, Кәримә аяғүрә баҫмаҡсы ине, аяҡтары тыңламаны, дыңҡ итеп урынына кире ултырҙы.

– Сәбәләнмә, тинем мин, «аб–ба»лама, тип тә иҫкәрттем, киҫекһеҙ... – Фәнилә,елпеүесен асып, битен елләтергә тотондо.

– Етте, етте, бабай көлгән дә еткән... Йә, шунан?

– Шунан ни шул: карауат ҡаршыһында төрлө үлсәмдәге бисәләр түше эленгән...

– Күҙеңә күренгәндер, әстәғәфирулла!

– «Бюст» тиҙәр икән шуны. Олигарх, әртис ҡатын–ҡыҙҙың түшен оҡшатһа, миллион түләй ҙә һатып ала. Былай эшләнә икән: түшен гипсҡа буяп, сәғәткә яҡын ултыра теге бисә. Гипс һәйбәт ҡатҡас, тәндән айырып алалар ҙа, кемдең түше икәнен аҫтына алтын хәрефтәр менән яҙып, байҙың карауаты ҡаршыһына элеп ҡуялар. Йоҡлар алдынан шуға ҡарап ята икән был. Йоҡонан уянғас та, бергилке һоҡланып күҙәтә.

– Беҙҙең түштәрҙең генә ҡәҙере булмаған икән. Стенаға элеү түгел, хәләл иремә күрһәтергә оялдым. Йә, шунан?

– Икенсе бүлмәгә керҙек. Саҡ һушымдан яҙманым! Бая һин әйткәнсә, әллә зәхмәт ҡағылып, күҙемә күренәме, тип торам. Ҡап–ҡара эт менән оҙон йөнлө һоро бесәй телевизор ҡарап ултыра. Ҡәнәфирҙәре айырым: уң яҡтағы телевизорҙан хоккей ярышын бесәй күҙәтә, һул яҡтағы телевизорҙа барған баскетбол уйынына эт тексәйгән. Кинәнһәләр, эт ырылдай, бесәй мырылдай. Ирмәк ул. Ветеринар, тикшеренә–күҙәтә торғас, эттең баскетбол, бесәйҙең хоккей яратыуын асыҡлаған. Серегән бай шундай асышы өсөн был кешегә нисәлер миллион премия биргән. Хәҙер ошо мал духтыры, тәжрибәһе менән уртаҡлашып, китап яҙа.

– Телевизорыбыҙ ватылғайны, ремонтҡа түләрлек аҡсабыҙ юҡ.

– Күптәнге әйбер бит, совет осоронда алғайнығыҙ,хәҙер эшкинмәҫ, сығарып ташлағыҙ.

– Мөйөш йәмләй ҙә ул! Яңыны барыбер алып булмаҫ,беҙ үлгәнсе торһон шунда! Ашарға һорамай.

– Ашау, тигәндән... Бесәй менән эттең ашнаҡсыһы элек, совет дәүерендә, Кремль ашханаһында эшләгән. Ә хайуанҡайҙарҙы саф һауала йөрөтөүсе бәһлеүәндәй ике ир затын үҙем күрҙем: береһе – халат, икенсеһе тәпешкә тотҡан. «Ниңә кәрәк ул нәмәләр?» тип аптырағайным, ҡыҙым тәфсирләп аңлатты. Баҡһаң, хужаларын һағынып, тетрәнеш кисермәһен өсөн, серегән байҙың халатын – эткә, тәпешкәһен бесәйгә еҫкәтәләр. Тетрәнеш, уларса «стресс», тиҙ генә үтеп китә икән. Хайуандарҙың нервыларын ныҡ һаҡлайҙар: һөйәккә оҡшатып махсус заказ менән эшләнгән кеҫә телефонын эттең муйынына аҫып ҡуйғандар. Олигарх ҡайҙа, ҡайһы илдә йөрөһә лә, этенә шылтырата ла : «Привет, Тарзан!» – тип ҡысҡыра. Мәхлүк, хужаһының тауышын танып, шатлығынан өрөгә тотона, сыйылдай, ырылдай. Эт шат, этенән былайыраҡ олигарх шат. Ике мең доллар тора, ти эттең кеҫә телефоны. Әле бер оҫтаһы бесәй өсөн телефон эшләргә тейеш.

– Аб–ба–а! Эт менән бесәй генә ярата икән һинең серегән байың...– Кәримә, бая сәбәләнмәҫкә, «аб–ба»ламаҫҡа тигән вәғәҙәһен онотҡайны, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

– Улай ғына түгел, «техника» тип тә йәнен фиҙа ҡылырға әҙер, ти. Сәғәткә иҫе китеүенә үҙем шаһит. Махсус олоғара бер бүлмә сәғәт менән шығрым тулы. Ниндәйҙәре генә юҡ: ул алтыны, ул гәүһәр менән биҙәлгәне, ул шау аҫылташтарҙан эшләнгәне... Мөғжизә... Сәғәт оҫтаһы шуларҙың төҙөклөгөн ҡарап–тикшереп кенә тора. Ҡиммәтле–ҡиммәтле, төрлө–төрлө төҫтәге, сит илдәрҙән килтерелгән эреле–ваҡлы машинаһы иһә утыҙҙан ашыу.

– Ниме, Фәнилә, көндә алмаш–тилмәш береһенә ултырамы?

– Ултырып йөрөй торғаны өс–дүрт төрлөнән артмай. Утыҙ машинаны коллекция итеп йыйған.

– Аб–ба–а! Әллә ниҙәр белеп, әллә ниҙәр күреп, сәпсим ғалимә булып ҡайтҡанһың! «Коллекция» тигәнең нимә тағы?

– Бына һин бала–сағаңдың иҫке–моҫҡоһон ташламайһың, йыйып бараһың. Айырмаһы шунда: олигарх аҡсаһы күплектән шаша, ә һин еткерә алмағас, аптыраныуҙан...

– Дөп–дөрөҫ. Иҫкеләр ярап ҡала әле. Бөгөн иртәнсәк бәләкәс ейәнемә өлкәненең иҫкеһен ҡыҫҡартып, ямап кейҙерҙем. Әтеү йөрөй бәпәйем, арт яғын ялтыратып, маймылға оҡшап...

– Уңай әйттең дә, маймыл хаҡында һөйләргә онотҡайным... Африканан, ҙур аҡса түләп, ата маймыл алып ҡайтҡан. Маймылды тәрбиәләгән хеҙмәтсе көн һайын йыуындыра, йөнөн тарай, ҡул–аяҡ тырнаҡтарын ҡарай, төрлө фасон менән тегелгән күлдәк–ыштан кейҙерә. Кейемен оҡшатмаһа, йәшәмәгер маймыл аяуһыҙ ҡысҡыра–ҡысҡыра ла сисеп ташлай.

Хужаһы сәфәрҙән ҡайтҡас, ҡосаҡлашып алтын малайҙан шарап һемерәләр. Кәләш эҙләйҙәр: ниндәй генә инә маймыл алып ҡайтһалар ҙа, бер генә «ҡосаҡлай» ҙа пырылдатып ҡыуырға тотона,ти.

–Тимәк, серегән байҙың күсерməhe... Мал эйәһенә оҡшай, тиҙәр, шөғөлдәре бер иш.

– Беҙгә иң–иң кәрәклеһе хәтерҙән сыҡҡан икән дә... «Конкурс» тигән ярышты, мужыт, беҙ ҙә күрербеҙ. Миләм һөйләп торҙо: ниндәйҙер бик бай бер илдә етмеш йәштән башлап һикһәне тулған ҡарсыҡтарҙың матурлыҡ конкурсын уҙғарғандар. Еңеүселәргә ҡиммәтле ресторан, әллә нисә миллионлыҡ яхта бүләк иткәндәр. Йәренгә шундай ярышты Миләмдең хужаһы үткәрәсәк. Әйҙә, Кәримә, беҙ ҙә ҡатнашайыҡ! Какрас етмешкә еттек, самай ғына.

– Ярһыма, Фәниләә, ултыр! Ниме, йырлаталармы, бейетәләрме, әкиәт һөйләтәләрме, нимәштәргә кәрәк һуң анда?

– Ә–ә–ә, конкурс талаптары ҡыҙыҡһындыра икән. Беренсенән, әбейҙәр ярҙамһыҙ йөрөгә тейеш.

– Етмештә лә йүгереп торам. Йүгереп йөрөп эшләмәһәң, йәшәрһең ауылда...

– Икенсенән, хәтерҙең һәйбәт булыуы шарт.

– Хәтер ҙә Аллаға шөкөр, иремдең һөйәркәләренең, ситтә үҫкән балаларының исемдәре вис иҫемдә.

– Кәримә, тим, бүлдермә һүҙемде. Шулай ҙа беҙҙең хәлдән килмәҫтәй нәмәләр ҙә бар: ҡалаҡ–сәнскене матур тоторға, килешле көйшәргә кәрәк. Ҡабалан–ҡарһалан һоғонорға ярамай. Әйткәндәй, балыҡ ашай беләһеңме?

– Аб–ба–а! Һин бигерәк... Булһын ғына, балыҡ ашауҙың ни ҡыйынлығы?

– Улай ҡап–ҡоп ҡабып, әлән–борхан йоторға түгел. Балыҡ ашай торған махсус сәнске бар икән. Гәлсәр рүмкә–бокал, ҡиммәтле фарфор һауыт–һаба, алтын ҡалаҡ–сәнскеләрҙе ҡапыл күргәс, ҡаушатыр – унының хаҡ. Йәнә. Күҙлекһеҙ күрергә, аппетит шәп булырға тейеш. Унан холоҡ–фигелде лә күҙәтәләр икән: сабырлыҡҡа, тырышлыҡҡа һынау тотаһың.

– Фәнилә, һис кенә лә ҡайғырма: ғүмер баҡый йәшәү өсөн тырышып–тырмашып яттыҡ, шуғамылыр, сабырлыҡ та, сараһыҙҙан әрһеҙлек тә бар . Бай илдәрҙең иркә бисәләрен уҙырбыҙ. Әммә йөрөмәйек әллә ҡайҙарға. Район үҙәгендәге ҡыҙыма барһам да, ике–өс көндә ауылымды һағынам. Үҙем дә һиҙмәҫтән, «Тыуған ауылым»ды йырлап ебәрәм икән. Шунан кейәү йәһәт кенә килтереп ташлай. Һағыныуҙан да ауыр хәл юҡтыр..

– Дөрөҫ, Кәримә, дөрөҫ. Миләм әйтә: «Хужам тыныслыҡ, Тыуған ил, мөхәббәт тураһындағы йырҙарҙы ярата», ти.

– Фәниләкәйем, йәннәттә йәшәгән серегән байыңды йәлләп, байуҡ йәнкәйҙәрем йәнселде бит әле. Йәлләмәҫлекме: биш көнлөк кәләш – мөхәббәт түгел, байлыҡ өсөн бәҫен белмәгән бисәне ысын күңелдән һөйә алмай. Тыуған иле лә юҡ – күберәк сит илдәрҙә көн итә. Тыныслыҡ хатта

төшөнә  лә кермәйҙер – байҙың йөрәге нисек һил, тыныс булһын. Алтын да шатландырмай – бушҡа килгән самаһыҙ байлыҡ ҡыуандыра тиһеңме... Шул ҡәҙәре алтынды ҡәберенә алып  китә алмай. Алтын ваннаһына һалып, бүтән алтынын өҫтөнә өйөп күмһәләр ҙә, бисараға тынғылыҡ булмаҫ. Хазинаға ҡыҙығып, бандиттар ҡәберен ҡутарыр.

– Мин уйлағанды тәфсирләйһең, Кәримә! Ғәмилә ҡыҙым да һинең һымаҡ һөйләнә: «Олигархтар үҙ–ара ярыша». Миләмдең хужаһы бер сит ил ҡунағының ҡатынына хаҡы 200 мең доллар торған  алтын кәстрүл бүләк иткән. Алтын кәстрүл бешеренергә эшкинмәй. Затлы һауыт–һабаларҙан был бисә лә коллекция йыя.

– Шул ҡәҙәре байлыҡтан ни эшләргә белмәй ҡоторғансы, етем–еһергә, ауырыу–сырхауҙарға, ҡараусыһыҙ ҡарт–ҡороға ярҙамлашһындар ине, исмаһам...

– Көйөнмә. Хоҙай уларҙы байлыҡ менән һынай. Серегән байҙар шул һынауҙа үҙҙәрен һыната – иманһыҙ ғүмер кисерә. Йә, ярар, конкурс  тип йөрөмәбеҙ әллә ҡайҙарға. Ғәмилә ҡыҙым саҡырып ҡалды, дүкәмиттәр әҙерләй башла. Олигарх күрһәтергә һине Мәскәүгә  алып барам.

– Олигархтарҙы күрмәһәм дә, үкенмәм! Уларҙы көн дә  телевизорҙан күрһәтәләр. Аб–ба–а! Ҡартым эҙләп сыҡҡан! Мунсаһын томалағандыр. Пенсиәгә сыҡҡас, көн аралаш мунса яға, икешәр сәғәт йыуына. Ике–өс литр һалҡын айран эсә. Яңы мәтрүшкә ҡушып бәйләгән йәш  миндек сыбыҡҡа ҡалғансы сабына. Тәненә һеңгән бензин, кәрәсин еҫен тәки бөтөрҙө. Йыуып–йыуып та  еҫ–ҡоҫо кәмемәгән кейемдәрен яндырҙыҡ. Ғүмер баҡый машина–тракторҙан төшмәне. Тапҡан–таянғаныбыҙ хәләл, ашаған ризығыбыҙ хәләл. И–и–и, үҙемдең бабайымды... Әллә ниндәй олигархтарың ары торһон! Фәниләкәйем, хәбәргә әүрәп, эңер төшөрҙөк. Мунса тоҡандырырға барыбер һуңланың. Сәхрәләрҙә үҫкән сәскә балы, яңы ҡаймаҡ, һөт өҫтө менән генә сәй эсәйек. Аҙаҡ дан итеп мунса керербеҙ – серегән байҙар еҫе ҡалмаһын!

## Һарыһаҙ мажаралары

Йәмле йәй иртәһендә ун өс өйлө Һарыһаҙ ауылы умарта күсенән былайыраҡ гөжләргә тотондо: Хупъямал апай менән Ризуан ағайҙың улы, килене, етенсе йәшенә аяҡ баҫҡан ейәне ҡаланан ҡайтып төштө. Ауылдағы бөтә ҡарт–ҡороға ҡыуанынслы ваҡиға ине был: Һарыһаҙҙа бала–сağа тауышын күптән ишеткәндәре юҡ. Барыһы ла бала танһыҡлаған. Төпкөл ауыл булғанғалыр, ситкә таралған ул–ҡыҙҙары балалары менән оноҡҡанда бер ҡайта. Унда ла ике–өс көнгә генә. Һағыныуҙар баҫылырға өлгөрмәй, китеп тә баралар.

Малай оҙаҡҡа килгәйне – ата–әсәһе, берҙән–берҙәрен һис аямай, Һарыһаҙҙа ҡалдырып, киттеләр ял итергә Майамиға.

Хупъямал апай менән Ризуан ағайҙың өй ишеге иртәнән кискә ҡәҙәр ябылманы: барса әбей менән бабай Ридан исемле ҡунаҡ малайҙы күрергә килде. Зирәк, теремек, алсаҡ малай бөтәһенә лә ифрат оҡшаны: урыҫ телен генә түгел, башҡортса ла матур һөйләшеүенә таң ҡалдылар. Ауылдаштары алдында әллә кем булып киткән Хупъямал апай менән Ризуан ағай: «Баланың балаһы балдан татлы» тип татылданы. Шулай булмай ни, тағы кемдең башҡортса матур һөйләшкән ҡала балаһын күргәне бар?

– Рәхәтләнеп ейән–ейәнсәр һөймәйенсә үтә лә беҙҙең ғүмер... – тип иламһыраны ҡунаҡ күрергә килгән Гөлбикә ҡарсыҡ.

– Атайым менән әсәйемә хәбәр итермен: Майамиҙан ҡайтҡанда Япониялағы дуҫтарына керһендәр. Әбей–бабайҙарға бүләк итеп ҡурсаҡ алып ҡайтһындар. Ҡарт–ҡоро өсөн махсус ҡурсаҡтарҙы японлар күптән эшләгән. Йомшаҡ ҡына ошо ҡурсаҡтар, ысын балалар кеүек, бес итә лә ҡысҡыра. Трусигын ҡороға алыштырмайынса аҡырыуынан туҡтатып булмай. «Мине баҡсаға алып сыҡ!» тип тә мыжый. Йәһәтерәк баҡсаға алып сығаһың, шунһыҙ илауҙан туҡтамай.

– Исемең нисек? – тип төпсөштө Гөлбикә әбейҙең ҡарты Ғәжип бабай. Уны япон ҡурсаҡтары хаҡындағы хәбәр ялҡытҡайны.

– Ридан...

– Исемең бигерәк ят икән, улым. Бындайҙы ишеткәнем юҡ ине. Ҡайҙан табалар, тиң, әллә ниндәй иләмһеҙ...ы–ы–ы... ирмәк исемдәрҙе? – тип ихлас ғәжәпләнде Ғәжип ҡарт.

– Исем табыуы еңел бит ул. Әниф олатайым, әсәйемдең атаһы, ҡыҙы тыуғас, исем эҙләп интекмәгән: үҙенекен кирегә әйләндергән дә Финә тип ҡушҡан. Мин тыуғас, атайым да исеменең киреһен ҡуша: Надир улы Ридан булам. Куршебеҙ Әнәс ағай, атайым менән әсәйемдән күрмәксе, ҡыҙына Сәнә тигән дә ҡуйған. Атайымдың танышы Фират ағайҙың улы – Тариф. Линар – Ранил. Римад – Дамир...

– Етте, етте, аңлашылды... – Ғәжип ҡарт урынынан ҡалҡынды. – Әйҙә, Гөлбикә, ҡайтайыҡ.

Хупъямал апай ейәнен һыйларға ҡоймаҡ ҡойҙо, бәлеш бешерҙе.

– Мин быларҙы ашамайым! – тип ҡырт киҫте Ридан. – Шоколад батончиктары Сникерс, Твикс, Натс, Баунти кәрәк!

– Улары беҙҙә юҡ инде, балам. Исмаһам, туҡмаслы аш аша! – тип өҙгөләнде Хупъямал апай.

– Биг Ланч, Чудо Ланч, Роллтон, Доширак ҡына ашайым! –Малай ашлы тәрилкәне ситкә этте.

– Ундайҙы ишеткәнебеҙ, күргәнебеҙ юҡ! – Хупъямал апай илар хәлгә еткәйне.

– Тапмаһағыҙ, аслыҡ иғлан итәм! – Үҙ һүҙле бәләкәй ҡунаҡ ихатаға йүнәлде. – Палатка булмаһа, ҡыуыш ҡорам.

– Әйҙә, Ридан улым, Байгүлгә барайыҡ! – Ризуан ағай ейәнен нисек тә албырғатырға тырыша.

Байгүл ифрат бай икән: сәғәт тә үтмәгәндер, оҙон бер шешлек балыҡ ҡармаҡланы Ризуан ҡарт.

Малай ҙа тик торманы: литрлыҡ банкының ҡапҡасын асып, өс–дүрт ят балыҡты һауыты–ние менән күл уртаһына ырғытты. Ҡартлыҡ үҙенекен итә шул: ейәненең шөғөлө менән ҡыҙыҡһынырға, ҡала тиклем ҡаланан ниндәй балыҡ алып килеүе, ни өсөн күлгә ебәреүе хаҡында белешергә Ризуан ағайҙың башы етмәне.

Ҡурылған балыҡ ашағанда ғәпләшеү – үҙе оло кинәнес. Ете йәше лә тулмаған «егет»тең белмәгәне юҡ. Ейәненең отҡорлоғона хайран ҡалған ҡарт:

– Көҙгә мәктәпкә төшәһең, улым. Тырышып уҡыһаң, ҙур кеше – ғалим булырһың! – тине, Ридандың таҡыр башынан һыйпап.

–Хәҙер уҡырға кәрәкмәй, олатай! Думала думают – оҙаҡламай додумаются: кем теләй – аҡса түләп уҡый, теләмәгәндәрҙе интектермәйәсәктәр!

– Юғары белем алырға кәрәк, – Хупъямал әбей ҙә уйлағанын әйтергә булды. – Уҡымаһаң, үҫкәс һөнәрһеҙ ни эшләрһең?

– Дипломды һатып алаһың! – Бәләкәй ҡунаҡ ҡысҡырып көлдө. – Ә һүгенергә мин былай ҙа беләм.

– Әстәғәфирулла! Һүгенеү – һөнәр түгел бит, балам. – Хупъямал апай, сикһеҙ аптырап, ейәненә текләне. – Атай–әсәйең һүгенмәй, бысраҡ һүҙҙәрҙе урамдан отаһыңдыр?

– Оҙаҡламай мәктәп программаһына һүгенергә өйрәтеү дәрестәре индереләсәк. Рәхәтләне–е–еп һүгенһә, компьютерҙа көндәр буйы уйнап, нервылары ҡаҡшаған балаларҙың стресы кәмей икән. «Хәҙерге мәҙәниәттең өр–яңы тармағы» тиҙәр. Рәсәйҙә эксперимент өсөн әлегә бер генә шундай мәктәп бар. Өлкәнең мәҙәниәт министры, өлкән синыф уҡыусыларының һүгенгәнен туйғансы тыңлағас, бик ҡәнәғәт булған. Өлкәнең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре үҙе уҡыта икән шул дәресте. «Һүгенһендәр, һуғышып йөрөгәнсе» тигән ул.

– Эйе, һуғышырға ярамай. – Ризуан ағай ейәненең һүҙен бүлдерҙе. – Төрмәгә эләгеүең бар. Ҡурҡыныс.

– Төрмәлә төрләһән күреп, төрлә тәжрибә туплаған ағайҙар һис тә ҡурҡмай. Күршебеҙ Бәшир бабай, төрмәнән сыҡҡас, эшһеҙ интекте. Ыҙаланып йөрөнө–йөрөнө лә, бер керәндил урлап тотолдо, төрмәгә кереп, аслыҡтан ҡотолдо. «Бында, исмаһам, ашау байҙан, үлем Хоҙайҙан» тип харап кинәнә, ти.

– Тағы ни һөйләрһең, мәғәнәһеҙ малай? – Хупъямал апай, тәүҙә ҡыҙарҙы, унан буҙарҙы. – Бәләкәйһең бит әле. Аслыҡтан ҡотолам тип, төрмәгә эләгергә яҙмаһын. Алдағы тормошоңда, үҙең тырышһаң, бай булырһың.

– Тырышырмын, өләсәй. Байығыу юлдары ун... йөҙ... мең төрлө. Мәҫәлән, тәүҙә берәйһенең паспортын сәлдерәһең. Шуның менән кредитҡа ҡиммәтле–ҡиммәтле әйберҙәр алаһың да һатаһың. Унан ҡойроҡто һыртҡа һалаһың – ҡасып ҡотолаһың. Теләһәң, матур ҡумтаға һалып, ҡар һатып була. Тотоп, төрмәгә япһалар ҙа – яҡшыға. Үҙеңә кәрәкле мәғлүмәттәр йыяһың, тәжрибә туплайһың. Мул ғына ришүәт төртәһең дә, ҡасан теләйһең, шунда сығаралар. Унан чиновник булырға бер аҙым.

– Шпана үҫә, тимәк! Һуңғы өмөтөм өҙөлдө. Бөткән ауылыбыҙҙы ошо бала тергеҙер, нигеҙҙе ҡоротмаҫ, тигәйнем, булманы... – Ризуан ҡарт хафалы ҡарашын ейәненән алманы.

– Дөрөҫ уйлағанһың, олатай! Терелтермен ауылығыҙҙы! Хәҙер ун дүрт йәштән паспорт бирәләр. Атайымдың аҡсаһы етерлек. Коммерцияһы алға барған кешеләрҙең генә балалары үҙ эшен башлай. Күршебеҙ Әнәс ағай ҙа бизнесмен. Уның ҡыҙы Сәнә менән йәштәшбеҙ. Ул да ун дүрте тулыуҙы түҙемһеҙлек менән көтә. Паспорт алғас та, өйләнешергә һүҙ ҡуйыштыҡ.

– Ғәләмәт икән донъяһы. Ете йәшлек бала һөйләй торған һүҙме... Шунан? – Йәне көйһә лә, тыныс булырға тырыша Хупъямал ҡарсыҡ.

– Шунан ни шул: Сәнә Әнәсовна менән ауылығыҙҙы һатып алабыҙ. Ер–һыу ҙа беҙҙеке була. Ауылдың иҫке өйҙәрен емереп, күл янында көнсығыш, ә тау итәгендә инглиз стилендә һарайҙар һалырбыҙ.

– Уныһын күрмәбеҙ, Аллаһ бирһә. Ҡартайҙыҡ – баҡый донъяға күсергә лә ваҡыт етә! – Ризуан ҡарт ниҙәлер еңел һуланы.

– Үлергә өлгөрмәгәндәр миңә ялсы булыр... – Малай өлкәндәрсә тубығына һуғып алды ла, һүҙ тамам тигәнде аңғартып, ихатаға сығып китте.

– Һа–а–ай, алда бына ниндәй тормош көтә беҙҙе... – тип оҙаҡ ҡайғырҙы ҡарттар.

Кискә табан ауыл халҡы ҡайғыға батты: бер бандит бөтә ҡарт–ҡороноң пенсияһын талаған.

Яман хәбәрҙе ишеткән Хупъямал апай ейәнен дә, йәшергән пенсияһын да ҡурсалап, абына–һөрөнә ҡайтып инһә, битенә ҡара ойоҡ ҡаплаған төпөш кенә әҙәми затты күрҙе. Ирмәк кенә байпанлап ҡаршы килә башлағас, ҡарсыҡ ҡаҡ иҙәнгә лап итеп ҡоланы ла сытырҙатып күҙҙәрен йомдо.

– Ҡурҡма, өләсәй, мин бит!

Хупъямал апай күҙен асһа, ауыҙы ҡолағына еткән ейәне тора. Малайҙың ҡулында – ҡара ойоҡ. Өс көн элек йыуып элгән ерҙән юғалғайны. Әйберен дә танығас, ҡарсыҡ һикереп торҙо:

– Улай урлашып йөрөгәнсе минән һора, бөтә пенсиәмде бирәм! – Хупъямал апай аҡсаһын йәшергән урынды ҡараһа, елдәр иҫкән – юҡ аҡса!

– Өләсәй, пенсиәң күптән минең кеҫәлә! Почтальонды оҙатып сыҡҡайның, йәһәт кенә кеҫәгә тыҡтым. Бигерәк аҙ икән...Шуға нисек йәшәйһегеҙ? Думала думают: йәшәү минимумы кәрзинен күтәрәсәктәр. Оҙаҡламай пенсиәне арттырабыҙ, ололар дүрт грамм колбасаны күберәк ашаясаҡ, ти депутаттар.

– Һөйләнмә, оятһыҙ! Бир ауыл халҡының аҡсаһын!

– Тәжрибә уңышлы булды! – Малай ҡәнәғәт. Ашыҡмай ғына атаһының бында ҡалдырған салбарын систе. Әсәһенең бейек күтәрмәле итеген кейгәйне – һалып ырғытты. Бына ни өсөн алпан–толпан атлаған икән...

Йәне көйгән апай ейәненә аҡайып бер ҡараны ла ҡабаланып урамға йүнәлде. Ауылдаштарының пенсиәһен тиненә тиклем теүәл таратып сыҡты.

Ул кистә Һарыһаҙҙа шәм яҡтыртыусы булманы.

Иртәнсәк ауылды яңы хәбәр тетрәндерҙе: Муллаяр бабайҙың атын балыҡтар ашаған, үҙе саҡ ҡотолған, шулай ҙа уң аяғының ике бармағы сәйнәлгән. Әҙәм ышанмаҫлыҡ хәбәргә Ридан асыҡлыҡ керетте:

– Во, пираньи тигән балыҡтар! Дүрт–биште генә ырғытҡайным күлгә. Тиҙ үрсей тигәндәре дөрөҫ икән! Йыртҡыс балыҡ ул пираньи!

– Ниндәй үсең бар беҙҙең ауыл халҡында? – Хупъямал апай сирләп ята, ыңғырашып ҡына һораны. – Йыртҡыстарҙы ниңә алып килдең?

– Тәжрибәне ҡайҙа үткәрәйем? Атайым тыуған ауылымда матур, таҙа, балығы мыжғып торған күл бар, тигәйне. Хәҙер пираньинан башҡа бүтән бер балыҡ та булмаясаҡ! – Шат Ридан урамға атыла.

Халыҡ күл яғына шомланып ҡарай, берәү ҙә ул яҡҡа аҙым да атламай, ҡош–ҡортон ебәрмәй.

Икенсе көнгә ауыл йәнә ҡайғынан шаңҡыны. Һәр йорттоң ихатаһында өйрәк–ҡаҙ, күркә–тауыҡтарҙы үлтергәндәр ҙә айырым–айырым өйөп киткәндәр.

Хупъямал апай ҙа, ҡош–ҡортоноң өйөм–өйөм үләкһәһен күргәс, сеңләп илап ебәрҙе. Кемдең эше икәнен аңлағайны ул:

– Уй, алла... Ниндәй бала һуң һин? Йыллыҡ ризыҡтан яҙҙырҙың.

– Ҡош киҙеүенән һаҡланмайһығыҙ икән – үҙемә тотонорға тура килде. Һеҙ бигерәк инде, олатай, өләсәй, ҡош киҙеүенең ни икәнен дә ишетмәнегеҙме? Дума депутаты һымаҡ, ниңә аңшайҙың, олатай? Хәҙер уларҙы яндырырға кәрәк: бензинмы, кәрәсинме – нимәгеҙ бар?

Ул кистә ауылды төтөн ыҫланы, ҡурылған ит еҫе таралды.

Өс көн дә үтмәне, яңы хәсрәт өҫтәлде: халыҡтың еҙ, суйын ҡомғандары юғалды. Хупъямал апай ғаилә ҡомартҡыһы булған еҙ самауыры менән еҙ батмусын йәлләп, сеңләп–сеңләп иланы. Ридан ғына аҫҡа ҡарап, мут йылмайып, бик ҡәнәғәт йөрөнө.

Күмәкләп күпме эҙләһәләр ҙә, юғалған әйберҙәр табылманы.

– Төҫлө металл бит улар, әрәм итәһегеҙ. Кеҫә телефонынан хәбәр иткәйнем, Сәнәнең атаһы Әнәс ағай килеп, машинаһына тултырып алып китте. Бик шатланды, – тип һикрәндәне Ридан.

Ейәнен тәрбиәләргә уйланымы, аптыраған Ризуан ҡарт быңдай алымды ҡулланды:

– Ни эшләргә белмәй йөҙәгәнсе, беҙгә әкиәт һөйлә! – тип бойорҙо.

Малай ихлас ризалашты. Ҡәберҙән сыҡҡан мәйеттәр, боевиктар, террористар, күктән төшкән сит планета кешеләренең этлектәре хаҡында тыңлап, ҡарт менән ҡарсыҡ былай ҙа самалы йоҡоларынан бөтөнләй яҙҙы.

Ауылдан бер нисә кеше, йорттарын ташлап, ситкә күсенеп китте, һыулауға төшкән һыйырҙарҙы пираньи балығы ашаны. Электр сымдары өҙөлгәс (уларына әлеге Әнәс атлы кеше электрик менән айыу майы һөрттөләр), телевизор эшләмәне, һыуытҡыстар боҙолдо. Халыҡтың һөт–ҡаймағы әсене, ит–майы ирене.

Ҡурҡыныс тормош, алда ни булырын белмәү – Һарыһаҙҙы гүр тынлығына күмде.

Августың һуңғы көндәрендә Надир менән Финә Майамиҙан ҡайтышлай Һарыһаҙға һуғылды. Малайҙы ҡалаға оҙатҡас та әле ауыл халҡы, хәтһеҙ ваҡыт урамға, ихатаһына сығырға ҡурҡып, өйҙәрендә генә ултырҙы.

## Олигарх

Шулай бер көндө хәләл ефетем:

– Фәстәриҙең пальтоһы туҙған. Башмаҡты һуйып һатайыҡ та яңы кейем алайыҡ. Берҙән–беребеҙ иптәштәре эргәһендә кәмһенеп йөрөмәһен, – тип һүҙ башланы.

– Ә итһеҙ нисек ҡыш сығырбыҙ? – Мин, маңлайымды һыпырып, уйға ҡалдым.

– Ауылда йәшәйбеҙ бит, кемдән биш, кемдән ун килолап һатып алырбыҙ. – Хәлимәм мине тынысландырырға тырыша.

Һүҙ көрәштермәнем – бисәне барыбер еңеп булмаҫ – юҡҡа нервы әрәм итмәйем. Ул ни ҡуша, теүәл генә, тиҙ генә үтәргә өйрәнгәнмен.

Башмаҡты һуйып, баҙарҙа һатырға булдым һәм мал духтыры Фаҡай янына ашыҡтым.

– Мөштәри Әхтәриевич, ҡабаланма, сабыр бул! – ти ҡусты. – Яңы закон сыҡты бит.

– Әллә ни саҡлы закондар сыға тора, иплә береһе лә үтәлмәй – онотола тора. Быныһы ниндәй? – тим, иҫем китмәй генә. – Закондың минең малға ни ҡыҫылышы бар?

– Бар шул, бар – нәҡ һинең башмағың хаҡында. Гәзит уҡымайһыңмы? – Фаҡай ҡусты аптырай.

– Һирәк–һаяҡ уҡыштырам.

– Шул–шул: уҡымайһың, «ыштыраһың» ғына!

– Йә, йә, йәмерәймә – төшөндөр иплә.

– Мин биргән генә справка хәҙер эшкинмәй, Мөштәри Әхтәриевич. Ошо исемлек менән эш ит! – Ветеринар һуғымды баҙарҙа һатыр өсөн ҡайҙа барып, ниндәй–ниндәй белешмәләр алырға кәрәклекте яҙып, ҡулыма тотторҙо.

Ҡағыҙҙағы исемлек буйынса эш башланым. Тәүҙә ауыл биләмәһе хакимиәте башлығынан башмағым барлығына раҫлау алырға тейешмен

икән. Эйе, башлыҡтың ҡайтыуын, эй, көттөм: Силәбелә йәшәгән өлкән улының туйын «Дан» ресторанында үткәреп йөрөгән. Аҙна–ун көндән ҡайтты был. Унан алған белешмәне йәһәт кенә кеҫәмә йәшерҙем.

Башмаҡтың һаулығы хаҡындағы белешмә ауылдың Фаҡай ҡустыныҡы түгел, ә район үҙәгендәге ветеринария станцияһынан биргәне генә ярай икән.

Их, малҡайҙы район үҙәгенә алып барырға транспорт табып булманы.

Хәлимәм менән киттек район үҙәгенә: мин, башмаҡты баулап алдан барам, хәләлем малҡайҙы һыйғыр сыбыҡ менән арттан ҡыуа. Әлдә район үҙәге беҙҙең Мөстән ауылынан йыраҡ түгел – ни бары утыҙ саҡрымда.

Өс көндән справка алып, ҡыуанып ҡайттыҡ. Шатланырлыҡ та шул: справка өсөн ни бары биш мең генә алдылар. Күберәк һораһалар ҙа бер ни ҡылып булмаҫ ине – йомошто атҡармай, нисек ҡайтаһың.

Ярай, был мәшәҡәтте лә үткәрҙек. Хәҙер беҙҙең Мөстәндән башмаҡты салдырырға махсус цех урынлашҡан Сөрөшкән ауылына алып барырға тейешмен. Уның өсөн машина яллрға кәрәк. Шунһыҙ Мөстәндән етмеш саҡрымда ятҡан Сөрөшкәнгә йәйәү барып етеү бермә–бер ҡыйын буласаҡ. Малҡай ҙа арыу уҡ ябығасаҡ.

Күрше ауылда йәшәгән Мөҡим энекәш менән башмаҡ итен һатҡас аҡсаны түләргә килештек. Юл хаҡы кеҫәгә һуҡһа ла, өндәшмәнем – кәрәк телде тешләтә. Нүлгә төшкән кәйефемде күрһәтмәҫкә лә көсөм етте.

Юлға сығыр алдынан ғаиләм менән ашанып ултырабыҙ.

– Фаҡай иҫкәртте: мал салыу пунктында өс кеше эшләй икән. «Бер баш мал һуйған өсөн ете мең түләргә кәрәк. Эсәк–ҡарынын, үпкә–бауырын, башы–тояғын, тиреһен да алып ҡалалар» тине. Эсәк–ҡарындан, үпкә–бауырҙан бешкән бәлеш танһыҡлағайным, ризыҡҡа яҙманы. – Мин, һиҙмәй ҙә ҡалдым, тәрән көрһөндөм.

Бишенсе синыфта уҡыған Фәстәри улым һикереп тормаһынмы!

– Бик башлы абзыйҙарҙың эше бит был, атай! Эсәк–ҡарындан бөйөрөктәр, башы менән тояҡтарынан ҡойҡа әҙерләп һаталарҙыр. Тиренән дә килем килә. Салған өсөн такса –ете мең, тиреһе – биш, бөйөрөктәр менән ҡойҡанан...ну...йәнә биш мең генә булһын. Бер баш малдан йәмғеһе ун ете мең аҡса! Көнөнә унды салһалар – бына һиңә йөҙ етмеш мең. Шуны өскә бүлһәң – яҡынса илле ете мең! Цехтағы өс кеше көнөнә илле ете – алтмыш мең һум аҡсаны кеҫәгә һала. Һәр береһе айына күпме ала? Атай, һана әле... – ти был күҙҙәремә текәлеп.

– Етте, Фәстәри, бигерәк фәстерәһең! – Улымды тыйырға, тынысландырырға тырышам. Әммә малайҙы туҡтатырлыҡ түгел – яман ярһыған:

– Ә һин, атай, ай буйына биш меңгә бөксәнләйһең! Атай, әсәй, мин ҡош–ҡорт салырға махсус цех асам! Эре малға мөмкинлек бирмәҫтәр – конкуренттар аяҡ салыр. Ваҡыт әрәм итеп, көнәркәштәр менән көрәшеп йөрөмәм бит инде.

– Юҡты һөйләмә! Кеше ишетмәһен! – Мин көлөп ебәрҙем. Күптән был ҡәҙәре рәхәтләнеп көлгәнем юҡ ине – күҙҙәремдән йәштәр сыҡты.

– Көлмә, атай... Ҡаҙ–өйрәк, тауыҡ–күркәне күпләп үрсетеүселәр тураһында беләһең. Хатта дөйәғош менән мауыҡҡандар бар. Ә бит эшҡыуарҙарҙың береһе лә әлегә ҡош–ҡортто салыр өсөн махсус цех асмаған. Ә мин асасаҡмын. Махсус пунктта салынмаған, эшкәртелмәгән ҡош итен баҙарҙа һатырға рөхсәт итмәйәсәкмен. Тыңламайҙар икән – иңдәрен имгәтерлек штраф сәпәйем.

– Һа–а–ай, харап та һинең пландарың, Фәстәри! Пунктыңда эшләргә, баҙар ҡарауылларға нисек өлгөрөрһөң? – Хәлимә хәләлемә күҙ ҡыҫам: йәнәһе, малайҙы баҙатам, йәнәһе, туҙға яҙмаған хыялын юҡҡа сығарам.

– Ҡайғырма, атай, минең ышанысլы командам буласаҡ. Хәҙер эшһеҙ интеккәндәр һәләк күп – әҙ генә хаҡҡа ла киләсәктәр. «Фәстәри Мөштәриевич!» тип өлтөрәп торасаҡтар.

– Бәй, юҡ–бар һөйләргә һәләк оҫтарғанһың икән. – Хәлимәмдең хәле бөткән, бөтөрөнөп киткән, тынын үрә ала. Мин дә уны хупларға ашығам:

– Фәстәри, һаман һандырайһың, кеше генә түгел, тауыҡ көләр, – тим.

– «Тауыҡ» тигәндән... Ябай ғына миҫал: мәҫәлән, бер тауыҡты салған өсөн такса – бер мең. Ә уның йөнө, йөрәге, тәпәйҙәре, ҡанаттары бар. Йөндәренән мендәр эшләрбеҙ, йөрәктән деликатес, ә тәпәйҙәрҙән холодец, әсәй, беҙҙеңсә нисек әйтелә: тертелдәкме, һелдерәкме – шуны әҙерләп тәүҙә быяла, аҙаҡ ҡалай һауыттарға тултырып һатырбыҙ. Бик үтемле буласаҡ, кеҫәгә һәйбәт килем керәсәк.

– Тауыҡ тәпәйҙәрен, эсәктәрен эт тә ашамай, мин вис ташлайым, ә һин... – Хәлһеҙ Хәлимә хәбәрен һөйләп бөтмәне.

Малай һаман үҙенекен тылҡый:

– Әлдә эсәктәр тураһында әйттең, мин онотҡанмын икән – уны ла, бешекләп–бешереп, ит турағыстан үткәреп,тертелдәкме, һелдерәкме, шуға ҡушырбыҙ, һарымһаҡты күп һалһаҡ, үҙенсәлекле тәғәм буласаҡ. Үҙебеҙ ашамабыҙ – еҫкәп кенә ҡарарбыҙ.

Хәҙер һанайыҡ әле: бер тауыҡты салған өсөн такса – бер мең, ҡанаттар – биш йөҙ, ә консервалар нисәү сығыр, эшләгәс, күрербеҙ – әлегә мең ярым, тиәйек. Йәмғеһе өс мең! Көнөнә нисәүҙе һуйырға мөмкин булыр – күҙ күрер. Шулай, ҡәҙерлеләрем, мин барыбер олигарх булам!

– Һиңә уҡырға, юғары уҡыу йортон тамамларға кәрәк!

– Һеҙ икегеҙ ҙә юғары белемле, һин, атай, биш меңгә ҡара тиреңде түгәһең, әсәйгә уныһы ла юҡ. Мин һеҙҙең кеүек йәшәргә теләмәйем. – Улым юғары тонда тағы өҫтәп ҡуйҙы. – Барыбер олигарх буласаҡмын!

– Телгә бөткән, буш хыялға батҡан малай, бер ҙә киҫәмәйһең – тауыҡ тәпәйҙәре, эсәк–фәләндәре менән булырһың олигарх, булмай ни! Олигархтар ҡаҙнаны талай, нефть, алтын компанияларын ҡулға төшөрә! – Мин аҡырырға–баҡырырға тотондом.

– Атай, әсәй, борсолмағыҙ, бөтәһен дә беләм. Компьютер, телевизор барыһына ла өйрәтә. Минең ниәттәремде аңлағыҙ: ҡош–ҡорт өсөн махсус

салыу пунктын асыу миңә тәжрибә өсөн кәрәк. Роман Абрамович та тәүҙә резина уйынсыҡтар сығарған кооперативтың директоры булған. Хәҙер ул кем? «Сибнефть», «Евраза» һәм «Челси» тип аталған футбол командаһы хужаһы, ун туғыҙ миллиард доллар эйәһе. Ошо кеше кеүек, эш–көш нескәлектәренә төшөнөрмөн дә ҙурға ынтылырмын. Олигарх булам!

...Ошо һөйләшеүҙән һуң, башмаҡты Сөрөшкәнгә – мал салыу цехына – алып барманым да ҡуйҙым. Фәстәри иҫке кейемендә нисек тә йөрөр әле.

**Өфөлә йәшәһәм ине!**

*Монолог*

*Сәхнә уртаһында микрофон тора.*

*Сәхнә артынан таҡмаҡлап Хәсибә сыға:*

Өфө тиҙәр, Өфө тиҙәр,

Өфөнө күрһәң ине.

Өфөнөң урамдарында

Кинәнеп йөрһәң ине, – тип таҡмаҡлайым.

«Эйе, Өфөлә ғүмер иткән ҡатын–ҡыҙға йәшәүе һәләк рәхәт, осһоҙ хаҡҡа ғына алып, дан кейенәләр, осһоҙға аҙыҡ–түлек алалар – өҫтәре бөтөн, тамаҡтары туҡ», – тип уйланым.

Телевизорҙан көнөнә йөҙ мәртәбә: «Беҙҙең кибеткә килегеҙ: илле–етмеш процент ташлама менән шәшке тун алып кейегеҙ! Өҫтәп бүләк бирәбеҙ!» – тип, өҙөлөп–өҙөлөп саҡыралар. Бүләктәре, бәлки, шәшке бүректер. Шулайҙыр – затлы тунды затлы бүрек менән кейергә кәрәк. Эсендә йәне булған нескә зат нисек түҙһен? Был ҡәҙәре саҡырыуҙарға мин дә сыҙаманым. Бәй «Ағас күрке – япраҡ, әҙәм күрке – сепрәк» тиҙәр. Урыҫтың дан әйтеме лә бар: «В сорок пять – баба ягодка опять!» Оҙаҡламай миңә лә ҡырҡ биш йәш тула – еләктәй бешкән сағым. Йәндәй йәмәғәтем Йәнәхмәт тә ниәтемде йөпләне: «Хәсибә бәғерем, күр Өфөнө, йөрәкәйем, ал шәшке тун, бүтән бисәләрҙе көнләштереп кей! Мине

һөйөндөр: «Кем бисәһе?» «Йәнәхмәттең бәхетле бисәһе!» тиерҙәр» тип, миңә дәрт–дарман өҫтәп ебәрҙе.

Күмәк бала үҫтергәс, кәрһеҙ ҡәйнә, ҡартайған ҡайны, мыжыҡ ир тәрбиәләгәс, ҡош–ҡорт, мал–тыуар ҡарағас, әлегәсә Өфөнө күргәнем юҡ. Өфө урамдарынан кинәнеп йөрөргә өмөтөм дә өҙөлгәйне. Хәҙер Йәнәхмәтем рөхсәт иткәс, шәшке тун кейеп кенә, үҙ бәҫемде белеп кенә, әллә кем булып ҡына ҡала ҡыҙырырмын, музейҙарҙа булырмын, Салауат һәйкәленә барырмын – ундағы фонтанды, этноауылды ҡарармын, «Ете ҡыҙ»ҙы күрергә лә форсат табырмын.

Беҙҙең төйәктән баш ҡалаға барып еткәнсе хәтһеҙ юл үтергә кәрәк. Һары таңдан автобусҡа ултыраһың да биш–алты сәғәт һелкенәһең.

Ҡыҫҡаһы, килеп төштөм Өфөгә. Ҡағыҙға яҙған адрестар бар. Керҙем кибеттең береһенә. Тун эҙләйем. Тун юҡ. Ул арала һатыусылар уратып алды:

– Ни кәрәк? – тип һорайҙар кемуҙарҙан.

– Шәшке тун кәрәк! Вәғәҙә иткәнсә бүләктең кәттәһен – шәшке бүрек бирегеҙ, – тим эре генә.

Бәй, ни күрәм: һатыусылар сират тороп, миңә төрлө төҫтәге, төрлө фасонлы, әллә нисәмә үлсәмле күкрәксә килтерҙеләр.

– Миңә тун кәрәк, – тинем дә башҡортса, моғайын, аңламайҙарҙыр тип уйлап, урыҫса өҫтәп ҡуйҙым: – Норковую шубу дайте, шикарную!

– Бына бит тундар. Ҡайһыһын оҡшатаһығыҙ, алығыҙ, – тиҙәр.

– Салоныгыҙ кендек өҫтөнән генә булған нәмә менән тулы икән. Тун тубыҡты ҡапларға, еңле булырға тейеш! Быларҙы «күкрәксә» тип, үҙ исеме менән тәҡдим итегеҙ! Дөрөҫө: «еңле күкрәксә» һәм «еңһеҙ күкрәксә».

– Һеҙ нимәлер бутайһығыҙ! Ниндәй «күкрәксә»? Нимә була ул? – Һатыусылар – берҙәм халыҡ бер һүҙҙе бергә генә әйтәләр.

– Күкрәксә – душегрейка. Улар йә еңле, йә еңһеҙ тегелгән ҡыҫҡа кейем. Кендеккә еткәне лә, етмәгәне лә була, – тип аңлатам, һатыусылар аңшайыш ҡарап ҡатҡан. – Хаҡтары күпме? – тип һорайым, аптырағас.

– Илле процент ташлама менән – алтмыш мең һум ғына! – Һатыусылар хор менән яуап бирҙе. Һай, муттар, бер һүҙҙе бергәләшеп әйтергә өйрәнеп бөткәндәр.

Бәхеткәме – бәхетһеҙлеккәме, шәшке тиреләренең хаҡына иғтибар иттем, хәтеремә һеңдергәйнем. Күкрәксәләр йәнлектәрҙең ҡорһаҡ тиреһенән йә ҡалдыҡ–боҫоҡ киҫәктәрҙе ялғап тегелгән! Әйберҙәрҙең үҙҡиммәтен йәһәт кенә һанап сығарҙым: еңле күкрәксәләр – ете мең, еңһеҙҙәре –биш!

Һатыусыларҙың иҫе лә китмәне, былар һаман үҙ һүҙҙәрен ҡабатлай:

– Алығыҙ, кейегеҙ, һөйөнөгөҙ, дуҫ–иштәрегеҙҙе лә беҙгә килергә өгөтләгеҙ.

Аңлайым: сараһыҙҙан һаман сарылдайҙар. Ишеккә ынтылдым – сығармайҙар. Бәй, уларға нәмәләрен һатырға кәрәк бит.

Быларҙан саҡ ҡотолдом да ҡағыҙҙағы исемлек буйынса йәнә әллә нисә кибеткә керҙем – бөтәһендә лә бер иш әйбер йораттары. «Осһоҙ» тигән сифатһыҙ нәмәләргә күҙем тоноп ташланмаҫҡа, аҡсамды әрәм итмәҫкә башым етте.

Өфө урамдары буйлап саба торғас, ифрат асыҡтырҙы. Кафеға кереп, шауырма ашап, кофе эсеп сыҡтым.

Аһ–аһ! Күп тә үтмәне, шауырма «шаяра» башламаһынмы – эсемде аяуһыҙ бора! Күпме эҙләһәм дә, бәҙрәф тапманым. Үҙемдең башыма төшкәс кенә Өфөлә булып ҡайтҡан ауылдаштарымдың туалет тапмай интегеүҙәре тураһында һөйләгәндәрен хәтерләнем. Аптырағас–алйығас, һапалы ғына ханымдан «туалет ҡайҙа?» тип һорарға тура килде.

– Эргәһендә тораһың бит! Кабинеттың тәғәйенләнешен белмәйһеңдер, – тине ул, йәне көйөүен йәшермәй.

Ауыл кешеһе икәнем күренеп торалыр инде.

– Беләм, тик уларҙың барыһы ла ниңә бикле? – тим.

– Мин дә белмәйем.

– Тимер юл вокзалына төшәйем микән? Әллә автовокзалға барырғамы? Унда ла...

– Аэропорт яҡынырак, тиҙерәк булыр.

Аэропортҡа саҡ барып еттем... Әйтергә кәрәк, бәҙрәфтәре тап–таҙа – ялт итеп тора, хатта сығып китәһем килмәй йөҙәйем бит.

Хәл–әхүәлем еңеләйгәс, кәйефем күтәрелгәс, донъялар балҡып киткәс, Өфөгә барған автобусҡа ултырҙым. Яғымлы ханым менән эргәләш тура килдек – гәпләшә башланыҡ.

– Мәскәүҙән ҡайтып киләм, улым өйләнде. Туй дан булды! – ти ханым, ҡояштай балҡып.

– Бәхетле булһындар, изгелекле, тәүфиҡлы балалар үҫтерһендәр. – Үҙем уның хәбәрен тыңлайым, үҙем төрлө уйҙар уйланым: «Ҡатынҡай таныш һымаҡ, ҡайҙа, ҡасан күрҙем икән?»

Ул үҙенә йыш ҡарағанымды шәйләне лә көлөмһөрәне:

– Мине телевизорҙа күргәнһегеҙҙҙер? – тимәһенме.

– Таныным! «Бәләкәй генә ҡуллы, бәләкәй генә аяҡлы бәпес һөйгөм килә» тип, эсегеҙҙе һыйпай–һыйпай, йыуан ағасҡа һөйәлә инегеҙ! – Мин шатланып ҡысҡырып ебәрҙем.

– Ул саҡта улыма һигеҙенсе ай гөманлы инем. Улым имен–һау тыуҙы, үҫте, буй еткерҙе, юғары уҡыу йортон тамамланы, әле өйләнде. – Бәхетле әсәнең күҙҙәре нур сәсә.

– «Әсә һәм бала» клиник госпитале хаҡындағы рекламаны һаман күрһәтәләр – улығыҙҙың балалары ла ошо рекламаны күрер әле, – тим.

– Мин дә ышанам. – Ҡатынҡай ауыҙын йыя алмай, һаман йылмая. – Өлкән ҡыҙымдың балаһы – минең ете йәшлек ейәнсәрем – сәй рекламалай. «Тәмле сәй билегеҙ!» – тип, теше төшкән ауыҙын ихлас йыра. Аллаһ бирһә, егерме–егерме биш йыл күрһәтһәләр, ейәнсәремдең балалары – минең бүлә–бүләсәрҙәрем дә рекламаны күрер.

– Әлбиттә, күрерҙәр, һөйөнөрҙәр, – тип йөпләйем.

Әлдә «тығын» тигән нәмәкәй бар: автобус биш минут бара ла ярты сәғәткә туҡтай. Йән рәхәте – иркенләп һөйләшәбеҙ. Кемдер, ғәм белмәй, хырылдап тороп йоҡлай, кемдер бәйләмгә тотонған, кроссворд сисәләр, кәрт уйнайҙар, ана, йыуан ир, шарҡылдап көлә–көлә кеҫә телефонына ниҙер һөйләй... Ғәләмәт!

Өфөгә кереп баҙар туҡталышына еткәс, һағышлы һаубуллашып, ҡатынҡай төшөп ҡалды.

Музейҙар ҡарарға ваҡыт ҡалмағайны – автовокзалға юлландым. Ауылыма имен–аман ҡайтып еттем. Тик мине күңелһеҙлек ҡаршыланы: телевизорҙа күптән рекламаланған бесәй аҙығын алып ҡайтҡан Йәнәхмәтем. Һатыусыбыҙ Әлмирә кибеткә килтергән. Бесәй ашаған – ике–өс сәғәттән йөндәре ҡойолған. Яп–яланғас бесәйҙе күргән биш йәшлек улымдың ҡото осоп, телһеҙ ҡалған. «Ауыл ерендә кәрәкмәй ул бесәйҙәргә әҙерләнгән махсус аҙыҡ! Башың ҡайҙа ине?» – тип, ирекәйҙе әрләнем. Баланың телен нисек асырбыҙ – белмәйем.

...Кешеләрҙе ниндәй хәлдәргә тарытмай реклама тигәндәре!

## Ирһеҙ ҡалдым...

*Монолог*

*Сәхнәлә өҫтөнә ир-ат плащын кейгән Фәрхәнә микрофон тотоп тора.*

Уф-ф, уйламағанда ирһеҙ ҡалдым... Һөйләгәс, һөйләйем инде баштан...

Фәрхәт артымдан тотом да ҡалмай йүгерҙе бит: «Һине яратам, Фәрхәнә! Бешкән еләктәй ирендәрең, алма һымаҡ алһыу йөҙөң, ҡыйғас ҡара ҡаштарың, мөләйем ҡараштарың күҙ алдымдан китмәй. Тоғро тормош юлдашың булырмын» тине.

Уның яҡты күңелле, егәрле егет икәнен күрәм. Уйсан ҡарашлы, буйсан, тәүәкәл Фәрхәткә башкөлли ғашиҡ булдым – өйләнешергә ризалаштым.

Донъя йөгөн хәләлем менән бергә һөйрәү еңел: татыу, етеш йәшәй инек... «Татыу, етеш йәшәй инек» тинем дә ул... Фәрхәтемдең телевизорҙағы ҡатын-ҡыҙға упайып ҡарауын күргәс, тыныслығым тиҙ юғалды. Тынын үрә ала Фәрхәт бәдбәхет: һоҡланыуы шул ҡәҙәре – уң күҙенең ҡашы һикерепме-һикерә. Яттарға ҡарап мөкиббән киткән Фәрхәтте күҙәтеү бер ҙә рәхәт түгел: йоҡом ҡасты, ашауҙан яҙҙым. Донъя көтөүҙән биҙә башланым. Уйланам. Бәй, шул ҡатын-ҡыҙҙар һымаҡ мин булдыра алмайыммы? Ғүмер һөрөүемде үҙгәртер өсөн тәүҙә үҙем үҙгәрергә тейешмен.

Сәбәләнмәй генә фекер йөрөттөм һәм әмәлен таптым – Мәскәүҙә йәшәгән Фәрихә һеңлемә оҙаҡҡа ҡунаҡҡа барырға ҡарар иттем.

Аҡсаны буйтым алдым да остом Мәскәүгә ҡарап. Башҡалаға ҡабаланып килеүемдең серен белгәс Фәрихә һеңлем телһеҙ ҡалды.

– Ниндәй заманаға аяҡ баҫтыҡ: кем нимә теләй – шуны эшләй, оялмайҙар ҙа! Етмәһә, һин мәнһеҙ, мәғәнәһеҙ бәндәгә әүерелергә теләйһең... – ҡәҙерле һеңлем түгелеп илай...

– Фәрихә, ҡайғырма! Әйт, мин кемдән кәм? Бөтә Рәсәй шундай ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарап, таң ҡала.

– Бур байҙарҙың, олигархтарҙың ҡатындары, һөйәркәләре шаша!

– Фәрихә, иркәм, һин дә аҡса йый! Заман зандарынан һин дә артта ҡалма. Түштәрен йәшермәй, сабаталай ауыҙҙарын саҡ асып һөйләгән артисткалар һәм бүтән һөнәр эйәләре, башҡа ҡатын-ҡыҙ бихисап – күптәргә оҡшай был ғәҙәт. Еҙнәң уларҙы телевизорҙан күрһәткәндә иҫе китеп ҡарап ултыра.

– Бәй, еҙнәм ниңә елбәҙәкләнә икән? Етди, аҡыллы кеше ине лә... Һине генә өҙөлөп ярата ине...

Ҡыҫҡаһы, операцияларҙы тиҙ яһаттым. Аҡса тигәнең һәйбәт «һөйләшә». Врачтарға ҡытлыҡ юҡ. Хирургтарҙың үҙ-ара конкуренттар икәненә лә төшөндөм, клиенттарға болашып торалар.

Шулай итеп, ирендәремде киңәйттерҙем, түштәремде футбол тубы ҡәҙәре ҙурайттырҙым, танауымды ҡыҫҡарттырҙым. Тик танауым үҙемә оҡшамай - йәмшеккә әйләнгән. Әллә аңлата алманым, әллә врачтың оҫталығы самалы булдымы икән? Нисә мәртәбә бик ихлас сантиметр менән танауымды үлсәгәйне, ҡағыҙға һыҙыҡтар һыҙмаҡланы.

Бәләкәйҙән насар ишетәм. Ҡолаҡтарымды ла үҙгәрттерҙем. Фәрихә һеңлем бик аптыраны: «Ишәк ҡолаҡтары һымаҡ» тип йөҙөн сирҙы. «Булһа ни..., -тим, – алҡаларым алыҫтан күренеүенә һөйөнәм! Бәлки, яҡшыраҡ ишетермен».

Оҙон сәстәремде иңбашыма тараттым да, бер ҙә тараманым. Аҙна үтеүенә сәстәрем ойпаланып-ойошоп, уҡмашып дан «прическа»ға әйләнде.

Тағы ни эшләргә? Бәй, Фәрхәтем:«Минең Фәрхәнәм - айым! Ҡояшым!» тип ҡосаҡларға ярата бит.Уң beləгемә – ҡояш, һулына – ай һүрәтен төшөрттөм. Татуировка уңышлы булды. Сираҡтарыма ла һүрәттәр яһатырға ине лә иҫәбем, аҡсам бөттө. Етмәһә, Фәрхәт көнөнә ике-өс мәртәбә шалтырата: «Ҡайт! Зарыҡтыраһың мине, ҡәҙерлем!» ти. Ҡайтам, ҡайтам – хәләлемдең кинәнесен йәһәтерәк күрәһем, ҡосағына тиҙерәк сумаһым килә – мин дә шул ҡәҙәре һағындым.

Фәрихәнән аҡса алдым – бурысҡа батһам, баттым: яңы кейемдәргә кейендем. Тегенселәр яңы моданы һәйбәт үҙләштергәндәр икән: оҙонлоғо егерме сантиметр юбканы, иҙеүһеҙ-еңһеҙ кофтаны йәһәт тектеләр.

Ҡайттым. Квартираға керҙем. Фәрхәт аш-һыу бүлмәһендәлер, балыҡ ҡыҙҙыра шай – еҫе таралған.

– Фәрхәнәң ҡайтты! – тип ҡысҡырам.

Кухнянан биленә алъяпҡыс бәйләгән, ҡулына тәрилкә тотҡан Фәрхәтем килеп сыҡты ла шаҡ ҡатты. Шунан ҡыуа башланы - тәрилкәһен миңә елгәрҙе:

– Кит! Тиҙ сығып кит! Хәҙер ҡатыным ҡайта, телефонҡа шалтыратты. Һине күреп йөрәге ярылыр! – тип йәнтәслим екерә.

– Мин – һинең йәмәғәтең Фәрхәнә! – тим, ауыҙымды саҡ асып.

– Һин – Туҡай шүрәлеһе! Ҡытыҡлап үлтерергә килдеңме?

– Фәрхәт, телевизорҙағы ошондай ҡиәфәттәге ҡатын-ҡыҙҙарға ҡыҙығып, тилмереп ҡарап ултырғаныңды күреүе миңә рәхәт, тиһеңме? Хәҙер минән, хәләл ефетеңдән, күҙҙәреңде алмаҫһың. Был ай менән ҡояш татуировкаһын һинең һүҙҙәреңдең ҡәҙерен белгәнгә яһаттым. «Айым минең! Ҡояшым минең!» тип һамаҡлайһың бит.

Ай менән ҡояш һаҡындағы мәғлүмәт Фәрхәткә мине танытты ла инде – Фәрхәнә икәнемә ул ышанды.

– Ярым яланғас бисураларға һоҡланып таҫрайманым. Сабата иренле, һауылмаған һыйырҙың елене кеүек ҙур түштәрен кәпәйткән бисараларҙы күреп сикһеҙ аптырауымды һоҡланыу тип уйлағанһың икән. Көнләшеүеңде белдерһәң, мәлендә аңлашыр инек. Алама шөғөл тиҙ тарала. Һинән өлгө алып, хәҙер әхирәттәрең шайтанға әйләнә башлаһа, бәлә бит! Тфу! Бахыр бәндә үҙен шулай ғәрипләр икән! Мине эҙләмә! – ирекәйем рюкзағына кейемдәрен ҡабаланып тултырҙы ла тотоп алмаһын, тип ҡурҡтымы, йәһәт кенә сығып китте. (Өҫтөндәге плащын һаҡ ҡына һыйпай.) Әлдә плащын онотҡан – шуны кейәм, үҙемде һөйөклөмдең ҡосағындамын, тип рәхәтлек хисе кисерәм.

Ниндәй генә эшкә тотонһам да силикон түштәр ҡамасаулай, ҡамыр баҫыуы ҡыйын. Хәҙер бәлеш, бөйөрөк бешермәйем. Кибеттән алған ризыҡтар менән мөрхәтһенәм.

Бесәйем үҙенә яҡын килгәнемде оҡшатмай – яман мыяулап йә диван, йә өҫтәл аҫтына боҫа. Тутыя исемле тутыйғошобыҙ «Сибәрһең! Сибәрһең! Яратам! Яратам!» тип ҡысҡырмай. Фәрхәт өйрәткәйне. Мине

күреү менән ҡанаттарын йыйып, кәкре суҡышын шаҡылдатып, башын уңлы-һуллы бороп ҡарай ҙа, ситлек артына ҡаса.

Таныш-тоноштар мине танымай, һөйләгән хәбәремде аңламай.

Бына шулай минең хәлдәрем. Хоҙайым, бүтәндәр бындай бәләгә тарымаһын!

## Ҡәләмдәштәр фекере

… Сатира һәм юмор секцияһы «Һәнәк» журналы редакцияһында эшләне. Тәүҙә журнал сатириада ойошторҙо, аҙаҡ юмористар һәм карикатуристар фекер алышты. Нажиә Игеҙйәнова, Рөстәм Иҙиәтуллин һәм Буранбай Исҡужиндарҙың ижадын сағыштырырға теләһәк, мин иң тәүҙә Нажиәнең исемен телгә алыр инем. Ул инде өлгөргән, үҙ стилен тапҡан.

*Яҙыусы Агиш Ғирфановтың Ижади йәштәрҙең*
*IV республика конференцияһындағы сығышынан.*
*«Ҡыҙыл таң» газетаһы, 25 декабрь, 1982 йыл.*

## Һин янмаһаң, мин янмаһам…

Нажиә Игеҙйәнованың хикәйәләре сатирик, күбеһе бер генә ваҡиғаны һүрәтләүгә ҡоролған – ҡапыл ғына башлана ла осланып та ҡуя. Улар ыҡсым, сурытып, оҙон–оҙаҡ итеп һөйләү юҡ. Теле уҡымлы, диалогтары тос. Авторҙың сатирик ҡәләме, әҙәби тойомо, һиҙгерлеге, теге йәки был ваҡиғаны күрә белеүе һәм уны дөйөмләштереп художестволы әҫәр кимәленә күтәреү, социаль яңғырашлы итә алыу маһирлығы бар. Был – бик мөһим. Уның «Хөсөт» исемле бер кескәй генә хикәйәһенә туҡталайыҡ.

Бер коллективҡа Хөсөтдин тигән кеше эшкә килә. Оҙаҡламай тегенән–бынан һорашып бындағы халыҡтың кемдәр икәнлеген, биографияларын белеп ала һәм кешеләр араһында ғәйбәт таратырға тотона. Уның тоҙағына тәүҙә директор эләгә, унан икенсе бер өлкән йәштәге хеҙмәткәр… Ҡыҫҡаһы, бәләкәй генә коллективта бер–береңә ышанмау, шик һымаҡ яман сир тарала. Яҙыусы ышандырғыс буяуҙар менән Хөсөтдиндең зәғиф эске донъяһын аса. Шуныһы һәйбәт, автор геройы хаҡында үҙе һөйләмәй, ә уны эш мәлендәге, көнкүрештәге ваҡиғалар яҫылығында, йәғни хәрәкәттә, бирергә тырыша, шуға күрә ул

тормошсан да. Йәмғиәтебеҙ ни тиклем генә үҫеп, культурабыҙ, аң–белемебеҙ күтәрелмәһен, арабыҙҙа Хөсәтдин ишеләр бар әле. Улар кәйефебеҙҙе боҙа, эшкә ҡамасаулай, тимәксе автор һәм Хөсәтдиндәрҙән ҡотолорға саҡыра.

*Әмир Әминев, яҙыусы.*

*«Ағиҙел» журналы, №5, 1988 йыл.*

### «Һабын» еҫен еҫкәнем

Нажиә Игеҙйәнованың «Еҫле һабын» тигән китабын әҙәбиәт һөйөүселәргә нәшриәт былай тәҡдим итә: «Йыйынтыҡҡа ингән хикәйәләр – ваҡытлы матбуғатта донъя күргән әҫәрҙәр. Улар тормоштағы йәнле күренештәрҙе күҙ алдына килтереп баҫтыра, әҙәм балаларындағы айырым кәмселектәрҙән дуҫтарса көлә, алама сифаттарҙы сатира уты менән көйҙөрә. Һәр хәлдә, был йыйнаҡ хикәйәләр ямандан ғибрәт алырға саҡыра, яҡшылыҡҡа, ғәҙеллеккә, изгелеккә өндәй».

Баштан уҡ әйтәм: күҙ ташлап алайым әле, тип кенә башлағайным да, йыйынтыҡты бер тында тиерлек уҡып та сыҡтым. Хикәйәләр, ысынлап та, ыҡсым, уҡыуға еңел, һәр береһе үҙенсә ылыҡтыра. Бөгөнгө көнкүрмешебеҙгә ауаздаш булыуҙары бигерәк тә һәйбәт.

Китапты уҡып сыҡҡас, шулай уйландым: тормош та, кешеләр ҙә һайыҡты, ваҡланды. Буйы менән тимәйем, уйы менән ыбыр–сыбыр әҙәмдәр баҫып алды. Кешеләрҙе күтәрер маҡсаттар ығы–зығыға, сафсатаға, отош–отолошҡа, алырым–биреремгә әйләнеп китте. Хатта, ҙурҙан алғанда, үҙгәртеп ҡороу тигәндәре лә илгә, көнгә түгел, бары власть өсөн кәрәгерәк булып сыҡты. Ҡабаттан алыпһатарҙар донъяһына ҡайтылды. Кешене кеше итер әҙәп менән ғәҙәтте лә, хатта мөхәббәтте һәм матурлыҡты ла бына–бына баҙар мөнәсәбәттәре йотоп алыр һымаҡ. Иң аянысы – рухи фәҡирлек һағалай. Киренән Горькийҙың «Тормош төпкөлө»ндә ҡалырбыҙ һымаҡ тойола. Бөтөнләй бөтмәһә ярар ине лә иман. Моңдан яҙмаһаҡсы тамам.

Күрәһең, иле ниндәй – түле шундай, заман ҡайһылай – әҙәм дә шулай. Хәйерлегә булһын, ҡайҙа ла шөкәтһеҙлек, мөрәүәтһеҙлек, ҡыҙығы ла, мәҙәге лә быуа быуырлыҡ. Ҡыуаныстар иһә – юҡтан ҡоҙағый, тигәндәй. Ә бөтәһен йыйып, китапса әйткәндә, дөйөмләштереп ҡараһаҡ, әллә ерҙе, әллә быуатты ниндәйҙер бер гонаһ шомлоҡтары көтә төҫлө. Шуғалыр ҙа туҙға яҙмаҫлыҡ бер ни ҙә ҡалмай баралыр инде.

Ошондай мөхиттә беҙ көн дә күреп белгән ябай кешеләр йәшәп ята Нажиә Игеҙйәнованың хикәйәләрендә. Уларҙың холоҡ–фиғеле төрлөсә. Төрлө хәл–әхүәлде асыҡлай улар. Ауыҙыңды асһаң, үпкәңде тартып алырға әҙер тороусылар, көн ҡаҙағына һуғырға оҫтарған шымафыйҙар, тапҡан–таянғанын елгә осороусы ир заттары, һабын өсөн дә данын һатып йәки үҙе намыҫланып, кеҫәһе наҡыҫланып йөрөүселәр, теленә тилсә сыҡҡыры бисәләр – былар беҙҙең ысынбарлыҡ бит ул. Ошоларҙы автор ғибрәтле сюжет, тапҡыр ҡылыҡһырлау, тәбиғи һүҙ ағышы аша һәләк уҡымлы ҡыҫҡа хикәйәләр итеп күңелгә һала. Китап ана шул персонаждар бер ҡыйыҡ аҫтына тупланған, әлеге йәшәйеште сағылдырған бер бөтөн әҫәр һымаҡ ҡабул ителә.

Тел–тешле хикәйәләр тигәс тә, автор гел фашлап ҡына ҡалмай. Ул, илатырлыҡ итеп көлөү менән бергә, йыуатырлыҡ итеп тә яҙа. «Һыу буйындағы һунар», «Майлы сәй», «Йүгерек Ғизетдин», «Килен һайлағанда», «Ҡоҙағыйым ғәйепле», «Төш» тигән хикәйәләрҙә, мәҫәлән, – һөймәлекле бер алсаҡлыҡ, илгәҙәклек. Эскерһеҙлекте, бер ҡатлылыҡты күрһәтеп, автор Мөшәриптәрҙән, Гөлбаныу әбей, Ғизетдин ҡарт һәм Мөндәриә апайҙарҙан көлмәй, ә үҙ итеп көләмһерәй генә. «Рәхмәт, иптәштәр!» хикәйәһендәге профком рәйесенә лә тел тейһә тейер, әммә теш тейҙерерлек түгел. Уның асарбаҡлығы – дәүләт кимәлендәге аҡылһыҙлыҡтың – тотҡан ерҙән һындырыуҙарҙың семтем генә бер ғилләһе ул.

Ул «сәйәсәткә» күнмәгән – шараптан дүнмәгән кеше буларак, ошо хикәйәгә саҡ ҡына туҡталып үтәйем әле.

Йыйылыш бара. Профком рәйесенең хисабын тыңлайҙар. «Эскелеккә ҡаршы көрәш» пункты нисек үтәлә һуң? «Үтәлеш апаруҡ ҡына барғанда, профком ағзаһы Әғзәметдин ағай, айнытҡысҡа эләгеп, эште боҙҙо. Штраф түләп йөрөнө. Шунда, бергә эсеп йөрөнөк, тип беҙҙең исемде лә ҡыҫтырған. Шунан һуң күңел ҡайтып, дәрттәр һүрелде лә ҡуйҙы». Баҡһаң, ниндәй генә сара үткәрергә тиһәләр ҙә, эш әлеге шул «ярты»ға барып терәлә лә ҡуя. Иң аҙаҡ һүҙ шулай бөтә: «Мине яңынан профком председателе итеп һайлауығыҙға рәхмәт. …Ә хәҙер, әйҙәгеҙ, бөтәбеҙ ҙә буфетҡа, ағайығыҙҙың профком ултырғысын йыуып алайыҡ…» Бында иҫ китерлек нәмә юҡ. Әммә тормош дөрөҫлөгө бар. Шунығы мөһим.

Хикәйәлә милли үҙенсәлектәр, милли һыҙаттар бирелһә, ғәҙәттә, иҫтә нығырaҡ ҡала. Ошо йәһәттән Сәғит Агиштың «Эш самауырҙа түгел», «Намыҫ» тигән хикәйәләре, мәҫәлән, әле булһа хәтерҙә. Нажиә Игеҙйәнованың «Майлы сәйе» лә шуға тартым. Бына ҡаштыр–ҡоштор килеп, һәүетемсә генә һүҙгә һүҙ ялғап, ҡарсыҡтар Гөлбаныу әбейҙә сәйгә йыйыла. Һый–хөрмәт мул. Барыһы ла мас була. Тик… табынға ыуыҙ майы ҡуйырға онотола бит, ҡәһәрең. Сыҡҡас, әбейҙәр һөйләнә: «–Барыбер һаран был Гөлбаныу – өҫтәленә ыуыҙ майын тәки ҡуйманы бит…

– Әйтмә лә, саҡырғанда ыуыҙ майына тип саҡырҙы бит әле…

– Мин дә гел май уйлап ултырҙым, ашағаным аш булманы…

Хәбәрҙе ишетеп торған Гөлбаныу әбей аптырап ҡалды».

Бында ҡарсыҡтарҙы ла күҙ алдына баҫтыраһың, Гөлбаныу әбейҙең дә хәлен аңлайһың. Аҙна үткәс, ул әхирәттәрен тағы йыйып ала. Ниңә ҡунаҡ саҡырырға әүәҫләнеп киттең, тип бер кем дә аптырамай. Ҡаты итеп, тәмләп сәй яһала. Тик был юлы: «Ҡорҙа ултырыусылар өҫтәлдә майҙан башҡа бер нәмә лә булмауына ғәжәпләнеп, бер–береһенә ҡарашып алды.

… Гөлбаныу әбейҙең күҙҙәре хәйләкәр йылтырай ине…»

Үҙенә күрә ҡулай ғына ваҡиға ла бар бында, характер ҙа бар. Күҙәтеүсәнлек, йәтеш кенә итеп тотоп ала белеү, һөйләмәү, ә һүрәтләү – былар яҙыусылыҡ ҡеүәһе ул.

«Чехов ғәйепле түгел». Был хикәйәләге Физәр, Чехов пьесаһы буйынса ҡуйылған спектаклде ҡарап ҡайтҡас, үҙ ҡатынына яңы баштан күҙ һала: бер ниндәй нескәлек, көйәҙлек, нәзәкәтлек юҡ. Ат кеүек егелеп донъя йөгөн алып барған ҡатында аристократтарса ҡупшылыҡ ҡайҙан булһын инде? Өйҙө, ирҙе, балаларҙы баҡ, тегеһен тап, быныһын тап, уңға ла, һулға ла арманһыҙ булып сап. Етмәһә, эшеңдә өлгөр – планды үтә. Ә ирең, фәрештәләр, аҡҡоштар менән һаташып, йәнеңде ҡыйһын, һине иһә бисура, албаҫты, тип хурлаһын! Шулай ғауғалы тормош китә. Меҫкен ҡатынға, эстән үкһеп, әсәһенә хат яҙырға ғына ҡала: «Бөтә ғәйеп үҙемдә, – ти ул, ире хаҡында хөкөм дә йөрөтмәҫтән. – Чехов героиняһы кеүек нәзәкәтле, нәфис була алманым…»

Чехов героиняһы кеүек булып ҡара һин беҙҙең тормошта! Әлдә түҙә, нисек түҙә был ҡатындар!

Хәйер, бер яҡтан, Чехов та «ғәйепле»лер. Ҡыҫҡалыҡ – таланттың һеңлеһе, тип ул әйткән, үлән өҫтөндәге ысыҡта ла ҡояшты сағылдырған һымаҡ, береһенән–береһе шәп тел–тешле хикәйәләрҙе ул яҙған бит. Ошо йәһәттән, Нажиә Игеҙйәнова ла унан һабаҡ алһа, юҡ, эйәрһә түгел, ә өйрәнһә – ғәжәпме ни? Килә–килеп, ошо «Еҫле һабын» китабын сығарһа, тимәк, бында, ысынлап та, Чеховтың да «ғәйепле» булыуы бик ихтимал.

Бына тағы бер хикәйә. «Бажалар». Ике бажа, хужалыҡ етәксеһе Хәммиәт менән агроном Минрахман уйындан уймаҡ сығарып ҡуя. Нисек, тиһегеҙме?

Улар йыйылышта үҙ–үҙен һәм бер–береһен тәнҡитләгән булып, халыҡтың күҙен быуырға – һыуҙан ҡоро сығырға һүҙ ҡуйыша. Ысынында ла, улар игенселекте, малсылыҡты тамам бөлдөргән, төрлө мутлыҡтар ҡылған. Шуны кем уҙарҙан бер–береһенә сәпәргә тотона былар. Әммә,

хаттин ашып китеп, һүҙ ҡуйышыуҙы ла онотоп, ысынлап бер–береһенең битен йыртырға тотоналар. Шунда көтөлмәгән хәл була. Ғүмер буйы тауыш–тынһыҙ ғына баш баҫып эшләп йөрөгән Хәлимә тигән һауынсы былай тип ярып һала:

« – Мин, иптәштәр, председатель менән агрономды урындарынан алып ташларға тәҡдим индерәм! Зал гөр килеп ҡул сапты…»

Бына шулай автор үҙенең байтаҡ хикәйәләрендә инабатһыҙ кешеләрҙе, мөртәт йәндәрҙе рисуай итә, тормош–көнкүрештәге сатаҡ–ботаҡ нәмәләрҙе фәһем менән ҡайыҙлай. «Ҡалъялыҡ ҡаҙ», «Тәжрибә», «Бала бағыусы», «Абай бул, әхирәткәйем!», «Осһоҙло костюм», «Юбилей», «Яҡын дуҫ» тигән хикәйәләр уҡыусыны көлдөрөр ҙә, уйға ла һалыр.

Жанр талап иткәнсә, яҙыусы «үгеҙҙе мөгөҙөнән тотоп ала» – ваҡиға менән эш итә. Теле үткер, һүҙҙәр ҡәҙимгесә, һөйләмдәр ябай. Персонаждарҙың исемдәре лә «силәгенә күрә ҡапҡасы» тигәндәй. Хатта улар ҙа – исемдәр ҙә – яңыса һәм үҙенсәлекле. Был да бит, минеңсә, әҙип өсөн үҙенә күрә бер маһирлыҡ. Мөшәрип, Фәүзәрә, Физәр, Мөндәриә, Хәммиәт, Хәйриә, Нурзәнә, Әүҙиәр, Сөғөҙә…

Ҡыҫҡаһы, Нажиә Игеҙйәнова танһыҡ жанрҙа ижади таһыллыҡ, сатира уғын атыуҙа соғоллоҡ күрһәтеп яҙған. Китаптың меңәрләгән кеше тарафынан туҙып бөткәнсе уҡыласағына шигем юҡ.

*Хәсән Назаров, шағир.*

*«Ағиҙел» журналы, №3, 1992 йыл.*

**Алда яңы үрҙәр көтә**

Университеттың II курсында уҡығанда төркөм еңгәйле булды. Армиянан ҡайтып бергә уҡып йөрөгән ағайыбыҙ көтмәгәндә (беҙгә шулай тойолдо) өйләнде лә, бер бәләкәй өҫтәл менән бер карауат көскә генә һыйырлыҡ бүлмәлә йәшәй башланылар. Күп тә үтмәй еңгәйебеҙ

барыбыҙға ла яҡын кеше булып китте: үҙе асыҡ, үҙе ярҙамсыл, төҫкө–башҡа, буйға–һынға һоҡланып ҡарап туймаҫлыҡ. Икенсе ҡыҙына минең исемде ҡушып, мин дә кейәүгә сығып, ике ғаилә бер бүлмәлә йәшәй башлағас, ул миңә айырыуса яҡынайҙы. Һәм был тойғоно, шөкөр, әсе дауылдар ҙа, ҡайһы бер йылдарҙа айырыуса үҙәккә үткән ҡарлы бурандар ҙа һүрелтмәне.

Яҙыусы кеше, ғөмүмән, тормош юлын битараф үтә алмай. Ә Нажиә Игеҙйәнованың яҙмышына күңелдәрҙе тетрәндерерлек кисерештәр айырыуса күп төштө. Башта өс бала менән яңғыҙ ҡалып, фатирһыҙ интегеүҙәр, аҙаҡ әсәһенең тома һуҡыр ҡалыуы, бер туған һеңлеһенең фажиғәле һәләк булыуы, барыһы ла бер йөрәккә бит. Һынманы, бөгөлмәне, ебеп төшмәне Нажиә. Алдында осраған сытырмаҡлыҡты, кесерткәндәрҙе, сәнскеле үләндәрҙе йырып, маҡсатына табан тайпылышһыҙ барған юлсылай, сәмләнеп йәшәү үренә үрмәләне. Нажиәнең рух көсө, түҙемлелеге, егәрлелеге күптәргә үрнәк булырлыҡ.

«Балаларымды уҡытам, кеше итәм» тигән теләк уға көс–дарман өҫтәне. Бер үк ваҡытта ике–өс урында эшләһә эшләне, өс балаһының да юғары белем алыуына иреште, гөрләтеп туйҙар яһап, башлы–күҙле итте. Үҙе лә, ситтән тороп уҡып, БДУ–ның филология факультетын тамамланы. Әле лә әсә кеше балаларының ғаиләләренә кәңәшсе лә, терәк тә. Көн оҙоно эшләп ҡайтҡас, ейәндәрен ҡарашырға ла, ҡартайған ауырыу инәһен тәрбиәләргә лә, йөрәгенән сыҡҡан ижад емештәрен ҡағыҙға төшөрөргә лә көс, ваҡыт таба ул. Сөнки унең кешеләргә әйтә торған һүҙҙәре, бүлешәһе серҙәре, теләктәре бар.

Әҙәбиәткә сатирик, юмористик хикәйәләр, юморескалар менән килеп керҙе яҙыусы. Быға бәлки, уның оҙаҡ йылдар «Һәнәк» журналында эшләүе сәбәптер, бәлки тормош тәжрибәһенәндер. Хәҙер ул балалар әҙәбиәтендә лә эшләй, «етди хикәйәләр» ҙә яҙа. 1986 йылда сыҡҡан «Таныш булайыҡ», 1991 йылда баҫылған «Еҫле һабын» – сатира һәм юмор китаптары. «Исемем матур икән» – (1993 йыл) балалар өсөн

яҙылған йыйынтыҡ. 1996 йылда «Көндәш» исемле хикәйәләр йыйынтығы донъя күрҙе. Шуныһы ҡыуаныслы, Н.Игеҙйәнова үҙенә яҡын, яҡшы белгән темаларға ғына тотона. Әҫәрҙәренең төп тематикаһы, ауылдарҙың һәм ауыл кешеләренең яҙмышы, балалар тормошо, ғаиләләге ҡатмарлы мөнәсәбәттәр, тыуған ер, мөхәббәт, тоғролоҡ һәм хыянат... Сатира һәм юмористик хикәйәләрендә тормошобоҙҙа осраған етешһеҙлектәрҙән, ҡайһы бер кешеләрҙең кәмселектәренән көлһә, берҡатлыларҙың ғәҙәттәрен йылы юмор менән тасуирлай.

«Әҙәбиәткә һуңлабыраҡ киленде», тиһә лә әҙибә, һуңғы йылдарҙа бирелеп эшләй, тимәк, яҙаһы әҫәрҙәре күңелендә йөрөй.

*Гөлфиә Юнысова, шағирә.*

*«Ҡыҙыл таң» газетаһы, 26 сентябрь, 1996 йыл.*

## Башҡорт прозаһында әҙибәләр ижады

Нажиә Игеҙйәнова – прозаға оло тормош тәжрибәһе менән килгән әҙибә. Ул күберәк ҡатын–ҡыҙ образына, ауыл тормошона мөрәжәғәт итеүсән. Геройҙары ғибрәтле яҙмыштар, ҡырҡыу ваҡиғалар аша һүрәтләнә. Сатирик һәм юмористик әҫәрҙәрендә иһә тормошобоҙҙа осраған йәмһеҙ күренештәр сағыла. Автор уларҙа әҙәм балаларының айырым кәмселектәренән дуҫтарса көлә һәм алама сифаттарҙы сатира уты менән көйҙөрөп, уҡыусыны уйланырға мәжбүр итә.

Шуны ла әйтергә кәрәк: башҡорт прозаһында сатира, юмор юҫығында яҙышыусы ҡатын–ҡыҙ авторҙар юҡ тиерлек һәм Нажиә апайҙың был өлкәлә уңышлы ижады – үҙе бер батырлыҡ тиһәм дә яҙыҡ булмаҫ.

*Финә Латипова.*

*«Ағиҙел» журналы, №12, 2001 йыл.*

...Нажиә Игеҙйәнова хикәйәләрендә иң юғары ҡиммәт, кешенең ихласлығы, ғәҙеллеге – иң оло күңел бейеклеге. Әҙибә үҙ геройҙарын ошо юҫыҡтан тороп тасуирлай, ошондай бизмәнгә һалып үлсәй. Унын кешеләргә талабы, бер ҡараһаң, әллә ни ҡаты ла түгел кеүек, әммә бында хыянат, ҡырағайлыҡ, күңел хилафлығы ғәфү ителмәй.

Һикһәненсе йылдар уртаһында Дыуан–Мәсетле ауылы һәүәҫкәрҙәре скетч сәхнәләштерҙе. Эскесе ҡатындар... Авторын ишетмәй ҡалдым. Тамашасы йығылып ятып көлә, бәғзеләр үҙҙәренән үҙҙәре көлә. Йәнәһе, драматург шаштырған! Әле килеп шул скетчты Нажиә Игеҙйәнова китабынан уҡып ултырам, көлөп эсем ҡатып бөттө. Ул «Стаканым буталлы» тип атала икән.

Ыстаканым буталлы,
Уң ҡулыңа тот әле.
Йырлап биргән «зәм–зәмемде»
Ҡылҡылдатып йот әле.

Шундай әсе сатираға, нескә юморға маһир беҙҙең әҙибәбеҙ. Был, бәлки, уның «Һәнәк» журналында оҙаҡ ҡына эшләүенән дә киләлер. Шундай сатирик, юмористик әҫәрҙәр яҙыуға оһоло булғанға «Һәнәк»кә эшкә алғандарҙыр? Һиҙгәндәр, тойғандар ижадсының был һәләтен! Әйткәндәй, бүтән әҙәбиәттәрҙә лә, башҡорт әҙәбиәтендә лә сатира, юморға маһир әҙибәләр күп түгел – һайлам ғына, танһыҡ ҡына, ҡәҙерле генә заттар. Сатира һәм юмор – айырым бер үҙенсәлекле жанр. Хоҙай еле ҡағылған тиәйекме, күк биргән бындай көҙрәтте уларға тиәйекме, тәбиғәткә рәхмәт уҡыйыҡмы? Нажиә Игеҙйәнова сатирик, юмористик әҫәрҙәре менән һайламдар – маһир сатириктар сафына баҫты. Сатириктар араһында ла берҙән бер. Нескә тойомлау, халыҡсан көләү, ирония хас уның әҫәрҙәренә.

*Ринат Камал, яҙыусы.*

*Миһирбанлы ижад // Н.Игеҙйәнова. Тәҡдир.*

*– Өфө: Китап, 2002 йыл. 5–6 биттәр.*

## Тойғолар

...Дөрөҫөн әйткәндә, ул бер үҙе өс бала үҫтерҙе, уларҙы уҡытып, кеше итте, оло юлға баҫтырҙы. Өҫтәүенә, һуҡыр әсәһен ҡараны. Ситтән тороп уҡып, Башҡорт дәүләт университетын тамамланы. Бик оҙаҡ фатирһыҙ итегеүҙәрен әйтеп тә тормайым.

Ҡыҫҡаһы, бар ғүмерен матбуғатҡа, гәзит–журналдарға, нәшриәт эшенә арнаған, үҙенең ишле ғаиләһенә лә иҫ киткес игелекле ғәмәлдәр ҡылған Нажиә Заһир ҡыҙы Игеҙйәнованың киң күңеллеген, эскерһеҙлеген, егәрлелеген, ғәҙеллеген, ниндәй генә ҡыйынлыҡтарға осрағанында ла илап–һыҡтап, зарланып йәшәмәгәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып үтке килә. Иң ҡиммәтлеһе – хоҙай уға яҙыусылыҡ талантын биргән.

Шуға бинаән, башта уҡ һиммәтле ҡәләм тирбәтеүселәргә бәйле бер сетерекле хәлде иҫкәртеп уҙырға теләйем. Элегерәк, партократия дәүерендә, цензура үҙ ҡулында шаҡырайтып тотто әҙиптәрҙе. Имеш, тегене яҙырға ярамай, быны һүрәтләү тыйыла, совет кешеһенә ҡара яғырға рөхсәт юҡ һәм башҡалар. Был тәңгәлдә Нажиәгә лә йыш ҡамасауланылар. Шөкөр, хәҙер тойғоларға юл асылды.

... «Көндәш» тигән китаптың «Сатира, юмор» бүлегендә иһә тос–тос ҡына ун ике хикәйәнең барыһы ла тигәндәй «Һәнәк» журналында баҫылып сыҡҡан. Бөгөнгө көндә барған сыуалыштар, буталыштар, йыйып ҡына әйткәндә, хәҙерге ауыр, хатта фажиғәле ваҡиғаларҙы ҡыҫҡаса ғына, әммә сәпкә туп–тура тейҙереп бәйән итә автор. Хикәйәләрҙә мәҙәк–мәрәкә, көләмәс оҫтаһының тормошобыҙҙа юҡ–юҡ та тамыр йәйергә әҙер торған кәмселектәрҙән, етешһеҙлектәрҙән, бәғзе бер кешеләрҙең йомшаҡ яҡтарынан дуҫтарса шаяртып көлә белеүе бик тә һиммәтле. «Заман башҡа – заң башҡа» тигән юморескаһы, мәҫәлән, бөгөнгө аҡһаҡ заманаға айырыуса ҡулайлашып тора. Һуңғы йылдарҙағы ҡараңғы эштәрҙе генә алайыҡ. Әйтәйек, бер ҡатын тормоштоң ауырлығынан тамам миктәп, аптырап-алъяп күрәҙәсегә

барған. Күрәҙәсе һәммәһен дә белеп–һиҙеп тора, имеш. «Аҡса еткерә алмайһың. Дөрөҫмө?» – «Дөрөҫ! Аҡсам етһә, торғонлоҡ йылдарынан ҡалған иҫке–моҫҡо кейемдәрҙе кейер инемме ни?» – «Һин элегерәк былай булмағанһың бит. Дөрөҫмө?» – «Дөрөҫ! Ашарға аҡсамды ҡыҫа торғас, тире лә һөйәккә ҡалдым...»

Бына ошо күрәҙәсенең шундай «төплө әңгәмәһе» арҡаһында теге ҡатын үҙе лә «ғәмәленә–әмәле» тигәндәй еңел генә алдаҡсы күрәҙәсе булып китә, аҡса һуға башлай. Береһен сихырлай, икенсеһен сихырҙан арындыра, өсөнсөһөнә китап аса, ноҡот һала, дүртенсеһенә төшөн юрай, өшкөрә– төкөрөнә. Ғөмүмән, донъяһына төкөрөп тә бирмәй. Уның хаҡында гәзиттәргә маҡтап яҙалар, радионан һөйләйҙәр, телевизорҙан күрһәтәләр. «Ә матди хәлгә килгәндә, эштәр былай тора: аҡсаны беҙ эҙләмәйбеҙ, хәҙер аҡса үҙе беҙҙе эҙләй. Был ҡәҙәре аҡсаны ҡайҙа итәһең, сит илдәрҙең банктарына һалдыҡ. Әллә беҙҙең аҡсабыҙ, әллә өсөнсө күҙебеҙҙең асылыу тарихы ҡыҙыҡһындыра, сит илгә саҡыралар. Барырғамы, юҡмы, тип аптыранып торабыҙ әле. Бер китһәк, ҡайтмауыбыҙ ҙа ихтимал. Сихырсылар менән тулған хәйерсе илдә йәшәгәнсе...» тип тамамлана хикәйә («Һәнәк» журналының 1996 йыл, август һаны).

Үҙенең ижадына ифрат талапсанлығы менән айырылып тора Нажиә Игеҙйәнова. Хәйерле оҙон ғүмер, таҙалыҡ–һаулыҡ, ҡыуаныс–шатлыҡтар, ырыҫ–ҡот, ижад ҡомары теләйек башҡорт ҡыҙы Нажиәгә!

*Әмир Гәрәев, яҙыусы.*

*Мичман улы – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1998 йыл, 304–308–се биттәр.*

## Китап авторы хаҡында

Игеҙйәнова Нажиә Заһир ҡыҙы Ҡыйғы районының Абзай ауылында 1946 йылдың 1 сентябрндә тыуған. Урта мәктәпте тамамлағас, Өфөнөң туҡыусылар әҙерләгән училищеһында уҡый, хеҙмәт юлын туҡыусы булып башлай. Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡый. Аҙаҡ «Һәнәк», «Башҡортостан ҡыҙы» журналдарында, хаҡлы ялға сыҡҡанға тиклем «Ағиҙел» журналының хаттар бүлеге мөдире булды. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.

Ул – өс бала әсәһе. Өсөһө лә юғары уҡыу йортон тамамланы. Егерме йылға яҡын дөм һуҡыр әсәһен тәрбиәләне. Бөткөһөҙ мәшәҡәттәре араһында йөрәгенә көс биреүсе, рухын күтәреүсе ижадына ваҡыт еткерҙе, бер-бер артлы китаптары сығып торҙо. Балалар өсөн «Исемем матур икән», «Яҡты хыял», «Һандуғас моңо» тигән тупланмалар донъя күрҙе. Әҙибәнең фәһемле хикәйәләре, мауыҡтырғыс повестары, «Көндәш», «Тәҡдир», «Һуңғы осрашыу» йыйынтыҡтары ла китап һөйөүселәр күңелен яуланы. Күренекле әҙибәнең «Таныш булайыҡ», «Еҫле һабын», «Алтын сылбыр», «Йәшәп ҡалырға кәрәк» тигән сатирик-юмористик әҫәрҙәре тупланған китаптарын уҡыусы йылы ҡабул итте. Скетчтары, монологтары ауыл сәхнәләрендә ҡуйыла.

Нажиә Игеҙйәнова «Ҡиммәтле кейәү» тигән сатирик һәм юмористик хикәйәләр, монологтар, скетчтар йыйынтығында йәмғиәттәге йәмһеҙ, ғибрәтле күренештәрҙе, инабатһыҙ кешеләрҙәге етешһеҙлектәрҙе фашлай, ғәҙелһеҙлектәрҙе ҡыйыу тәнҡитләй. Яҙыусының сатира һәм юмор асылы хаҡындағы мәҡәләһе һәм ҡәләмдәштәренең уның ижадына баһаламалары йыйынтыҡтың мәртәбәһен күтәрә.

## Йөкмәтке

Сатира, юморҙың асылы.................................................................
Ҡиммәтле кейәү .......................................................................
Сәйер кәсеп ..............................................................................
Бай әфәнде ...............................................................................
Дандар таралған инде...................................................................
Хәтерһеҙҙәр ..............................................................................
Һыпытуй ..................................................................................
Шатлыҡтар уртаҡ булһын ...........................................................
Шауҡымлы шаяртыу ..................................................................
Ҡаҙаҡ ҡаҡтылар ......................................................................
Кем ғәйепле?...............................................................................
Дөйә төкөргән ...........................................................................
Шыршылар ................................................................................
Аҙаплы юл ................................................................................
Саманы онотҡан .......................................................................
Ҡалмайым ҡалағыҙҙа .................................................................
Ҡәҙерле бала ...........................................................................
Сабыр ит, саҡырырмын .............................................................
Бер ҡатлылыҡ бәләһе ................................................................
Синонимдар ............................................................................
Мәжит ҡарт мәшәҡәттәре ..........................................................
Үкенделәр ................................................................................
Йонсотҡан йомаҡтар (скетч) .......................................................
Яулыҡты кем урлаған?.................................................................
Яҡшы булған! ...........................................................................
Хикмәтле төш ...........................................................................
Уңған ҡатын .............................................................................
Ҡушаматлы Байгилде..................................................................

Өйрәк булһа ла ярай ................................................................
Был донъяның кеме юҡ (монолог) ..............................................
Хөсөт ...........................................................................................
Чехов ғәйепле түгел .................................................................
Күрмәһәм дә үкенмәм ..............................................................
Һарыһаҙ мажаралары ..............................................................
Олигарх .......................................................................................
Өфөлә йәшәһәм ине! (монолог) ................................................
Ирһеҙ ҡалдым (монолог) .........................................................
Ҡәләмдәштәр фекере ...............................................................
Китап авторы хаҡында ............................................................